# Ағиҙел

**Өфө, август 2012**

**8 (1072)**

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Ҡамилә ДӘҮЛӘТОВА
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары),*
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире),*
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип),*
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире),*
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),*
Гүзәлиә Тутаева, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Айһылыу Мофазалова *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Зөлфиә Биктимерова, Рима Нәзифуллина *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү
буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 1.08. 2012. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
"Times" гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 260 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0119.12.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2012 (8,1072)**

# БЫЛ ҺАНДА:

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Сәғиҙулла Хафизов.** Өйҙәш ҡатын. П о в е с т ь. ..............................5

ШИҒРИӘТ

**Әнисә Таһирова.** Асылыкүл. Ш и ғ ы р ҙ а р. ...................................37
**Рәмил Йәнбәк.** «Бер мәлем дә, беләм, кире ҡайтмаҫ...»
Ш и ғ ы р ҙ а р. ..........................................................................44

ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Рауил Өмөтбаев.** Аманатҡа юҡ ул хыянат. ...................................52
**Рамаҙан Өмөтбаев.** Ирәндектең күкһел томаны.
Р о м а н. *Башы.* ..........................................................................55

ШИШМӘЛӘР

**Айгөл Айыҭҡолова.** Һинһеҙ йәшәгәнмен. Ш и ғ ы р ҙ а р. ...........142
**Алмаз Шаммасов**. Быуаттар «аһ»ы. Ш и ғ ы р ҙ а р. .....................144
**Олеся Әхмәтрәхимова.** Йомро-йомро йомғағым...
Ш и ғ ы р ҙ а р. ..........................................................................149

РУХИ ХАЗИНАЛАРЫБЫҘ

**Рәнис Алтынбаев.** Ҡатай башҡорттары фольклоры. .................153

*2012 – Рәсәйҙә тарих йылы*

**Әкрәм Бейеш.** Башҡорт халҡының сығышы. ..............................174

СӘНҒӘТ

**Миләүшә Ҡолмөхәмәтова.** Бейеү алиһәһе Рәшиҙә. ...................184

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПРОЗА

**С. Хафизов.** Квартирантка. *Повесть.*

ПОЭЗИЯ

**А. Тагирова, Рамиль Янбек.** *Стихи.*

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**Равиль Уметбаев.** Верность заветам отца.
**Рамазан Уметбаев.** Синий туман Ирандека. *Роман.*

РОДНИКИ

**А. Аиткулова, А. Шаммасов, О. Ахметрахимова.** *Стихи.*

ДУХОВНЫЕ СОКРОВИЩА

**Р. Алтынбаев.** Фольклор катайских башкир.

2012 — Год истории России

**Акрам Бииш.** О происхождении башкирского народа.

ИСКУССТВО

**М. Кульмухаметова.** Танцовщица наша Рашида.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.
● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



**Сәғиҙулла**
**ХАФИЗОВ**

# ӨЙҘӘШ ҠАТЫН

## ПОВЕСТЬ

**1**

Разия ишектән инеп килешләй үк һөрәнләне:

– Таптым, таптым! Әй, Сәфәр, һин ҡайҙа? Таптым даһа!

– Ысынлапмы? – Ауыҙына ҡапҡанды йоторға өлгөрмәгән ир аш бүлмәһенән сығып, ҡатыны ҡаршыһына килеп баҫты. – Күпме тора? Нимәнән, ағастанмы, таштанмы? Урынын да оҡшаттыңмы?

Көләс Разия, өҫ-башын һала-һала, шаҡтай ҡысҡырып теҙеп китте:

– Йорт шыңғырлап торған ҡарағайҙан буралған, мунса ла ағастан, һапһары. Ихатала – беседка. Баҙ ҙа бар, ҡоҙоғо ла. Үҙебеҙҙең баҡсала ҡул насосы эшләп ҡуйған инең бит. Нәҡ шуның кеүек ҡоҙоҡ…

– Ә баҡса?

– Баҡсаһы ла бар. Ун сутый, тинеләр. Инде, Сәфәркәйем, ҡулдан ысҡындырмайыҡ, ике миллион һорап торалар, алырға кәрәк тиҙерәк йортто!

Юҡҡа ашҡынмай ҡатыны, оҙаҡ эҙләнеләр Рысаевтар күңелдәренә яҡкан йортто. Йәмәлкә яғы, Разияның тыуған ауылы Сүәр тирәһе ҡалманы, Ҡараһыу аша һуҙылған яңы күперҙән сығып, ҡолаҡҡа ла салынмаған Шилино, Мылино тарафтарына ла һуғылып ҡаранылар, тик теләгәндәрен таба алманылар. Дөрөҫ, һатыуҙа клуб ҡәҙәрле коттедждар, ике ҡатлы, өс ҡатлы особняктар бихисап, эстәрендә лә ожмах рәхәтлектәре – һыуы, газы, хатта бассейндары бар, тик хаҡтарына яҡын барырлыҡ түгел шул. Хыялды ғәмәлдән, кешене кешенән айыра торған нәмә аҡса бит хәҙер… Ә бит йәшәү урынын алмаштырыу теләге тыуғас, аҡса маҙаһы шулай теңкәләренә тейер,

---

*Сәғиҙулла Хафизов (1945) Татарстандың Сирмешән районының Лашман ауылында тыуған. Ҡазан дәүләт университетын, аспирантура тамамлай. Башҡорт дәүләт университетында эшләй, артабан Башҡорт дәүләт педагогия университетының татар теле һәм әҙәбиәте кафедраһын етәкләй. Ғилми хеҙмәттәр авторы, тәнҡитсе, Ямал Вәлиди исемендәге премия лауреаты.*

тип һис уйламағайны Рысаевтар. Өс тиҫтә йыл университет тигән мәртәбәле уҡыу йортонда эшләп, кем әйтмешләй, хаҡлы ялға киткән доцент Сәфәр Раяновичтың мөлкәте хәтһеҙ генә ине. Һарытауҙа заманса проект менән һалынған йортта ике бүлмәле фатиры бар. Баҡсаһы ла – ҡаралтылары менән булһынмы, үҫтергән еләк-емештәре менән булһынмы – кеше күҙе ҡыҙығырлыҡ. Күсемһеҙ милектең тағын бер кәттә төрө булған машина тигәнең дә, байтаҡтан алынған булһа ла, әле, шөкөр, зиннәтен, буяуын юймаған, иномарка… Шуларҙың һәммәһен һатһаң йә иһә яйы сығып алмаштырһаң, ҡала тирәһендәге берәй затлы биләмә тәтемәҫ микән ни?

Шәхси йорт хаҡындағы хәләл өмөттө ҡыҙҙары Лиана көтмәгәнлә пыран-зыран килтереп ташланы. Яҡшынан яман тыуған, тигәндәй, башта бер наркоманға сығып айырылған, унан елғыуар хохол менән тора башлаған Лиана, тырт-мырт, орҙом-бәрҙем һөйләшергә күнеккән ҡыҙ, әзмәүер ирен эйәртеп ахылдай-ухылдай килеп инде лә ҡысҡырына башланы. Сисенмәйенсә, тупһанан уҡ:

– Айнурға әйткәнегеҙ дөрөҫмө: квартираны һатаһығыҙмы? Ә минең менән һөйләштегеҙме һуң! Минең бында пропискала торғанды оноттоғоҙмо ни? Миңә лә өлөш тейеш!

Разия өндәшмәне, ғөмүмән, ул бындай саҡта ышыҡҡа боҫа, үгәй әсә бит… Ә Сәфәр аптыраулы ҡарашын шаҡтай ара ҡыҙына ҡаҙап торҙо ла сәнскеле итеп әйтеп һалды:

– Һуң, ҡулыңдан килһә, ҡыҙым, ана, фатирҙың берәй мөйөшөн умырып ал да үҙеңә алып кит!

– Китербеҙ ҙә шул… Бирмәһәгеҙ, судлашып алырбыҙ. Айнур ҙа минең яҡлы.

Һәм зәһәр ҡыҙ, ультиматум ҡуйып, өйҙән юғалды. Бына мәрәкә!

Улдары Айнур өйләнгәс, ҡоҙалары менән бергә форсатын табып башҡа сығарғандар ине. Ә бына ҡыҙ хаҡында йүнләп уйламағандар икән… Ә бит мамыҡ эсендәге бәпкә һымаҡ өф-өф итеп үҫтерҙеләр үҙен. Университет дипломы һәм төшөмлө эш урыны – Сәфәр Раянович танышлығы менән яуланған ҡаҙаныштары. Ике мәртәбә бирнә биреп кейәүгә оҙаттылар. Һуңғыһы – Һарытау биҫтәһендә үҙ донъяһын ҡороп, хәлле генә тормош алып барған кешенең балаһы. Ғаиләлә берҙән-бер улан, мираҫ бүлешер кешеһе юҡ. Бәс, шулай булғас, Лианаға фатир ҡайғыһы бысағымамы? Ә ул, туйымһыҙ, пенсионер ата мөлкәтенә ҡаныға. Вәт замана! Мәгәр Сәфәр белә: Зөләйлә апаһы тормошҡа сыҡҡанда, ике мендәр, бер юрған биреп, ҡулына фанер чемодан тотторғандар ине лә, ҡыҙ биргәндәге йоланы үтәгәндәр ине. Бик дөрөҫ: ҡыҙ ҙа, кейәү ҙә тап-таҙа, һау-сәләмәт, йүгереп йөрөп эшләһендәр ҙә үҙ малын йыйһындар. Ә был ҡала ҡыҙы закон белә, имеш. Ғилемле булыу менәнме ни, әхлағың сәпсек тубығынан ғына булғас, тьфү! Хурланған ата суд юлына төшөп исемен бысратып торманы, фатир хаҡының нәҡ өстән бер өлөшөн Лиана ҡулына тотторҙо:

– Мә, ал! Тик әдрис юллап беҙҙең янға килеп йөрөмәҫһең, ҡыҙ, аңланыңмы?

– Һин, атаҡай, үҙең беҙҙең янға ҡайтып йығылма әле. Шекспир яҙған, Король Лир һымаҡ…– тип был юлы нишләптер шым ғына киҫәтте Лиана.

Ҡулда ҡалған аҡса өй тәңгәлендә һайланып торорға ирек ҡуйманы.

Һарытауҙан алтмыш саҡрым аралағы Ҡуштау ауылы осондағы йортто Хоҙай мәрхәмәте итеп ҡабул итте Рысаевтар.

Инде алдым-бирҙемгә бәйле хисапһыҙ ҡағыҙҙар тултырыу, документтар алмашыу маҙаһынан ҡотолоп, күсенергә генә ҡалды. Вәғәҙәләшкән көн дә килеп етте. Тоҡтар тултырылған, төйөнсөктәр бәйләнгән, тик нишләптер Ҡуштау тарафынан һаман өндәшмәйҙәр. Ә бындағы яңы хужа, баҙар тоҡкан йәһүд, телефондан теңкәгә тейә, фатирҙы бушатығыҙ, юҡһа милиция менән ҡыуам, затһыҙҙар, ти.

Сәфәр шөрләп ҡалды. Фатирҙар тирәһендә ил-көндә осрай торған берәй шухыр-мухырға тарынылармы әллә? Жулик-маҙар өйөрө кәкре ҡайынға терәнеме үҙҙәрен? Яуаплылыҡ Разия өҫтөндә ине, хәлде асыҡларға тип, таң менән Ҡуштауға китеп барҙы ул һәм кис төшкәс кенә ҡараңғы сырай менән ҡайтып инде.

– Рәғиҙә, хужабикә, мобильнигын юйған. Телефонын ғына түгел, башын да юғалтҡан, вәт тамаша!

Сәй эсеп, эсенә йылы кергәс, тынысланды, хәлде аңлатты. Вәлиулла тигән тол ир менән никахлашып, йыл самаһы йәшәгән булған икән хужабикә. Бик ҙур бурысҡа сумғас, банк бының улының Һарытауҙағы коттеджына теш ҡай-рай башлаған. Нишләһендәр? Улы үтенгәс, йортон һатып бурыс түләгән дә үҙе Вәлиулла йортона күсергә өмөтләнгән Рәғиҙә. Тик: тороп тор! Йортҡа парлап аяҡ баҫыуҙарына, ишектән ирҙең улы, килене ырғылып сыҡҡандар. Рәғиҙәгә: «Башың ике булһа, өйгә ин», – тигән улы. «Эҙең булмаһын беҙҙә, һөйрәлсек, кәнтәй», – тип баҡырған килене. Ә Вәлиулла, ата кеше, мәхлүк булып ситтә баҫып торған икән. «Минең алда ла илап, хурлығын түгеп бөтөрә алманы бисара ҡатын. Бына ышан һин ирҙәр ғишҡына, Сәфәр», – тип хәлде үҙенсә фаразланы Разия.

– Уларҙа минең эшем юҡ! – тип ярһып тауышын күтәрҙе Сәфәр. – Өй менән нишләйбеҙ хәҙер? Беҙҙең бит үҙ хәлебеҙ хәл.

– Нишләйбеҙ? Күсенәбеҙ! – тине Разия, ҡәтғи итеп. – Йорт һатылған – беҙ хужа.

Иртәгәһен, буран сығып, ел ажғырып торған көндә, «КамАЗ» фургонына тейәнеп Ҡуштауға юл тотто Рысаевтар. Хуш, Һарытау! Ауылдан сығып китеп ҡаланы яулауға Сәфәр әллә күпме ғүмерен һалды, яңынан салаға* боролоу әллә ни мәртәбә түгел инде. Әйтәһе юҡ! Берҙән-бер рәхәте – йән тыныслығы булыр. Сәфәр Раяновичтың, моғайын, һуңғы тейәнеүҙәре, ахырғы сәфәрелер был… Исем-шәрифтәре мәғәнәле уның, бәндә хаятта сәфәр тота, сәфәрсе инде ул.

Һатып алынған йортҡа битараф ҡына күҙ һалып, машинаны бушатышты, йөк ташыусыларҙы оҙатты Сәфәр. Яманатлы хужабикәне күрҙеме-күрмәнеме, ҡапылда хәбәре берекмәне. Тик йомшаҡ, шыма тауыш эйәһе: «Әйҙәгеҙ, яңы хужалар, сәйләп алығыҙ, юғиһә, аяҡтан яҙырһығыҙ», – тип үҙенә өндәшкәс кенә, уға иғтибар итте. Аш бүмәһендәге бер иркен мөйөштә табын ҡорған икән. Бер плитәгә, бер өҫтәлгә боролған Рәғиҙә ир ҡаршыһында асыла барҙы… Нисектер һиҙҙермәй генә, һынамсыл ҡарай торған ҡуңырт күҙҙәр… Бер йыйырсыҡһыҙ аҡ маңлай… Битенә тәлгәш-тәлгәш төшөп торған ҡара

*Сала — ауыл мәғәнәһендә.*

бөҙрәләр… Мәғәнә һәм ихтыяр көсөн раҫлап торған сырай… Буйсан, зифа кәүҙә… Сәхнәләрҙә генә күренә торған зат! Нишләп ауыл тарафында аҙашып ҡалып, төрлө әтрәгәләмдәр тарафынан ҡағыла-һуғыла һуң әле? Ҡайнар сәйен һүҙһеҙ генә уртлап, Сәфәр шул һорауҙарҙан арына алманы. Разия уның был хәләтен кисәге, бөгөнгө хәл-ваҡиғаларҙан кәйефе төшөүе тип юраны, буғай,– шулай уҡ өндәшмәй генә тамағын ялғаны.

– Һеҙ һис тә борсола күрмәгеҙ, Разия, Сәфәр әфәнде. Мин иртәгә үк улыма китермен, өйҙө бушатырмын, – тине Рәғиҙә, нисектер уңайһыҙланып.

Икенсе көндө иртән, ир йоҡоһонан уянғанда, ысынлап та, элекке хужабикә Һарытауға улы янына китеп барған булып сыҡты. Разияға ул: «Мебель-фәлән әлегә һеҙҙә торһон инде, яйы сыҡҡас та килеп алырбыҙ», – тигән.

Сәфәргә еңел булып китте. Ысын хужа тойғоһо менән ул өйҙө ҡараштыра, әйберҙәрҙе урынлаштыра башланы.

## 2

Аҙна самаһы ваҡыт үтте. Өмөттәрендә алданмаған Рысаевтар: ауыл өйө ысынлап та хозур йән ҡыуышы шул. Ҡарағай бүрәнәләрҙән хуш еҫ, йылылыҡ бөркөлә. Тәҙрәләрҙән аҡ ҡар, ҡояш, ай яҡтыһы ағыла. Иң мөһиме – тыныс, шылт иткән тауыш әҫәре юҡ бында. Юғиһә, ҡала фатирында нисә йыл йәндәрен устарында тотоп йәшәнеләр бит. Өҫтәге ишле Кокоревтар буш мискә тәгәрәткәндәй туҡтауһыҙ дөбөрләнеләр, күңел болғатҡыс джаз, рок, шансондарын аҡырттылар. Күрше Ғәлләмдең бетон стенаға тишек быраулап, ҡаҙаҡ ҡаҡмайынса көнө уҙманы. Ишек ҡаршыһындағы сантехник Володя иһә өйөнә үрмәләп ҡайтып инә лә боғаҙ ярып ҡатыны менән ҡысҡырыша башлай ине. Хет башыңа мендәреңде ҡапла, хет ҡолаҡтарыңа бөкө тыҡ, барыбер тыныслыҡ табып булмай ул таш тартмала…

Йоҡонан яҡшы кәйеф менән уянып, яңы хужалар мебелдәрен, йыһаздарын урынлаштырҙылар. Интерьер һәйбәт кенә килеп сыҡты. Келәмдәргә баҫып әле бер бүлмәгә, әле икенсеһенә йөрөйһө генә килеп тора. Зал да затлы ғына күренә. Тик Рәғиҙәнең өҫтәл, шкаф, трюмо, пианино кеүек дәү әйберҙәре генә күсенеүселәргә үҙҙәренсә яйлашырға ирек бирмәй әлегә. «Ҡасан быларҙы алып килтерҙәр һуң?» – тип әллә нисә ҡат һуҡранды инде Сәфәр.

Һәй, оҙон ғүмерле булыр Рәғиҙә!

– Инергә буламы? – Ишектә юл сумкаһы тотҡан, өҫ-башын бәҫ ҡаплаған ҡатын күренде. – Әрһеҙләнеп, был ҡарсыҡ тағын килде был йортҡа, тиерһегеҙме инде, хужалар?

– Һин нимә, Рәғиҙә, үҙ йортоң бит, ин, рәхим ит!

Разия, ашығып барып, юлсының өҫ кейемен һалдыра башланы. Рәғиҙә иһә, хәле бөткән кеше ҡиәфәтендә урындыҡҡа һығылып төшкәс, түҙмәне, башын ике ҡулы менән тотоп һулҡылдап илап ебәрҙе.

– Ҡабул итмәнеләр бит мине үҙҙәренә, һыйҙырманылар.

– Әй, Алла! – тип Рәғиҙәнең иңенән ҡосоп алды Разия. – Тыныслан, ул тиклем көймә! Әйҙәле, ҡайнар сәй эсеп ал, унан хәлеңде һөйләрһең.

Ҡатындар кухня яғына үткәс, Сәфәрҙе йәнә хәүефле хистәр биләп алды. Күрәһең, бында ла тыныслыҡта ҡалдырырға йыйынмайҙар. Башҡалар шикелле, ҡулынан аҫҡысты алаһы ла хужа артынан ишекте шапылдатып ябаһы ине. Бөтмәҫ бында кеше ҡайғыһы!

Сәфәр кейенеп ишек алдына сыҡты. Ҡар көрәне, ихатала тәртипһеҙ ятҡан таҡта-тоҡтаны йыйып мөйөшкә өйөп ҡуйҙы. Тик ҡулға алған, тотҡан һәр нәмә сит, ят, кешенекенә ҡул һуҙған кеүек…

Урынлашырға өлгөрмәнеләр, үкенесле хис моронланы. Китеп, йәшәгән оя-ларын ташлап дөрөҫ эшләнеләрме һуң? Урынға берегеү, ерегеү хисе, йән тыныслығы теләү кеүек үк, зарур бит ул. Шул тойғолорҙы рәнйетеп, ҡоро иҫәп-хисап менән эш итеү йәнде имгәтеү түгелме? Йәнәһе, ауылға күсәләр ҙә, донъя түңәрәкләнә. Бар, көткәнеңде әҙерләп ҡуйғандар, ти, унда!

Сәфәр үҙе лә йүнләп аңламаған тойғолар менән өйгә инде, сисенеп төпкә үтте. Разия яңғыҙы ғына һауыт-һаба йыйыштыра ине.

– Нимә, улы ла һыйҙырмағанмы?

– Юҡ, унынһы әсәһе менән йәшәргә риза. Тик килене янъял ҡуптарған. Әйтә икән: «Әсәң бында ҡалһа, мин сығып китәм…»

Сәфәр, ҡашын йыйырып, Разияның яуыз килен хаҡындағы һүҙҙәрен тың-лап торҙо. Телдән-телгә күскән һүҙ тамам тәмһеҙләнә икән. Ахырҙа, күҙ ал-дына килеп баҫып, килен аждаһа һымаҡ уттар сәсә башланы гүйә.

– Кәнтәй барыбер малайға әсәһенән яҡынырак, – тип бүлде уны, ниһайәт, ир. – Әсәһен хөрмәтләһә, ҡатынын ҡыуыр ине. Бындай ҡыланыштарға нисек түҙеп тормаҡ кәрәк? Ә малай битараф. Сәбәбен йөрәгенән эҙлә. Улдарҙа игелек юҡ хәҙер. Улдар шәфҡәтһеҙ, тик йөҙҙәренә битлек кейгәндәр. Үҙ рәхәт-лектәрен аҫтыртын ҡайғыртып, улар ҡатындарын ата-әсәнән, туғандарынан өҫтөнөрәк күрә, белдеңме? Киленде әрләмә һин, малайҙы һүк! Уның күңел күҙе һуҡыр. Беҙҙә бит әсәйҙәрҙе үлгәс кенә һағыналар, йырҙа ғына маҡтайҙар. Мөхәббәт эйәләре, имеш! Әй, йүләр һинең Рәғиҙәң. Шул йүнһеҙ малай өсөн юҡҡа йортон һатҡан ул. Йәшәһен ине һөйәре Вәлиулла менән сөкөрләшеп!

– Һин лекция һөйләргә оҫта инде. Студенттарың юҡҡа ғына һаман һа-ғынып шылтыратмайҙыр шул, – тип семетеп китте Разия. – Башың бик һәй-бәт эшләһә, шуны әйт: Рәғиҙәгә нишләргә хәҙер? Ҡуштауҙа бер туған-тыу-масаһы юҡ. Эштән китеүенә лә бер нисә йыл. Кем хәҙер уға ярҙам күрһәтһен? Сығышын белә лә бит – Урал тауҙары яғынан икән. Тик мал-мөлкәтһеҙ кешегә яҡын туғаның да ҡапҡа асмай торған замана.

– «Нишләргә, нишләргә», – тип үсекләне Сәфәр. – Нимә миңә ауҙараһың, ҡәрендәшемме, балдыҙыммы? Йортон һатҡан икән, китһен дә беҙҙе тыныс-лыҡта ҡалдырһын, йәме! Һин башланың был эште, инде хәҙер үҙең ослап ҡуй, йәнкәй-йәнәш!

Ир, ҡатыны менән ыҙғышҡанда була торғанса, шулай һүҙен түңәрәкләп ат-ты ла ярһып урынынан ҡуҙғалды, зал яғына сыҡты.

Бер бүлмәнең ишеге шар асыҡ, ә икенсеһенеке шыплап ябылған ине. Күрә-һең, бында Рәғиҙә инеп ҡунаҡлағандыр. Нимә, хәл йыйып ҡына аламы, әллә тороп ҡаламы – ҡатындар башҡа төшкәнде шулай хәл итергә йыйыналармы? Булмаҫ, туҙға яҙмағанды… Ләкин бер аҙҙан ирен сәйгә саҡырып, Разия нәҡ кү-ңеленә килгән шөбһәне ысынға ашырып һүҙ әйтте:

– Беҙ ҙә шәфҡәтһеҙ булмайыҡ инде, Сәфәр. Рәғиҙә әлегә беҙҙә йәшәп тор-һон. Тора-бара Хоҙай берәр әмәлен юллап бирер әле…

– Рәғиҙәне өйҙәш яһарға йыйынаһыңмы? – тип үҙе лә һиҙмәҫтән ҡыҫҡы-рып ебәрҙе Сәфәр. – Миллиондар түгеп өй ал да уны ниндәйҙер сит ҡатын менән бүлеш, имеш! Аҡылыңдамы һин… Ниткән гуманлыҡ? Һинең шәфҡәт

мине сиклəй, рəнйетə икəн, шəфҡəтме һуң был? Туҡта, уйнама минең менəн, Разия! Бер өйҙəш менəн тороп ҡараныҡ бит инде. Теңкəне ҡоротто.

– Ниндəй өйҙəш хаҡында һөйлəйһең тағы? – Разияның ихлас ҡарашында аптырау, ғəжəплəнеү ҡалҡып сыҡты. – Кемде əйтəһең һин?

– Кемде, кемде – əсəйеңде! Теге ваҡытта ла нəҡ шулай əйттең: «Үҙебеҙгə алайыҡ, ҡарайыҡ», – тинең. Алдыҡ. Ә ташы һаман йөрəктə! – Ир күкрəгенə һуҡты. – Өйҙəш кенə түгел, ғаилəгə баш булырға ынтылыуын оноттоңмо?

Разия, ҡулындағы бəрəңгеһен, бысағын биҙрəһенə бəреп, йөҙөн ҡапланы:

– Ай, Алла, ниндəй кеше һин… Әсəй – өйҙəш буламы ни? Уны ҡараған өсөн сауап ҡына йыйҙың бит…

Ҡатын үҙ əсəһен əлеге сетерекле һөйлəшеүгə ҡатнаштырғыһы килмəһə лə, асылда һəр икеһенең хəтере ғаилəнең үткəн тормошона табан йүнəлде.

### 3

Ҡəйнə менəн кейəүҙең бер ҡыйыҡ аҫтында йəшəргə йыйынғансы уҡ борсаҡтары бешмəне. Разияның тыуған йортона беренсе ҡайтҡанда, тау ҡəҙəр эштəр башҡарып ташланы Сəфəр. Бигерəк тə күптəн ҡайтарылып, урамда сəселеп ятҡан утынды бысып-ярыуы, соланға индереп, тəҫлəп өйөүе оҡшаны ҡартҡа:

– Маладис! Кейəү эш рəтен белə.

Шунан һуң да бер айға ике рəт даими ҡайтып, ҡутара эшлəп, Ғиниəтулла ҡарттың йортон тамам тəртипкə һалды, уға йəнə ҡот ҡайтарҙы Сəфəр. Һəм бер мəлде, кейəүҙең ишек алдында ҡояшта йылынған һыу менəн бышҡырабышҡыра сайынған сағын күҙəтеп, ата кеше əйтеп һалмаһынмы:

– Бына беҙҙе ҡараусы… Бына йортҡа ысын хужа! Кейəү, беҙҙең ҡулдан аҫҡыстарҙы һин алырһың инде!

– Юҡ, ҡайным, ашыҡма, аҫҡыстарҙы тапшырыр кешең ҡайтыр əле! – тиергə булған да бит. Ғилемле булһа ла, тормош сетереклектəренəн йыраҡ торған əҙəм шул ул. Үҙенə зəңгəр күҙҙəренең шелтəһен сəскəн Ҡəмəриə ҡарсыҡҡа ла тик йылмайып ҡараны. Аҫҡыс хаҡында уй ҙа юҡ инде, ҡайныһының ҙурлауынан, үҙ итеүенəн ихлас ҡыуанған ине ləһə. Инде тора-бара, төштəн һуң булһа ла, төштө аҡыл. Ҡəйнəнең урынһыҙ үсегеүҙəре, күҙ сəнсеп, һүҙ ырғытып китеүҙəре бабайҙың туҙға яҙмаҫ фатихаһынан башланған... «Өс көнлөк кейəү…» «Ғиндуллиндар мираҫына табылған дəғүəсе…» «Малымды мин тиненə ҡəҙəр ғəзиз Заһирыма тапшырам, Аллаһым бойорһа!» – тигəн һүҙҙəрен уҡырға кəрəк булған ул саҡта ҡəйнə ҡарашынан.

Яҙмыштар болғанып, əсə менəн мəнһеҙ ул араһына керҙе шул Сəфəр. Бер саҡ үҙ өйөндə, үҙ өҫтəле артында эшлəп ултырғанда, ҡəйнəһенең телефон аша һеңлеһе Саманиə менəн һөйлəшеүе уның ҡолағына килеп керҙе.

– Һарытауға мине Заһир улым алып килде бит. Улымда торам. Әй, əйбəттəр! Заһирым гел «əнкəй-бəғерем» тип кенə көйөмдө көйлəй. Бер ҡайғым юҡ, инде Хоҙай алдағыһын күпһенмəһен! Бына əле ҡыҙым үҙенə ҡунаҡҡа алды. Һөйлəшеүем дə əлегə уларҙан. Тик оҙаҡ тормам, йəнə Заһирыма ҡайтырмын, тип торам… Рəхмəт, яҙмышымдан һис зарланмайым, Саманиə!

Ҡəмəриə ҡарсыҡтың һүҙ маһирлығына, фəстереү, шыттырыу ҡеүəһенə ғəжəплəнеп бөтə алманы Сəфəр. Уны ауылса, ғəҙəти күренгəн заттың донъяны үҙенсə күреү əмəле, баш бирмəҫ рух ҡөҙрəте аптыратты. Хəйер, Ҡəмəриəнең һуғыш йылдарында һəм унан һуң да байтаҡ ваҡыт колхозда бригадир булып

тороуын ишеткән ине. Өҫтөнә һырма, аяғына итек кейеп, күн бирсәткәле ҡулдарына ҡайыш ҡамсы тотоп, ҡара айғыр өҫтөндә төшкән йәш ҡатын фотоһүрәтен Разия үҙ альбомының иң ҡәҙерле йәдкәре итеп һаҡлай. Шуны йәнә күргән йә иһә берәй сәбәп менән күҙаллаған һайын, Сәфәр уйланы: «Ҡамсы уға ниңә кәрәк булды икән? Сәскә тотоп төшһә, килешлерәк булмаҫ инеме һуң? Ысынлап та, бер ҡулда – ялан сәскәләре, икенсеһендә – теҙген. Ә йөҙҙә йылмайыу… Бына тигән ауыл алиһәһе булып күренер ине ләһә Ҡәмәриә!» Тик күҙ алдында һүрәт йәнә йәнләнгәс, уйҙарына яңы яуап таба ул. Сталин заманы бит, ҡамсыһыҙ ҙа булмағандыр. Ваҡытында сәстер, урҙыр, һуҡтыр, өҫтән төшөрөлгән пландарҙы үтәт! Быларҙы кешегә ҡушып ҡына үтәтеп булмай. Сыбыртҡы менән янауҙар ҙа кәрәк булғандыр, күрәһең. Ҡамсы теле бик үтемле булған бит Сталин баш булған илдә. Берәүҙәр өҫтөндә сыбыртҡы уйнатып, икенселәрҙе прәник биреп әүрәтеп әлеге тиран үҙ тәртиптәрен урынлаштырған, ти, бит… Баҫыуы баҫыу инде – ҡаҙна биләмәһе, ил башының ғәҙәте бригадир Ҡәмәриә кеүек ҡатын-ҡыҙҙар холҡона ла күсеп, ғаилә диктаторҙары яһаһа, ни хәл итерһең, ә, Сәфәр кейәү? Ҡатын-ҡыҙ ҡулында ҡамсы, ни генә әйтһәң дә, яҡшы фал түгел шул. Бында матриархат еҫе аңҡый…

Әлеге фотография йәш ҡатынды һаман ат өҫтөндә йәшәтһә лә, Рысаевтарҙа торған саҡта ул инде эйәрҙә түгел ине. Орденлы һуғыш ветераны, байтаҡ йылдар сельпо рәйесе булып торған ире Ғиниәтулла донъя ҡуйғас, Ҡәмәриә ҡарсыҡтың хәлдәре мөшкөлләнеп китте. Атай-әсәй ярҙамы менән Һарытауҙа йортло булған Зәһир Сүәргә бөтөнләй юлды онотто. Әллә эше күп, әллә әсәһендә уйы юҡ… Ҡыҙ менән кейәү йыш-йыш ҡайтып ҡарамаһа, меҫкен ҡарсыҡ нишләр ине икән?

Ә бер мәл, көҙ һалҡын һулыш өргән саҡта, әсәһенең ауырып түшәктә ятыуын күргәс, Разия күҙ йәштәре менән иренә ялбарҙы:

– Сәфәр, аяҡ аҫтында туҙан булайым, зинһар, әсәйҙе үҙебеҙгә алырға рөхсәт бир! Алла хаҡына!

Рысаевтарҙа күпме йәшәне Ҡәмәриә ҡарсыҡ? Йәмғеһе алты йыллап, буғай. Кейәүҙең эш бүлмәһендә урынлашып, ҡыҙы бешергән затлы аштарҙы ашап, өйҙәгеләрҙән һәр ваҡ-төйәк теләктәрен дә үтәтеп барған әбей кешегә, ҡараусыларға рәхмәт йөҙөнән, тиҫбе тартып, доғалар ғына уҡып ятырға ине лә бит… Ҡарсыҡтың ҡарсығалай үткер күҙҙәре, тирә-яҡҡа бик шыма борғоланып, күпте күрҙе шул. Ҡулдары кәрәкмәгәндә лә ҡапшаны, ә теле, хисап бирмәйенсә, электән ҡанына һеңгән, ғәҙәт-канун иткән һүҙҙәрҙе әүәләне. Ҡамсыһы булмаһа ла, ҡамсылы һүҙҙәр ине былар…

Шулай ҙа Сәфәрҙең айырыуса енен ҡотортҡаны ҡәйнәнең кейәүгә һөйһөнмәй ҡарауы, сүпкә һанауы булды. Ҡыҙ яҡшы, малай һәйбәт, ә кейәү – ниндәйҙер һис ипкә килмәгән әҙәм аҡтығы. Бер саҡ университетындағы сығарылыш кисәсенән Сәфәр Раянович шаҡтай төшөрөп ҡайтты. Унан һуң да бер нисә көн сәрхүш булып, һыра һемергеләп йөрөнө. Ҡатыны менән дә нимә хаҡындалыр әләгешеп, әйткеләшеп алдылар былар. Ҡыҫҡаһы, үҙе әйтмешләй, ғаиләлә булғылай торған хәл инде был. Тик Ҡәмәриә ҡарсыҡ ошонан фажиғә яһаған. Разия магазинға сығып киткәс, ул таяғы менән туҡылдап залға сыҡты, Сәфәр ҡаршыһына килеп баҫты:

– Нимә, кейәү, һин эскегә һабыштыңмы? – Зәңгәр күҙҙәре ирҙе сәнсеп, быраулап алды. – Күптән киләме был?

– Кем әйтә, эсә, тип?.. – тине Сәфәр, хаяһыҙ һорауҙан ҡаушап.

– Үҙем күрәм. Эргәндән туҡтауһыҙ һаçыҡ еç килеп тора. Күҙҙәрең ҡыçылған, йөҙөң ҡарт урыçтыҡы һымаҡ шешенке.

– Һе!

– Һе шул. Аптырайым, хайран ҡалам. Мәртәбәле уҡыу йортонда мөғәллимһең. Кеше тәрбиәләйһең, китап яҙаһың. Ә үҙең өйҙә боҙоҡлоҡтаһың. Минең ирем дә, улым да бындай юлға аяҡ баçманылар. Туҡтат был ғәҙәтеңде, аңланыңмы?

Һәм ҡарсыҡ таяғы менән иҙәнде төйҙө лә, кейәүгә инфаркт яһай яҙып, үҙ бүлмәһенә ыңғайланы.

Әй, ғәрләнде Сәфәр Раянович. Үҙ өйөндә тамам кеше иçәбенән сыҡты бит! Байрамдарға, ҡарсыҡ ҡушыуы менән, Заһир саҡырылды. Хәҙер юл ҡайғыһы юҡ бит, ғаиләһе менән килә лә өçтәл түренә менеп ултыра, малай. Әсәләренең тыуған көнөндә иң ҡайнар мәҙхиә һүҙҙәрен хәҙер Заһир менән Сәриә килен әйтә. Әсәһенә ҡарап, ҡыҙы Разия ла ғаилә дилбегәһен үҙ ҡулына ала, буғай. Ай һайын өйгә алып ҡайтылған хеҙмәт хаҡы булмаһа, моғайын, Сәфәр Раяновичты юҡһыныусы ла булмаç. Ятһын шунда китапханала ғилми хеҙмәтен яҙып… Ә бында сөкөрләшер өсөн һәр кемгә иш, серҙәш бар бит!

Тик ҡуҡрый ҡунаҡ булып, тыйнаҡлыҡты белмәгән Ҡәмәриә ҡарсыҡты көтмәгәндә паралич һуҡты. Малайҙан, килендән елдәр иçте, эҙҙәре һыуынды, ҡыҙы ла хәҙер Сәфәргә йылыша төштө. Ауырыу әсәне ваннаға төшөрөп йыуындырыу, күтәреү өсөн ир ҡеүәте кәрәк… Сырхау янында ултырып һаҡларға, ҡалаҡлап ашатырға-эсерергә алмашсы кәрәк…

Хәйер, йылдар буйы өйҙәш булып, торған ҡәйнәнең уйландыра торған һабағы тасуир ителгән хәлдәр түгел. Былар бик күп ғаиләләрҙә була торғандыр. Хайранырағы башҡа. Сирле әсәһен ҡыҙы ҡарарға, ҡыҙы тәрбиәләргә тейеш, тигән ҡанун ҡуйған Ҡәмәриә ҡарсыҡ, васыят яҙып, ауылдағы йортон, бар мөлкәтен Заһирға мираç иткән. Ата-әсә нигеҙен, үҙе үçкән йортто барып күрергә, хәтирәләр кисерергә ымһынған Разияны хәҙер Сүәргә саҡырыусы юҡ. Заһир үҙ ҡулына күскән утарға апаһының аяҡ баçыуын теләмәй. Шунан шөрләй? Ҡатын-ҡыҙ бит, әсәй төçө, атай төçө, нигеҙ иçтәлеге тип, тегене-быны алып китеүсән.

Һүҙгә кире ҡайтып әйткәндә, дөрөç, Ҡәмәриә ҡарсыҡ Разияға ҡәҙерле әсә инде. Ә бына Сәфәр өсөн ул – өйҙәш. Әсә булараҡ, Заһир йортоноң түрендә ултырырға тейеш ине ләһә!

Ә өйҙәш ҡатын, күргәнсә, сюрпризлы зат бит ул. Бына шуға күрә Разияның, Рәғиҙәне ҡыҙғанып, бер ҡыйыҡ аçтына алырға теләүе ысынлап та ҡурҡыта. Етмәһә, ҡырҡыу холоҡло ҡәйнәһе ҡылған һымаҡ, берәй хәл килеп сыҡмаç, тип кем әйтер? Ҡатын-ҡыҙ, тамаҡ туҡ, донъя түгәл, тигән ир-ат түгел бит ул, тамырланған гөл һымаҡ, һәр ҡайһыһы үҙенсә өçкә үрләй, ян-яҡҡа йәйелә бит улар…

## 4

Кешене таң имләй. Әгәр ҙә шәфәҡ юйылғандағы хистәре, ҡараңғылыҡ һеңгән киске уйҙары менән ҡалһа, әҙәм заты күптән инде һағыш-ҡайғыларына, үпкәләренә томаланып, диназаврҙар һымаҡ ер йөҙөнән юғалған булыр ине. Бәндә һөйөнөп таңды ҡаршылай, йылмайып, нурҙар сәсеп сыҡҡан ҡояшты күҙәтә, иртәнге сафлыҡ, тәбиғәт хозурлығы, йәшәргә ашҡыныу уның йөрәгендә лә яңы өмөт, дәрт уятып, хистәрен яҡтырта.

Йоҡоһонан тороп, Сәфәр ишек алдына сыҡты, һыҙылды-кирелде, күкрәк тултырып саф һауаны һуланы ла, фанер көрәк алып, төндә хәтһеҙ генә яуған аҡ мамыҡ ҡарҙы көрәй башланы. Тәненә егәр төштө. Үҙе лә һиҙмәне, кәйефе күтәренке саҡтарҙа була торғанса «Донъя матур, донъя киң…» тип көйләп ебәрҙе. Күңел йырлаһа, аҡыл түҙәме? Ул да сыуалған уйҙарҙы рәткә һалырға, епкә теҙергә кереште: «Юҡ-бар шиктәр менән нишләп үҙ-үҙен ҡамсылай һуң? Разия хаҡлы бит, рәнйетелгән ҡатынға ярҙам итергә кәрәк…»

Өйгә ингәс, йыуынғыс янында таҫтамалға һөртөнөп торған экс-хужабикәгә лә бик ипле, яғымлы итеп өндәште Сәфәр:

– Нисек, һәйбәт йоҡланығыҙмы, Рәғизә ханым?

– Әй, Сәфәр әфәнде, был арала тәү ҡат сабый һымаҡ иҙрәп, әллә ниндәй татлы төштәр күреп йоҡланым, – тине Рәғизә, ҡояшҡа йөҙөн асҡан гөл һымаҡ яҡтырып.

Инде ирҙең уйҙары тағын да көсәйеп, тәүәккәл рәүешкә керҙе: «Ҡалһын, өйҙәш булһын. Йәшәр-йәшәр ҙә, берәй яйы сыҡҡас, башҡа бер ҡыйыҡ аҫтына китер. Йорт тар күренһә лә, күңел киң булһын!»

Ул кухняла тәмле еҫтәр сығарып бәрәңге ҡыҙҙырған ҡатыны янына килде:

– Рәғизәне ҡайһы бүлмәгә урынлаштырабыҙ һуң?

– Нимә, күҙәләрең киттеме? – Разия иренә ғәжәпһенеп ҡарап торҙо, йөҙө балҡып китте. – Ул йоҡо бүлмәһендә ҡунды бит инде, шунда урынлашыр. Үҙебеҙ һиңә кабинет яһарға йыйынған бүлмәлә булырбыҙ.

– Ятаҡта торған кеүек була инде был.

– Студент саҡтарыңды иҫкә төшөрөрһөң, йәшәреп китерһең!

– Йәшәреп булырмы икән һуң?

– Ике яғыңда ике ҡыҙ булғас, ниңә йәшәрмәҫкә? – тип мут йылмайып алды Разия. – Юғиһә, һуңғы ваҡытта бик мыжыҡҡа әйләнеп киттең бит әле, ҡартым.

Шулай, ҡыштың хәйерле бер иртәһенән Рәғизә Рысаевтарҙа өйҙәш ҡатын булып йәшәп китте.

## 5

Экс-хужабикә аҡ, шаҡмаҡлы шәлъяулыҡ бәйләп, зәңгәр фуфайкала биҙрә-маҙар тотоп, ишек алдында урала башлағас, ҡайҙандыр әсе тауыш менән мыраулап сиам бесәйе килеп керҙе.

– Маркиз, Маркиз, ҡайҙарҙа йөрөнөң һин? Кил әле, мыраууйәнем минең, – тип ҡатын йөндәрен ҡабартҡан, һаман тынғыһыҙ ҡиәфәттә мыяулап торған бесәйҙе ҡосағына алды. – Туңдыңмы, асыҡтыңмы? Әйҙә, өйгә!

Ишекте асып, һөйләнә-һөйләнә ҡатын уны йортҡа үткәреп ебәргән ине, бесәй, ғәҙәтенсә, кухня яғына юл тотҡас, Разияны күреп, һикереп ҡуйҙы, яман итеп ажғырып, ыҫылдап ебәрҙе һәм йәнә ишеккә ташланды. Әгәр уны Рәғизә эләктереп алмаһа, моғайын, томоролоп, һин күр ҙә мин күр, тағын сығып күҙҙән юғалыр ине.

– Ай-һай, ҡырағай, нисек беҙҙән ятһына, – тип ғәжәпкә ҡалды Разия. Залдан Сәфәр ҙә был тамашаны күҙәткән икән:

– Беҙҙе өнәмәй, бесәй генә тимә, холҡо бар.

– Эйәләшер әле, – тине Рәғизә, уңайһыҙлана төшөп. Һәм ул, бесәйҙе ҡосағына алып, үҙ бүлмәһенә керҙе. Ишекте ябып ҡуйып, наҙлы һүҙҙәр әйтә-әйтә, аҫҡа киҫелгән йән эйәһен туйҙыра башланы.

Был хәл барыбер Сәфәрҙең кәйефенә тейҙе, һыҙланыуын яңыртты: «Үҙ йортоңда һине ситләтһендәр, имеш!»

Хәйер, ир бөтөнләй хаҡлы булып сыҡманы. Маркиз, бер нисә рәт ҡойроғон күтәреп Сәфәрҙе еҫкәштергеләгәс, аяғы аҫтында уралды, тора-бара хатта унын тубығына уҡ менеп ҡунаҡлап, тиҫбе тартҡандай өҙөкләп мыр-мыр килергә күнекте. Унын йомшаҡ һыртынан, башынан һыйпау Сәфәргә рәхәтлек, күңел тыныслығы килтерҙе.

Ә бына Разияны һаман үҙ итмәне Маркиз. Күргән һайын ыҫылданы, ҡатын эҙҙәрен әйләнә-әйләнә еҫкәне, ары-бире һуғылды. Бындай иҫәңгерәгән саҡтарҙа Рәғиҙә уны тиҙерәк үҙ яғына саҡырып алды, ә Сәфәр тамам аптырауға төштө. Ниндәй ғәләмәт һуң был сиам бесәйе ҡыланышында? Төп шик бары тик бер генә булырға мөмкин ине. Күрәһең, бесәй аш-һыу батшалығында үҙ хужабикәһенең урынын биләгәнгә Разияға үсегә.

Ә бер аҙҙан, өсәү йәшәүҙәренә бер айлап ваҡыт уҙғас, ир башына тағын бер аптырау ғәләмәте килеп төштө. Хәйер, аптырау тиеү генә аҙ, тетрәнеү үк булды был! Юҡ, тегене-быны уйлай күрмәгеҙ, һис кем сығырынан сығарманы Сәфәрҙе, әрләмәне-һуҡманы. Ә бары тик төш күрҙе ул. Дөрөҫ, ятҡансы телевизорҙан өсәүләп Гоголдең «Вий» тигән әҫәре буйынса эшләнгән бик ҡурҡыныс кино ҡарағандар ине. Сихырсы ҡатындың үлгән еренән терелеп, табутында ултырған хәлдә, сиркәү әһеленә ябаған һөжүмдәрен күреп, ирҙең сәстәре үрә торҙо. Хоҙайым, шундай колдун, албаҫтыларҙан үҙең һаҡла! Доға, ырымдарың менән генә ҡотолормон, тимә…

...Ҡасан ятыуын, нисек түшәгендә йоҡлап китеүен хәтерләмәй Сәфәр, ә бына баш осона килеп баҫҡан Рәғиҙә күҙ алдында һаман ап-асыҡ булып тора. Кәүҙәһен ҡыҫып, ғәүрәттәрен үтәләй күрһәтеп торған алһыу эске күлдәктән… Итәге ҡайҙа бөтә лә, шәрә боттары ҡайһы тарафтан башлана бының – айырырлыҡ түгел, тотоштан алһыу. Йөҙөн бер күреп тә һоҡланған ине инде ир. Хәҙер иһә йылмайыуы әҫәрләндерҙе. Йөрәкте яндырырлыҡ әллә ниндәй танһыҡ, һиңә генә бағышлы, йәшертен хистәрҙән тыуған йылмайыу. Ә тойғолорҙың эстән килеүен аҫтан, урлап ҡарай торған тынғыһыҙ ҡуңырт күҙҙәрҙән асыҡ уҡып була…

Һоҡланыуын йәшермәне ир:

– Алиһә икәнһең!

– Матур итеп күрергә теләгән кеше янында матур булаһың инде ул. Үҙеңдеке лә итәһең киләме?

– Һоҡланыуым етә… Ҡатынды ла күптән ҡосаҡлаған юҡ инде минең.

Ҡолаҡҡа тыйнаҡ көләү тулҡындары килеп бәрелде:

– Һин йәш бит әле ғәйрәт булмаҫҡа?

– Йәш һиңә, стажлы пенсионер! – тип үртәлеп, тауышын күтәрә төшөп ҡаршы төштө Сәфәр. – Арт һының урындыҡҡа ҡаҙаҡланған булһын… Аҡыл хеҙмәте, фәндә сәкәләшеү, стресс, экология зыяндары… Былар ир-ат өсөн файҙағамы ни? Алашаға әйләнерһең шул! Ир ҡөҙрәтен ҡайтара торған аҡса ла юҡ беҙҙә. Миллионер, олигарх булһаң, өмөт булыр ине лә һуң, нишләйһең, тәтемәне ундай мәртәбә… Хәйер, ҡосаһын ҡосҡанмындыр инде, ғәйрәт запасы ла бөткәндер…

– Ир-атты ғишыҡ-ғишәрәт, һөйөү йәшәтә. Ә һин инде ғүмерҙән өмөт өҙҙөң бына, бабаҡай? Ә бит тыштан ҡараһаң, һиңә зарланыр урын юҡ һымаҡ. Килеш-килбәтең ҡатын-ҡыҙ күңеленә бик ятырлыҡ әле, Бальзак йәше, Бальзак ҡиәфәте!

– Яңылышаһың, мөхәббәт эйәһе түгелмен.
– Ҡатының да үҙеңә һалҡынмы?
– Ҡайнарлығын үлсәр бизмәнем юҡ. Һәр хәлдә ул – Зөһрә, мин – Таһир түгел.
– Яратмағас, нишләп өйләндең һуң?
– Өлкән йәштәгеләрҙең йәшәү ҡанундары үҙҙәренсә.
– Иҫәп-хисапмы?
– Тап өҫтөнә баҫтың!
– Аҡса, мал яратаһыңмы ни?
– Хурлама! Минең иҫәп һөнәр мәнфәғәттәренә, ғаилә талаптарына, бала үҫтереү мәшәҡәттәренә ҡағылды. Уларҙы аяҡҡа баҫтырырға кәрәк ине бит! Толдо яңғыҙлыҡ та ҡурҡыта. Кешеләр парлап йәшәргә тейештәр.
– Тик бел: ысын хистәрен аяҡ аҫтына һалып тапаған кешенән бәхет йәйәүләп ҡаса. Был ҡанун йәшенә лә, ҡартына ла ҡағыла. Ғәмәлеңдән – яза.
– Бәхет тәтемәҫме инде?
– Саф хистәрҙән ҡасҡас, йөрәгеңдә ҡайнар тойғолар табырға өмөтләнеү – ҡыҫыр шөғөл, Сәфәр. Әммә йәшәйем тигән кеше һәр саҡ яңылыштарын барлай, төҙәтә, хистәрен яңырта. Һеҙгә яңы өйҙә яңыса йәшәргә тырышырға кәрәк.
– Нимәнән башлайым һуң, әйт!
– Мин күрҙем, Сәфәр, ҡатының һиңә гел мәтрүшкә сәйе эсерә. Иртә, кис – мәтрүшкә-кәкрүшкә! Ә һин уның ир-ат өсөн бик зыянлы булыуын беләһеңме һуң?
– Аслан уйламаным. Ниңә зыянлы һуң?
– Йоҡлата, иҙрәтә, ҡеҙрәтеңде ала. Күрҙеңме, мәтрүшкәне ҡатының бында ла бер көлтә алып килгән бит. Ышанмаһаң, мунса алдына инеп ҡара. Быны эсеп бөтһәң, билләһи, ҡатын-ҡыҙ наҙы түгел, еҫенән дә биҙерһең, ташла шуны, Сәфәр!

Ир һиҫкәнеп уянып китте. Һикереп урынынан ҡалҡты. Күҙҙәрен шарландырып тирә-йүнен айҡаны. Юҡ, билләһи, бер кем юҡ! Түшәктә тик хырлап Разия йоҡлай. Өн тиһәң өн, төш тиһәң төш түгел. Рәғиҙә бар булмышы менән Сәфәр алдында баҫып торҙо лаһа! Мәтрүшкә хаҡында ҡайҙан белә тағын? Баш ауыртыуын баҫыр тип, даими рәүештә мәтрүшкә сәйен эсеүе хаҡ бит. Нәҡ шулай, иртә эсә, кис эсә… Баштараҡ әсәй йыйған дарыу тип эсерҙе уны Разия, ә унан баҙарға сыҡҡан һайын үҙе һатып алырға күнекте. Ниңә эсмәҫкә, тәбиғәттән килгән шифа бит…

Ә инде шөбһәле уйҙарынан айный алмаған ир, иртән мунса ишеген асып аҫылмалы кәртәгә күҙ төшөргәс, тетрәнеп китте. Бер нисә пар мунса миндеге йәнәшәһендә, ысынлап та, ҙур бәйләм мәтрүшкә сәскәләре аҫылынып тора. Һабаҡтары, япраҡтары йәм-йәшел, ә таждары күгәрсен күҙеләй күгелйем. Разияның иренә мәхәббәт ҡытлығы, өнәмәү хисе шулай көлтәләп үк микән ни?..

**6**

Йорт алдын йыйыштырырға сыҡҡан Сәфәрҙе сәйгә саҡырып алдылар. Сәстәрен аҡ яулыҡ аҫтына ҡыҫтырған, зәңгәр алъяпҡыслы Рәғиҙә өҫтәл йүнәтеп ҡуйған. Моронға тәмле ризыҡ еҫе бөркөлдө. Бөгөнгө кухня дежуры ниндәй?

Сәскәле халатта өҫтәл башына килеп ҡунаҡлаған Разияның да тамағы ҡытыҡланды:
– Рәғиҙә, таңдан тороп нимә әҙерләнең һин?
– Ватрушка! – тине ҡатын, ризығы менән иғтибарҙы йәлеп итеүенә ҡәнәғәтләнеп.

– Беҙҙеңсә – бәрәмес инде. Эремсек бәрәмесе була, – тине Разия һәм, эҫе таба өҫтөнән япманы алғас, береһен эләктереп ауыҙына ҡапты. – Һай, тәмле, деликатес! Мине лә өйрәтерһең, йәме?

Сәфәр йәшертен генә Рәғиҙәгә күҙ төшөрҙө. Төндә уның менән гәп ҡорған зат бит, берәй ғәләмәте сағылмаҫмы? Юҡ, сынаяҡ аҫтын килешле итеп бармаҡ остарына күтәргән, шуны ауыҙына килтереп, һалмаҡ ҡына уртлаған Рәғиҙәнең хәбәре лә ырамай. Әллә бар, әллә юҡ һин уның өсөн. Ну, төш! Керһә керә икән башҡа әллә ниндәй туҙға яҙмаған нәмәләр… Әммә ашыҡма, Сәфәр, ҡолағың ни ишетә?

– Нимә эсәһегеҙ, Сәфәр? – Рәғиҙә, әмер көтөп, иргә ҡарап алды. – Сәйме... һөтләпме?.. Әллә ҡәһүә яһайыммы?

– Иртән уның эскәне – ҡуйы мәтрүшкә сәйе. Ҡан баҫымы күтәрелеүенән дауа. Шуны яһап бир. Ә үлән шкафта… – тине Разия.

– Мәтрүшкә? – Ихлас ғәжәпһенде ҡатын. – Белеүемсә, ул давлениены баҫмай, тик иҙрәтә. Сирҙе спорт менән дауаларға кәрәк. Ана, саңғы кейһен дә урманға сығып китһен. Һауа саф, төлкө, ҡуян сабыша. Ауырыуының эҙе лә ҡалмаҫ… Иртән, минеңсә, ҡәһүә файҙалы. Ә мәтрүшкәне ир-аттың ғүмүмән ҡулланмауы хәйерле…

– Миңә кофе яһағыҙ шул! – тип үҙе лә һиҙмәйенсә ҡәтғи итеп һәм ашығып әйтте Сәфәр.

Разия Рәғиҙәнең мәтрүшкә хаҡындағы һүҙҙәренән ҡымтайып ҡалды, буғай:

– Имсе булғас, әйт инде, мәтрүшкә ир халҡына нишләп ярамай?

Рәғиҙә уның янына килеп, ҡолағына ниҙер бышылданы. Тегеһе күҙҙәрен шар итеп тыңлап торҙо ла шарҡылдап көлөп ебәрҙе.

– Ниндәй сер ул? Миңә лә әйтегеҙ, – тине Сәфәр.

– Күп белһәң – тиҙ ҡартайырһың, йәней!

Үҙе лә төшөндө ир. Көлкө әлеге лә баяғы мәтрүшкәнән сыҡҡан, шик юҡ. Кисен мунса алдына күҙ һалһа, серле үләндән елдәр иҫкәйне. Күңеле хушланып китте, ҡатынына нахаҡ бәлә яҡҡан даһа!

Дежур тигән һүҙ сыҡҡас, аңлағанһығыҙҙыр инде: Рысаевтар сиратлашып аш-һыу әҙерләйҙәр хәҙер. Был эшкә Разия Сәфәрҙе лә йәлеп итергә ынтылған ине. Йәнәһе, плитә янында ҡатындарға ғына сейләнергә тимәгән, ир-ат та дежур булып, ашарға әҙерләһен! Сәфәр биленә алъяпҡыс бәйләргә әҙер ине инде. Көлдөрҙө лә: «Ир-ат ҡаҙан аҫһа, фәрештә ҡанатын йәйеп тора»… Тик быны Рәғиҙә килештермәне:

– Ҡуйсы, Разия, иртүк тороп эшкә китәһебеҙ юҡ. Үҙебеҙгә лә эш самалы. Сәфәр әфәндене тәьминәтсе итәйек беҙ. Аҙыҡ-түлек артынан баҙарға барыр, магазинға йөрөр.

Күҙ теймәһен, өйҙәш ҡатын әлегә гел Сәфәр файҙаһына эш итә. Элек Разия биленә таянып, өҫтәл янына ҡунаҡлаған ирҙең йәнен игәне бит: «Артыңдан ҡыуалармы һуң һинең, ниңә шул саҡлы ҡабаланып ашайһың?.. Ҡойма, ауыҙың тишекме һуң? Йә, Алла, шәкәр ҡорто булһаң ла булырһың икән, шәшкең төбөнә ултырғанды йыуып бөтөрөп булмай». Тағын фәлән-фәсмәтән, билләһи, шул ҡаныҡыуҙарҙы ишетмәҫ өсөн, сынаяғыңды, сәйеңде тотоп, бүлмәңә ҡасырһың.

Ә хәҙер, өсәүләшеп бер өҫтәл тирәһенә теҙелешкәс, иргә ҡарата хужабикә бер йәмһеҙ һүҙ ырғытмай. Киреһенсә, теге йәки был ризыҡтың уңғанлығын

белешкән булып, Сәфәр тирәһендә бөтөрөлә: «Һурпаның тоҙо-боросо самалымы?.. Йәле, йәнем, билмәнде ҡабып ебәр, булғанмы? Иттең ҡайһыһын һалайым һиңә, Сәфәр, һимеҙенме, әллә майһыҙ еренме?» Ҡатын шулай алда сыйырсыҡ һымаҡ һайрай. Тик шуныһы ғына ҡараңғы: был һайрауҙар ҡасанға хәтле барыр?..

Сәфәр, дәү сумкаһын аҫып, үҙ вазифаһын үтәргә кереште – Ҡуштау баҙарына йүнәлде. Бында халыҡ сират тороп шыршы һатып ала, елкаға биҙәк, уйынсыҡтар һайлай ине… Ҡайһы арала Яңы йыл да килеп еткән, тип ихлас ғәжәпләнде ир. Былай булғас, мәшәҡәттәр өҫтәлә инде, байрам кәйефенә ойотҡо һалырға кәрәк.

Тәьминәтсе елкәһенә ҙур ҡупшы шыршы һалып өйгә килеп ингәс, ҡатындар ысынлап та шаҡ ҡатты. Рәғиҙә хатта балаларса ҡыуанып, ҡулдарын сәпәкәйләне.

– Ҡыш бабай! Елка, елка, беҙ һине һағынып көттөк йыл буйы… Тоғо ла бар!

– Тоғонда әллә нәмә юҡ инде. Кишер ҙә картуф. Бына һин беҙгә төлкө тундар, һыуһар бүректәр бүләк итһәң ине, Ҡыш бабай! – тип үҙенсә Разия ла көлдө.

– Ҡыҙыл ҡар яуғас, барыһы ла булыр, туташтар. Әлегә ергә ағы ғына төшә бит әле,– тип ир ҙә яуапһыҙ ҡалманы.

Шыршы байрамын бик шәп уҙғарҙы Рысаевтар. Сәғәт һуҡҡас, шампан шешәһенән бөкө лә атылды, бокалдар ҙа сыңланы. Телмәрҙәр ҙә ҡаланыҡыларҙан кәм булмағандыр… Ә бына битлектәр кейеп бейеүгә килгәндә, бындағы ҡатындар мутлығына берәү ҙә етмәҫ, моғайын.

– Сираттағы номер – бал-маскарад! – тип артистарса иғлан яһаны Разия, Сәфәр һәм күршенән ингән ҡунаҡ ир Вәхит тарафына ҡарап. – Ҡул сабып ҡаршылауығыҙҙы һорайым, хөрмәтле тамашасылар!

Дәртле көй ритмына бүлмәнән бейей-бейей төлкө менән бүре килеп сыҡты. Әй ҡыландылар, әй осондолар был януарҙар, моғайын тәндәрендә һуҙылмаған, тартылмаған еп ҡалмағандыр. Ирҙәрҙең көлә-көлә эстәре ҡатты. Тик төлкө кем дә, бүре кем? – быныһы Вәхит өсөн генә башватҡыс. Күлдәктәренә ҡарап, Сәфәр әллә ҡасан асыҡлаған инде: зәңгәргә аҡ һыҙыҡ төшкәнендә – Рәғиҙә, ә зәңгәр шифондағыһында – ҡатыны.

– Мин уларҙы арттары менән мейескә инһәләр ҙә танийым, – тип ебәрҙе Сәфәр, Вәхит менән рюмкаһын сәкәштереп.

Һәм, вальсҡа саҡырып музыка уйнай башлағас, һис шикләнеп торманы, бүрене бейергә саҡырҙы Сәфәр. Бүрене юҡҡа ғына ҡанһыҙ йыртҡыс тип әрләйҙәр. Ҡосаҡҡа нисек яйлы ята, көй аһәңенә яйлашып, бергә ниндәй ятышлы итеп бейейҙәр улар? Быны һүҙ менән аңлатып булмай, йырлап ҡына белдереп була: «*Ля-ля-ля-лилляу!*»

– Йәнем, һин нисек матур бөгөн. Нисек танһыҡ! – Шундай һүҙҙәр һөйләйһөйләй, тәнендә уйнаған ҡан ҡайнарлығына бирелеп, бүрене һаман ҡосағына ныҡыраҡ ҡыҫты Сәфәр.

Битлектәрен һалғас, ҡатындар йығылып көлдөләр. Разия тип ҡосҡаны Рәғиҙә булған икән… Күлдәктәрен алмашҡандар – ике төлкө!

Хәҙер инде Вәхит, рюмкаһын сәкәштерергә һуҙып, табындашына нәсихәт уҡый:

– Үҙеңде ҡатыныңдан аҡыллыраҡҡа һанаһаң, бөттөң инде, күрше, мәсхәрәгә генә ҡалаһың…

Әле яңыраҡ ҡына күктең етенсе ҡатына менеп хистәр тулҡынында елдергән ирҙе кинәт һағыш баҫты. Уның менән хозурланып вальс бейегән бүре, йәшлектәгеләй, ҡанды уйнатып алған. Уҫал, ихлас, ирекле урман йыртҡысы һымаҡ тәкәббер ҡыҙ-ҡырҡын да, ҡуйыныңа һыйынып, һине үҙ һәм яҡын итһә, егет йәненә тағын ни кәрәк инде? Эх, хәҙер шул йыуанысыңды көлкөгә алып, шарҡылдап көләләр икән, бөткән ғүмер. Үткән тойғолар дөмбөргә генә ҡалған. Байрамдар, кисәләр ҡарт йөрәкте үртәү генә шул…

7

Рәғиҙә әле тегеләй, әле былай Сәфәрҙең уйына йыш килеп керә…

Төштәге Рәғиҙә ҡиәфәтендәге алиһә тураһында һүҙ ҙә юҡ, ләкин өндәге экс-хужабикә лә күңел һиҙгерлеге, күрәҙәлеге менән таң ҡалдырҙы.

Бер көндө, залда диванға ултырып, Рәғиҙә альбом ҡарай.

– Разия, ҡара аттағы һүрәттә кем ул? – тип һорай ул, кухняла аш-һыу әҙерләгән дежурға өндәшеп.

– Әсәйем, әхирәт!

– Әсәйең? Бына камиллыҡ, исмаһам. Бында герой ҡиәфәте лә, фотограф оҫталығы ла нисек оҫта үрелгән. Рембранд картинаһы тиерһең! – Рәғиҙә, һөйләнә-һөйләнә, һаман һүрәткә һоҡлана һәм бер аҙҙан йәнә һорай. – Разия, әгәр мин ошонан картина эшләргә тырышһам, рөхсәтме?

– Ундай ҙа оҫталығың бармы?

– Институтта беҙгә һүрәтле сәнғәт тә уҡыттылар бит. Буяуға тотонғолайым. Һәр хәлдә ҡул аҫтында ҡәләм, бумала, киндер бар.

– Яһале, әхирәт!

Өҫтәл өҫтөндә йәһәт кенә мастерской һымаҡ нәмә әтмәләп, эшкә лә тотондо Рәғиҙә-рәссам. Бер көн уҙҙы, ике көн… Үҙе кухняла – киҙеү, әммә ҡулдарын сепрәккә һөртә-һөртә, ун-ун биш тапҡыр мольберты янына килде, ниҙер өҫтәне, нимәнелер үҙгәртте ул картинаһында. Ниһайәт, тантаналы мәл килеп етте, рәссам Сәфәр менән Разияны күргәҙмәгә саҡырҙы. Аһ, ысынлап та һоҡланғыс сәнғәт әҫәре был! Һыбай Ҡәмәриәнең зәңгәр күҙҙәре, йөҙөндә балҡыған йылмайыуы нисек шәп! Янындағы кешеләргә лә, йыраҡта йәйелеп ятҡан баҫыу киңлегенә лә ҡарап күңел халәтен белдерә һымаҡ ул. Бына-бына һөйөнөслө берәй һүҙ, йылы хәбәр еткерер һымаҡ өҫтөнә һырма, аяғына кирза итектәр кейгән колхоз бригадиры. Сәфәр яңы ғына иғтибар итте: ҡатын ҡулында сыбыртҡы-ҡамсы юҡ… Эйе, эйе, нәҡ ир хыялындағыса, ул һул ҡулына сәскә бәйләме, ә уңына – теҙген тотҡан, аҡ ромашҡаларҙы һәм ниндәйҙер зәңгәр сәскәләрҙе, моғайын, юлда килгәндә өҙгән булғандыр…

– Әсәйем! – тип бышылданы Разия һәм хисләнеп Рәғиҙә-рәссамды ҡосаҡлап алды. – Рәхмәт!

Рәғиҙә был һүрәте менән бөтә нәмәне үҙ урынына ҡуйҙы. Ваҡытты, замандьы, ынтылыштарҙы. Эйе, тик бөйөктө, яҡтыны, изгене генә алырға кәрәк. Ҡамсылар, рәнйеүҙәр, үпкәләр күмелеп ҡалһын! Ҡәйнәһенең илаһи һүрәтен күреп, Сәфәр кейәү күңелендә лә тыныслыҡ, йәм ҡалҡты. Кәрәкмәгән эске ҡаршылыҡтарҙан тамам арынып ҡуйҙы ул.

Әсәһенә ҡарап ҡыҙын ҡос, тигән, ти, ҡасандыр бер бәхетле кейәү…

Ә һуң Сәфәр ниндәй кейәү?

...Мәрхүм Ғиниәтулланың йыллығын Сәфәр фатирында үткәрҙеләр. Үҙ өйөндә Разия әсәһенең әле тәүге ихтыярын үтәй, шуға күрә ул был сараны

туған-тыумаса ҡәнәғәт ҡалырлыҡ итеп ойошторорға тырышты. Рысаевтар аҡсаларын ла, аяҡтарын да ҡыҙғанманылар. Аш-һыу мул һәм затлы итеп әҙерләнде, ҡунаҡтар ҙа күп йыйылды.

Һарытауҙағы мәсеттән саҡырылған салмалы, күркәм йөҙлө мулла абзый ысын бохар мәкәме менән уҡыған доғаһында мөьмин Ғиниәтулла Ғиндулла улы исемен өс-дүрт рәт телгә алып битен һыпырғас, мәрхүмде иҫләп, байтаҡ матур һүҙҙәр әйттеләр. Иң әүәл күҙ алдында яугир, герой булып баҫты ул. Булдыҡлылығы, малтабар булыуы маҡталды. Бала йәнле икәнлеге лә хәтергә төшөрөлдө. Был яҡлап Заһир атаһын күккә сөйҙө. «Атай беҙҙең өсөн йәнен дә ҡыҙғанманы, гел балалар өсөн йәшәне», – тип малай кеше хатта күҙ йәштәренә үк мансылды.

Мәрхүм атанан ҡалған мал-тыуар, аҫҡыстар өсөн рәхмәт уҡыу инде был, тип үҙенсә нарыҡланы быны Сәфәр. Туған-тыумаса, ҡунаҡтарҙы оҙатҡас, өҫтәлде, бүлмәне йыйыштырып байтаҡ ваҡыт үтте. Сәфәр хәлдән тайып диванға һуҙылды... Бер мәл күҙен асһа, залда ярым ҡараңғы, ә яҡты кухняла әсә менән ҡыҙ гәп ҡора.

– И, ҡыҙым, әйтһәң әйтерһең ауыр һүҙ, тик атайыңды бик үк яратып еткермәнем бит… – Һүҙҙәрен ишеткәс, кейәү кеше һиҫкәнеп китте, йоҡоһо тамам ҡасты.

– Улайһа, хөрмәт иткәнһеңдер, әсәй, – тип ҡыҙ ыңғайына һыпырырға тырышты, буғай. Сөнки атаһын үҙе бик ярата ине Разия.

– Хөрмәт? – Тауышта ҡырыҫлыҡ дөрләп китте. – Ғәмәле өсөн кешене яҡын итәһең. Ә был өҫтөмдән йөрөнө, ауылға рисауай яһаны, – тип әсә, элеккеләрен хәтерләп, ата кеше хаҡында байтаҡ ҡына күңел өшөткөс хәлдәрҙе лә тасуирланы.

– И, әсәйкәйем, күргәнһең икән һин!

– Булған инде, ҡыҙым, күрәсәк. Яуға оҙатҡан егетем бар ине лә бит, ҡайтманы… Ултырған ҡыҙ хәленә төшәһем килмәне шул, сыҡтым. Өмөт булған, күрәһең…

Сәфәр күргәндә, ҡайны кеше үҙе бик ҡыҙғаныс хәлдә ине. Бер нисә ҡат Ҡәмәриә хужабикә ябыҡ һәм сирҙән өшәнгән ҡартҡа тамаҡ ярып ҡысҡырғас, кейәү йортта кем баш булыуын шундуҡ аңлаған ине. Меҫкен ҡарт! Ниндәй генә ғәйептәр табып әрләмәне уны Пушкиндың «Балыҡсы һәм балыҡ тураһында»ғы әкиәтендәге нәфсеһе туймаҫ ҡарсыҡҡа оҡшаш Ҡәмәриә. Йәнәһе, ул ата хөрәсән, эштән ҡаса, йорт-ҡураға ҡул да тейҙермәй… Йәнәһе, ул шапшаҡ, өйгә бысраҡ ташый… Йәнәһе, атлаған һайын ашарға һорай, һис туйҙырып булмай был бирәнде…

Шулай, үҙ ваҡыты килеп еткәс, үтенә, бәғеренә төшкән иренән үс ҡандырыуы булдымы был? Ғиниәтулла һалдаттың ҡаһарманлығы аҫта ҡалып, үҙ рәнйеш, үпкәләре алға ҡалҡҡан икән, Ҡәмәриә ҡарсыҡ бик ҡара хәтерле кеше булып сыға түгелме һуң?

Рәғиҙә яһаған бригадир ҡатын һүрәте Сәфәрҙә был йәмһеҙ шиккә урын ҡалдырманы. Хәтерҙән юйылды, юғалды ҡамсылы Ҡәмәриә… Картиналағы йәш ҡатынға һоҡланып ҡарайһың да уйлайһың: ул, әлбиттә, ирен, балаларын, кейәүен һөймәйенсә булмаҫ. Һәм уның киләсәктәге кешеләр йөрәгенә һуҡмаҡ һалыр юлы ла ҡояшлы, матур булыр. Ана, күр, дала нисек киң, ә саптар ниндәй дәртле бит…

Сәфәр йәнә уйлай, тарихта һәм яҙмышта варианттар булмай, тиһәләр ҙә,

үткәндәрҙе хәтерләү юлдарын кем сикләгән? Рәғиҙә фаразы хәҙергеләргә, ҡыҙға, кейәүгә кәрәк. Мөхәббәт өсөн кәрәк ул. Боронғонан килгән мәғишәт* ҡануны бар бит. Әсәһенә ҡарап ҡыҙын ҡос!..

Йәнәшәһендәге Разия ла көндәлектә нисек кенә йөҙ һытмаһын, ҡаш йыйырмаһын, ул да һүрәттәге йәш әсә һымаҡ күңелдә балҡып торһон ине, тип теләк теләне Сәфәр.

Әй, Рәғиҙә, һиҙгер күңел, күрәҙәсе! Әй, һин яҡты күҙле рәссам! Сәфәрҙең һиңә күңелен түгәһе, кәңәш алаһы йәнә бер йөрәк яныуы бар бит әле.

Ир бик йыш беренсе тормош иптәше Луизаның үлем алдынан әйткән һүҙҙәрен хәтерләй:

– Сәфәр, ғәҙәт бар: ир тол ҡалһа, балдыҙына өйләнгән. Һин, зинһар, һеңлем Нурияға балаларым әсәһе булырға мөмкинлек бир! Ул риза булыр, әйттем... Аңла, Сәфәр, өйгә сит ҡатын индерһәң, оябыҙ таралыр. Йәш ҡатын үҙенекен ҡорор, балаларҙы ситләтер ул, үҙең дә икегә айырылырһың. Зинһар, һүҙемде тыңла, балдыҙыңа өйлән!

Луизаның был һүҙҙәре үтенес кенә түгел, васыят булғандыр инде. Әммә ҡырҡ биш йәшлек сибәр, таҙа һәм эштәре һәр яҡтан гөрләп барған иргә ул көтөлмәгәнсә сәйер, хатта хөрәфәт булып тойолдо. «Нимә, Сәфәр балдыҙҙан башҡа ла үҙен, ғаиләһен хөрмәт иткән ҡатын таба алмаҫмы? Ҡатын ғына түгел, бына тигән сибәр ҡыҙҙы ла ҡаратыр әле!»

Дөрөҫ, Нурия ла һис төшөп ҡалғандарҙан түгел. Холҡо яҡшы, эше ырамлы, больницала шәфҡәт туташы вазифаһын башҡара. Сибәрлеккә апайынан да сибәрерәк, бишме-алтымы йәшкә кесе бит. Айнур ҙа, Лиана ла бик яраттылар үҙен, гел итәгенә уралып йөрөйҙәр. Тик бер нәмә генә күңелен ҡырҙы Сәфәрҙең: балдыҙ сатан ине. Йәнәшәһендә өйрәк һымаҡ ян-яҡҡа сайҡалған-янтайған ҡатын затын күҙ алдына килтереп сирҡанды. Апаһын ерләгәс, бер килде балдыҙ, ике килде, өс... Өс килеүендә лә еңдәрен һыҙғанып өйҙө йыйыштырҙы, йыйылған керҙәрҙе йыуҙы, тәмле-тәмле ризыҡтар бешерҙе. Икеләнәһе юҡ: еҙнәнән һүҙ, тәҡдим яһалһа, мәйет сыҡҡан моңһоу өйҙө йәмләй инде Нурия, йәмләй... Мәгәр әллә ҡайғыға, әллә уйға батҡан Сәфәрҙән мәрхүмә теләген раҫлап бер кәлимә һүҙ сыҡманы. Балдыҙ ғәрләнде, буғай. Шунан һуң, балалар бик көтһәләр ҙә, ул был өйгә аяҡ баҫманы. Телефон аша ғына хәл белешкеләне лә тора-бара тамам тынды Нурия. Тол ир ҙә был хәлгә артыҡ көйөнмәне, шикелле... Тик бына хәҙер уны үкенеү хистәре биләй. Мәрхүмә фаразлағандар раҫ килә. Фатирҙы һатты, оя таралды. Лиана кеүек арттан өлөш, мираҫ даулап килмәһендәр тип, алған йортон йәш ҡатыны исеменә яҙҙырҙы. Был ояла ла бәхетте әллә таба, әллә юҡ – был да ҡараңғы. Юранылар бит! Үткәндәре хаҡында тегеһен-быныһын уйлап бәргеләнеүе шулай уҡ хаҡ. Яна, яна инде йөрәк!

Луизаның һуңғы сәғәттәрҙә бәғеренән һығылып сыҡҡан васыятын аяҡ аҫтына һалып тапап, Сәфәр үҙ өҫтөнә бик ҙур гонаһ алманымы икән? Шул шиктәргә лә берәй яуап тап әле һин, Рәғиҙә! Үрһәләнгән күңелде һүҙең йә иһә буяуың менән имлә әле, берәр өмөтлө йүнәлешкә бор әле һин, изге күрәҙәсе!

Сәфәр ул көндө һоҡланып, тулҡынланып, портретты ҡараны, ә үҙенең хисһән күңелендә ана шундай тынғыһыҙ уйҙар бөтөрөлдө. Ысын рәссам кеше күңеленә үтеп инә, уны яулай белә шул ул.

*Мәғишәт — тормош.*

Ир Рәғиҙә һүрәт яһаған киндерҙе матур ағас рамға ҡуйҙы ла түргә элде. Картинанан өй эсе тағын да яҡтырып, матурланып китте. Әсәләр ҙә, рухтары ла, түрҙә һәм йылмайыулы ҡиәфәттә булырға тейештәр шул. Әсә нурынан өйҙәгеләрҙең йәне ағара, сафлана бит.

8

Зөләйха төшөнә ингән Йософ һымаҡ, түшәктәге Сәфәр ҡаршыһына Рәғиҙә алиһә йәнә килде. Һаман алһыу эске күлдәктән, һынсыл ҡараған тынғыһыҙ, зирәк күҙҙәрендәге кинәйә лә шул уҡ. Ир, алдындағы гүзәллектән хисләнеп, ҡулдарын һуҙҙы, ҡатын да серлерәк итеп йылмая төштө.

– Мәтрүшкә эсмәйһең инде хәҙер. Дәртең уяндымы? Тик минең менән йыуанма, Сәфәр. Мин – рух. Мине ҡосаҡларға ла, һөйөргә лә ярамай…

– Рух, тиһеңме? Улайһа, ҡанатлы фәрештә булып ос, күңел аҙҙырып йөрөмә. Үткәндә лә һорарға йыйынған инем, Рәғиҙә булып янға килеүеңде нисек аңларға?

– Аптырама, Сәфәр! Рәғиҙә һинең өйҙәшең. Һеҙ бит бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәйһегеҙ. Күҙҙәр туҡтауһыҙ осрашҡас, йәндәр ҙә яҡынаялыр. Һин, ғалим кеше, беләһеңдер, күҙҙе, йән көҙгөһө, тиҙәр. Күҙҙәр йәнгә телдән күберәк һөйләйҙәр бит улар. Шулай булғас, йәндәрҙең, көндәгеһен көндә, төндәгеһен төндә барлап, аралашаһы, бүлешәһе нәмәләре күптер.

– Беҙ ысын Рәғиҙә менән серләшеп йөрөйбөҙмө инде? Һүҙһеҙ генә аңлашабыҙмы?

– Эйе. Унан тағын бер сер бар: рухтар әҙәмдең үҙ күргән, хөрмәт иткән кешеһенә әүерелеп, уның ҡаршыһына килергә яраталар. Белмәйҙер тиһең быңа, күҙ текәгәнең Рәғиҙә бит. Уның маңлайы аҡ, сәстәре ҡара бөҙрә, күҙҙәре йәшерен генә һынап ҡарайҙар, имеш. Ҡайҙан килеп сыҡҡан был ауылға аҙашҡан әртистәй гүзәл зат, йәнәһе! Яңы йыл кисендә үҙеңдең урлап Рәғиҙәне ҡыҫып ҡосаҡлауҙарыңды оноттоңмо? Мин һинең янға кем булып киләйем тағын?

– Үҙең яратырға ҡушмайһың, үҙең киләһең…

– Беҙ йәндәрҙе ағартабыҙ, сафландырабыҙ.

– Минең йән ҡарайғанмы? Бысраҡмы?

– Йәмһеҙ кешеләрҙән, ҡара уйҙарҙан, низағтарҙан әллә ниндәй саф йәндәр ҙә керләнә. Йәнде гел таҙартып, сафландырып торорға кәрәк… Үҙең һораның, ә мин әйтәм: мәрхүмә Луиза рухына доға ҡылдыраһыңмы? Ҡәберендә сәскәләр үҫтерәһеңме? Ҡайғыларыңды һөйләп, уның баш осонда берәй тапҡыр йәш ҡойғаның бармы, Сәфәр? Илаһаң, йәнең йыуылып, күңелең сафланыр ине. Эшләнеңме шуларҙы, ирекәй?

– Юҡ бит…

– Ай-һай, Сәфәр! Һин бит ҡатыныңдың васыятын да тотманың. Ә, беләһеңме, ул һиңә хәҙер рәнйеп ята. Үлгәс күмеп ҡуйҙым да Луизанан мәңгегә айырылдым, тиһеңме? Юҡ, уның йәне бик йыш ғәзиздәре, йөрәк пәрәләре булып ерҙә ҡалған Айнур, Лианаһы менән хәбәрләшә. Улар аша һинән үс ала, белдеңме? Әрүах рухын ҡәҙерләп йәшәгән булһаң, балаларың да һине хөрмәт итер, үҙең дә саф йәнле ир, ата булып йәшәр инең. Әй, Сәфәр!

– Беләм, хаталы кеше мин. Тик миңә әйт, яңылышты нисек төҙәтергә, йәнде нисек ағартырға?

– Яратырға кәрәк, Сәфәр! Балаларыңды, ҡатыныңды, кешеләрҙе.

– Тик мин аңламайым: яратыуҙан, мөхәббәттән йән ни рәүешле сафлана һуң? Һөйөүҙе төрлөсә аңлаусылар бар ҙаһа.

– Мөхәббәт – саф хистәр, шәфҡәт, мәрхәмәт ул. Йән име – мөхәббәттә! Бәхетең дә әллә ҡайҙа түгел, ҡатының Разияға булған һөйөүҙән, йөрәк ҡайнарлығынан тора, Сәфәр. Ояңды һаҡла!

Был төшөнән шик-шөбһәләргә батманы. Уны тик яҡшыға, яҡтыға юраны ир.

**9**

Ниһайәт, ҡыйыҡтарҙан тәүге тамсылар тама башланы. Йыраҡтағы урманға зәңгәр монар төштө. Һауала йәш бөрө ҡайыры еҫе аңҡыны, сәпсектәр күңеллерәк сырҡылдашты, ҡупшы турғайҙар, йән эйәләрен ҡышҡы йоҡонан уятырға теләгәндәй, нығыраҡ һыҙғырҙы: «Йәмле яҙ килә, яҙ, туғандар!»

Сәфәр бүреген ҡулына тотоп, башынан еңелсә пар бөркөтөп баҙарҙан ҡайтты ла сумкаһындағы тауарҙарын бушата-бушата һөйләнде:

– Бәрәңге 15 һумға менгән, һуған 25, кишер 30 һум. Һарымһаҡты инде берәр башлап һаталар, 10 тәңкә тора. Беҙҙең пенсиялар баҙарға дүрт-биш тапҡыр әйләнергә генә, туташтар. Хәҙергә билғауҙарҙы нығыраҡ быуырбыҙ, ә яҙҙан үҙ фазендабыҙ булырға тейеш!

– Фазендаңда бил бөгөргә Изаураларың бармы һуң? – тип Бразилия сериалын иҫкә төшөрөп көлдө Разия. Мин, мәҫәлән, ер ҡорто булырға теләмәйем. Ҡол түгел, ә бисә! Минең һиңә бисә булыуымды онотмағанһыңдыр бит, фермер? – Разия йәнә шарҡылданы.

Сәфәр белә инде: ҡатыны ер кешеһе түгел. Ғүмер буйы официант, ресторан администраторы булған Разия баҡсаға ла ҡыҙыныр һәм саф урман, ҡыр һауаһы һулар өсөн генә сыға ине.

Ә Рәғиҙә, берҙән, нәҙберек зат – уҡытыусы, икенсенән, бөгөн бында, ә иртәгә тегендә, тигәндәй, уға ышаныс юҡ. Баҡса эшкәртеү хәстәре Сәфәр ҡулына ҡала инде. Тимәк, бөгөндән әҙерләнергә, һабанда һынатмаҫҡа кәрәк.

– И-и,– тип һуҙҙы Рәғиҙә, уның уйҙарын уҡыған һымаҡ. – Был ҡул яҫыһы ерҙә ҡаҙынып ҡына ризыҡ мәсьәләһен хәл итеп булыр микән, Сәфәр ҡорҙаш? Уның бит әле ите лә, майы ла кәрәк. Бына беҙ үҙебеҙгә берәр бизнес тапһаҡ, йүнәтһәк икән? – Рәғиҙәнең күрән күҙҙәрендә хыял ғәләмәте сағылды. – Беҙ өсөбөҙ ҙә зыялы, яуаплылыҡ бар. Тәртип бишле…

– Эсмәйбеҙ, тартмайбыҙ, уңға-һулға ҡайырмайбыҙ, – тип Рәғиҙәгә теҙеп китте Разия. – Тик ниндәй бизнесмен сыҡһын пенсионер хәйерселәрҙән? Магазин асырға бол юҡ. Ғаилә цехы яһап, ыштан, бейәләй тегер инек, теген машинабыҙ юҡ. Пирожки бешереп һатырға сыҡыр инек, ҡайҙа беҙҙең мейесебеҙ, һата торған еребеҙ?

– Һин шағирә икән, Разия! – тип ихлас ғәжәпләнде Рәғиҙә. – Бына тигән рифма ҡойҙоң. Әллә яҙып ҡарайһыңмы?

– Башыңа төшһә, башмаҡсы ла булырһың, – тип төртмәле һөйләм рәүешен дауам итте Разия. – Уйыны-ысыны: беҙгә йән аҫрар өсөн ниҙер уйларға кәрәк, уландар!

Ысынлап та, алдағы мәғишәтте ҡороу – һәр кемде борсоған мәсьәлә. Ҡыш өңдәге айыу һымаҡ өйҙә яттылар, инде яҙ, уяныр ваҡыт еткән. Әкиәттәге

тирмә-тирмәкәйҙекеләр күмәкләшеп үҙҙәренә килгән бәлә-ҡазаларҙы еңәләр ҙә бит, баҙар заманындағы пенсионерҙарға нисек көнитмеште көйләп ебәрергә һуң? Үҫтергән улан бар ҙа бит. Тик, ата-әсәгә ярҙам итеү урынына, быларҙыҡы, саҙаҡаға ымһынған мулла-мәзин һымаҡ, үҙҙәре ҡул һуҙырға ғына торалар шул. Һаман бир ҙә бир…

Сәфәрҙең саңғыла йөрөп, арып-талып сәхрәнән ҡайтып килеше ине. Үҙҙәренең ҡапҡа төбөнә үк моронон килтереп терәгән зиннәтле ят ҡыҙыл машинаны күреп, ирҙең йөрәге «жыу» итеп китте: «Килгәндәр, эҙләп тапҡандар… Әммә ҡайһы балаһы? Айнурымы, Лианаһымы?» Ҡыҙының аҡса һорап янъял ҡуптарыуы, матди яҡтан ҡыҫыҡланырға мәжбүр итеүе атаны бик рәнйеткән ине. Шуға ул балалары менән йүнләп һаубуллашманы, күсенешергә лә ярҙам һораманы. Һәм бына, йөҙөн йыртып, ҡайһыһылыр килгән, буғай. Һәр хәлдә өй ҡотларға түгелдер. Үҙенә ни әйтһәләр ҙә түҙергә кәрәк. Инде үгәй тип, Разияға таш ырғыта башлаһалар, ауыҙҙарын томаларлыҡ һүҙҙәр кеҫәлә әҙер торһон…

Ата кеше эсендә тулышҡан шик-шөбһәләрен йыйнап, аяғындағы саңғыларын һалды, өҫтөн ҡарҙан ҡаҡты һәм йөрәге даһырлап типкән хәлдә ишек тотҡаһына үрелде… Залда, Рәғиҙә ҡаршыһында, өҫтәл артында йәйелеп, татлы еҫтәр таратып, кофе эсеп торған ике йәш ирҙе күргәс, Сәфәрҙең өҫтөнән тау төшкәндәй булды, тауыш бирҙе:

– Һәй, ҡунаҡтар бар икән!

Өҫтөнә затлы зәңгәрһыу костюм кейгән, муйынына килешле бөрсөклө галстук бәйләгән ир, йәһәт кенә урынынан тороп, Сәфәргә ҡаршы атланы. «Рәғиҙә малайы…» – тип уйлап алды ир. Тик быныҡ күҙҙәре, әсәһенекенә оҡшап һоро булһалар ҙа, төбәп, бәбәккә үтеп ҡарайҙар.

– Ағай, әсәйем өсөн юҡҡа борсолоп торғанбыҙ. Ҡалай шәп йәшәйһегеҙ икән бит. – Һәм ул асыҡ йылмайып ҡулын һуҙҙы – Юлай!

Сәфәр, йомшаҡ, һалҡынса ҡулды ҡыҫҡанда, ирҙең күҙгә бәрелеп торған тағын бер үҙенсәлегенә диҡҡәт итте: оҙон сәстәре арттан төйнәп ҡуйылған ине. «Ай-һай, кәттә Рәғиҙә уланы!»

Табындағылар хужа ҡайтҡансы уҡ һөйләшәһен һөйләшкән булғандар, күрәһең, өҫтәл артынан ҡуҙғалдылар.

– Ярай, әсәй, беҙгә китергә ваҡыт. Инде һүҙеңде әйт: буламы-юҡмы? –тип әсәһенә текәлде Юлай.

– Барығыҙ, һауа һулап керегеҙ әле. Уйлашайым, – тине әсә һәм, тегеләр өҫ кейемдәрен бөркәнеп тышҡа сыҡҡас, Сәфәрҙе, Разияны үҙ янына саҡырып алды:

– Кәңәш бирегеҙ, зинһар. Аҡса һорап килгән бит, нишләйем?

Рысаевтар өйҙәш ҡатын кеҫәһендә хәтһеҙ аҡса ятыуын һәм шуға арҡаланып Рәғиҙәнең яҡын-тирәнән ябай ғына булһа ла өй табырға өмөтләнеүен беләләр ине. Ҡатын үҙе әйткәнсә, малайға биргәндең ҡалдығы ине был… Инде бына ул тигәнең ҡалған өлөшкә лә ҡулын һонамы? Мәсьәләнең ифрат ҡатмарлы булыуы күренеп, һиҙелеп тора ине. Шуға күрә Сәфәр ҡайһы яҡҡа ауышырға ла белмәне:

– Аҡса һинеке инде, Рәғиҙә. Үҙең хәл ит, – бер аҙ башын тырнап торғас, өҫтәп ҡуйҙы: – Ә нимәгә һорай һуң? Хәжәте ниҙә?

– Машиналар менән сауҙа асмаҡсы. Стартовый капиталым етмәй, ти.

Һүҙгә Разия ла ҡушылды:

– Автомобилдәр сауҙаһын бик уңышлы тиҙәр бит. Бәлки, тиҙ арала байып, бурысын ҡайтарыр малайың. Ана бит, компаньоны ла ипле генә күренә.

– Уның дуҫ-иштәре ҡарар күҙгә һәр саҡ һәйбәт тә ул… – тине Рәғиҙә төшөнкө генә.

– Элек улың ниндәй кәсептә булды һуң? – тип ҡыҙыҡһынды Сәфәр.

– Һыра-хәмер магазины тотҡан ине…

– Шунда сәрхүшләндеме, эштәре сыуалдымы?– тип үҙе лә һиҙмәйенсә ысҡындырҙы ир.

– Сәфәр, һиңә көләргә генә булһын! – тип уҫал ҡараш ташланы уға Разия.

Әммә, ни ғәжәп, Сәфәрҙең һүҙҙәренә һис үпкә әҫәре һиҙҙермәне Рәғиҙә. Киреһенсә, ир яғына ҡайырҙы:

– Эйе шул, үҙем дә шунан бик ҡурҡам. Алай-былай боҙолоп ҡуймаһын инде… Шул шөғөлөн алмаштырһын ине, тим.

– Улайһа, әхирәткәйем, Юлайға аҡсаны бирәһең инде һин. Автомобиль тирәһендә сәрхүштәргә урын юҡ, унда айыҡ әҙәмдәр генә йөрөй,– тип үҙенсә нәтижә яһап ҡуйҙы Разия. Шуның менән ғаилә кәңәшенә лә нөктә ҡуйылды. Рәғиҙә, өй һатыуҙан килгән бар аҡсаһын улына тоттороп, ҡул болғап һәм аратирә йәшле күҙҙәрен һөрткөләп, зиннәтле ҡыҙыл машинаны Һарытау тарафына оҙатып ҡалды. Юлай нәҡ шундай тәтәй машиналарҙы йыраҡ Италиянан ҡайтартып, бындағы аҡса янсыҡтарына һатырға йыйына икән. Ниәте асыҡ та бит, баҙары көйлө барырмы һуң? Өйҙәш ҡатын малайы аҡсаны шыма ғына үҙ кеҫәһенә бушатып киткәс, әсәне генә түгел, Сәфәр менән Разияны ла хәүеф баҫты. Өй йүнәтеү планын елгә осороп, барыһын да төп башына ултыртып ҡуймаҫмы был тәтәй улан?

Март аҙағының матур, ҡояшлы иртәһендә Рәғиҙә, хеҙмәттәштәрен һағынып, Ҡуштау мәктәбенә китте. Әй, нескәрҙе, әй, хисләнде ул элекке эш урынын, әхирәттәрен, балаларҙы күреп. Булған бит йәшәүенең мәғәнәле көндәре, сәғәттәре! Ә ваҡытында ҡәҙерен беленмәгән, арыу-талыу, ғәйрәт ҡайтыу, үҙ-ара асыуланышыуҙар табып, мәктәп мәлен юҡҡа ҡаралтҡан икән Рәғиҙә.

Мәктәп тупһаһынан төшөп, ун биш-егерме аҙым яһамағандыр, уның йәнәшәһенә еңел йәшкелт машина яҡынлашып, бер нисә рәт ҡысҡыртып алды. Бына ишек тә асылды, ҡаршыһына урта йәштәрҙәге һөйкөмлө ир-ат атланы.

– Рәғиҙә Мөбәрәковна! Мине таныйһығыҙмы? – Тантаналы көр тауыш эйәһе, тиҙерәк үҙен танытырға теләгәндәй, бүркен һалды, күҙгә аҡ сикә сәстәре салынып ҡалды. Бас… Хорҙағы иң күркәм тауыш ине. Кем булыр был?

– Рәғиҙә апай…

– Һәй, Фәрүәз! – Мөғәллимә, яратып, танышының иңенә ҡағылды. – Урыҫ әйтмешләй, нисә ҡыш, нисә йәй. Осрашыуыбыҙға бик шатмын, Әйүпов.

– Мин, һеҙҙе эҙләп, үткән аҙнала мәктәпкә ингән инем, Рәғиҙә апай, нишләптер үҙегеҙҙе юғалтҡандар унда. Бына, килгәнегеҙҙе ишеткәс, килеп еттем. Уҡытыусыһын кем һағынмай? Шуның өҫтәүенә, Рәғиҙә Мөбәрәковна, бик ҙур үтенес бар һеҙгә. – Фәрүәз машина ишеген асты. – Әйҙәгеҙ, ултырып һөйләшәйек, булмаһа!

Кабинаға инеп урынлашҡас, Фәрүәз мәктәптән һуңғы тормош бороloштарын һанап үтте. Хәҙер районда ауыл хужалығы идараһы башлығы икән.

– Бына хакимиәттә юбилейымды үткәрергә әҙерләнәләр. Ярты быуат йәшәлгән. Үҙ йәшемдән үҙем ҡурҡам. Ҡартаяһы килмәй. Күңел һаман мәктәптәгесә, сәхнәләргә сығып йырлайһы килә.

– Әйе, һиндә тауыш бар. Сәнғәт институтына кит, тинем дә бит, тыңламаның.

– Әй, Рәғиҙә Мөбәрәковна, йыр дәрестәрен нисек матур үткәрә инегеҙ. Һеҙ ҡуйған ул концерттарҙың, йәшлек хыялдары менән ҡушылып, күңелдә сыңлауы… Онотоп булмай, билләһи, әле быныһы, әле тегеһе көй булып ҡалҡа. Мәктәп бит районда ғына түгел, Һарытау смотрында беренсе урынды алып ҡайтты. Һеҙҙең арҡала! Бөгөн шул кешенең әдрисен дә белгән әҙәм юҡ. Ну, заман!

– Заман башҡа, дөрөҫ, Фәрүәз. Модернизацияны математика, физика, химия менән яһайҙар бит. Әҙәбиәт, сәнғәт, гуманитар өлкә бала ҡаршыһында ла тамам әһәмиәтен юғалтҡан. Йән камиллығы, күңел матурлығы күптәр өсөн ҡыҫыр хәсрәт хәҙер.

– Бына, бына, Рәғиҙә Мөбәрәковна, һеҙҙең юғалыуҙы мин дә шунан күрәм. Тик замана сиренә бирешмәҫкә кәрәк. Күңелем дә тирә-йүндәге хәлдәрҙән разый түгел. Бына, юбилей, тинем. Әле бөгөн генә, илле йәшеңә нимә алып киләйек, атмы, әллә һыйыр түшкәһе ярармы, тип урындан шылтыраттылар. Бер танышым сер итеп әйтте: миңә уҡалы сапан тегеп яталар, ти. Бер нисә хужалыҡтың, йыйылышып, техника һатып алырға ниәтләнеүен дә беләм. Спорт мотоциклы, буғай… Былай булһа, Рәғиҙә апай, мине бит «Поле чудес»тағы Якубовичҡа әйләндерәләр. Юбилей үткәреүҙе ҡуштандар, ялағайҙар ҡулына тапшыраһы килмәй. Һеҙҙе эҙләп килеүем дә шуға.

– Бик яҡшы, бүләк алыу – һөйөнөс бит. Ғәҙел булһа, бигерәк тә… – Рәғиҙә көлөп ҡуйҙы. – Бына йүләр, бүләкте кем кире ҡаға? Һин дә шатланып ҡабул ит!

– Аңламанығыҙ мине, Рәғиҙә Мөбәрәковна! – Ирҙең тауышында үпкә сағылып китте. – Байрамымды бүләк йыйыуға әйләндермәҫ өсөн, хәлемде һеҙгә һөйләйем бит. Хәҙер бар хеҙмәткәрҙе ришүәтсе, дәүләт аҡсаһын урлаусы, алдаҡсы йә иһә коррупционер итеп күрәләр. Гәзит уҡырға ҡурҡыта. Кино ҡарайһы килмәй, телевидение йәнгә тейә. Чиновник халыҡ алдында жулик һәм ҡараҡ хәҙер. Ә минең бындай ҡиәфәткә кереһем килмәй, Рәғиҙә апай. Сөнки мин намыҫлы һәм үҙ эшемдә яуаплылыҡ тойған хеҙмәткәр. Бына шул! Байрам яһап мине хөрмәтләйҙәр икән, бик яҡшы, рәхмәт, тик күңелде ат, һыйыр, сапан, мотоцикл биреп йыуатырға ынтылмаһындар. Аҡсаға ла мохтаж түгелмен. Юбилярҙы башҡаса ла ҙурлап, хөрмәтләп булалыр бит?

– Ә, бына мин һине аңланым, Фәрүәз, яһаҡ йыйған Мамай хан кеүек, тирмә түренә ултырып бүләк алыу һине түбәнһетә: «Йә, кенәз, һин миңә нимә килтерҙең, нисектәр итеп мәҙхиә уҡырһың беҙгә?» Шулаймы?

– Белмәйем, Мамайҙан ҡалғанмы, әллә берсә ҡамсы һелтәп, берсә пәрәник биреп идара иткән Сталинданмы, тик илдәге бер сир инде, Рәғиҙә апай.

– Сирен сир, әммә ялағайҙар һәм ҡуштандар барҙа түрә ултырған ерҙә аҡса, мал бүләк итешеүҙе туҡтатып буламы һуң? Ағымға ҡаршы бараһың, Фәрүәз…

– Рәғиҙә Мөбәрәковна, фәлсәфәгә батмайыҡ, йә сығып булмаҫ, әйҙә, минең юбилей кисәһен ойоштороуҙы үҙ өҫтөгөҙгә алығыҙ әле һеҙ? Бының формаль

яғын хакимиәт менән килешеп, үҙем хәл итермен. Ә һеҙ кисәнең планын ҡороғоҙ. Үҙегеҙсә, нисек теләйһегеҙ шулай. Мин матур кисә үткәреүегеҙгә ышанам. Һеҙ бит көйҙә, йырҙа, һүҙҙә яһалмалыҡты бик тиҙ тоттоғоҙ. Уҡыусыларығыҙҙағы дөрөҫлөктө йә иһә ялғанды ла үтәләй күрә инегеҙ. Беҙҙе кәмселектәрҙән аралап, гел ғәҙеллеккә, матурлыҡҡа әйҙәнегеҙ ҙаһә! Шуның өсөн һеҙҙе эҙләйем дә бит. Тотонһағыҙ, юбилей кисәһе залда ултырған һәр ҡунаҡ өсөн йән, рух байрамына әүереләсәк, Рәғиҙә апай!

– Ҡыҙык, бик ҡыҙыҡ тәҡдим был, ҡустым! Кеше менән аралашыу үҙемә лә бик кәрәк. Юғиһә, ярға ташланған балыҡ хәлендә апайың. Ярар, ни булһа шул булыр, мин риза, Фәрүәз!

Рәғиҙә йортҡа бик һөйөнөп ҡайтып инде. Хәйер, Рысаевтарҙың береһе тәҙрәнән, икенсеһе ихатанан өйҙәште яҡшы машинала олпат ир-ат килтереүен күреп ҡалды. «Үҙенә тәҡдим яһаусы бар микән әллә? – Разияның күңеле ҡытыҡланып ҡуйҙы. – Алып китһәләр, урынлашһа, бик шәп булыр ине…»

– Уҡыусым, Фәрүәз Зиннәтович, – тине Рәғиҙә үҙенә ҡыҙыҡһынып төбәлгән ир менән ҡатындың ҡараштарына яуап төҫөндә. – Районда ауыл хужалығы идараһы начальнигы. Миңә үтенесе бар, моғайын, һеҙ ҙә унан ситтә ҡалмаҫһығыҙ әле.

Уҡытыусы ҡатын шаҡтай тәфсилләп Фәрүәз менән ҡорған ниәттәрен һөйләп биргәс, ысынлап та, Рысаевтар юбилей кисәһен ойошторорға ярҙам итергә булдылар. Кем нимә башҡарасағы асыҡланды. Разия рәсми табындарҙа ашһыу өҫтәле әҙерләү, көйләү һәм ҡунаҡтарҙы һыйлау эшендә әллә ҡасан аҙау ярған бисә, бына яңы шарттарҙа үҙ маһирлығын күрһәтһен…

Сәфәр ниндәй эш башҡарыр, тигәс, аптырашып ҡалдылар, сөнки юбилейға кәрәкле әйберҙе ташырға тәьминәтсе кәрәкмәй. Картуф, кишерен, итен-майын унан башҡа ла әҙерләйҙәр. Сумка аҫып баҙарға бараһы юҡ. Бейей ҙә, йырлай ҙа белмәй беҙҙең егетебеҙ…

– Китап, ҡағыҙ-ҡәләм менән донъяһын түңәрәкләне инде. Кеше ҡаршыһына сығыр бер нәмәһе юҡ уның, – Разияның тауышында ирҙәренән зарланыусы ҡатындар һағышы һиҙелде.

– Бынағайыш! – тине Рәғиҙә, Сәфәрҙе үртәп. – Беҙҙең Сәфәр Раянович вузда лекция уҡыған кеше ләһә! Уны кисәне алып барыусы итәрбеҙ. Тамада!

Ысынлап та, тауышы бәрхәттәй, яғымлы, буй-һыны ла төҙ, Хоҙайға шөкөр, ҡайһы бер ҡорһаҡ шәрифтәрен үҫтергән пенсионерҙар кеүек, «бых-бых» килмәй. Бына тигән конферансье йә иһә, Рәғиҙә әйткәнсә, тамада булыр. Дөрөҫ, Сәфәр Раянович кешеләр менән мөғәмәләлә ҡайһы саҡ ҡаушап ҡала, тапҡырлыҡ етешмәй, сөнки тел менән түгел, аҡылы менән уйлай ул. Әммә ҡунаҡтар алдында самаһын юғалтып, оятһыҙ тел биҫтәһенә әйләнгән йылғыр тамаданы ла мәжлес ҡайһы саҡ өнәмәй бит. Сәфәр Раянович залды зыялы ҡиәфәте, әҙәплелеге һәм эскерһеҙ мөғәмәләһе менән йәлеп итер…

Ә Рәғиҙә вазифаһына килгәндә, һөйләп тораһы ла юҡ, райондың мәҙәниәт һарайында үтәсәк кисәгә – баш та түш, режиссер, композитор, дирижер. Кисә программаһын төҙөүҙән башлап сығыш яһаусылар, йырсылар, бейеүселәр, нәфис һүҙ оҫталарына саҡлы залды үҙҙәренә нисек йәлеп итәсәктәрен алдан күрергә тейеш ул. Бөтөнөһөн тотош үҙ күңелең аша үткәрмәһәң, тулҡынландырғыс төп идея менән һуғармаһаң, ай-һай, кисә тигәнең килеп сығырмы? Әйтәһе юҡ, Рәғиҙә Мөбәрәковна башлаған, эш Рысаевтарҙы ғына борсоманы, ул, Туҡай шүрәлеһе кеүек, әллә кемдәрҙе ҡытыҡлай башланы. Ҡуштау

хакимиәте коридорында, мөйөштәрҙә нескә билле, ҡупшы сәсле сәркәтиптәр, тегенән-бынан килгән эшлекле ағайҙар, хатта түңәрәк ҡорһаҡлы замдар ҙа гәп һаттылар.

– Ишеттеңме, Фәрүәз Зиннәтович юбилейын Хапугин командаһынан башҡа үткәрә. Бер үк сценарий, дежур мәҙхиәләр, тип баш тартҡан икән. Беҙҙең администратор ҡара көйөп йөрөй. Күрһәң, ниңә бының балтаһы һыуға төшкән, тип аптырама, серҙәш!

– Ҡарале, дөрөҫмө ул? Беҙҙең ер башлығының илле йәшен Һарытауҙан килгән профессормы, доцентмы шунда, короче, бер спец ойоштора, тиме?

– Һай, баш ҡатырмағыҙ инде, егеттәр! Юбилей, – күпме төрләндерһәң дә, бер балыҡ башы. Йәғни абзыйҙарҙың беҙҙең ише эш кешеһенә, бына, брат, бүләктәр бирәбеҙ, һине маҡтайбыҙ, һауа шарттары үҙгәреп, климат алмашынғансы, беҙ һаман бер тәртәлә, ҡәҙерҙе бел, тигән һүҙҙәре ул, белдегеҙме?

– Шоу-юбилей?! Ниткән модернизация тағын? Ваҡыт табып, барып күрергә кәрәк әле. Списокка мине лә индерерһең инде һин, туған!

**10**

Ниһайәт, Ҡуштау элитаһы ҡыбырсып көткән көн дә килеп етте. Апрелдең ун дүртенсе кисендә тыуған икән Фәрүәз Зиннәт улы. Мәҙәниәт һарайының ҡунаҡтар менән шығрым тулған ҙур бер залындағы шаршауҙы нәҡ сәғәте-минутында асып ебәрҙеләр. Өҫтәл артында гәп ҡорған ҡунаҡтар сәхнәлә теләһә кемде – алып барыусыны, йырсыны, шағирҙы йә иһә берәй әкиәт, миф персонажын күрергә әҙер инеләр. Әммә айҙың ун дүртенсе кисе кеүек йылмайып, балҡып Фәрүәз әфәнде үҙе килеп сыҡмаһынмы? Собханалла! Өҫтөндәге зәңгәрһыу джинсы күлдәк-салбар уны нисек йәш, һомғол итә… Ул да булмай, музыка уйнап ебәрҙеләр һәм залды көр, яғымлы бас биләй барҙы:

*Тыуған төбәк – иргә терәк,*
*Йырҙан йәшәрә йөрәк…*

Был залдың Татарстан, Башҡортостан тарафтарынан килгән байтаҡ йырсыларҙы тыңлағаны бар. Илһам Шакиров та, Хәйҙәр Бигичев та, Салауат, Фидан, Айҙар ҙа булды, һәр ҡайҙағы төҫлө, Ҡуштауҙа ла «бис!» менән алҡышланды. Таланттар йырлап бәғерҙәргә үтәләр, һүҙ юҡ! Тик уларға ҡарап ғәжәпләнеү хисе бәреп сыҡмай. Шулай йырларға тейештәр, башҡаса була алмай… Гастролдәргә сығыр тауышты, әкиәттәге кәзә бәрәстәренән ишек астырырға ынтылған бүренекеләй итеп, кемдәрҙер туҡтауһыҙ игәйҙәрҙер, сүкейҙәрҙер, шымарталарҙыр... Ә бына ҡаршыларына сығып йырлап торған Фәрүәзгә ҡарап күптәр ауыҙҙарын асып ҡатып ҡалды. Ҡарале, һуң был беҙ күрергә күнеккән Зиннәтычмы? Ҡырҙар, фермалар, эшкәртеү цехтары мәшәҡәте менән ал-ял белмәй йөрөгән башлыҡмы? Һай, тауыш! Ниндәй моң! Ниңә йәшергән был һәләтте?.. Вәт, егетһең һин, Фәрүәз! Бис, бис!

Талант бына шулай кешеләрҙе ғәжәпләндереп, шаҡтар ҡатырып асылһа ғәжәп шул ул!

Тулҡынланған, күҙҙәре осҡонланып янған юбиляр йырсыны байтаҡ алҡышлап торҙолар. Нәҡ минутын, секундын белеп, Фәрүәз Зиннәтович янына матур костюмдан, галстуктан, тулайым бик шәп ҡиәфәттә Сәфәр Раянович килеп баҫты:

– Хәйерле кис, ханымдар, әфәнделәр! Фәрүәз Зиннәт улының илле йәше тулыуға бағышланған байрам кисәһендә һеҙҙең менән осрашыуыбыҙға ифрат шатбыҙ. Уның башҡарыуындағы «Тыуған ер» йырының һеҙҙең тарафтан шулай алҡышланыуы беҙҙе лә һөйөндөрә. Рәхмәт! Тик сер итеп әйтәм, – Сәфәр тын алмаштырҙы, лекцияһындағы һымаҡ алға күҙ йүгертеп алды. – Һеҙ устарығыҙҙы йәлләгеҙ, туғандар. Йыр – юбилярыбыҙҙың тик бер һәләте генә әле. Алда һеҙҙе Фәрүәз Зиннәтовичтың тағын бик күп аҫыл сифаттарына һоҡланыу көтә. Тимәк, ҡул сабыуҙар, алҡыштар бик күп буласаҡ. Шулай итеп, беҙҙең бөгөнгө геройыбыҙ – Фәрүәз Зиннәт улы Әйүпов! – Һәм ул юбиляр йәнәшәһенә баҫып, уның уң ҡулын күтәрҙе. – Тыуған көнөң менән, хөрмәтле замандаш!

Сәхнәләге был күренеш ғәҙәти генә булһа ла, тәьҫирле булып сыҡты. Йәнә алҡышлау ҡупты.

– Йәгеҙ, ҡунаҡтар, юбиляр хөрмәтенә күтәрәйек!

Мәжлес дәррәү гөрләргә тотондо, бокалдар зыңланы, сәнскестәр, ҡалаҡтар хәрәкәткә килде. Залға бер төркөм йәш ҡыҙҙар менән матур сигелешле милли ҡалфаҡлы Разия йылмайып килеп сыҡты... Күҙ теймәһен, кисә ифрат уңышлы башланып китте. Тамашасыла ысын байрам хисе. Алда был хисте һис зәғифләндермәйенсә дауам итергә, үҫтерергә кәрәк, тип уйланы сәхнә артындағы Рәғиҙә. Программа төҙөгәндә икеләнеп ҡалған ине, тәүге һүҙҙе хакимиәт башлығына бирергәме, әллә Фәрүәздең әсәһе алһынмы? Референт сифатындағы сәркәтип ҡатын Галина Мурясова – туфлиҙарынан башлап һары бөҙрәләренә, алтын тирәсле күҙлегенә саҡлы рәсмилек символы – ҡәтғи әйтте: «Ғәҙәт инде беҙҙә, беренсе һүҙ Атилла Әхиәровичҡа тейеш!» Ләкин Рәғиҙәнең эске тойомо әсә яғына тартты: «Башлыҡтар былай ҙа күп һөйләйҙәр, башта әсәне тыңлайыҡ»...

Ҡунаҡтар еңелсә тамаҡ ялғап алғас та, Сәфәр, микрофонын тотоп, Фәрүәз ғаиләһе ултырған өҫтәл тарафына килде. «Баланың яҙмыш инеше әсәлә, әсә ҡулында...», – тип килештереп ҡыҫҡаса нотоҡ тотоп, йыйнаҡ кәүҙәле, аҡ йөҙлө күркәм ҡарсыҡҡа һүҙ бирҙе. Бөтөн ғүмерен Ҡуштау шифаханаһы менән бәйләп, кешеләр дауалауға бағышлаған операция сестраһы Рабиға апай күп һөйләмәне, мәгәр нәҡ кәрәклеһен әйтте: «Мин улымды ғәҙел, шәфҡәтле булырға өндәнем. Һүҙем менән дә, ғәмәлем менән дә күңеленә шул сифаттарҙы һалырға ынтылдым. Бына был ниәт нисек килеп сыҡҡандыр инде, табып, бағып үҫтергән уланым күҙ алдығыҙҙа тора, үҙегеҙ әйтерһегеҙ...»

Шаулатып ҡул саптылар. Бер көлөп, бер нескәреп, әсәгә бағышлап тост күтәрҙеләр.

Бына хәҙер башлыҡ сираты...

Рәғиҙә кисә алдынан район хакимиәте етәксеһе Атилла Әхиәрович янына барған ине. Элек әлеге вазифа биләгән заттарҙы «Беренсе» тип атанылар. Тулы итеп әйткәндә, район партия комитетының беренсе секретары, сәйәси лидер һәм хужа был. «Беренсе» әйткән – закон! Быны тотмаған, үтәмәгән кеше фирҡәгә ҡаршы баҫҡан әҙәм йә иһә диссидент, районда бындай элементҡа урын юҡ... Шул нөктәлә байтаҡ Ҡуштау эшлеклеләренең янғанын хәтерләй Рәғиҙә.

Тик туҡһанынсы йылдар башындағы демократик хәрәкәт беренселәрҙе лә, икенсе һәм өсөнсө секретарҙарҙы ла власть башынан бәреп осорҙо. Халыҡ үҙ

талаптарын ҡуйҙы. Ҡуштауҙа ла, митингыларға йыйылып, ярһып һөйләүселәр күп булды: «Беҙ башҡорттар, татарҙар йәшәгән төбәкте тәшкил итәбеҙ. Тик Ҡуштауҙағы беренселәр гел урыҫ та йәһүд булып килде. Етәр, халыҡ мәнфәғәттәрен үтәү өсөн, башҡорт-татарҙан башлыҡтар һайларға ваҡыт!» Айырыуса күп ҡабатланған теләктәр түбәндәгесә яңғыраны: «Ҡуштауҙа ла милли телдә гәзит сығарылһын!.. Мәктәптә балаларҙы үҙ телебеҙҙә лә уҡырға, яҙырға өйрәтергә кәрәк!.. Балалар баҡсаһында милли төркөмдәр асылһын!..»

Рәғиҙә ҡаршыһындағы кипкән туҙғанаҡҡа оҡшаш аҡ башлы, зәңгәр күҙле һәм мөләйем сырайлы Атилла Әхиәр улы ана шул демократик тулҡын күтәргән хакимиәт башлығы ине инде. Элекке уҡытыусы уның менән бик итәғәтле булырға тырышты. Аңлашылмаған нәмәләргә урын ҡалдырмаҫ өсөн, үҙ үтенесен бик тәфсилләп аңлатты.

– Эйе, көндәлек тормошта беҙ һеҙ әйткән нескәлектәргә бирелмәйбеҙ шул. Юбилей, түңәрәк дата, кисә-маҙар тип аҡса теләнеүселәрҙән үҙем лә туям, нәфрәтләнәм хатта. Ә бит бындай саралар төбөндә ихлас аралашыу, кеше асылы тураһында уйланыу, ғөмүмән, йән ағартыу хәстәре алда торорға тейеш. Һеҙ, Рәғиҙә Мөбәрәковна, ысынлап та, хаҡлы…

Башлыҡ кеше үтенесте аяғөҫтө тыңлап, ҡағыҙына имза һалып йә иһә вәғәҙә биреп хушлашырға ашыҡҡан юғары рангтағы ҡайһы бер хакимдар һымаҡ ҡыланманы. Хәйер, алдындағы аҡ йөҙлө, нәфис сырайлы, төплө һүҙле педагог ханым кеүек көнүҙәк мәсьәләләр ҡуҙғатыусы ла бик йыш осрамайҙыр ул, һәр көн ишек ҡаҡмайҙыр.

– Эйе, бар проблема! Матди мәнфәғәттәрҙе алға ҡуйып, күңел тураһында онотабыҙ, – тине ул, Рәғиҙәне иркенерәк һөйләшеүгә саҡырып. – Хәҙер бит рәсми идеология юҡ. Конституция менән үк тыйылған хатта. Пионер, комсомол, партком кеүек тәрбиә институттары эшләмәй. Тик рухи бушлыҡты абайламау – үҙебеҙгә үҙебеҙ соҡор ҡаҙыу, Рәғиҙә Мөбәрәковна, килешәһегеҙме?

– Бушлыҡ бар, Атилла Әхиәрович, тик шул бушлыҡты фажиғә тип аңлап, йүнәтергә теләүселәр генә юҡ.

– Бар, Рәғиҙә ханым! Рухи ғәриптәр, оятҡа төкөргән әҙәмдәр күбәйә барған һайын, йән сафлығына ынтылыу арта хәҙер. Замана үҙ-үҙенә диагноз ҡуя. Беҙгә егәрҙе туплап, аныҡ маҡсат билдәләргә генә кәрәк. Минеңсә, мәктәптә булһын, ғаиләлә булһын, көнкүрештә, шулай уҡ һеҙ әйткән рәсми һәм мәҙәни сараларҙа, хатта, кешене һуңғы юлға оҙатҡан мәлдә лә йән аҡлығын ҡайғыртыу – дәүләт күләмендәге бурысҡа әйләнергә тейеш. Ә ҡаралыҡ күп беҙҙә. Электән дә, большевистик диктатура дәүеренән дә, килгән ҡаралыҡ. Юғиһә, күптәр илдәге мораль тарҡалыуҙы демократия шауҡымы тип атамаҡсы. Юҡ, яңы осор элек күләгәлә йәшеренеп ятҡан рухи сирҙәрҙең, йәмһеҙ инстинкттарҙың ҡалҡып сығыуына килтерҙе. Кемдең кемлеге, ниндәйлеге беҙҙең заманда шәрәләнгән, үтәнән-үтә күренә бит. Элекке пәрҙәләр юҡ. Бына шундай ваҡыт хәҙер, Рәғиҙә Мөбәрәковна. Әммә паникаға бирелергә ярамай. Йән аҡлығы өсөн киҫкен көрәш асырға кәрәк!

Хакимиәт башлығы әңгәмәләшенә күҙ атып алды ла еңелсә йылмайып ҡуйҙы.

– Һеҙ, уҡытыусы, педагог, ғәжәпләнәһегеҙҙер инде. Мин «йән аҡлығы» тип һөйләнем, «тәрбиә» тимәнем. Һеҙ иһә «тәрбиә» терминына күнеккән. Физик

тәрбиә, аҡыл тәрбиәһе, әхлаҡ тәрбиәһе, енси тәрбиә… Ҡыҫҡаһы, ниндәй генә тәрбиәләргә бүлеп эш итмәне совет мәктәбе. Ә бит, төпсөнә ҡалһаң, тәрбиә – абстракт төшөнсә. Нисек инде, мәҫәлән, аҡылды тәрбиәләргә була? Вәғәз менәнме, ҡамсы менәнме йә иһә перәник биреп тәрбиәләйһеңме уны. Аҡыл тәрбиәне тигәнең кешене аҡылһыҙ ҡамсылауға йүнәлтелгән түгелме? Ә бына «йән аҡлығы», «йән сафлығы» һүҙҙәрен аңлау һәм шуға ынтылыу һәр кемдең ҡулынан һәм ихтыярынан килә. Бында мәсьәлә асыҡ, нимә турында һүҙ барғанды һәр кем төшөнә. Александр Пушкин бер әҫәренең башына уҡ сығарып әйткән бит: «Намыҫыңды йәштән һаҡла!» Йән аҡлығы – иң мөһим үҙәк. «Урлама, үлтермә, ялған һөйләмә, тәкәббер булма, кешенән көнләшмә, шәфҡәтле бул!» – кеүек нәсихәттәр әйтеп, мәсет, сиркәү әһелдәре кешеләрҙе күңел сафлығына саҡыралар. Бында тәрбиә тип фәлсәфә һатыусылар юҡ. Шулаймы, дөрөҫ уйлайыммы мин, Рәғиҙә Мөбәрәковна? Яңылышһам, педагог булараҡ, төҙәтерһегеҙ мине.

– Ысынлап та, йән аҡлығына, выждан сафлығына ирешеү һәр кешенең йәшәү маҡсатын тәшкил итергә тейеш шул, Атилла Әхиәрович! Шул саҡта йәмғиәт тиҙ арала әхлаҡи юғарылыҡҡа күтәрелергә мөмкин.

Хакимиәт башлығы һөйләшеүҙән бик ҡәнәғәт ҡалды, буғай. Ул, Фәрүәз Зиннәтович байрамында ҡатнашырға һәм сығыш яһарға ризалыҡ биреп, Рәғиҙә менән йылы хушлашты.

– Проблемалар булһа, тура үҙемә килегеҙ!

Бына бөгөн инде хакимиәт башлығы үҙе Мөбәрәк ҡыҙы ойошторған кисәнең оло ҡунағы. Атилла Әхиәрович, ҡулына микрофон бирелгәс тә, ашығып-кабаланып һүҙгә керешмәне. Тирә-яҡҡа еңелсә башын эйеп, залдағыларҙы сәләмләне, әйтәһен нисегерәк башларға икән тигәндәй, бер ҡәүем уйланып торҙо.

– Мөхтәрәм йәмәғәт, ауыл хужалығы – беҙҙең төп иҡтисад тармағы, тик бер нисә тиҫтә йыл элек ул көрсөккә килеп терәлде. Колхоз-совхоздарҙы кооператив хужалыҡтар яһап уңманыҡ, ҡалаларҙан килгән эре инвесторҙарға ышанып, ауылдарҙы тарҡата яҙҙыҡ, – тип йыраҡтан урата башланы ул телмәрен. – Бына шул саҡта ауыл хужалығы идаралығына башлыҡ итеп ҡуйҙыҡ беҙ Фәрүәз Зиннәтовичты. «Энем, планыңды һөйлә, – тинем мин уға. – Ҡотолоу юлы нисек?» Ул ышаныслы итеп әйтте: «Ғаилә фермерҙары кәрәк, ауылды яңыртыуҙың башланғысы шунда». Әйтте һәм үҙ ниәттәрен тормошҡа ашырырға кереште. Ысынлап та, хәлдәребеҙ күҙгә күренеп яҡшыра хәҙер. Иҡтисад хәрәкәткә килде. Нигеҙе, йәш белгес әйткәнсә, фермерлыҡ. Райондың һәр ауылында 10 – 15 ғаилә баҙарға, табышҡа иҫәпләнгән малсылыҡ менән шөғөлләнә. Ит, һөт, йөн, тире эшкәртеү цехтарыбыҙ гөрләп эшләй. Элек, яландарыбыҙҙы нишләтәйек, тип аптыраған инек. Хәҙер көтөүлектәр, йәшел аҙыҡ, күпйыллыҡ үләндәргә гектарҙар етешмәй. Ялансылыҡ менән шөғөлләнеүсе фермаларыбыҙ ҙа ишәйҙе. Етештергән ашлыҡты, дәүләт алмаһа, фуражға тип, күршеләрең ала. Шулай итеп, Фәрүәз Зиннәтович көрсөктән сығыу юлын дөрөҫ самалаған. Мин киләсәктә лә Фәрүәз Зиннәтовичҡа иҡтисадын күтәреү курсын ҡыйыу дауам итеүен, эшендә артабанғы уңыштарға ирешеүен теләйем! Ҡыҫҡаһы, уның кеүек зирәк, тәүәккәл ирҙәр

беҙҙә күберәк булһа ине! Өҫтәп, илле йәшлек егеткә мин тағын ҡоростай ныҡлы һаулыҡ теләйем. Башҡаһын үҙе лә табыр ул. Алдағыһы, әле башҡарған йыры кеүек, көйлө, матур булыр уның. Ҡыҫҡыһы, бокалarҙы хөрмәтле юбилярыбыҙ иҫәнлегенә һәм Ҡуштау районының сәскә атыуына, тип әйтә алмайым, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, быға әле иртәрәк, сәскәгә бөрөләнеүе өсөн күтәрәйек, дуҫтар, иптәштәр һәм әфәнделәр!

Мәжлес ҡаты алҡышлап хакимды хупланы. «Килеп сыҡты, килеп сыҡты!» – тип һөйөндө Рәғиҙә. Хәҙер сәхнәлә мәктәптең юғары синыф уҡыусылары тарафынан әҙерләнгән «Әйүп бабай ейәне» тигән композиция ҡуйыласаҡ. Баянда музыкаль биҙәүҙе Рәғиҙә үҙ өҫтөнә алды… Шунан һүҙ Фәндәр академияһынан килгән ҡунаҡҡа бирелер. Ул хакимиәт кешеләре менән бер өҫтәл артында ултыра. Олпат ғалим. Әйүповты, фән кандидаты булараҡ, Һарытау өлкәһенә яраҡлашҡан яңы борсаҡ сортын килтереп сығарыуҙағы уңышлы тәжрибәләре өсөн маҡтарға йыйына, буғай…

– Рәғиҙә Мөбәрәковна! – Сәфәрҙең тауышы уны һиҫкәндерҙе. – Ойоштороусыларға рәхмәт белдерергә теләйҙәр. Әйҙәгеҙ, төшәйек!

Кисәне ойоштороусылар етәксеһе Рәғиҙә ҡыҫҡа еңле аҡ күлдәктән, еңел ҡара туфлиҙарҙа, ҡош кеүек осоп, зал үҙәгенә йүнәлде…

Рысаевтар һәм уларҙың өйҙәше төнгө саф һауалы яҙғы урамға сыҡҡас, нескә йәнле уҡытыусы түҙмәне, хисләнеп икеһен дә ҡосаҡлап алды:

– Дуҫтар, еңеп сыҡтыҡ бит!

**11**

Уҡытыусы Рәғиҙә Мөбәрәковнаны Ҡуштауҙа элек мәҙәниәт активисы, һәр төрлө кисәләр, концерт-спектаклдәр ҡуйыу эшендә башлап йөрөүсе булараҡ яҡшы беләләр ине. Уның күҙ уңынан юғалыуын мәктәптән китеүе, йәше өлкәнәйеүе менән бәйләнеләр. Ғаилә тормошо хаҡында ла мөйөштәрҙә, урам саттарында быш-быш килеп һөйләшеүселәр байтаҡ булды. Нишләйһең, тормош шулай ҡоролған, майҙандан китә кеше, аҡрынлап онотола… Әммә район мәҙәниәт һарайында Әйүпов юбилейын түрәләр маҡтарлыҡ итеп үткәреүе Рәғиҙәне йәнә халыҡ теленә ҡайтарҙы. Кафе, ресторандарҙа, ашханаларҙа туй яһарға ниәтләнеүселәр мәжлес үткәреү өсөн уның төркөмөн саҡырҙылар. Электән килгән ата-баба йолалары менән, матур-матур милли йырҙар менән, үҙ телебеҙҙәге ихлас теләктәр юллап, ифрат ҡыҙыҡлы үтә башланы хәҙер Ҡуштауҙағы туйҙар. Йәйен мәктәптә үткән йылдарҙа сығарылған класташтар осрашыуы башланғас, тағын Рәғиҙә Мөбәрәковнаға мөрәжәғәт итеүселәр йышайҙы. Урынын таба, яҡшы итеп табынын әҙерләй, кисәнең нисек барыуын асыҡлай уҡытыусы апай. Рәхим итегеҙ, Ҡуштауға ҡайтығыҙ ҙа осрашығыҙ, ҡосаҡлашып һөйләшегеҙ, илашығыҙ, көлөшөгөҙ, элекке һабаҡташтар! Барыһы ла ойошҡанлы, мәғәнәле һәм тәртипле булыр. Ҡыҫҡаһы, бына шундай байрам сараларын ойоштороу менән мауығып, мәғәнәле үтә беҙҙең геройҙарыбыҙҙың тормошо. Был шөғөлдө «бизнес» тип атап буламы икән? Бизнеста төп маҡсат – табыш алыу, аҡса эшләү, тиҙәр бит. Ә бында бөтөнләй башҡа ниәт үҙәктә тора. Йән ағартыу, күңел сафландырыу был. Коммерция түгел, ә ижад! Рәғиҙә төркөмөнөң шөғөлө һуғыштағы һалдаттарға, игенсе, механизаторҙарға йә иһә тайгала тимер юл һалыусыларға концерттар ҡуйып, уларҙы мәҙәни хеҙмәтләндереүсе агитбригаданыҡына оҡшаш.

Агитбригада – совет һүҙе. Әммә күрәбеҙ, элекке традиция баҙар шарттарында ла яңырып китә ала икән. Капитализм тигәс тә, бөтә нәмә һатыу-алыуға һәм аҡса йыйыуға ғына ҡайтып ҡалмай ул.

Ауылда агитбригада ғәме менән генә йәшәп булмай. Бер көндө, өйҙәгеләр иртәнге сәй өҫтәле тирәһенә теҙелешеп ултырғас, Сәфәр әйтеп ҡуйҙы:

– Туташтар, бәрәңгене күмер ваҡыт, сүптән дә таҙартырға кәрәк. Әйҙәгеҙ, өсәүләп билдәрҙе яҙып ҡайтайыҡ!

– Йә инде, Сәфәр, ҡыҙған мине, фермер! – тине Разия, иркә бала ҡиәфәтенә инеп. – Үҙең беләһең, эҫе ҡояш минең башҡа һуға. Шуның өҫтәүенә, минең сират бөгөн тамаҡ йүнәтеүгә. Ҡайтып ашарға һорарһың бит. Үҙең генә бар. Теләһә, Рәғиҙә лә барыр…

Шулай ҡырҙағы бәрәңге баҡсаһына Сәфәр, кәтмәндәр күтәреп, өйҙәш ҡатын менән генә сыҡты. Һуңғы ваҡытта йыш ғәжәпләнә ир. Разияла, исмаһам уйын өсөн, бер көнләшеү әҫәре юҡ. Луиза, кафедранан, деканат йә иһә ректораттан берәй хеҙмәткәр ҡатын-ҡыҙ телефондан шалтыратһа ла, теңкәгә тейә ине: «Кем ул? Нишләп шулай һуң һиңә йомошо төшкән? Ниңә сәрелдәп көлә, серҙәрегеҙ беректеме?..» Әле бына Рәғиҙә менән бәрәңге күмергә оҙатыуына хайран ҡалды. Өйҙәш булһа ла, көндәш булырҙай зат бит… Ә, бәлки, Разия хаҡлылыр, Рәғиҙә уға өйҙәш кенә түгел, әхирәттер хәҙер. Ауыҙҙы ауыҙға, ҡолаҡты ҡолаҡҡа ҡуйып һөйләшә башлаһалар, Сәфәр артыҡҡа әйләнә: «Третий лишний!», имеш. Элек ике ҡатынлы ир ғаиләләре нәҡ шундай әхирәттәрҙән торғандыр. Шуға араларында тулы аңлашыу булғандыр, моғайын. Береһе ир менән арбаға ултырып ҡыр эшенә китеп бара, икенсеһе иһә бала-сағаны, өй эштәрен ҡарай. Ҡырҙағылар ҡайтҡанда, аш бешкән, өй йыйыштырылған була. Балалар уйнап йөрөй… Йыуынығыҙ ҙа рәхим итеп ашҡа ултырығыҙ, йәмәғәт, тип яҡты йөҙ менән ирен, әхирәтен өҫтәл артына саҡыра хужабикә. Ҡатындар берҙәм булһа, ир ҙә хәләл ефетенең баш осонда ҡамсы уйната алмаҫ йә иһә өйҙә уҫал һүҙҙәр ҡысҡырмаҫ… Ысынлап та, әхирәт ҡатындарҙан торған ғаилә нимәһе менән насар, тип уйлап алды Сәфәр.

Әйтәһе юҡ, пенсионер иргә былай уйҙар бата. Ә ул йәш булһа, өйҙәгеләр ҙә уйнап торған бисәләр булһа, хәлдәр нисегерәк ҡоролор ине икән? Кешеләр тормошонда йәш тигәнең ифрат ҙур роль уйнай шул. Әгәр ҙә, Сәфәр – йәш егет, ә Рәғиҙә еткән ҡыҙ булһа, телдәрендә улар уратып-уратып күңелдәрендәге йәшертен хистәргә юлығырҙар, үҙҙәренсә кинәйәләп, һүҙ усағына ялҡын өҫтәрҙәр ине.

Ә хәҙер… Ике пенсионер нимә һөйләшһен? Бәрәңге хәлдәре, тупраҡ дымы, колорадо ҡуңыҙы… Әһә, бына кәтмәнен яй ғына һелтәй-һелтәй сүп үләндәрен ҡырып барған Сәфәрҙән ҡыҙыҡлы һүҙ сыҡты:

– Рәғиҙә, аяҡ тупраҡҡа тейһә, тыуған ерҙе, бала саҡты ерһейем. Ерһеүҙең ниндәй һүҙ икәнен беләһеңме? Матур һүҙ… Бала саҡта, йәшлектә ифрат көслө был ерһеү хисе. Берәй ергә китһәм, әй һағына инем ауылды. Илағы килә ине. Ә хәҙер күңел ҡатҡан…

Рәғиҙә Сәфәргә ҡарағанда сүп үләндәрен йышыраҡ эйелеп ала, шуға арттараҡ ҡалған.

– Әй, Сәфәр ҡорҙаш, ихлас ерһеү бала саҡта көслө була шул ул. Һин әйткәнсә, мин дә әсәйемде илап һағындым. Бик иртә әсәйҙән ҡалдым бит. Йәш

әсәй ипле, яғымлы булһа ла, үҙемдекен яратыуҙы бүлешә алманы шул… Тик, үҫә төшкәс, һин әйткән ерһеү кешелә баҫыла, томалана. Кендек кән күргән ергә берегә. Ана, ҡайһы бер әҙәмдәр диңгеҙ аръяғына уҡ китеп төйәк табалар. Ер планетаһын уртаҡ йорт тиҙәр. Бәлки, дөрөҫтөр ҙә был.

– Уртағын уртаҡ та, нәҫел-нәсәбен юғалтып, сит тупраҡта тамырынан яҙа инде әҙәм тигәнең, Рәғиҙә…

– Әйтмә, Сәфәр ҡорҙаш, заяға уҙа инде ундайҙар ғүмере…

– Күңелгә аҡыл хужа, Рәғиҙә. Ҡайҙа яҡшы, ҡайҙа рәхәт, шунда тартыла кеше. Әгәр ҙә һағыныу, ерһеү һаман да көслө булһа, әҙәм тыуған ерен, йортон да ташламаҫ ине. Аҡыл беҙҙе харап итә шул ҡай саҡ аҡыл…

– И, Сәфәр, аҡылды бик һүгеп ташламайыҡ әле. Бәлә-ҡазалар хиссән кешенең башына етмәйме һуң? Беҙҙең халыҡтар кәрәкмәгәнсә ярһыу ҙа, буғай, ул.

– Эйе, быны ишеткән бар. Аҡылға һыңлап ултырабыҙ, төштән һуң…

Шулай һөйләшә-һөйләшә, хәтһеҙ ер эшкәрттеләр. Арттарынан сәскә атырға йыйынған бәрәңге бураҙналары теҙелеп ҡалды. Тик ҡояш та шәп ҡыҙҙыра шул. Разия юҡҡа ғына был эштән ҡасмаған. Тиҙерәк күмеп бөтөргә лә өйгә шылырға, күләгә аҫтына инергә кәрәк… Тик зыялылар шул, телдәренә килгән уйҙарҙы ла бүлешәһеләре килә былар ҙың.

– Йәшәнем-йәшәнем дә бер һөҙөмтәгә килдем мин, Сәфәр ҡорҙаш. Кеше суртым да йәшәй белмәй әлегә. Бороп ҡуйған сәғәт кеүек… Юҡ, көйләгән автомат кеүек кенә ғүмер кисерә әле ул. Йәшәү фәлсәфәһе етмәй беҙгә. Донъяға мәңгелеккә килгән кеүек ҡыланабыҙ. Бөтә инстинкт – тик үҙең тураһында ҡайғыртыу. Бер-береңде рәнйетеп, этеп-төртөп аҡса йыйыу, мал йыйыу, дәрәжә яулау… Ҡараһаң, ғүмер ҙә үтеп китә. Һөйөнөрлөк бер нәмә юҡ, тик нәфсе ҡоло булғанһың… Бына мин Алланың рәхмәте менән яҡты хәйәткә килдем, донъя үлгәнсегә хәтле минең ҡулда, ә ни хаҡына йәшәйем, нимәгә ирешәм, кем булам, тип үҙ алдыңа аныҡ һорауҙар ҡуйырға кәрәк. Ваҡытты тойоп, үткәнеңә хисап биреп, алдағыһына ниәт ҡуйып йәшәй белеү ихтыяжы тыуа был осраҡта. Бына шул ғәмәлдә үҙ ғүмереңә үҙең хужа булып йәшәү мөмкинлеге тыуыр ҙа ине, Сәфәр, шулай түгелме? Ә ғүмер ҡиммәте рухи донъяға индергән өлөш менән үлсәнә бит…

– Һай, Рәғиҙә, һин бик ҙур фәлсәфә ҡораһың. Донъяны аңлау, тойоу… Ойоп түгел, ғәм менән, оло мәғәнә менән маҡсат ҡуйып йәшәү… Билләһи, ғүмере өсөн яуаплылыҡ тойғоһона күндереү һәр кешене бәхетле итер ине, – тине Сәфәр, ҡайнарланып. Һәм ир, кәтмән тотҡан ҡатынға бер тына һоҡланып ҡарап торғас, өҫтәне: – Ниндәй аҡыллы кеше, талант эйәһе һин, Рәғиҙә! Һиңә ҙур, киң юлға сығырға ине.

– Яңылышаһың, дуҫым. Мин – яп-ябай бер ҡатын. Йөрәгем тулы үкенес. Инде бына, өлкәнәйеп, ҡартайып килгәндә, йәнә бер һағыш өҫтәлде.

– Ниндәй һағыш ул, Рәғиҙә?

– Китеү һағышы…

Сәфәр ҡапыл һағайып ҡалды:

– Беҙҙән китергә йыйынаһыңмы?

– Ялҡыттым инде, Сәфәр ҡорҙаш. Оят! Һеҙҙән дә китергә ваҡыт.

– Тағын ҡайҙа китергә йыйынаһың һуң һин, Рәғиҙә?

– Әй, Сәфәр, ҡартайған кешенең ҡайҙа китергә тейешлеген белмәйһеңме һин? Хәҙер минең йөрәктә иң ҙур һағыш – китеү һағышы. Сөнки үҙең күреп тораһың, мин яңғыҙ… Йортһоҙ-ерһеҙ, яҡлаусыһыҙ. Ә яңғыҙға ҡырау иртә бәреләә, тиҙ һуға. Мин китермен инде, Сәфәр…

Ир, әҫәрләнеп, йәшле күҙҙәрен ергә текләп, кәтмәне менән ерҙе тырнап торған өйҙәше Рәғиҙәгә текәлде. Тик хәҙер, тик бына хәҙер генә ул матур, ғәжәп мөләйем һәм талантлы ҡатындың йөрәк һағышын барса тәрәнлеге менән тойоп алды… Йөрәге һыҡрап, хатта сәнсеп үк ҡуйҙы: «Нисек ярҙам итергә һиңә, Рәғиҙә, алиһә?»

**12**

Бәҫле өйҙә өйҙәш ғәме өйҙәгеләргә күсә…

Тыштан ҡарағанда, Рысаевтар тормошонда барыһы ла ипле. Тынғыһыҙ ир-ат ҡулы йортҡа тәртип, ҡот индерҙе. Баҡсаға аяҡ баҫһаң, сығаһы ла килмәй. Түтәлдәрҙә йәшел ҡыярҙар теҙелешкән, күҙҙе арбап ҡыҙғылт помидорҙар балҡый. Һуғандар ҙа, өҫтөндәге йәймәне тибеп аҫкан сабый һымаҡ, тәндәрен ҡояшҡа, көнгә аҫкандар. Шалҡан, ҡыҙыл сөгөлдөр ҙә уңған. Ә зиннәтле селтәр япраҡ менән биҙәлгән кишер рәттәренә яҡынлашһаң, танауға еҫкәп туя алмаҫлыҡ татлы еҫ бәреләә… Хоҙайға шөкөр, ят тупраҡта ла Сәфәр гөрләтеп йәшелсә-емеш үҫтерә. Алла белһен, Разия, Рәғиҙә баҡсаға ҡарап күҙ һөйөнөсөн нисек кисерәләрҙер, әммә табаҡлап ташыған ер емештәренән өҫтәлгә әллә ниндәй ниғмәттәр яһап теҙәләр…

Ғаилә игелекле шөғөлө менән Ҡуштау ауылында һаман абруйын үҫтерә килә. Әле бына бик ҡыҙыҡлы итеп бер-бер артлы ике ҡыҙыл туй үткәрештеләр. Инде августың алтыһына ауылдың ғына түгел, районың данлыҡлы хәрби геройы, осоусы Самат Хәбировтың тыуһан йыллыҡ юбилейын ойоштороруға пландар ҡоралар. Был эштәрҙең башында – Рәғиҙә Мөбәрәковна инде. Кисәләрҙе матур, кешеләр йәнен ҡуҙғатырлыҡ итеп үткәрәйек, тип һаман яна, көйә, әллә ниндәй ҡыҙыҡлы нәмәләр уйлап сығара. Тыштан өйҙәш ал да гөл дә бит. Ә эстән? Иртәләрен бик йыш бүлмәһенән валерианка, кардиомин кеүек йөрәк дарыуҙары еҫе бөркөлә. Ә бәрәңге күмгәндә, китәм тип Сәфәрҙең йөрәген нисек киҫәк-киҫәк телгеләне Рәғиҙә. Нимә тине әле ул: «Әй, Сәфәр, ҡарт кешенең ҡайҙа киткәнен белмәйһеңме ни һин?» Күрәҙәлеге һаман раҫ килһә, нисек инде өйҙәшең хәленә битараф булып ҡалаһың? Сәфәрҙе үҙе лә аңламаған әллә ниндәй эске тынғыһыҙлыҡ, бошоноу биләп алды. Алда, ысынлап та, нимәлер булыр һымаҡ, ниндәйҙер яман хәл килеп сығыр кеүек… Кеше йөрәгенә янаған һәләкәтте сит өйҙәге яҡты йөҙ, сәй менән генә туҡтатып буламы ни? Ә шунан ары уҙып булмай. Рәғиҙә кем уға? Бер ҡыйыҡ аҫтына осраҡлы эләккән ҡатын ғына лаһа. Ҡул ҡаушырып көтәһең инде, Сәфәр… Йортоңа килгәнде һыҡрап көтәһең…

Яҡшы ғәмәл, ҡолас йәйеп һиңә сапҡан балаң кеүек, ҡаршыңа ашҡынмаһа ла, насары, һәр саҡтағыса, оҙаҡ көттөрмәй – ҡыҙғаныс.

Июль айы сығып бара ине. Көн урталары еткәндә ҡаты итеп ҡапҡа ҡаҡтылар. Ихатаға берәү ҙә йоҙаҡ элмәгән, йомошоң төшкән икән, рәхим ит, ас та ин! Әммә дөбөрләү ҡабатланғас, Сәфәр түҙмәне, һөйләнә-һөйләнә ҡапҡа асырға китте.

– Нимә, бикһеҙ ҡапҡаны төйәһегеҙ?– тип бер ҡәҙәр әрләп, тотҡаны үҙенә

тартты. Алдында оҙон буйлы, ҡаҡса йөҙлө, әрһеҙ ҡарашлы йәш ир пәйҙә булды. Сәфәр аптырап китте: кем был? Күргәне лә бар кеүек, ят та үҙе…. Юлай тиһәң, бының өҫтөндә таушалған йәшкелт футболка, бөтәрләнеп, ҡатып бөткән джинсы салбар… Шыҡһыҙ ҙур сумка аҫҡан, йәйәү генә килгән, тимәк. Ҡайҙа зиннәтле ҡыҙыл машина? Толомло сәс тә юҡ. Элекке арестант кеүек, башы төптән ҡырылған бының…

Хужа ла, мосафир ҙа, күҙгә-күҙ терәшеп, бер-берһенә байтаҡ ваҡыт ҡарашып торҙолар.

– Ағай, нимә, фазендаға индермәҫһеңме? Танымайһыңмы? – Ирҙең ауыҙынан әсе хәмер еҫе бөркөлдө. Күҙҙәрендә хәтәр саткылар бейеште. – Юлай мин! Ошо йортта йәшәгән кеше!

– Юлай?! Әллә ҡасан әйтәләр уны. Әйҙә, уҙ, ҡунағыбыҙ бул! Әсәйең дә өйҙә,– тип Сәфәр миһырбанлы ҡиәфәт алды.

Тик Юлай ихатаға уҙырға ашыҡманы:

– Әсәй менән һүҙ аҙаҡ булыр. Миңә әле, ағай, һин кәрәк. Мужиктарса крупный разговор бар һинең менән. Баҙарҙы самалайһыңмы, ағай?

Сәфәр әллә иҫерек, әллә айныҡ ир ҡаршыһында ҡапыл аптырауға төштө:

– Ниндәй һүҙ, энем?

– Йорт хаҡында һүҙ, ағай. Шунан башҡа беҙҙең арала тағын ниндәй һүҙ булырға мөмкин?

Ике ир йәнә бер-берһенә күҙ текәште. Ысынмы һуң был саҡырылмаған ҡунаҡтың Сәфәргә ҡаҙалыуы, әллә уйын ғынамы? Йорт хаҡында ниндәй һүҙ булырға мөмкин? Ярһый башлаған хужа берәй йомро һүҙ әйтеп, һөйләшеүгә нөктә лә ҡуя ала ине. Тик кеше алдында әҙәп һаҡларға тырышты:

– Йорт, тиһеңме? Йортто әсәйең Рәғиҙә Мөбәрәковна беҙгә һатты бит, энем. Нотариус аша законлы алыш-биреш яһалды. Үҙеңдең беҙҙә ҡунаҡ булып, өй һатҡан аҡсаны йомарлап алып китеүеңде лә онотмағанһыңдыр, шәт?

– Юҡ шул! Һатыу законлы түгел, афера! Нотариуста минең рөхсәт юҡ. Әсәй йортто минең рөхсәттән башҡа һатҡан. Аңланыңмы инде, абзый. Судта эш ҡуҙғатам. Ҡыуам мин һеҙҙе бынан!

Низағлы гәпте Разия ла ишетеп торған, буғай. Уҡлау тотоп, ихатаға йүгереп сыҡты ул:

– Кемде ҡыуаһың, ит яҡшылыҡ – көт яуызлыҡ? Сәфәр, нимә тыңлап тораһың, яғаһынан тот та урамға һелтә был әҙәм аҡтығын!

Баҫҡынсы ир, үҙ сиратында, хужабикәгә ҡарап оятһыҙ һүҙҙәр әйтеп ҡысҡырырға кереште. Йортта мәхшәр ҡупты. Маркиздың уҫал итеп ыҫылдауы ишетелде. Ниһайәт, ишектә Рәғиҙәнең ағарып киткән йөҙө күренде:

– Юлай! Нишләп ҡысҡыраһың? Нимә кәрәк һиңә? Йорт хужаһына ниндәй дәғүәң бар?

Юлай, хужаларҙан үтеп, әсәһенә табан атланы. Тик баҫҡыстан күтәрелмәне, төптә тороп ҡалды.

– Минең йәшәр урыным юҡ, әсәй. Һиңә ҡайттым.

– Ҡалалағы үҙ йортоң, коттеджың ҡайҙа?

– Тү-тү коттедж!

– Ҡатының, балаң ҡайҙа, Юлай?

– Айырылыштыҡ.

– Машинаңды нишләттең, мин биргән аҡсаларҙы ҡайҙа ҡуйҙың инде, балам?

– Улар баш хаҡы, төрмәнән ҡотолоу өсөн бирелгән бабло, әсәй.

Рәғиҙә, хәлһеҙләнеп, ике ҡуллап ишек яңағына йәбеште. Күренеп тора, йыш-йыш һулай, хәле мөшкөл уның.

– Юлай, был өтөк ҡиәфәтең менән нисек күҙемә күренәһең һин… Нисек кешеләрҙән оялмайһың? Выждан да юғалған үҙеңдә. Һин бит мине аҡтыҡҡа тиклем таланың, хәйерсе хәленә төшөрҙөң! Әйт миңә: кем, ҡасан шул оятһыҙлыҡтарға өйрәтте һине? Мин бит тик яҡшылыҡҡа өндәнем, ҡәҙерләп үҫтерҙем! Артыҡ иркәләнем, уҙындырҙым – хәҙер аңлайым да, һуң... – тине әсә, тыныс булырға тырышып. Әммә бер аҙҙан уны эстән ниндәйҙер ҡалтырау биләп алды, өҙөк-өҙөк һүҙҙәр ҡысҡырҙы. – Юғал был йорттан, ю-ға-ал! Изге йәндәргә бысрағыңды яҡма… Ю-ға-ал!

Әсә тотлоғоп ҡалды, ҡулдары, хәлһеҙ кәүҙәһен тота алмайынса, ишек яңағы буйлап шыуышты. Бына ул тупһаға уҡ һығылып төштө…

– Разия, бар, дарыу килтер, дарыу! – тип ҡысҡырҙы Сәфәр һәм, йыш-йыш һулап, һуштан яҙып барған ҡатын янына ташланды.

Юҡ, ҡотҡара алманылар Рысаевтар үҙҙәренең өйҙәшен. Бер нисә минуттан һуң ул Сәфәрҙең ҡулында йән дә бирҙе… Ғүмергә нөктә шулай ҡуйылалыр инде. Ифрат ябай ҙа, ғәләмәт бөйөк тә бер мәл был. Йәшәгән кеше хаҡында оло тетрәнеү ҙә шул секундтарҙа киләлер… Күңелдәрҙе ағартырға тип бар ғүмерен, ҡеүәт-һулышын биргән мөғәллимә, изге зат, көтмәгәндә бына шулай үҙе ҡаралыҡ, вәхшәт ҡорбаны булып ҡуйҙы. «Керләнеп бөттөм үҙем, донъяны аҡлай алманым… Бөттө көс, һынды ҡылыс…» Ниндәй генә бөйөк заттар өлөшөнә төшмәгән был ғүмер аҙағындағы асырғаныу, ят, сит күрһә уны Раббыһы… Сәфәрҙең күҙҙәренә кинәт тыйылғыһыҙ булып йәштәр бәреп сыҡты. Улар, керһеҙ тамсылар, тып-тып итеп Рәғиҙәнең мәрмәр йөҙөнә тамды…

Бындай фажиғәле драматик сиселеште өй бүлешергә ниәтләгән сәрхүш Юлай көтмәгән, уйламаған ине. Ул, тоноҡ күҙҙәрен йәнһеҙ ҡиәфәткә керә барған әсәһенә текәп, бер ағарып, бер күгәреп ҡарап торҙо ла кинәт һүҙһеҙниһеҙ ҡапҡаға ташланды.

– Аһ, уландар – ҡара йыландар! – тип шашып ҡысҡырҙы Разия һәм, иҙәндәге уҡлауҙы алып, бының артынан томорҙо.

«Уландар – ҡара йыландар…» Сәфәрҙең башына йәшенле уй килтереп бәрҙе. Күҙ алдына ҡыҙы Лиана, улы Айнур килеп баҫты. Кеше сифатлы ғазраил Юлайға былар ҙа иш менән ҡуш бит… Уландар – ҡара йыландар… Беҙ китербеҙ ҙә ҡотолорбоҙ, ә һеҙ һуң, йылы ҡуйында аҫралған уландар, был мәхшәрле заманда нисек йәшәрһегеҙ? Һаман да ата-әсә берәмтекләп, тамсылап тапҡанға иҫәп тотоп, мираҫ, өлөш тирәһендә янъял ҡуптарып, еңел кәсеп, сәрхүш кәйеф менән ғүмер кисерерһегеҙме?

Рысаевтар йортонда өйҙәштәре Рәғиҙә Мөбәрәк ҡыҙының йыназаһына әҙерләнергә кереште…

**Татарсанан**
**Гөлназ ҠОТОЕВА тәржемәһе.**



**Әнисә ТАҺИРОВА**

## *Асылыкүл*

*Асылыкүл, асылыңды*
*Асмағанмын.*
*Ләкин инде тоям ебәк*
*Тулҡын назын.*

*Ошо наҙҙан күңелемә*
*Һиллек яуа.*
*Был һиллектән күңел үҫә,*
*Ҡанатлана.*

*Тулҡындарҙан тама миңә*
*Тере мәрйен.*
*Сихәт бирә тәнгә, йәнгә*
*Йомшаҡ ләмең.*

*Йөҙә аҡҡош. Бер туҡтауһыҙ*
*Ярҙы күҙләй,*
*Әйтерһең дә, һыуһылыуҡай*
*Йәрен эҙләй...*

---

*Әнисә Таһирова (1941) Ишембай районы Маҡар ауылында тыуған. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай, «Башҡортостан ҡыҙы» журналы редакцияһында, Башҡортостан радиоһы һәм телевидениеһында, мәктәптә эшләй. Ике тиҫтәнән ашыу китап авторы.*

*Балыҡтарың, эй, ҡайнаша*
*Тулҡын үреп.*
*Ҡосағыңда мөъжизәләр*
*Барҙыр кеүек.*
*Осоп йөрөй аҡсарлаҡтар —*
*Парлы-парлы.*
*Селбәрәләр иңләп йөҙә*
*Тулҡындарҙы.*

*Асылыкүл, асылыңды*
*Асмағанмын.*
*Ләкин тоям булмышыңдың*
*Серле наҙын.*

***

*Рәхмәтлемен Тәңре бүләк иткән*
*Нурлы көндәремә.*
*Талған ҡараштарҙы иркәләгән*
*Урман гөлдәренә.*

*Сит ерҙәрҙең ялтыр матурлығын*
*Һис тә көҫәмәйем.*
*Бала саҡтан таныш был йәмдәргә*
*Гел тартыла йәнем.*

*Урмандарҙың һәр бер гөлө йәшәй*
*Күңел түрҙәрендә.*
*Күк ҡыңғырау сыңлай,*
*Аҡ сәскәләр*
*Һарыла иңдәремә.*
*Ҡайын сер бүлешә,*
*Күбәләктәр*
*Өйөрөлә янда.*
*Ҡоштар, сутылдашып, тәҙрә ҡаға,*
*Уянһын, тип, таңда.*

*Яктыра бар рухым,*
*Яҙғы таңда*
*Сәскә тулһа һутҡа.*
*Был күңелем ғүмер буйы ғашиҡ*
*Ябай матурлыҡҡа.*

*Бөйөк Тәңре биргән бүләктер был*
*Талған көндәремдә.*
*Иртән алсаҡ ҡояш,*
*Кис йондоҙҙар*
*Ята иңдәремдә.*

** *

*Асылыкүл, ҡыҙғылт ярҙарыңа*
*Ниҙәр йәшеренгән, ниҙәр бар?*
*Баҡҡан саҡта һинең киңлектәргә*
*Күңелемдә тәрән уйҙар бар.*

*Мин яҡындан һине тәү ҡат күрәм,*
*Тулҡынаһың зәңгәр моң булып.*
*Ҡалдың инде минең күңелемдә*
*Серле шиғыр булып уйылып.*

*Шиғыр эҙләп диңгеҙҙәргә саптым,*
*Шиғри диңгеҙ булған янымда.*
*Тулҡыныңда, ана, таң нурҙары*
*Сихри шәмдәл булып ҡабына.*

*Юлдар, йылдар аша ниңә икән*
*Һине һәр саҡ урап үтелде.*
*Көтмәгәндә тулҡындарың ҡаҡты,*
*Һыңлап килгән һөйөү шикелле.*

*Үтһәләр ҙә йылдар,*
*Моңдар менән*
*Һуғарыла йәнем һаман да.*
*Күңелемә тылсым-дауа булдың*
*Был болғауыр, ҡырыҫ заманда.*

## Һыу ҡошо

*Һыу ҡоштары бәхетлерәк икән*
*Күле йәйрәп ятҡан донъяла.*
*Бик йыш улар, ер хәстәрен ҡуйып,*
*Һыу аҫтына инеп юғала.*

*Унда ҡоштоң башҡа хәстәрҙәре –*
*Башҡа булмыш, башҡа күренеш.*
*Бәлки, барҙыр унда беҙ белмәгән*
*Мөғжизәләр, башҡа гөл-емеш.*

*Һыу өҫтөндә ҡабат пәйҙә булһа,*
*Ҡошто күреү беҙгә ҡыуаныс.*
*Зәңгәр күлдең матурлығы булып*
*Тулҡын ярһа, йәнгә ҡыуаныс.*

*Шул һыу ҡошо тоташтыра беҙҙе*
*Беҙ белмәгән даръя йәменә.*
*Беҙ белмәгән телдә низер һөйләп,*
*Ярҙарына тулҡын ҡағыла.*

*Беҙ күрәбеҙ бер өлөшөн генә*
*Күҙ алдында булған донъяның.*
*Аҙ беләбеҙ,*
*Йыһан киңлегендә,*
*Һыуҙар ҡосағында ни барын.*

## Асылыкүл легендаһы

*— Асылыкүл, ас сереңде!*
*Асылыкүл ем-ем көлдө.*
*Уның нурлы йөҙөн күреп,*
*Пар аҡсарлаҡ осоп килде.*

*— Асылыкүл, ас сереңде!*
*Асылыкүл балҡып көлдө.*
*Уның яҡты тулҡынында*
*Бер һыу ҡошо йөҙөп килде.*

*— Асылыкүл, ас сереңде,*
*Күрһәт тылсым-төйәгеңде!*
*Шул саҡ, тулҡындарҙы ярып,*
*Алтын балыҡ йөҙөп килде.*

*Әйләнде лә тулҡындарға,*
*Алтын балыҡ телгә килде:*
*«Тойомлайһың,*
*Асылыкүл*
*Батшалығы тылсым-илдең.*

*Тирә-яҡтың гөлгә сумған*
*Аҡландары, урмандары,*
*Саф һыулы аҡ шишмәләре —*
*Ошо илдең ҡорғандары.*

*Балыҡтары, ҡош-ҡорттары*
*Атҡара был ил хеҙмәтен.*
*Кәрәк саҡта ала улар*
*Төрлө кеше ҡиәфәтен.*

*Һаҡлай улар Асылыкүл*
*Батшалығы именлеген.*
*Мөъжизәләр менән тулы*
*Түре Асылыкүл-илдең.*

*Асылыкүл ерҙе һаҡлай,*
*Бирә илгә ҡот-бәрәкәт.*
*Тик хилафлыҡ ҡылһа кеше,*
*Көтә уны тик һәләкәт.*

*Күктең хәтәр ут-йәшене*
*Асылыкүл ҡосағында.*
*Улар тылсым көсөн туплай*
*Асылыкүл усағында.*

*Кемдер йәбер-золом ҡылһа*
*Йә әҙәм ғүмерен ҡыйһа,*
*Асылыкүл асыулана,*
*Ярҙарынан ярһып таша.*

*Ул сағында күк йөҙөндә*
*Утлы, хәтәр уҡтар оса.*
*Төйәктәрҙе гонаһ баҫһа,*
*Бәндәләрҙе әжәл ҡоса.*

*Асылыкүл — ул тере күл!..*
*Тыңланым мин хайран ҡалып.*
*Тулҡында бер әйләнде лә*
*Юҡҡа сыҡты алтын балыҡ.*

*Тирә-яҡта шундай һиллек,*
*Асылыкүл ята көлөп.*
*Бер аҡсарлаҡ ниҙер һөйләй,*
*Минең яныма уҡ килеп.*

*Баш осонда моң сәселде,*
*Әйтерһең дә, яуҙы алҡыш.*
*Мин аңланым:*
*Изгелеккә*
*Өндәне бер матур, ят ҡош.*

## Киске шәфәк

Йәҙа инең: «Ҡояш байыштарын
Күҙәткәндә, һине һағынам».
Шуға мәллә миңә киске шәфәк
Ҡәҙерлерәк таңдар наҙынан.

Үтте йылдар.
Тормош ағышында
Юлыбыҙ гел булды аймылыш.
Һөйөүемә, ҡайнар хистәремә
Гел үрелеп барҙы моң-һағыш.

Тик һағышлы ошо һөйөүемде
Мин бәпләнем йәндә, гел һаҡлап.
Йыш күҙәттем ҡояш байыштарын,
Исемеңде һинең ҡабатлап.

Һин юҡ күптән,
Инде байый бара
Үҙемдең дә ғүмер ҡояшым.
Киске шәфәк — һинең иҫтәлегең,
Киске шәфәк — минең моңдашым.

***

Айырылышыу мәлен тоя мәллә?
Асылыкүл бөгөн болоҡһоу.
Яр буйҙарын күкһел томан баҫҡан,
Үҙемә лә бөгөн бик моңһоу.

Мин белмәйем: тағы килерменме
Ҡойонорға көмөш һыуыңда.
Бары беләм: матур бер йыр булып
Уралдың һин минең уйыма.

Тулҡындарың иркәләгән төҫлө
Ебәк ҡанаттарын аҡҡоштоң.
Күңелемә аҡ моң булып тамды
Сихриәтле, наҙлы балҡышың.

## *Асылыкүл*

*/Сонет/*

*Асылыкүл — башҡорт диңгеҙе,*
*Саф һыуҙары әйҙәп, балҡып ята,*
*Сүп-сар булһа, уны ярға ата,*
*Күлдәрҙең ул олпат, серлеһе.*

*Юҡҡа тыумағандыр легендалар,*
*Һыуһылыуҡай һаман йәшәйҙер,*
*Айлы төндә сәсен тарайҙыр,*
*Уның серен белә тымыҡ ярҙар.*

*Килһәм Асылыкүл буйҙарына,*
*Кинәнесле бер хис солғап ала,*
*Саф һыуҙары талған йәнгә дауа,*
*Илһамлы моң сыңлай үйҙарымда.*

*Асылыкүл — серҙәр даръяһы,*
*Арҡайымдай һәр саҡ арбаулы.*

***

*Һаубуллашам Асылыкүл менән,*
*Күл өҫтөндә егерме бер аҡҡош,*
*Егерме бер аҡҡош, егерме бер балҡыш,*
*Һаубуллашам Асылыкүл менән.*

*Һаубуллашам Асылыкүл менән,*
*Ошо күлдең серле йондоҙҙары —*
*Аҡҡош тунын кейгән һыу ҡыҙҙары*
*Һаубуллаша мәллә минең менән?*

*Һаубуллашам Асылыкүл менән,*
*Ҡанаттарын ҡаға төркөм аҡҡош, —*
*Күл өҫтөндә мөғжизәле алҡыш,*
*Һаубуллашам Асылыкүл менән.*

Рәмил
ЙӘНБӘК

# «БЕР МӘЛЕМ ДӘ, БЕЛӘМ, КИРЕ ҠАЙТМАҪ...»

## *Ялған хыял*

*Эңер төшә.*
*Ҡара ҡараңғылыҡ*
*Ҡанат йәйә ҡала өҫтөнә.*
*Бүтән донъя — төнгө урамдарҙа,*
*Бүтән тормош керә көсөнә.*

*Бер аҙ ҡырҡыу, әммә йәп-йәш тормош*
*Солғап ала төнгө клубты.*
*Мин, әйтерһең, — улар араһында,*
*Йыл-йәшемде, гүйә, оноттом.*

*Әүәлгесә үткер ҡараштарым*
*Һөҙә кеүек халыҡ тулҡынын,*
*Эҙләп унда һинең күҙҙәреңде,*
*Һинең нурлы йөҙөң юҡһынып.*

*Аҡыл белә:*
*Татлы ялҡын бөрккән*
*Күҙ-ҡарашың ҡалған үткәндә.*
*Йөрәк һыҙа:*

*Рәмил Йәнбәк (1952) Күгәрсен районының Дауыт-Ҡайып ауылынан. БДУ-ны тамамлағас, республика гәзит-журналдары редакцияларында, «Китап» нәшриәтендә эшләй. Әлеге көндә «Ағиҙел» журналының баш мөхәррир урынбаҫары.*
*Ҡәләмдәшебеҙҙе юбилейы менән ихлас ҡотлайбыҙ.*

*Ҡиске аллеяла*
*Һин һаман да мине көткәндәй.*

*Йәшлектәге һымаҡ көтәмен мин*
*Төн ҡаланы яулап алғанын.*
*Йөрәкһенәм яҙғы тын кистәрҙә,*
*Ысын тойоп хыял ялғанын.*

***

*Беҙ ҙә арғымаҡ инексе:*
*Ел-дауылдар уйнатып,*
*Елдек йәшлек юлдарынан —*
*Мәңгелек тип уйланыҡ.*

*Мәңге түгел икән йәшлек —*
*Ғүмерҙең тик бер мәле.*
*Унда мәңгегә ҡалырға*
*Һис кем тапмай әмәлен.*

*Беҙгә лә йүгән кейелде,*
*Ауыҙлыҡтар сәйнәтеп.*
*Ошо тәҡдир һәр быуынға*
*Килеп тора әйләнеп.*

*Һабан һөрҙөк.*
*Муйындағы*
*Ҡамыттар шыпа еүеш.*
*Тәртәгә бикләй яҙмыштар —*
*Тормошта шулай тейеш.*

*Аҡыл керҙе сал баштарға,*
*Таныныҡ хаталарҙы.*
*Үкенес тулы ошо мәл*
*Ғүмер тип аталамы?!*

*Инде тиҙҙән, бик-бик тиҙҙән*
*Йүгәнде һалдырырҙар.*
*Хатта тәүләп — һәм мәңгегә! —*
*Тышауһыҙ ҡалдырырҙар.*

*Ул ирек хәҙер нимәгә?*
*Нимәгә йәшел болон?*
*...Унда елә бүтән тайҙар,*
*Уйнаҡлай йәп-йәш ҡолон.*

***

*Һандуғас булып һайраным,*
*Моңландым кәкүк булып.*
*Ни генә ҡылмаҫ бәндәләр,*
*Күңеле китһә тулып.*

*Торналар оса йыраҡҡа*
*Сыңрай-сыңрай тупланып,*
*Уларға ҡуша осорға*
*Ҡай саҡ ҡуям уҡталып.*

*Сит яҡтарҙа, бүтән илдә*
*Бәхет мул булыр төҫлө.*
*Кеше өмөт менән йәшәй,*
*Маҡсатлы ғына көслө.*

*Күҙ йәштәренә мансылып*
*Сит ерҙә ята алмам.*
*Торналар яҙын ҡайтырҙар,*
*Бер китһәм — ҡайта алмам.*

*Һандуғас булып һайрармын,*
*Кәкүктәй моңланырмын.*
*Бар булғанмын ошо илдә,*
*Ошонда юғалырмын.*

## ***Гонаһлылар***

*Гонаһлылар гонаһтары өсөн*
*Яуаплылыҡ тойһа, — йә, Хоҙа! —*
*Бөлмәҫ ине бөгөн илкәйгенәм,*
*Күрмәҫ ине халыҡ ек-ыҙа.*

*Батшаларҙың башлылары башта*
*Яҡын итһен халҡы аһ-зарын.*
*Бикләнмәһен ҡаты ҡанундарға,*
*Урап алып тәхет-диуарын.*

*Хәстәханаларҙа сирлеләргә*
*Өләшкәндәй төймә дарыуҙар,*
*Йән сыҡмаҫлыҡ ҡына бол алабыҙ —*
*Тотош ил менәнме ауырыуҙар?*

*Һуңғы көнө еткән ауырыуҙың*
*Һыҙланыуын укол тымыҙа.*

*Һыҙланыуҙы эскә йыя-йыя,*
*Ҡалмаҫбыҙмы хисһеҙ, һынһыҙға?*

*Ҡалмаҫбыҙмы нефть энәһенә*
*Ултыртылған булып наркоман?*
*Йәшен телде һымаҡ йөрәк итен,*
*Йылан утте кеүек арҡанан.*

*Газы бөтөр, нефть ағып китер,*
*Уяныр быҙ ғәфләт-йоҡонан.*
*Тик һуң булыр: илгә яттар хужа,*
*Йорт-ер таҡыр, рух йотолған.*

*Гонаһлылар гонаһтары өсөн*
*Яуаплылыҡ тойһа, — и, Хоҙа! —*
*Бөлмәҫ инек бөгөн зарураттан,*
*Сикмәҫ инек нахаҡ ек-ыҙа.*

## *Яҙмыштар ҡайҙа яҙыла?*

*«Яҙмыштар күктә яҙыла,*
*Беҙ — ҡол ғына ни бары».*
*Ҡешенән дә ҡеүәтлерәк*
*Кем, ни бар һуң юғары?*

*Аллаһ барға инанмаһаң,*
*Никтер шомло, ҡурҡыныс.*
*Мең һорауҙар ҡамауында*
*Нисек йәшәргә тыныс?*

*Беҙҙең Ер ише есемдәр,*
*Беҙҙеке ише Йыһан*
*Барҙыр ул арғы бушлыҡта —*
*Кем уларҙы бар ҡылған?*

*Әллә, урыҫ ҡурсағылай,*
*Йыһандар ҡатлы-ҡатлы?*
*Гиҙеп булмай ғаләмдәрҙе,*
*Уй уйлап баштар ҡатты.*

*Изге китаптар яҙа ла...*
*Үҙең күрһәң ышанып...*
*Тәүбә-тәүбә, көфөр уйҙы,*
*Фекеремде тышаным.*

*Заман етеп, яңы быуын*
*Асыр оло, ҙур серҙе.*
*Тик кем юрар беҙҙең заттар*
*Унда барып етерҙе?*

*Нисә дәүер көн күргән дә*
*Юғалған ғәрәсәттә.*
*Мал бүлешеп, ер йыртышыу*
*Ингән беҙҙең ғәҙәткә.*

*Сикһеҙ серҙәр сөңгөлөнә*
*Етһен ине кешелек.*
*Беҙҙең ҡулдан килерме был,*
*Әллә Аллаһ эшеме?!*

## Алтын ғүмер

*Шаршыларҙа осоп сабаҡ уйнай,*
*Тамсы алтынлана шаршыла.*
*Саф ысыҡҡа сумып, бар тәбиғәт*
*Ҡояш күҙ асҡанын ҡаршылай.*

*Берәм-берәм алтын нур уҡтарын*
*Ҡояш ата ҡая, тауҙарға, —*
*Әйтерһең дә, ҡырҡыу сардар әйҙәй*
*Үҙ ғәскәрен даулы яуҙарға.*

*Яу борғоһо оран һала төҫлө:*
*«Тере йәндәр, тиҙ үк тороғоҙ,*
*Алыш-көрәш тулы көн башлана,*
*Нур-өмөттән ҡәлғә ҡороғоҙ!»*

*Саф алтындан ҡойған йәйге иртә*
*Һоролаңыр инде, көн еткәс.*
*Һоро ғына ғүмер алтынланыр,*
*Ҡәҙерләнер инде, көҙ еткәс.*

*Нур ябынып, бөгөн иртән генә*
*Күҙем астым кеүек еремдә.*
*Ғәскәрҙәрен йыя ҡояш-сардар —*
*Яу асырға таңға киренән.*

## *Йәйге тымыҡ кистә*

*Тымыҡ ҡына йәйге бер кистә,*
*Һиллек килеп, тынғас бар хистәр,*
*Ултырайыҡ әле уйланып,*
*Эстән генә һыҙып, моңайып.*

*Тоноҡлана инде йәшеллек,*
*Моң-һағыштан арҡан ишерлек.*
*Өҫтәл һыға йыйған йәм-ниғмәт,*
*Һарыларға тарта тәбиғәт.*

*Ямғыры ла булды был йәйҙә,*
*Күперел үҫте үлән туғайҙа.*
*Салғыларҙы ҡабат янаным,*
*Бакуйларға әле яраным.*

*Бесәндәре кипкән шыптырлап,*
*Шишмә ағып ята шылтырап.*
*Тиргә батып, кәбән осланыҡ,*
*Ҡулда ҡалған бесән усламы.*

*Шул усламды ҡыҫып күкрәккә,*
*Йылы алып унан йөрәккә,*
*Ултырабыҙ йәйге кистә беҙ.*
*Тымыҡ-талғын ғына хистәбеҙ.*

## *Талпыныу*

*Кире һүрмә мине уйҙарымдан,*
*Инҡар итмә алһыу хыялды.*
*Ғәжиз булдым юлым ҡамалыуҙан,*
*Тоғро күреп аҡыл тыйғанды.*

*Йондоҙ ише, йәндә йымылдаша*
*Үткәндәрҙән ҡалған гөл-өмөт.*
*Зар-сырмауҙан итәм ҡотолмаҡҡа,*
*Туҡтаталмаҫ һис бер бик, өгөт.*

*Шулай кәрәк, тиеп йәшәнем мин,*
*Әҙәп һаҡлап, хисте тымыҙҙым.*
*Тик хәтерҙән мәңге юйылманы*
*Буйы-һыны, моңо һин-ҡыҙҙың.*

*Тәүәккәлдәр генә таш яра тип,*
*Баш ярмаҡсы булам ҡартлыҡта.*
*Ҡамауынан йылдар ысҡындырмаҫ*
*Әүәлге хис менән сафлыҡты.*

*Кире һүрәм йәнә уйҙарымды,*
*Биккә тыҒам алһыу хыялды.*
*ЫмһындырҒан йондоҙ балҡышынан*
*Өҫтөн, ахры, аҡыл тыйҒаны.*

***

*Ҡырау һуҡты һөйөү баҡсаларын,*
*Ал сәскәһе шиңде һөйөүҙең.*
*Ошо микән сиге һағыштарҙың,*
*Зар-интизар килеп көйөүҙең?..*

*Аҡ өмөтөм, ап-аҡ өмөттәрем*
*Йылдар туҙанынан керләнде.*
*Белһәң икән утлы һүҙең менән*
*Бәғеремде минең телгәнде.*

*Араласы ғишыҡ ғазабынан,*
*Тиеп Хоҙайыма ялындым.*
*Бәхетле йән, ғәзиз булыуҙарҙан*
*Мәңгелеккә мәхрүм ҡалынды.*

*Һаҡла, Хоҙай, ғашиҡ булыуҙарҙан,*
*Мең ғазап ул — һөйөү яуапһыҙ.*
*Ал сәскәһеҙ мин кем инде хәҙер,*
*Кем инде мин парһыҙ, ҡанатһыҙ?*

*Тилереп тә, тилмереп тә йәшәп*
*Ғүмер осона ла киленә.*
*Тилекәйем, тиеп бер өндәшһәң,*
*Кире осам йәшлек иленә.*

## *Киске ел иҫкәндә*

*Ут ҡабыҙып Айҙың шәмдәленә,*
*Күккә йондоҙ һибә киске ел.*
*Һуңғы ҡарын һирпеп ер тәненә,*
*Һаубуллаша, ана, иҫке йыл.*

*Бурыстары тәңгәл үтәлгәндер*
*Һәм теүәлдер алыш-биреше.*

*Әллә инде йәне үртәлгәнгә —*
*Ярһып-ярһып ҡарҙар һибеше.*

*Олпат бәндә кеүек, был йылдың да*
*Үкенесе, ахры, ҡалғандыр.*
*Гел ғәҙеллек түгел, быйылдың да*
*Үҙәгенә үткән — ялғандыр.*

*Шуға, ахры, сикһеҙ үрһәләнә,*
*Иңрәп һаубуллаша иҫке йыл.*
*Ут ҡабыҙып яңы йыл шәменә,*
*Күккә өмөт һибә киске ел.*

## Оло юл саты

*Тәнде таҙартырға мунсалар бар,*
*Йән сафлатыр сара табылмай.*
*Уҙған хаталарҙан ҡотолоу юҡ,*
*Уҙғандарға ишек ябылмай.*

*Ғәмһеҙҙәрҙең, моңһоҙҙарҙың ғына*
*Йоҡолалыр выждан, намыҫы.*
*Йылдар уҙған һайын тығыҙлана,*
*Ҡыҫа бара яҙмыш ҡамыты.*

*Бер мәлем дә, беләм, кире ҡайтмаҫ,*
*Ҡабатланмаҫ иҫке хаталар:*
*Ғүмер көҙөндә лә, япраҡ булып,*
*Аяҡ аҫтарыма яталар.*

*Мин уларҙан түгел, улар минән*
*Һорай төҫлө ғәфү, кисереү.*
*Шуға ауыр уҙғандарҙы иҫләү,*
*Яңылыштарҙы иҫкә төшөрөү.*

*Торам һаман оло юл сатында:*
*Уңға, һулға... Әллә тураға?*
*Хаталарҙан ҡурсып, йән иҙелә,*
*Күңелгә шик-шөбһә урала.*

## АМАНАТҠА ЮҠ УЛ ХЫЯНАТ

*Атайым ғүмере буйы тыуған төйәгенең тарихын яҙҙы. Бөйөктәрҙән кемдер «Ҡулъяҙмалар бер ҡасан да янмай» тигән хикмәтле һынамыш әйтеп ҡалдырған. Был дөрөҫтөр, күрәһең. Ҡалған ике ҡалын ғына папкаға, ундағы ҡулъяҙмаларға тотонорға баҙнат итмәй, ун өс йыл буйы өйөмдә һаҡланым. Яҙып бөтөлмәгән трилогияның өсөнсө өлөшө шунда ятҡанын яҡшы беләинем. Атайым, тормошоноң һуңғы айҙарында әҫәре өҫтөндә бик көсөргәнешле эшләүенә ҡарамаҫтан, романын тамамлай алманы. Үҙем иһә яҙмаларына тотонорға ниңәлер баҙнат итмәнем. Әммә яҙмаларҙы архивҡа ла тапшырырға ҡул барманы...*

*Шулай, атайым, Өмөтбаев Рамаҙан Ғимран улы, 1997 йылдың 24 августында был донъянан ҡапыл китеп, үҙенең күп кенә маҡсаттарын, үкенескә ҡаршы, тормошҡа ашыра алманы. Күп йылдар буйы ул үҙенең тыуған төйәге – Әлмөхәмәт ауылы тарихы тураһында яҙырға ниәтләнеп йөрөнө. Күпте үҙе лә күреп белә ине, күп нәмәләрҙе атаһынан, ҡарттарҙан ишетеп, күңелендә йөрөттө.*

*Үткән быуатта ауыл халҡы үҙ иңендә бик ауыр һынауҙар үткәрҙе. Граждандар һуғышы, ҡыҙылдар менән аҡтар араһындағы аяуһыҙ көрәш Башҡортостанда бигерәк тә киҫкен бара. Күп тапҡыр фронт тап беҙҙең ерҙәр аша уҙа, ҡайһы бер ауылдар ҡулдан ҡулға әллә нисә мәртәбә күсә. Башҡорттарҙың үҙбилдәләнеш өсөн алып барған көрәше, Башҡорт ғәскәренең башта бер яҡҡа, һуңынан икенсе яҡҡа күсеүе дөйөм хәлде тағы ла ҡатмарлаштыра. Иҫ киткес ҡанлы Граждандар һуғышы тынғас, йәнә бер афәт – ҡурҡыныс йот йылы килә. Аслыҡтан һуң тере ҡалғандар саҡ-саҡ аяҡҡа баҫа башлағас, ҡулаҡтарҙы әҙәрләү, халыҡты көсләп колхозға ойоштороу башлана. Унан һуң – халыҡтың иң аҫыл шәхестәрен юҡ иткән ҡара 1937 йыл, михнәтле һуғыш йылдары, аслыҡ, яланғаслыҡ...*

*Тик хаҡлы ялға сыҡҡас ҡына Рамаҙан Ғимран улына маҡсатын бойомға ашырырға мөмкинлектәр тыуа. 1985 йылда уның әҫәре Яҙыусылар союзының проза секцияһында тикшерелә һәм, етди төҙәтмәләрҙән һуң, роман рәүешендә баҫмаға тәҡдим ителә. Ул йылдарҙы иҫкә төшөрәйек. Хәҙерге йәштәр өсөн быны аңлауы ҡыйын да булыр, бәлки, ләкин ул дәүерҙә илебеҙҙең тарих биттәренең күпселеге халыҡ өсөн бикле ине. Кулактарға һәм «халыҡ дошмандары»на ҡаршы Совет власы ойоштороған көрәштең масштабтарын, ҡорбандарының ысын һанын ул ваҡыттарҙа беребеҙ ҙә белмәй инек. Торғонлоҡ сәскә атҡан шул ваҡыттарҙа 30-йылдарҙа булған хәлдәрҙе асыҡтан-асыҡ һүрәтләгән әҫәрҙең баҫылып сығыуы ла икеле ине. Шуға күрә автор 1930 – 1931 йылдарҙағы ваҡиғаларҙы урап үтергә һәм яҙмаларын Бөйөк Ватан һуғышы осоро менән тамамларға мәжбүр булды.*

*1993 йылда романдың тәүге китабы «Ысыҡтан эйелә ҡылған» исеме менән «Китап» нәшриәтендә донья күрҙе һәм әҙәбиәт һөйөүселәр араһында ыңғай баһа алды. Рамаҙан Ғимран улының вафатынан һуң, 1999 йылда, романдың «Һынылыш» исемле икенсе китабы баҫылып сыҡты. Ике романда барған ваҡиғалар 1930 йылдар менән тамамлана, ләкин китаптарҙа һүрәтләнгән хәлдәрҙән йәмғиәттә синфи көрәш, ярлылар һәм бай ҡатламдар араһында ҡапма-ҡаршылыҡ киҫкенләшә башлауы асыҡ күренә.*

*1996 йылдың 29 июль көнө... Романды тулыландырыу маҡсаты менән яҙыусы илһамлы эшләй башлай. Был ваҡытта ул әсәйем Мөхтәрәмә Таһир ҡыҙы менән Баймаҡ ял йортонда ял итә ине. Ә Талҡаҫ ярында атайым һәр саҡ оло дәрт менән, емешле яҙа торғайны. Ҡулъяҙманан күренеүенсә, ҡайһы бер көндәрҙә уның яҙғандары 20 – 25 бит тәшкил иткән. Яҙыу эшен ул 1997 йылдың 14 июль көнөндә, үлеменә бер ай ғына ҡалған саҡта, тамамланы. Үкенескә ҡаршы, яҙғандарын баҫмаға әҙерләп өлгөрә алманы.*

*Атайымдың яҙмаларына етди тотонорға бер ғәжәп һәм сәйер ваҡиға ярҙам итте. 2010 йылдың 24 август көнөндә, атайым үлгәненә тап 13 йыл булған көндө, эшләгән урыныма Өфөлә йәшәгән Нәилә исемле ике туған ҡарындашым тулҡынланған рәүештә килеп китте. Ниһайәт, таныштарҙан кемдер урамда букинистар һатып ултырған китаптар араһында атайымдың 60-сы йылдарҙа сыҡҡан һәм ауыл хужалығына арналған брошюраһын күреп ҡала һәм, 10 һумға һатып алып,*

ҡарындашыма тапшыра. Был китап миңә таныш ине, ләкин уның эсендә миңә бағышланған һәм мин бер ҡасан да күрмәгән яҙыу бар ине: «Улыма! Киләсәктә ошо брошюранан ун мәртәбәгә ҡалыныраҡ китап сығарырһың, тип өмөтләнәм. Р. Өмөтбаев. 31.12.1965 йыл» тип яҙылғайны унда. Быны атайымдың васыяты һәм теге донъянан килгән фарманы тип аңланым һәм ҡулъяҙманы әҙәби эшкәртеүгә ныҡлап тотондом. Әле «Ағиҙел» журналы уҡыусыларына шуны тәҡдим итәм.

Рамаҙан Өмөтбаевтың ижадын байҡап сыҡҡанда, шул асыҡ күренә: уның романдары, повестары һәм хикәйәләрендәге хәлдәр тыуған ауылы Әлмөхәмәт һәм уның кешеләренә бағышлана. Бар персонаждар ҙа – ҡәҙимге ауыл кешеләре, араларында тарихи шәхестәр ҙә осрай – Ғәбделманнап хәҙрәт һ.б. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, ул ғүмер буйы тыуған төйәгенең тарихын яҙҙы һәм уның романдарын «роман-хроникалар» тип атарға мөмкин. Был изге эште дауам итеүселәр ҙә табылыр, тигән өмөттә ҡалам.

Рамаҙан Өмөтбаевтың тарихҡа ҡарата ҡарашы һәр саҡ, заманалар үҙгәреп торһа ла, үҙгәреүһеҙ булды. «Һуңғы ваҡытта үткәнебеҙгә төкөрөүселәр һәм уны ҡәһәрләгәндәр һаны күбәйеп китте. Нисек кенә булмаһын, был – беҙҙең тарих, оло ҡыйынлыҡтар, ҙур ҡорбандар аша беҙ артылған үрҙәр. Уларҙы беҙҙең тормошобоҙҙан һис кенә лә юйып ташлап булмай. Октябрь революцияһынан башлап беҙҙең йәмғиәтебеҙ, шул иҫәптән әҫәрҙә һүҙ барған төбәктә лә, ошо ауыр һуҡмаҡтар аша атлаған. Китапта бер ниндәй ҙә бармаҡ осонан һурып сығарылған хәл-ваҡиға юҡ, барыһын да халыҡ үҙ елкәһендә кисергән. Әҫәрҙә һүрәтләнгән шәхестәр, күренештәр барыһы ла күреп-белгән, ишетелгәндән ғибәрәт. Әлбиттә, быға авторҙың художестволы төҫмөрләүен, тасуирлауын, ә ҡайһы бер осраҡтарҙа үҙ фантазияһын өҫтәүен дә иҫәпкә алырға кәрәктер. Шунһыҙ бер ниндәй ҙә әҫәр тыуа алмай...» Рамаҙан Өмөтбаевтың тәүге романына ҡарата әйтелгән фекер менән ризалашырға ғына ҡала. Сөнки ошо уҡ һүҙҙәрҙе трилогияны ослаусы өсөнсө өлөшкә лә әйтеү һис тә хилаф түгел.

**Рауил ӨМӨТБАЕВ**,
*журналист.*



**Рамаҙан**
**ӨМӨТБАЕВ**

# ИРӘНДЕКТЕҢ КҮКҺЕЛ ТОМАНЫ

## РОМАН

### Беренсе бүлек

Абдрахман Игебаевтың ГПУ тарафынан ҡулға алыныу хәбәре Ялан ауылында йәшен тиҙлеге менән таралып өлгөрҙө. Был йән тетрәткес яңылыҡ ауылдаштар араһында әллә ни саҡлы фараз тыуҙырҙы. Берәүҙәр Абдрахманды ысын күңелдән йәлләһә, икенселәре был хәбәргә асыҡтан-асыҡ кинәнес белдерҙе. Ә өсөнсөләре, урттарына һыу уртлағандай, үҙ мөнәсәбәттәрен бер нисек тә белдермәй, битарафлыҡ күрһәтте. Кинәт килеп сыҡҡан был ваҡиға ошоға тиклем һәүетемсә, үҙ яйына ғына йәшәп ятҡан Яланды әллә нисә төркөмгә бүлде. Бына шул саҡта беленде лә инде кемдең кем икәне. Был хәлваҡиға тураһындағы хәбәр Ҡыҙыл һыуының ағышына ғына түгел, уның үр яғына ла таралды. Бер уйлаһаң, мәҙәк һымаҡ: телефон бәйләнеше юҡ, бер кем хат та яҙмаған, ә, тоноҡ һыуға таш ташлағанда барлыҡҡа килгән бихисап түңәрәктәр кеүек, хәбәр бөтә Нәмәс төбәге ауылдарын да урап сыҡты. Ауылдар борон-борондан шул рәүешле йәшәй инде ул: бер ерҙә ҡапыл яңылыҡ ҡалҡып сыға ла, ялан үрте шикелле, тиҙ генә тирә-яҡҡа таралып китә.

Ә һуң Граждандар һуғышы тамамланғас, шуға тиклем һил генә ятҡан ауылдар ошо рәүешле берғауым шаулап алманымы ни? Большевиктар тәғлимәтенең кендеген тәшкил иткән синфи көрәш бойомға аша башлағас, бөтә ғәләм аҫты-өҫтөнә әйләнмәнеме? Иң башта Граждандар һуғышы йылдарында ни сәбәп менәндер ҡыҙылдар яғында һуғышып, түштәренә ҡыҙыл таҫма тағып ҡайтҡан ауылдаштар, «Мин – ҡыҙыл партизан, мин – ҡыҙыл гвардеец!» тип күкрәп һуғып, башта Зәки Вәлиди, ә аҙаҡтан Колчак яғында йөрөгән ауылдаштарына ең-яға килеп йәбешмәнеләрме ни? Осаһына ҡыҙыл галифе кейеп, балаҡ

*Өмөтбаев Рамаҙан Ғимран улы (1924 — 1997) Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауылында, крәҫтиән ғаиләһендә, донъяға килә. Һуғыш алдынан ғына Баҡыр-Үҙәк ҡасабаһында урта мәктәпте тамамлай. 1942 йылда үҙе теләп фронтҡа китә. Курск тирәһендәге ҡаты бәрелештәрҙә ауыр контузия ала. Һауыҡҡас, 11-се гвардия армияһы сафында Балтик буйын дошмандарҙан азат итеүҙә ҡатнаша. 1946 йылда демобилизациялана һәм «Сибайзолото» рудникғына старателдәр артеле хисапсыһы булып эшкә урынлаша. Тиҙҙән рудник комсомол ойошмаһының секретары вазифаһынан КПСС-тың Баймаҡ район комитетына саҡырыла һәм бында беренсе секретарға тиклемге юл үтә. Артабан ул — КПСС Өлкә комитетының ойоштороу бүлеге мөдире, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Рәйесе урынбаҫары, Кинофикация буйынса дәүләт комитеты етәксеһе.*

*Хаҡлы ялға сыҡҡандан һуң Р. Өмөтбаев йәмәғәт эштәренә һәм әҙәби ижадҡа әүҙем тотона: тиҫтәләгән хикәйә, очерктар, кино өсөн сценарийҙар ижад итә, унлап китабы баҫыла. Ул — милли рух, башҡорт телен тергеҙеү һәм халыҡ хазинаһы — ер мәсьәләләре хаҡында байтаҡ фәнни-иҡтисади мәҡәләләр авторы ла.*

*Рамаҙан Ғимран улы — күп орден-миҙалдар кавалеры, танылған дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, иҡтисад фәндәре кандидаты. Уға «Рәсәйҙең халыҡ мәғарифы отличнигы», «Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре» һәм башҡа маҡтаулы исемдәр бирелде. Башҡорт АССР-ы Юғары Советының алты саҡырылышына депутат итеп һайланды.*

остарын аяғындағы тәрән күн калошҡа тыҡҡан Мунаш ауылының Бәшәр тигән кешеһе, өҫтөндәге аҡ күлдәгенең иҙеүен умырып йыртып, Колчакта йәки Әхмәтзәки Вәлидиҙә йөрөп ҡайтҡандарға яңынан һуғыш иғлан итмәнеме? Ғәйнулла Хәйруллин исемле кешенең башын, Зәки Вәлидов ғәскәрендә атбағар булып хеҙмәт иткән өсөн, ҡыҙылдарҙа йөрөгән Ғәбделнафиҡ Өмөтҡужин мылтыҡ приклады менән яра һуҡманымы? Ошо уҡ кеше, әллә ҡасанғы үсен алам тип, Мортазин бригадаһында орудие менән командалыҡ иткән Ибраһим Өмөтҡужинға атып, саҡ ғүмерен өҙмәне лә баһа.

...Большевиктәр партияһының ярлы-ялпыны байҙарға, ерһеҙҙәрҙе ер хужаларына, наҙандарҙы ғилем-ғөләмә эйәләренә, башҡорттарҙы урыҫҡа ҡаршы ҡотортоп, уларҙы үҙ-ара тас та тос һуғыштырып власть башына килеүҙәрен Ялан ауылында бер кем дә аңламаны. Ҡырмыҫҡа иләүенә әлдән-әле таяҡ тығып, уны мыжғытып тороу, юҡ ерҙән хас дошман эҙләү, әгәр инде ул дошман булмаһа, уны яһалма рәүештә хасил итеү большевиктарҙың даими кәсебенә әйләнде лә киүек.

Ләкин, нисек кенә булмаһын, үҙе теләп ҡыҙылдарға яҙылып, аҡтарға ҡаршы һуғыштарҙа йәнен аямай ҡаһарманлыҡ күрһәтеп, фронтта ҡаты ғына яраланып ауылға ҡайтҡас «ата коммунист» булып киткән Абдрахман Игебаевтың үҙе яҡлаған сәүит власы төрмәһенә эләгеүе күптәрҙең мейеһен ҡайнатты.

Ялан ауылында был хәлде кем нисек нарыҡлағанын шураның даими рәйесе Аласов Ғәлиәкбәрҙән башлайыҡ, сөнки ул баштан уҡ был «эш»тең тере ғыуаһы булды. Ҡоралланған ике һыбайлы, өсөнсөһө кырандас арбала килгән ГПУ кешеләре ул төндө тәүҙә шура кәнсәһенә килеп туҡтаны. Ғәлиәкбәрҙең өйөн табып, бикһеҙ соланға инеп, әкрен генә ишек ҡаҡтылар. Нишләптер тамағына һыуыҡ тейеп, йоҡоһоҙ ятҡан хужа һикереп торҙо. Тышта береһен ҡалдырып, өйгә ингән ГПУ кешеһе һүҙҙе ҡыҫҡа ғына тотто:

– ГПУ-нан беҙ, кейенегеҙ!

Әллә ҡасандан бирле Салғыя битендәге йәшерен һөйләшеүҙәрҙең ҡасан да булһа бер осо сығырын көнө-төнө көткән шура рәйесе, ГПУ кешеһенең әмер рәүешендәге һүҙен ишеткәс, бөтөнләй ҡойолоп төштө. Теҙ быуындары йомшарып, урҙала элеүле торған салбарын кейә алмай оҙаҡ мәтәләнде.

– Сабыр итегеҙ, ҡустылар. Бәлки, шәм яғырғалыр? Ҡараңғы, кейемде табып булмай, – тине ул ҡалтыранған тауыш менән.

– Нисауа, үҙ өйөң, табырһың, – тине баяғы тимер тауыш.

Мыштыр-мыштыр кейенеп бөткәс, Аласов:

– Үҙем менән ниҙәр алайым? – тип һораны.

– Хәҙергә беҙгә һинең башың ғына хәжәт, – яңғыраны тупаҫ яуап.

Был һүҙҙе ишеткәс, хужаның ҡото табанына төшөп киткәндәй тойолдо. Ҡараңғыла түрбаш яғында һыңҡылдап иларға тотонған ҡатын-ҡыҙ тауышы ишетелде.

Ихатаға сыҡҡас, Ғәлиәкбәрҙән һорашып, Абдрахмандарҙың өйөнә йүнәлделәр. Ләкин уның өйө генә түгел, ҡапҡаһы ла бикле булып сыҡты. Ихата эсендә ларҡылдап эт өрә башланы. Абдрахманды тәҙрә аша саҡыртып сығарҙылар.

– Беҙ ГПУ-нан, этеңде тый, – тине баяғы кеше.

Абдрахман нишләптер бик тыныс, бер ҙә аптырамаған төҫлө:

– Этем йүнле кешеләргә теймәй, – тип яуапланы.

Ҡапыл өй баҫып ингән саҡырыуһыҙ «ҡунаҡтар»ҙың алдараҡ торғаны – Дзержинскийға оҡшатып шына һаҡал ебәргәне – шәм яндырып маташҡан Абдрахманға, кожанкаһының эске кеҫәһенән алып, дүрткә бөкләнгән ҡағыҙ һуҙҙы. Ҡара янған бите ялтырап, шәм эргәһендә ялан аяҡ баҫып торған хужа прокурор

ордерын уҡымайынса кире биргәс, хәҙер был мыҡты кеше тубығынан бөгөлөп төшөрөн, өйҙә шау-шыу башланырын көткән «шына һаҡал» үҙе лә ғәжәпкә ҡалды. Эштең бик тә ҡатмарлы икәнен бөтә йөрәге менән һиҙеп, иренә мөлдөрәп ҡарап торған Маргарита ҡапыл иренең муйынына аҫылынған килеш иларға керешкәйне, Абдрахман тыныс ҡына, үтенгән шикелле:

– Илама, Маргарита, күҙ йәшеңде ошоларға күрһәтмә, – тип бышылданы. – Юлға бер аҙ ашамлыҡ, йылы эске кейем әҙерләһәң яҡшыраҡ булыр...

Хужаның ошо хәлдә лә үҙен ысын ирҙәрсә тотоуы ҡаҡса ғына кәүҙәле һаҡалтайҙы сығырынан сығарҙы.

– Әллә һин, гражданин Игебаев, беҙҙең килерҙе алдан көтөп ятҡайныңмы? – тип һораны.

– Һуҡыр түгелбеҙ, хәлдәрҙе күреп йөрөйбөҙ. Хәҙергә, Аллаға шөкөр, ҡолаҡ та ишетә, – тип яуапланы Абдрахман.

– Ишетеүең яҡшы. Әйҙә, тиҙерәк йыйын. Яҡтыра башланы. Ашығырға кәрәк.

– Әллә ГПУ-ла, һуҡыр сысҡан шикелле, яҡтынан ҡурҡалармы ни?

– Телеңә һалышма! Һинең ишеләрҙе күп күргән бар. Беҙҙә бер-ике көн ултырһаң, осаң тиҙ ҡыҫылыр. Ҡорал һаҡлайһығыҙмы?

– Миңә ул хәжәт түгел.

Ишекте асып сығырҙан алда ГПУ вәкиле менән өй хужаһы араһында ошондайыраҡ әрепләшеү булып алды. Өҫтөнә ҡыҫҡа тун, аяғына бийма кейгән, былай ҙа мыҡты кәүҙәле, бөтә кеше аша ҡарап торған Абдрахман ҡатынын ҡосаҡланы ла нишләргә белмәй мейескә һырынып, бөршәйгән көйөнсә һыңар күҙе еүешләнеп торған Ғәлиәкбәр ҡартҡа ҡулын һуҙҙы. Абдрахман менән Ғәлиәкбәрҙең ҡараштары осрашты. Шура башлығының ҡарап торорға йәл, ҡайғы баҫҡан сырайын, бөтөнләй бөлгән һынын күргәс, Абдрахмандың асыуы ҡабарҙы. Ул шешмәк күҙ ҡабаҡтарын өҫкә һирпеп, бөршәйгән Ғәлиәкбәргә уҫал ҡараш атты.

– Ғәлиәкбәр ағай, ниңә шул тиклем ҡайғыға дусар булдың? Һине ҡулға алмайҙар бит, минең арттан килделәр. Өҙгөләнмәгеҙ, өйөгөҙҙән мәйет оҙатмайһығыҙ ҙаһа!

Быны Абдрахман барыһы ла ишетерлек итеп әйтте.

Илауҙан һаман туҡтай алмаған Маргарита уны биленән ҡосаҡлап, аяҡ осона баҫты ла иренең шыраулы битенән үбеп алды. Абдрахмандың күкрәгенә бисәһенең ҡабарған ҡорһаҡ йылыһы килеп бәрелгән төҫлө булды.

– Бәлки, Вахитты уятырғалыр?

– Юҡ, уятмағыҙ, йоҡлаһын. Баймаҡҡа эш менән... оҙаҡҡа китте, тиерһегеҙ. – Абдрахман шура башлығына тағы ла бер ҡарап алды.

– Ғәлиәкбәр ағай, балаларҙы үҙ хәстәреңдән ташлама инде. Хушығыҙ, ҡайғырмағыҙ, берәй буталсыҡ килеп сыҡҡандыр. Оҙаҡ тотмаҫтар, ҡайтырмын.

– Хуш, ҡустым, һинең һымаҡ ир-азаматтарҙы ла ала башлағас, был нимә менән бөтөр инде? Ауылыбыҙҙың ҡото бөттө хәҙер. Мин бит һине үҙ урыныма ҡалдырырға йөрөй инем, – тине Ғәлиәкбәр ҡарт һәм илап та ебәрҙе.

Абдрахманды кырандасҡа һаҡ аҫтында ултыртып алып киткәс, Ғәлиәкбәр оҙаҡ ҡына бер урында ҡатып торҙо ла, ҡап уртаһынан биле һынғандай, кәкрәйеп, күҙен ҡульяулығы менән һөртә-һөртә, өйөнә йүнәлде. Көнсығышта, Салғыя тауының һыртында, юлаҡ-юлаҡ булып һыҙылып таң атты. Тағы ла яңы көн тыуҙы.

Бикһеҙ өйөнә инеп, шәм дә яндырмай, ул нишләптер, бәләкәй бүкән шылдырып, усаҡ алдына ултырҙы. Ултырҙы ла береһенән-береһе шомлораҡ уйҙарға батты. «Мине нишләп уның өйөнә алып барҙылар, әллә пүнәтәй итепме? Улай

тиһәң, ауылда Абдрахман күршеләрендә пүнәтәй булырлыҡ кеше бөткәнме ни? Әллә уларға урындағы шура рәйесе кәрәк булдымы? Туҡта, туҡта, улар бит Совет власы исеме менән үҙҙәренең ҡара эштәрен башҡарып ята түгелме? Миңә уларға Абдрахмандың өйөн күрһәткәс тә, рөхсәт һорап, ҡайтып китергә кәрәк-кән... Нишләп барып, башымды үҙ ихтыярым менән шунда тыҡтым? Хәҙер Абдрахмандың, мине Ғәлиәкбәр ағай ҡурҡышынан ГПУ-ға тотоп бирҙе, тип уйлауы бар. Әгәр Игебаев тәфтиш ваҡытында аҡтар менән ҡыҙылдар һуғышҡан осорҙа Бөрйән-Түңгәүер кантонында булып үткән ҡанлы ваҡиғалар тураһында берәй һүҙ ысҡындырһа? Бөгөн булмаһа, бер нисә көндән бит уны Йылайыр йә Белорет төрмәһенә Абдрахман менән ҡуша ябып, бер епкә бәйләп, хөкөмгә тарттырасаҡтар. Ҡартайған көнөндә төрмәлә кеше үлтереүселәр менән бергә ултыр инде шунан. «Йә, Раббым! Тартай теленән таба, тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр икән. Теге ваҡытта ләпелдәп, Абдрахманға әллә нәмәләр һөйләп ташланым шул. Башты белмәмешкә генә һалырға кәрәк булған. Башҡортҡа аҡыл һуң төшә икән...». Үкенде Ғәлиәкбәр, бик ныҡ үкенде... Хужабикә уянып, усаҡтың ҡоро көлдөксәһе алдында уфтанып ултырған иренә, башын ҡалҡытып:

– Ят урыныңа, һары таңдан тороп, кәртәңде емереп барған малың юҡтыр бит, – тигән булды.

– Мал юҡ та ул, әммә ләкин... – Һөйләнә-һөйләнә башы ауыртҡан, йөрәге һыҙлаған Ғәлиәкбәр, танау аҫтынан мыңғырҙап, бисәһе ҡырына һикегә менеп ятты. Ләкин төнгө ваҡиға хаҡында ләм-мим өндәшмәне, сөнки ҡарттың уны аңлатырға хәле ҡалмағайны.

...Шура рәйесе шул хәлдән һуң ун көн самаһы, йөрәге тотоп, үҙ түшәгендә башын да күтәрмәй, аунап ятты. Был хәбәр ауылда гәзит алдырып, сәйәсәттең ҡайһы юсыҡҡа китеп барғанын беренселәрҙән булып төсмөрләгән Ҡәҫтәрән Ғәлимов ҡолағына ла барып етте. Бай шундуҡ ауыл шураһына йүнәлде, ләкин уныһы бикле булып сыҡты. «...Һуңғы ваҡытта Абдрахман менән әшнәләшеп киткәйне, бер ҙә уның һүҙенән сыҡмай торғайны, әллә беҙҙең сельсовет рәйесен дә рәшәткә артына тығып ҡуйҙылармы?» – тип уйланы Ҡәҫтәрән, ләкин, күп тә үтмәй, уның йөрәк өйәнәгенән ауырып ятыуын ишетте. «Тимәк, Абдрахмандың ГПУ ҡулына эләгеүен тыныс ҡына кисерә алмаған йә үҙе өсөн ҡурҡҡан... Сәүит үткәргән яңы иҡтисад сәйәсәтенең һуңғы ваҡыттағы хилафлыҡтарын ауылда беренсе булып күҙаллаған батыр, арыҫлан ине. Шундай етди, оло хәбәрҙе кешенән шикләнмәй әйтергә йөрәк кәрәк бит! Коммунистарҙың Нәмәстәге йыйылышында ла һис ҡурҡып тормай, иҡтисад яңылышлыҡтары хаҡында сәсрәтә әйтте, тиҙәр. Уны башҡа иреккә сығармаҫтар инде, фирҡәгә үҙ ҡурайына бейемәгән башлы кешеләр кәрәкмәй. Уларға тик үксәне үксәгә шыҡылдатып, юғарынан төшкән фарманды урынына еткереп үтәй торған ғына һыу мейеләр кәрәк. Эх, һәләк булды ир-арыҫлан. Әҙерәк белеме булғанда, теләһә ниндәй кантон башлығы булып ултырырлыҡ. Йәйкар ырыуынан иң төплө кешеләрҙең береһе ине». – Шундайыраҡ фекерҙәр йөрөттө Ҡәҫтәрән Ғәлимов.

– Абдрахман ағайҙы алып китмәһәләр, сәүит төрмәһе тулмай ҡалыр, тип ҡурҡҡандарҙыр. Ул киткәс, беҙҙең бергәләшеп ер эшкәртеү ширҡәтенә Яланда баш булырлыҡ, уның кеүек эш тәртибен, ер эшен яҡшы белгән кеше юҡ. Ширҡәтте хәҙер үк таратырға була, сөнки ул барыбер юҡҡа сығасаҡ. Беҙ быйыл яҙ еткәс иген дә сәсә алмабыҙ, моғайын. Ширҡәт ҡороуының башы шул буласаҡ, – тине ширҡәт йыйылышында уның әүҙем ағзаһы Әүхәҙи. – Мин тураһын әйтәм, ултыртырҙар, тип ҡурҡып тормайым. Совет власы мине төрмәгә тығып йөн сығара алмаҫ!

Булған хәлгә ауыл йәштәре лә битараф ҡалманы һәм үҙҙәренең йыйылышында был мәсьәләне уртаға ҡуйҙы.

– Абдрахман Игебаевты төрмәгә ултыртҡандан ауылыбыҙ күпте юғалтты. Ул һуғыштан ҡайтҡаны бирле ауыл халҡы бер аҙ уянып, төрлө кәсепкә берегеп ҡалғайны, кешелә йәшәү, донъя көтөү ғәме күҙгә күренеп көсәйҙе. Хәҙер эштәр болғанлап, йөнһөҙ уҡ һымаҡ китер инде, – тине сираттағы кисәлә комсомол башлығы Мөхәммәтнур Өмөтҡужин.

Ләкин ҡайһы бер комсомолдар был фекер менән килешмәне. Абдрахманға ҡарата үс тотоп, күптән үте ташып йөрөгән Уйылдан, унық өсөн яҡшы булған был хәбәрҙе ишеткәс тә, ҡулына күсәк тотоп Абдрахмандар йортона килеп: «Кем әләкһә, шуның башын өҙә һуғам!» – тип тә ярһып йөрөнө. Ҡойма менән уратып алынған ихатала уны Вахиттың йөнтәҫ Кетмер исемле эте абалап ҡаршыланы. Бәйенән ысҡынған эттән ҡасып бейек болдорға менгәс, Уйылдан күсәген эткә табан ырғытты ла, рөхсәт-фәлән һорап тормайынса, Абдрахмандың өйөнә килеп инде.

– Әссәләмәғәләйкүм... биғәйбә. Өйҙә кем бар? – тип ул алан-йолан ҡаранып алды. Төпкө бүлмәнән Шәмсинурҙың мөсһөҙ генә тауышы ишетелде.

– Өйҙә мин генә, ауырып ятам.

Уйылдандың ниндәй кеше икәнен күптән ҡаға-һуға ишетһә лә, ул тиклем бәғерһеҙ кеше түгелдер типме, Шәмсинур үҙҙәренең өйөнә килгән ҡайғы менән уртаҡлашырға уйланы.

– Уйылдан ағай, бөгөн төндә Абдрахманды алып киттеләр. Вахит менән икәү ултырып ҡалдыҡ. Башты ҡайҙа ҡуйырға белмәйем. Үҙем ауырып киттем, йөрәк һыҙлай. Бындай хәл булыр, тип ғүмерҙә уйламаным. – Шәмсинур, күҙен һөртә-һөртә, ятҡан урынынан тороп, карауатына ултырҙы.

– Ә шулаймы? Һин унық нишләп ҡулға алынғанын белмәйһеңме ни? Бына беҙ бик яҡшы беләбеҙ: ул фирҡә билеты артында йәшеренеп йөрөгән, сәүит власының хас дошманы булған, партия үткәргән яңы иҡтисади сәйәсәтте тәнҡитләп ҡаршы сыҡҡан! Колчакта йөрөгән өсөн атайым мәрхүм менән минең боғаҙға йәбешкәне өсөн, башы күптән төрмәлә серергә тейеш ине, ләкин...

Уйылдан һүҙен бөтөрә алманы. Эске көсөргәнештән нишләргә белмәгән Шәмсинур ҡыҙарған бите буйлап аҡҡан күҙ йәшен бер ҡулы менән һөртте лә, йоҙроҡтарын төйнәп, Уйылданға табан килә башланы. Кинәт ҡулына эләккән һеперткенең көлтә яғын эләктерҙе лә унық төбө менән Уйылдандың башына һуҡты.

– Бына һинең һымаҡ кешеләрҙе төрмәгә ултыртырға кәрәк! – тип ҡысҡырҙы Шәмсинур һәм ярһыуынан туған теленә күсте. – Пошел вон из моего дома, гад!

Шәмсинур Уйылданды этеләп-төрткөләп соланға ҡыуып сығарҙы ла эстән ишек еләһен элде. Уйылдан, тоҡҡаға йәбешеп ишекте тартҡылай-тартҡылай, эсендәген асып ебәрҙе:

– Әле был – башы ғына, һеҙҙең күрәһеләр алда, кешенән эшләтеп ингән өйөгөҙҙө, хужалығығыҙҙы тартып алырбыҙ. Сәүит дошманының Яландағы тоҡомон ҡоротасаҡбыҙ!

– Әйҙә ҡорот, ҡорот, тик күҙемдән юғал! – тип ҡысҡырҙы Шәмсинур.

– Һеҙ беҙҙең өйҙә торған өсөн бер һарыҡ бурыслыһығыҙ. Шуны түләгеҙ, – тип екеренде Уйылдан.

– Бөгөн мин малдарҙы көтөүгә ҡыуа алманым. Барыһы ла кәртәлә бикле тора, теләһә ниндәй һарыҡты тот та алып ҡайт. Тығыл, бирән! – тине Шәмсинур, ауыр тын алып, һәм кире карауатына барып ултырҙы.

Уйылдан кәртәгә йүнәлде. Һарай ҡапҡаһын асып, ул бер мөйөшкә һырынып

торған һарыҡтарҙы «бәр-бәр» тип ялан кәртәгә әйҙәне. Тар ҡапҡа аша сыҡҡан һәр бер һарыҡтың һыртын, ҡабырғаһын ҡулы менән һәрмәп, һимеҙлеген тикшереп торҙо.

«Бына әләкте, нәгеҙ ласын ҡуй*!» – Уйылдан бер арыуыҡ осалы һарыҡтың үңәсенә сат йәбеште.Ситән бағанаһында элеүле торған арҡан менән муйынынан әләктереп, һарыҡты тартҡыслап ихатаға сығарыуы булды, быны күҙәтеп ятҡан Кетмер ларҡылдап башта уның балағына, һуңынан арт яғына йәбеште. Быны көтмәгән Уйылдан һарыҡты ҡулынан ысҡындырырға мәжбүр булды. Ләкин йөнтәҫ Кетмер, Уйылданға әйләнеп, үҙен типкеләргә ирек бирмәне. Бәләкәй ҡапҡанан оло урамға сыҡҡас ҡына, Кетмер Уйылданды тешенән ысҡындырҙы. Шулай ҙа көндөҙгө ҡараҡ кейгән тышлы тундың ҙур ғына бер киҫәге эт тешенә әләгеп тороп ҡалды.

«Кулактар! Көткән малы хужаһына оҡшамай ҡайҙа барһын. Бөтә донъяларын үртәп, был хас дошмандарҙың көлөн күккә осорорға кәрәк!» – Уйылдан йүгерә-атлай үҙ өйөнә йүнәлде.

Шул көндө үк кискә бер төркөм комсомолдар һәм йәштәр йыйылышып, үҙҙәренең сәркәтибе Мөхәммәтнур Өмөтҡужиндың өйөнә килде. Яҡынлаша башлағас, уларҙы етәкләгән Уйылдан бер аҙ шөрләй башланы. «Әсәһе Ҡобра әбей элгәрге кеүек туҡмас таяғын тотоп хур итмәһә ярар ине!» – тигән уй уның башынан сыҡманы. Ләкин уҫал әбейҙең өйҙә юҡ сағы тура килде. Һүҙҙе алдан төшкән Уйылдан башланы:

– Бына бөгөн төндә ГПУ килеп, Абдрахман Игебаевты ҡулға алған. Ул ошо көнгә тиклем ауылда һыуҙан пак, һөттән аҡ коммунист булып йөрөнө. Һәр кемгә мәғлүм ки: бер кемде лә алъюһыҡҡа ҡул аҫтына алмайҙар. Бына беҙ, комсомолдар һәм актив ауыл йәштәре, һинә шуның сәбәбен белергә килдек. Үҙен иң алдынғы кеше тип һанағандарҙы ла төрмәгә япҡас, кемгә ышанырға, кем артынан барырға? Әйҙә, Мөхәммәтнур, беҙгә яуап бир, – тип Уйылдан ярһый-ярһый йәштәрҙең өй баҫып килеп инеүенең сәбәбен аңлатты.

– Мин әүлиәме ни? Уның ни сәбәп менән хөкөм аҫтына алынғанын мин ҡайҙан беләйем? – тине аптырап комсомол ячейкаһы сәркәтибе. – Бына тәфтиш башланғас, төбәк мәхкәмәһе был мәсьәләне үҙ ултырышында ҡарап, ҡарар сығарыр, шунда уның ғәйебен белербеҙ. Ниңә алдан ҡысҡырып, һарбай һымаҡ йөрөргә? – тип өҫтәне уртала ҡалған Мөхәммәтнур.

– Ә беҙгә хәҙер кәрәк! Беҙҙең алдағы юлыбыҙ һәр саҡ ап-асыҡ күренеп ятырға тейеш, – тине февраль айының буранлы көнө булыуға ҡарамаҫтан ялтыр хром итек кейгән Ҡорманғәле. Уның артҡа ебәргән сөм-ҡара сәсе шәм яҡтыһында, нур өҫтәгәндәй, ялтырап тора ине.

– Эйе лә һуң! Беҙ, һәпәләк уйнаған шикелле, бәйле күҙ менән алға бара алмайбыҙ. Белмәһәң, волостан вәкил килеп, беҙгә төшөндөрөп китергә тейеш, – тип Ғүмәр ҡустыһын яҡлап сыҡты.

– Нимә теләйһегеҙ шуны эшләгеҙ, мин уның өсөн волосҡа бармам инде, – тип Мөхәммәтнур ҡырҡа баш тартты.

– Ярай, иптәштәр, сәркәтиптең тыныуын һиҙҙек. Ҡанды ҡан тартмай нишләһен, Мөхәммәтнур уның ағай-энеһе лә инде. – Уйылдан тағы ла һүҙгә ҡушылды.

– Улайһа китһә, беҙ барыбыҙ ҙа уның заты. Сәүит власы туғанлыҡты танымай, инҡар итә, бында бушты һөйләп, сәйнәнеп торма, – тине Сафыя Өмөтҡужина.

– Ысынлап та, бында барыһы ла Өмөтҡужиндар, – тине кемдер.

– Ярай, ярай. Комсомол тип тамаҡ яраһығыҙ, тик телгә генә шәп икәнһегеҙ.

---

**Ласын ҡуй – Көнсығыш Башҡортостанда осалы һарыҡты элгәре шулай атанылар.*

Асылда барығыҙ ҙа ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡты һөрәһегеҙ, – Уйылдан иһә сәркәтибенең һүҙен ҡырынға һапланы. – Мөхәммәтнурҙың волосҡа барырға күтенән килмәһә, иртәгә һары таңдан шунда үҙем китәм.

Хәйләкәр Уйылдан волкомол сәркәтибе Хәлимовтың Игебаевҡа мөнәсәбәте электән дә тиҫкәре булыуын күптән белә. Мөхәммәтнур уйланды-уйланды ла, ат эйәрләп, иртәгәһенә волость үҙәгенә юлланды.

Волкомол сәркәтибе уны ҡушҡуллап ҡабул итте. Мөхәммәтнурҙың Ялан комсомолдарының был эшкә мөнәсәбәте тураһындағы һүҙен Хәлимов урынынан тороп, ҡулдарын ыуа-ыуа ҡабул итте. Уның эске шатлығы ҡаҡса битенә сыҡҡайны.

– Был мөһим сәйәси ғәҙәттән тыш мәсьәлә буйынса мотлаҡ комсомол йыйылышы үткәрергә кәрәк. Йәштәр, һис шикһеҙ, был ваҡиғаға үҙҙәренең сәйәси ҡарашын белдереп, ҡарар ҡабул итергә тейеш, – тип йомғаҡланы үҙ һүҙен сәркәтип. – Ауылығыҙға үҙем килермен.

Бер нисә көндән һуң Яланға килеп төшкән волкомол сәркәтибе Хәлимов ҡатнашлығында шаулы ғына йыйылыш булып алды. «Ағымдағы ваҡытта йәштәрҙең синфи һиҙгерлеген көсәйтеү тураһында» исемле докладты волкомол етәксеһе, төкрөктәрен сәсә-сәсә, оҙайлы ғына уҡыны. «Беҙҙең социализм төҙөүҙәге иң тотҡарлыҡтарҙың береһе булып капитализмдың үтә зыянлы ҡалдығы – ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡтың һаман да һаҡланыуы ғына түгел, киреһенсә, киң сәскә атыуы тора. Бына бөгөнгө йыйылыш – шуның асыҡ сағылышы. Синфи һиҙгерлекте ҡырҡыулаштырыуҙа комсомол йәштәрҙең әһәмиәте көндән-көнгә күтәрелергә тейеш!» – тип тамамланы Хәлимов телмәрен.

Ҡайһы бер йәштәр «Ауылдағы социализм еңеүе өсөн сынығҡан берҙән-бер коммунист Абдрахман Игебаевтың бинахаҡҡа ҡулға алыныуын аңлашылмаусанлыҡ һәм сәйәси хата тип иҫәпләргә» тигән ҡарарҙы нисек кенә үткәрергә тырышмаһын, ул тәҡдим аҙсылыҡ тауыш йыйып, үтә алманы. Хәлимов яҡлаған «Коммунист Абдрахман Игебаев – партия сәйәсәтенә ҡаршы сыҡҡан Бухарин оппозицияһының ауылдағы эйәрсене, был хәл – Ялан ауылының урындағы комсомол ойошмаһының ғәмәлдәге эшмәкәрлегендә синфи һиҙгерлекте юғалтыуҙың һөҙөмтәһе» тигән икенсе ҡарар тәсдиҡ ителде. Үҙ ҡарарының бер артыҡ тауыш менән булһа ла үтеп китеүенән түбәһе күккә тейгән Хәлимов, йыйылыштың шундуҡ күсереп яҙылған протоколын портфеленә тығып, Хәлим ауылына ашыҡты.

Хәлимдә ошо ваҡиғаға арналған фирҡә йыйылышын үткәреү ҙә Хәлимов иптәшкә йөкмәтелгәйне. Яҡындағы ун ауылдан йыйылған вәкилдәр был мәсьәлә буйынса һүҙ ҡуйыртып торманы. Киреһенсә, был тәүге ойошманың теҙгенен ҡулдарында тотҡан Тәңребәндиндар, Игебаевтың эшмәкәрлеген ныҡлап белмәһәләр ҙә, унан элекке үстәрен алырға булдылар. «Өмөтбай арығы» ширҡәтенә генә түгел, ғөмүмән, Ялан ауылы кооператив йәмғиәтенә тәғәйен ҡорамалдарҙың ошо Тәңребәндиндарҙың күрһәтмәһе менән үҙ мәнфәғәттәренә әрәмшәрәм ителеүе хаҡында бынан бер йыл элек Абдрахман волость кимәлендә ныҡ ҡына дәғүәләшеп йөрөгәйне. Күрәһең, шул асыуҙың ҡоһорон алыу өсөн бөгөнгө йыйылышты Тәңребәндиндар бик оҫта файҙаланмаҡсы. Ғәмәлдә шулай килеп сыҡты ла.

Хәлимов ике урында шаулы йыйылыш үткәреп, Нәмәс волосына еңеүсе рухы менән ҡайтып төштө. Билдәле, уның тырышлығы партияның волость комитеты тарафынан да юғары баһаланды. Бынан алты-ете йыл элгәре генә балалар йорто тәрбиәләнеүсеһе булып йөрөгән тәпәш буйлы Ғәле Хәлимов күңелендә был мыҡты кәүҙәле, тура һүҙле, ҡурҡыу белмәгән Абдрахман һәр саҡ ниндәйҙер көнләшеү

тойғоһо тыуҙыра ине. Шуға күрә Игебаевҡа ике урында йыйылып «ясин уҡытып» ҡайтҡан комсомол башлығына шатлығынан түшәмгә һикерергә, үҙенең шәхси еңеү тантанаһын байрам итергә бөтә нигеҙлек бар ине. Батты был шаҙра Абдрахман һыу төбөнә, бер ҡасан да ҡалҡып сыҡмаҫлыҡ булып батты, тигән ҡәтғи ҡарар сығарҙы Хәлимов ҙур кинәнес менән.

***

Абдрахманды кырандасҡа ултыртып алып киткән ике һыбайлы һәм уның менән йәнәш дилбегә тотоп барыусы ГПУ хеҙмәткәре юлда оҙаҡ ҡына һөйләшмәй барҙылар. Улар ауылды сығып киткәнсе үк аттарын ҡыҙыулатты. Нишләптер уларҙың күңелендә ҡурҡыныс ине, бына-бына Игебаев ҡулы аҫтында эшләгән ширҡәт кешеләре ишетеп ҡалырҙар ҙа, ҡулдарына һәнәк-балта тотоп, берәй урында ҡаршы сығырҙар һымаҡ тойолдо.

Ауылды сыҡҡас та Ҡорүҙәк буйлап бер аҙ барғас, улар Күсей яғына боролдо. Тимәк, былар мине башта волость үҙәге Нәмәскә алып барырға итәләр, тигән уй тыуҙы Абдрахманда. Кинәт ҡулға алынған коммунист үҙ уйҙарын тигеҙ генә итеп бер сылбырға теҙә алманы. «Нисек кенә килеп сыҡты һуң был хәл, нишләп мин, үҙ йәнем-тәнемде аямай Совет власы өсөн көрәшкән кеше, ауылыбыҙҙа уның беренсе ҡорбанына әүерелдем? Ҡаным менән яулап алған был власҡа мин ниндәй яуызлыҡ ҡылдым? Мин һуңғы төбәк партия йыйылышында Яңы иҡтисади сәйәсәттең яңылыш йүнәлеш ала барыуын тәнҡитләгән өсөнмө? ВКП(б) уставы һәм программаһы буйынса, тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү – партияның этәргес көсө, тип яҙылған түгелме ни? Уны ғәмәлдә ҡулланмағас, тәнҡит иткән һәр бер коммунисты төрмәгә тыға, юғарынан төшкән һәр бер фарманды ҡушҡуллап ҡаршы ала башлаһаҡ, беҙ киләсәктә ҡайҙа барып терәлербеҙ? Ғәмәлдә тикшереп тә ҡарамайынса һәр бер бойороҡто һис шикһеҙ үтәй башлаһаҡ, айт тигәнгә тайт тип торһаҡ, беҙ бөтә Совет илен – армия казармаһына, ә халыҡты һалдатҡа әйләндермәбеҙме? Ауыл – взвод, ауыл шураһы – рота, волость – батальон, кантон – полк, ә инде йәмһүриәт дивизия булырмы? Уның башында торған фирҡә етәкселәре шул ғәскәрҙең төрлө баҫҡысында торған командирҙары кеүек...

Бына эш нимәгә китте. Иң ҙур командирҙың һәр бойороғо дөрөҫмө ул, хилафмы – һис шикһеҙ, барыһы тарафынан да үтәлә торған ҡанун. Хәҙерге волком секретарының хоҡуғы Николай батша заманындағы волость старшинаһы Ғәлимйән Өмөтҡужиндыҡына ҡарағанда күп ҡатар артыҡ, сөнки Ғәлимйән хажиҙың яңылыш күрһәтмәләрен төҙәтә торған волость идараһы булған. Ә хәҙер?..»

Алда барған һыбайлы туҡтарға әмер бирҙе лә атының теҙгенен тартты. Икеһе лә аттарынан төшөп, кырандасты урап алды.

– Әйҙә, бер көйрәтеп, гражданин Игебаевтың ҡайғыһын уртаҡлашып алайыҡ,– тине конвой етәксеһе булған һаҡалтай. Ялан ауылынан йыраҡлашҡан һайын, һаҡсылар үҙҙәрен тынысыраҡ тоя ине. – Ниңә беҙҙең компанияға ҡушылмайһың, әллә ошо йәшкә етеп тормош һине тәмәке тартырға ла өйрәтмәнеме? – тип көлдө ул.

Абдрахман бер ни ҙә өндәшмәне. «Йә тупаҫыраҡ һүҙ ысҡындырып, быларҙан ошо урында судһыҙ-ниһеҙ атылып үлерһең. Ғәлиәкбәр ағайҙың һөйләүенә ҡарағанда, күпме ғәйепһеҙ кешене бына ошолай алып китеп, ГПУ атып йыҡҡан... Аҙаҡтан мәйетеңде лә таба алмаҫтар».

– Нишләп өндәшмәйһең, әллә телеңде йоттоңмо? – Һаман бәйләнде башлыҡтары.

– Ул бит ширҡәт етәксеһе. Беҙҙең һымаҡ ябай ГПУ хеҙмәткәрҙәре менән һөйләшеп тормаҫ инде, – тине икенсеһе.

– Нисауа, һөйләштерербеҙ. Тейешенсә допрос ала башлаһаҡ, теле телгә йоҡмай тәтелдәп торор әле. Ярай, хәҙергә бына ошоноһо етеп торор, – тип һаҡалтай, һүҙен йомғаҡлағанын аңлатып, осона ҡурғаш ныҕытылған ҡамсы менән ике тапҡыр Абдрахмандың арҡаһына һуғып ебәрҙе. Бер яҡ бөйөрөнә тура килгән ауыр ҡамсы осо уның ҡабырғаһына бысаҡ менән сәнскән кеүек тәьҫир итте. Ауыртыуҙан бигерәк тә асыуынан Игебаевтың күҙ алдары ҡараңғыланды. Ул бер аҙ һеңгәҙәп ултырҙы, ләкин иҫен юғалтманы.

Байтаҡ ҡына ваҡыт үткәс, Яланды ҡаплап ятҡан Өлкән Сағыл артынан ҡояш сыҡты. «Беҙҙекеләр тора ла башлағандарҙыр. Әсәйем менән атайым, тәһәрәт алып, намаҙға ултырғандыр... Исмаһам, малайҙы уятып, маңлайынан бер үбеп тә китә алманым. Шәмсинур ауыры менән һуңғы ай йөрөй, был хәлдә нисек кисерер икән?» – Абдрахманды йылғыр уйҙар кире Яланға әйҙәне.

Күсей ауылына инмәй, уны уратып үттеләр. Йәнгүҙәй аҫтына еткәс, Абдрахманға арбанан төшөргә ҡуштылар. Уның йөрәге өҙөлөп, «жыу» итеп аҫҡа төшөп киткәндәй тойолдо: «Күрәһең, ошо ерҙә минең үлемемдер, йәнде алырға итәләрҙер». Абдрахман, мәңгегә хушлашҡан шикелле, бала саҡтан таныш Ирәндек һыртына ҡараш ташланы. Ул тунының иҙеүҙәрен ысҡындырып, Маннап хәҙрәт мәҙрәсәһендә ятлаған аят доғаларын эстән генә уҡып алды. «Бына ошолайтып үҙеңә үҙең ясин да сығарырһың, ГПУ тигән ғазраил боғаҙыңдан алһа».

– Гражданин Игебаев, иҫкәртеп ҡуям: юлдан уңға йәки һулға ике аҙым тайпылыуың – ҡасырға маташыу тип баһаланасаҡ. Бындай саҡта беҙ ҡорал ҡулланабыҙ. Быны иҫеңдә тот. Минең арттан атла, – тине һаҡ башлығы һәм юл башланы.

– Кырандаста килеп аяҡтарың һыныҕып киткәндер, әҙерәк йәйәүләп яҙып ал, – тине икенсе һаҡсы.

Башта аттар аянлап барған саҡта был ылауҙың тапалған яҙғы батҡаҡ юлдан атлауы Абдрахманға күңелле һымаҡ та тойолғайны. Граждандар һуғышы осорондағы поход маршына оҡшатты ул Ирәндек тауына менеп барған был төркөмдө. Күрәһең, алдан һөйләшеп ҡуйылғандыр: ҡалҡыулыҡҡа менеп, һарҡыуға төшә башлағанда, аянлап барған аттар кинәт юртыуға күсте. Кырандас менән ике һыбайлы араһында ҡалған Абдрахманға башта аҙымын тиҙләтергә, бер аҙҙан хатта йүгерергә тура килде.

– Әйҙә, әйҙә, тиҙерәк! – тип ҡысҡырҙы иң алда барған һыбайлы. Абдрахмандың артында килгән аттың эҫе тыныуы уның елкәһенә бөрктө. Кырандаста ултырған өсөнсө кеше уның һайын атын шәберәк ҡыуҙы. Ауыр тун кейгән Игебаев, бер аҙ йүгереп бара торғас, манма тиргә төштө. Ул башындағы кәпәсен алып, ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырҙы, башы осонда әсе тир боҫо бәләкәй генә болот булып өҫкә күтәрелде. Алдағы һыбайлы һаман атын тиҙләтә барҙы.

Тамам хәле бөтөп, арттағы аттан төртөлә-төртөлә килгән Абдрахман йүгереп барған ыңғайында тунын һәм кәпәсен юлда ташлап китергә мәжбүр булды. Хәҙер инде ул йоҡа пинжәктән генә ҡалды. Кырандаста ҡырын ултырып барған кеше: «Начальник иптәш, подследственный Игебаев бөтә кейемен ташлап китте», – тип ҡысҡырҙы.

Ылау туҡтаны. Алда барған һыбайлы боролоп килде лә, башын алға эйеп, бар көсөнә ике-өс тапҡыр Абдрахманды яурыны аша ҡамсы менән һыҙыра тартты. Уның «Әһ,әһ...» тигән тамаҡ төбө ыңғырауы ғына сыҡты. «Йүгер, кире барып кейемеңде ал, бында һиңә ауылдағы кеүек батрактар юҡ!» Теге кеше киҙәнеп тағы Абдрахмандың боҫорап торған башына һуҡты. Ул, йығылып барған ағас кеүек, ике яҡҡа сайҡалды ла юл ситенә ауҙы. Ике күҙе араһына тап килгән йәрәхәттән сорлап ҡан аға башланы. Һаҡсылар аттарынан төшөп, ҡарға тамған ҡан

эҙҙәрен тапарға кереште. Шунан улар юлда ятҡан кейемдәрҙе кырандасҡа ырғытып, Абдрахмандың башын шарфы менән бәйләнеләр ҙә яңынан ҡуҙғалдылар. Бер аҙ киткәс, алда барған һаҡсы үҙенең әмерен еткерҙе:

– Һин был сволочты кейендереп ал, тирләп килгән көйө юлда туңып ҡалмаһын.

Иҫе инмәле-сыҡмалы булып ятҡан Абдрахман үҙен кейендергәндә лә, һуңынан да бер һүҙ өндәшмәне. Алдағы һыбайлы атынан төшөп, Игебаевтың күгәреп шешкән күҙ ҡабаҡтарын ҡалҡытып ҡараны һәм:

– Артығын ебәргәнбеҙ, шикелле. Нәмәскә еткәнсә йәһәннәмгә ҡойроҡ сәнсеп ҡуймаһын. Хәйер, уның унда китеүе беҙҙең өсөн дә, үҙе өсөн иң уңайлы булыр ине. Тик аңлатма биреп йөрөүҙәре бик мәшәҡәт була торған, – тине лә тәмәке тоҡандырҙы.

Нәмәстәге волость мәркәзенә яҡты күҙҙә барып инеүгә мөмкинлек булыуға ҡарамаҫтан, Абдрахманды алып барған кешеләр үҙ йөрөшөн юрый яйлатты: көпә-көндөҙ ҙур ауыл урамынан үтеп китергә шикләнделәр. Ялан енәйәтселәре ултырған таныш таш келәткә бәләкәй ылау эңер төшкәс кенә килеп туҡтаны. Һаҡсылар Абдрахманды күтәреп, стена буйына һуҙылған ҡаҡ һикегә һалды.

– Быңдағы йылылыҡ тыштағыһы менән бер тиңдер, моғайын. Әйҙә, буржуйканы яғып ебәрегеҙ, – тип бойорҙо башлыҡтары. Шунан, усын ҡуйып, Абдрахмандың тынын тикшереп ҡараны. – Тере, тик ныҡ ҡына ҡанһыраған. Әгәр иртәгә ҡәҙәр тере ҡалһа, бәлки, артабан алып китербеҙ.

Игебаев менән йәнәш ултырып килгән һаҡсыны көтөргә ҡалдырып, ҡалған икәү келәттән сығып китте.

Төн уртаһы ауғас, тәне ут һымаҡ янған Абдрахман яңынан иҫен юғалтты. Ниҙер ҡысҡырып, ҡулдарын болғаған саҡта башы уралған дебет шарфты алып ташланы. Уның күгәреп шешкән битенә тағы ҡан һарҡыны. ГПУ хеҙмәткәре яраны усы менән ҡаплап маташтуы, ләкин, күп тә үтмәй, ҡуйы ҡан уның бармаҡ араларын ҡыҙартты. Ҡанға буялған ҡулын өҫкә күтәреп, нишләргә белмәй аптырап торған был кешегә бынан йыраҡ түгел генә ҡалҡыулыҡта ултырған дауаханаға йүгереүҙән бүтән сара ҡалманы. Дежурҙағы шәфҡәт туташы аша ҡараңғы төндә баш докторҙы саҡыртып килтерҙеләр. Шәфҡәт туташын эйәрткән Аполлинарий Христофорович, тышы йөнлө тунын элмәйенсә лә, ГПУ хеҙмәткәре артынан яманаты сыҡҡан төрмә урынына файҙаланылған таш келәт яғына йүгерҙе.

Уның ишеген асыу менән яңы ғына һикегә аҡҡан ҡан еҫе танауына бәрелде. Ингәс тә Аполлинарий Христофорович баш осонда янған һуҡыр шәм аҫтындағы кешегә ҡапланды. Ауырыуҙың яранан ҡанға ҡатып шешенгән битен күреп, ҡалтыранған тауыш менән:

– Әллә күҙемә күренә микән... Был бит?.. – тине лә, бер аҙым артҡа сигенеп, йөрәгенә йәбеште. Кеҫәһенән дарыу сығарып, теле аҫтына һалғас, бер аҙ, һыны ҡатҡан кешеләй, һүҙһеҙ торҙо.

– Ҡайһы ауылдан килтерҙегеҙ был кешене? – тип һораны доктор.

– Яландан, – тип ҡыҫҡа ғына яуапланы һаҡсы.

Ҡулға алынған кешенең Абдрахман Игебаев булыуында докторҙың бер ниндәй ҙә шиге ҡалмағайны. Ләкин ул бер ни ҙә өндәшмәне.

– Сестра, килегеҙ яҡыныраҡ. Тиҙ генә яраһын бәйләргә кәрәк. Уның маңлай һөйәге сатнаған. Ярай әле, күҙҙәре имен... Ниндәй баһадирҙы үлтерә яҙғандар бит, ҡәбәхәттәр! – тине Аполлинарий Христофорович.

Быны ишеткән ГПУ хеҙмәткәре, ҡурҡытырға теләгәндәй:

– Доктор, телегеҙҙе тыйһағыҙ, яҡшыраҡ булыр. Уның менән бергә эләгеүегеҙ

ҙә ихтимал, – тиеүе булды, былай ҙа эсендә асыуы ҡайнап торған Аполлинарий Христофорович тунының ике салғыйын асты ла:

– Нимә, инде сират миңә еттеме? Мин һинең атаңдан оло кеше! Һеҙгә кеше йәне кәрәк булһа, ат, ҡанһыҙ! Тик ул ғына тере ҡалһын, – тине ҡалтыранған тауыш менән. – Күрмәйһегеҙме ни, уның ҡан юғалтыуҙан үлеүе мөмкин.

– Юлда килгәндә бысылған түмәр ҡырына башы менән йығылып, үҙен үҙе йәрәхәтләне. Бында беҙҙең касафат юҡ, үҙе ғәйепле, – тип мыңғырҙаны һаҡсы.

– Мин был донъяла күп йәшәгәнмен, ҡырҡ йылдан ашыу табип булып эшләйем. Йәрәхәттең ниҙән булыуын мин үтә күреп торам, һин миңә әкиәт һөйләмә. Тупаҫ, ауыр әйбер менән башына һуғып, маңлай һөйәген сатнатҡанһығыҙ. Әгәр һөйәк ярсығы мейеһенә ҡаҙалһа, уның үлемендә һеҙ ғәйепле булырһығыҙ.

– Ә һин хәлде ҡабартма! Ул айыуҙай кешене үлтерер өсөн башына күҫәк менән һуғырға кәрәк.

– Кәрәк булһа, һеҙ уныһын да табырһығыҙ. Яралыны мин хәҙер үк больницаға һалам. Шунан консилиум да үткәрермен. Уның ни сәбәпле ошо хәлгә төшкәнен тикшерербеҙ, диагнозын да ҡуйырбыҙ, – тине доктор, ярһыуын йәшерә алмайынса.

– Төрмәгә ябылған подследственныйҙы алып китергә һинең бер ниндәй ҙә хаҡың юҡ!

– Мин, табип булараҡ, судһыҙ-ниһеҙ төрмәгә ябылған кешене генә түгел, һуғыш ваҡытында әсир төшкән дошман һалдаттарын да үҙ ҡарамағыма алып, һауыҡҡанса дауаларға хаҡлымын һәм мин шулай эшләнем дә. Әле ғәйепһеҙ кешене үлем хәленә еткәнсә туҡмарға белгәнһегеҙ, ә законды ишетергә лә теләмәйһегеҙ!

Шәфҡәт туташы Абдрахмандың башын бәйләгәнсе, табип менән һаҡсы араһында ошондай етди һөйләшеү булып алды.

Шул ваҡытта саҡырылған ике санитар килеп, Абдрахманды носилкаға һалып Нәмәс больницаһына алып китте. Докторҙың кире ҡаға алмаҫлыҡ дәлилдәренә ГПУ хеҙмәткәре тупаҫ рәүешле ҡаршы торорға самалағайны ла, үҙ һүҙле ҡарт:

– Больницаға һалмаған осраҡта һеҙ туҡмаған кеше таң атҡанса мотлаҡ йән бирәсәк. Әйҙә, улай булғас, үҙегеҙ дауалағыҙ, үҙегеҙ яуап та бирерһегеҙ, – тип сыға башлағайны, һаҡсының башына айныҡ уй килде: «Ысынлап та, ошо келәттә Игебаев йән биреп ҡуйһа, уның өсөн кем яуап бирер? Иң башта үҙебеҙҙекеләр бәләне миңә япһармаҫмы? Әйҙә, алып китһендәр, нәтижәһе өсөн үҙе яуап тотор...» Шулай ҙа, һүҙ юҡта һүҙ булһын тигән кеүек:

– Һеҙ унда ҡарағыҙ, уның менән берәй хәл булһа, башығыҙ менән яуап бирәсәкһегеҙ, – тип һаҡсы төрмәнең ишек төбөндә оҙатып ҡалды.

Ләкин уның күңеле барыбер тыныс түгел ине. Ҡулға алынған Игебаевты докторға тотторо биргән өсөн баштан һыйпамаҫтар, моғайын. Таш келәттә төн буйы көтөп ултырыуҙан да фәтеүә сыҡмаҫ. Был турала начальствоға хәбәр итергә кәрәктер, тигән фекергә килде һаҡсы. Таш келәтте бикләп, волость милицияһы бинаһына йоҡларға киткән иптәштәренә йүгерҙе. Килеп сыҡҡан сетерекле хәлгә тик хәҙер генә тейешле баһа биреп, ныҡ тулҡынланған һаҡсы ишек шаҡырға тотондо. Кистән араҡы төшөрөп, ҡаты йоҡоға талған иптәштәре башы аҫтында ятҡан нагандарына йәбеште һәм икеһе ишектең ике яғына баҫты.

– Кем бар унда? Кем кәрәк?

– Мин, кесе командир Кувшинов.

Тупһаны аша атлағас та, аҡ кальсонда һәм иңер баулы күлдәксән генә ҡалған ГПУ хеҙмәткәрҙәрен Кувшинов кәфенгә төрөнгән мәйеткә оҡшатты. Абына-һөрөнә шәм яндырҙылар. Милиция бинаһының һыуыҡ иҙәнендә ялан аяҡ баҫып торған икәү бер тауыштан:

– Ни булған, әллә Ялан контры теге донъяға остомо? – тип һоранылар ҙа ҡурҡыу ҡатыш ҡараштарын инеүсегә текәнеләр, ләкин тегеһе яуап бирергә бер ҙә ашыҡманы.

– Ниңә һуҙаһың? Һөйлә тиҙерәк: капутмы, юҡмы? – Улар тештәрен шаҡып, өшөгән аяҡтары менән иҙәндә тызынып алды.

– Үлмәне, ләкин уны алып киттеләр, – тине Кувшинов.

– Кем ҡушты? Нисек? – Улар, күҙҙәрен аҡайтып, өсөнсөһөнөң ауыҙына аңшайҙы.

– Төндә подследственный Игебаев исән юғалтты, ыңғыраша башланы. Бер мәл ҡулын болғап, башы бәйләгән шарфын алып ырғытҡайны, ҡаны аға башланы...

– Юрый ҡылана, сволочь, симулировать итә! Шунан нимә булды? – Түҙемһеҙлек менән ашыҡтырҙы башлыҡтары.

– Тегенең яраһынан аҡҡан ҡанын ҡул менән баҫып ҡарағайным, туҡтата алманым. – Ашыға-ашыға һөйләүен дауам итте Кувшинов. – Хәле бөткәс, хырылдай башланы. Төрмәне бикләнем дә больницаға йүгерҙем. Килгән врач Игебаевтың башын бәйләне лә уны алып китергә ҡушты.

– Нишләп бирҙең?

– Әйҙә, үҙегеҙ дауалағыҙ, барыбер ул таң атҡанса йән бирәсәк, тине. Ул кешене һеҙ юлда туҡмап алып килдегеҙ, яуаплылыҡ һеҙҙә була, тип миңә бәйләнде. Шундай хәлдә мин нишләргә тейеш? Минең быға ҡыҫылышым юҡ, мин бит уны туҡмаманым.

– Ә һин, маңҡа, күп һөйләнмә! Телеңде тыйырға өйрән, юғиһә, ҡырҡып ташларбыҙ, – тине башлыҡ һәм уйлана-уйлана елкәһен тырнап алды.

Былар тиҙ генә кейенделәр ҙә больницаға йүгерҙеләр. Тағы ла баш врачты уятып, уның кабинетын астырҙылар. Бында ингән ГПУ хеҙмәткәрҙәре докторҙың йыйнаҡ ҡына йылы кабинетына асҡан ишектән томан булып бәргән төнгө һалҡын менән ҡуша үҙ ауыҙҙарынан кистән эскән һаҫыҡ араҡы еҫен бөрктө. Үҙ ғүмерендә шарап-араҡы йотмаған ҡарт доктор, былар яғына килә башлағас, башын бороп, пенсне кейгән ҡырлы танауын сирҙы.

Ул үҙ ултырғысына ултырҙы ла пенсненың төҙәтеп алды.

– Ни йомош? Минең бурысым ниҙән ғибәрәт?

– Мин ГПУ-ның Йылайыр кантоны бүлегенән, – тине башлыҡтары һәм танытмаһын һуҙҙы.

– Хуш-хуш, бик яҡшы...

– Волость төрмәһенә ултыртҡан кешене төндә һеҙ беҙҙең рөхсәттән тыш алып китеп, үҙ больницағыҙға урынлаштырғанһығыҙ. Беҙ башҡарған дәүләт эшенә ҡыҫылырға һеҙҙең ниндәй хаҡығыҙ бар? – тине теш араһынан һәр һүҙен ташҡа баҫҡандай асыҡ сығарған башлыҡ.

– Һеҙ минең ҡарар менән риза булмаһағыҙ, рәхим итегеҙ. Үҙегеҙҙең, һеҙ әйткәнсә, подследственныйығыҙҙы таш келәтегеҙгә кире алып китегеҙ. Ул таң атҡанса ҡанһырап йән бирәсәк. Бының өсөн үҙегеҙ яуап тотасаҡһығыҙ. Мин һеҙҙең иптәшегеҙгә барыһын да асыҡ итеп аңлатҡайным бит инде. Ә бында ятһа – уның яҙмышы өсөн мин яуаплы.

– Уға ниндәй диагноз ҡуйҙығыҙ?

– «Ауыр предмет менән һуғыу нәтижәһендә баш һөйәгенең асыҡ һыныуы һәм ҡурғашлы ҡамсы менән туҡмау арҡаһында тәненең өҙгөләнгән йәрәхәттәре» тип яҙҙым, – тине Аполлинарий Христофорович, тауышын көсәйтеп.

– Һеҙ нимә һөйләйһегеҙ? Беҙҙе нахаҡтан уны туҡмауҙа ғәйепләргә итәһегеҙме? Аҙаҡтан яуап бирергә тура килмәһен. Ул үҙе йығылып башын ватты. Тимәк...

– Мин, врач булараҡ, иҫен юғалтҡан былдай хәлдәге кешене һеҙҙең ҡулығыҙға тотторып, күрәләтә үлемгә ебәрә алмайым. Минең хәбәрем шул: башҡаса бер ни ҙә әйтә алмайым. Белгегеҙ килһә, минең вазифам һеҙҙекенән юғарыраҡ, мин – икенсе рангтағы военврач! Честь имею! – Доктор ялтыр пенснеһын ҡулына алды ла талған күҙҙәрен мәрмәр һымаҡ ап-аҡ, оҙон бармаҡтары менән ыуғыланы.

ГПУ хеҙмәткәрҙәре был «батша заманынан тороп ҡалып, үрәпсәләп ултырған контр»ҙы тупаҫлыҡ менән еңергә лә самалағайны, ләкин ни тиклем генә кәпереңһәләр ҙә, докторҙың ғәҙел фекерен уртаҡлашмай булдыра алманылар. Шулай ҙа Зарипов, сигенеүен күрһәтергә теләмәйенсә:

– Ҡайҙа әле, ҡарт, Игебаевҡа яҙған медицина һығымтаңды бир әле бында, – тип өҫтәлдә ятҡан ҡағыҙға ҡулын һуҙҙы.

– Әйҙә, ҡарағыҙ, – тине Аполлинарий Христофорович, ҡаршылыҡ күрһәтмәйенсә, һәм тейешле ҡағыҙҙарҙы өҫтәл ситенә шылдырҙы.

Башлыҡ дауахана мисәте һуғылған ҡағыҙҙарҙы диҡҡәт менән ҡарағас, йән асыуы менән:

– Ҡайҙа ҡарама – бөтә ерҙә контрҙар! – тип әйтә һалды, шунан ҡулындағы ҡағыҙҙарҙы ваҡ ҡына киҫәктәргә йыртты ла, усында йомарлап-йомарлап, бар көсөнә мөйөштәге ҡый һауытына ырғытты. – Беҙ иртәгәгә тиклем, ҡарт, уны һинең ҡарамаҡҡа ҡалдырабыҙ. Ләкин таң сыҡҡанса арестованный менән тегебыл хәл була ҡалһа, яуап биреһегеҙ. Иртәгә осрашырбыҙ, – тип сығып китте. Уның артынан ике яраны эйәрҙе.

Иртә менән тороп, был өсәү Нәмәс волкомына йүнәлде. Уларҙы диҡҡәт менән тыңлап ултырған партияның волком секретары Кейекбаевҡа төнгө ваҡиға буйынса үҙҙәре уйлап тапҡан юраманы ҡуйырта-ҡуйырта һөйләп бирҙеләр. Билдәле, ГПУ хеҙмәткәрҙәре нисек кенә бәләне ғәйепләнеүсенең үҙенә япһарырға маташмаһындар, батша армияһының элекке офицеры, байтаҡ тормош тәжрибәһе туплаған Кейекбаев быларҙың бер һүҙенә лә ышанманы. Шулай ҙа, күрәһең, партия сафтары ныҡлығы һәм сафлығы һағында үҙенең һиҙгер торғанлығын күрһәтергә теләгәндәй:

– Партияға осраҡлы эләккән сәйәси дошмандарҙың һаны бихисап. Партия йыйылышында беҙҙең сәйәсәтте фашлап һөйләү – бер эш, ә инде органдар ҡулына эләккәс, үҙенең ҡурҡаҡлығы арҡаһында шундай аҙымға бара, тиген, ә? Тимәк, партия сафтарына әле рухы сыныҡмаған, сәйәси яҡтан өлгөрөп етмәгән кешене алғанбыҙ, – тип волком секретары үҙенең ҡуңыр битенә етдилек һыҙаттары йүгертте. – Власть башында осраҡлы кешеләр партияға суртан артынан эйәргән селбәрә һымаҡ ынтыла. Уларҙы ҡыҙған тимер менән яндырыу – беҙҙең дөйөм бурыс!

ГПУ хеҙмәткәрҙәре үҙ уйҙырмаһына «мөкиббән ышанған» волком секретары менән йылы хушлашып сығып китте.

Кабинетта яңғыҙы ҡалған Кейекбаев тәрән уйға сумды һәм был сетерекле ваҡиғаға үҙенең шәхси баһаһын бирҙе: «Билдәле, былар Игебаевты юл буйы туҡмап ошо хәлгә еткергән. «Батырлыҡтар»ын күргән бар. Хәҙер ул баш врач Аполлинарий Христофорович ҡарамағына күсте. Унда минең ҡыҫылышым юҡ. Игебаевтың төбәк партия йыйылышындағы сығышы тураһында мин кәрәкле органдарға ваҡытында еткергәнмен. Әгәр улар ғәйәпләнеүсене юлда туҡмап, уны больницаға тапшырған икән, быныһы – үҙҙәренең намыҫында. Әйҙә, үҙ-ара бүлешһендәр, яғалашһындар. Ләкин... Бухарин, Рыков агенты нишләп партия сафында ҡалырға тейеш? Бының өсөн үҙемә эләкмәҫме? Бөгөн үк хәл итергә кәрәк!»

Волком секретары шундуҡ бюро ағзаларын йыйып, «Партия сәйәсәтенә ҡаршы Бухарин-Рыков төркөмөн яҡлап сығыш яһаған Абдрахман Игебаевты партия сафтарынан ҡыуырға!» тигән тәҡдим индерҙе. Бюро ағзалары, сәйәси өлгөргәнлек күрһәтеп, был ҡарар өсөн берҙәм тауыш бирҙе.

Кейекбаев төбәк дауахананың врачын саҡыртып, ғәйепләнеүсенең хәле хаҡында һорашырға ла уйлағайны, ләкин, бер аҙ ултырғандан һуң, ниәтенән баш тартты һәм бәләле хәлгә ҡыҫылмаҫҡа ҡарар итте.

Шулай итеп, Ялан ауылында төндә ГПУ ҡулына эләккән Абдрахман Игебаевтың һаҡсылар тарафынан юлда туҡмалыуы арҡаһында Нәмәс больницаһының баш врачы Аполлинарий Христофорович ҡарамағында ҡалыуын төбәктә бер кем дә белмәне. Ул хаҡта тик Нәмәс волкомы бюро ағзалары, ГПУ хеҙмәткәрҙәре һәм баш врач ҡына хәбәрҙар ине. Ләкин өс яҡ та был турала ләм-мим һүҙ сығарманы.

Кейекбаев иһә партия уның иңенә һалған вазифаны үтәне: Бухариндарҙың «Уң тайпылыш»ын яҡлаған эйәрсенен фирҡә ағзалығынан сығарҙы. Ул тик Игебаевтан партия билетын тартып ала алманы. Секретарҙың волкомдан ебәргән кешеһенә бер нисә көн доктор тәрбиәһендә ятып иҫенә килгән Абдрахман: «Мине партияға һеҙҙең волком секретары ҡабул итмәне. Мине партияға Урал өлкәһенең Ҡыҙыл волкомы алды. Мин үҙем тере саҡта билетымды бер кемгә лә тотторасағым юҡ!» – тип әйтә алды һәм яҙмышының Аполлинарий Христофорович ҡулына эләгеүенә мең-мең рәхмәт уҡыны. Ләкин, үҙ-ара килешеү буйынса, улар бер-береһен күптән белеүен йәшерергә булдылар.

Кейекбаев, бер аҙ уйлағандан һуң, бюро ҡарарын ҡағыҙҙар араһына төпкәрәк тығып ҡуйҙы. «Әлегә беренсе булып йәүкәләмәйерәк тороу хәйерлерәк...»

ГПУ хеҙмәткәрҙәре лә ашығыңҡырап, ҡулдарына төшөр-төшмәҫтән Игебаевты судһыҙ-ниһеҙ язалап ташланылар ҙа, хәҙер, нишләргә белмәй, артҡы шәрифтәрен ҡашырға керештеләр. Әлбиттә, законды боҙғандарын улар яҡшы аңлай. Наҙан крәҫтиәндәр менән быға оҡшаш хәлдәр булғылай, ләкин уҡымышлы, үҙе өсөн тора белгән Игебаев менән бындай ваҡиға эҙһеҙ үтмәйәсәген «күк кейемдәгеләр» һиҙенә, әлбиттә. Шуға күрә волком секретары Кейекбаевтың үҙҙәре уйлап сығарған уйҙырма менән килешеүе Нәмәс волосына Игебаевты ҡулға алырға ебәрелгән ГПУ хеҙмәткәрҙәрен ҡанатландырып ебәрҙе.

«Ярай әле, бер ҡатлы волком секретарын контр Игебаев маңлайын ҡырҡылған төпкә үҙе бәрелеп яралағанына ышандыра алдыҡ»,– тип шатланды эсенән генә аяҡ араһында уралып барған ҡылысының эфесын ҡулы менән тотоп, ҡабаланып атлап барған Зарипов. Ләкин ҡулға алынған Игебаев менән берәр хәл тыуып китһә, бөтә яуаплылыҡты үҙенең иңенә һаласаҡтары иҫенә төшөп, күңелендә бөрөләнеп килгән ҡәнәғәтлек осҡоно шундуҡ һүнеп ҡуйҙы. Зарипов яңынан больницаға йүнәлде. Берәй төрлө ҡарарға килерҙән алда ҡулға алынған кешенең хәл-әхүәле ҡыҙыҡһындырҙы уны.

Баш врач бүлмәһенә килеп ингәс тә Зарипов һүҙ башларға ашыҡманы. Башта, портсигарын сығарып, папирос ҡабыҙҙы. Шунан балаҫлы иҙәндә алды-артлы йөрөп алды.

– Йә, доктор, теге Яланский контраның һаулығында берәй төрлө үҙгәреш бармы? – тип һораны ул эре генә.

– Хәҙергә иҫенә килгәне юҡ, һаман ауыр хәлдә. Инеп үҙ подследственныйығыҙҙы күреп сығырға мөмкин, – тип Аполлинарий Христофорович урынынан тора башланы.

– Юҡ, юҡ. Уны күреү беҙгә бөтөнләй хәжәт түгел, сөнки уның һаулығы хаҡында беҙ фекер йөрөтә алмайбыҙ. Бәлки, кантон һаулыҡ һаҡлау бүлегенән комиссия төҙөп ебәрергә тура килер.

– Һеҙҙең ихтыярығыҙҙа, – тине доктор. «Ҡара, ҡара...ГПУ-ла ла айныҡ аҡыл йөрөтә белгән әҙәмдәр бар икән»,– тип тә уйланы ул эстән генә.

– Уның төҙәлеп аяҡҡа баҫыуына күпме мөҙҙәт кәрәк?

– Кәм тигәндә өс ай кәрәгер. Әгәр йәрәхәтенең төҙәлеүе ҡатмарланып китмәһә, шунан да кәм ваҡыт биреп булмай. Унан һуң да әле психикаһының боҙолоу-боҙолмауын ныҡ ҡына тикшереп ҡарарға кәрәк. Аҡыл камиллығы бик самалы ҡалыуы ихтимал.

– Бына нимә, доктор, тәртип буйынса беҙ тәфтиш аҫтындағы кешене һаҡһыҙ һинең ҡарамаҡҡа ҡалдырып китә алмайбыҙ. Шулай булғас, уны һаҡлау өсөн үҙеңә таныш булған кесе командир Кувшинов иптәште ҡалдырып китәбеҙ. Уларҙың карауаттары йәнәш торорға тейеш.

Был һүҙҙе ишеткәс тә, ишек төбөндә тыныс ҡына торған Кувшиновтың ҡобараһы осто, эйәге аҫҡа тартылды. Ул уң ҡулын, ҡылыс менән сапҡан шикелле, өҫкә күтәрҙе лә кинәт аҫҡа төшөрҙө.

– Юҡ инде, начальник иптәш, мине был эшкә ҡыҫылдырмағыҙ, минең бында бер ниндәй касафатым юҡ. Кемдәр ул кешегә ҡул тейҙергән, шулар ҡалһын, шулар һаҡлаһын! Минең намыҫым таҙа!

– Молчать! – тип ҡысҡырҙы Зарипов.

– Юҡ, юҡ! Мин ҡайҙа булһа ла шуны ҡабатлаясаҡмын. Стенаға терәп атһалар ҙа, һүҙем – бер. Ҡалмайым тигәс ҡалмайым!

Бүлмәлә ауыр тынлыҡ урынлашты. Зарипов яңынан папирос тоҡандырҙы, тағы үрле-түбәнле йөрөп алды.

Үҙ урынында өндәшмәй генә ултырған докторҙа төрлө уйҙар буталды. «Минең бәләкәй генә больницала нимәгә кәрәк артыҡ ҡорһаҡ? Мин бит уны өс ай буйына ашатып-эсереп торорға тейеш булам. Ә бының сығымын кем түләйәсәк? Алырһың ГПУ-нан һуҡыр тин! Юҡ, бындай хәл менән килешеп булмаҫ. Больницала көнө-төнө һаҡсының һерәйеп тороуы Игебаевты аяҡҡа баҫтырыуға ла, дөйөм эшкә лә ҙур ҡамасау буласаҡ». Аполлинарий Христофорович пенснеһын төҙәтте лә үҙенең тәҡдимен әйтте:

– Уйлашайыҡ әле. Ул кешегеҙҙең һауығыуы бик оҙаҡ һәм ҡатмарлы булмаҡсы. Ошо больница стенаһынан ҡасып, бер ҡайҙа китерлек хәле юҡ. Һеҙгә һаҡсы ҡалдырыуҙың һис тә хәжәте юҡ. Уның өсөн бар яуаплыҡты мин үҙемә алырға әҙермен.

Доктор, ручкаһын ҡара һауытына тыға-тыға, Йылайыр кантоны ГПУ-һына расписка яҙҙы ла, мисәтен һуғып, тәмәке быҫҡытып торған Зариповҡа тотторҙо. Тегеһе ҡағыҙҙы ашыҡмай ғына уҡып сыҡты, оҙаҡ ҡына ҡулында тотоп торғас: «Доктор, онотмағыҙ, был кеше өсөн башығыҙ менән яуап бирәһегеҙ!» – тине лә сығып китте. Шулай итеп, ширҡәт башлығы Абдрахман Игебаев Нәмәс төбәк больницаһы баш врачы Аполлинарий Христофорович ҡарамағында ҡалды. Ә ГПУ хеҙмәткәрҙәре шул уҡ сәғәттә Йылайырға юлланды.

***

Уйылдан килеп, көпә-көндөҙ янъял һалып киткәндән һуң карауатта ғәрлегенән йөҙтүбән һулҡылдап илап ятҡан Шәмсинурҙың сабый өйәнәге башланды. Күңеле ниҙер һиҙеп, өйҙә лә, тышта ла толҡа таба алмай йөрөгән Вахитты үҙ ҡырына саҡырып, йәш тулған күҙҙәре менән уға оҙаҡ текләп ятты ла, баланы ҡурҡытырға теләмәй, тыныс ҡына өндәште:

– Бар, балам, йүгереп кенә өләсәйҙе саҡырып кил. Әсәйем ныҡ ауырый, тиген, тиҙ килһен. Ә үҙең олатай янында ҡалырһың, йәме? Өләсәй мине бында дауалар, – тип Шәмсинур йомошон ғәжәпләнеберәк ҡабул иткән Вахиттың башынан һыйпаны.

Кинәйә менән әйтелгән был һүҙҙең асылын аңламаһа ла, бөтә нәмәне лә урын-еренә еткереп башҡарырға күнеккән Вахит тиҙ генә кейенде лә олаталарына йүгерҙе. Ул Әбделғәлим ҡарттарға тыны бөтөп барып инде. Малай маңлайына төшкән кәпәсен ҡалҡытты ла ҡысҡырып әсәһе һүҙен еткерҙе.

– Өләсәй, һине әсәйем саҡыра. Ауырый, үҙе иртәнән бирле илай ҙа илай.

Әбей – түрбашына, ә ҡарт мөйөшкә ҡарап күҙ йәшен һөртөп алды.

– Әсәйең тағы ни әйтте?

– Миңә олатай эргәһендә ҡалырға, ә өләсәйгә тиҙерәк килергә ҡушты.

Әбей менән бабай бер-береһенә аптырап ҡарап алды. Өләсәйенең өтәләнеүен күреп торған малай күңелендә ниндәйҙер шомлоҡ тойғоһо уянды. Уның сығып тайырға самалап торғанын һиҙеп ҡалған Әбделғәлим ҡарт тынысҡына өндәште:

– Юҡ, балам, бер ҡайҙа ла бармайһың. Бынан кире аслан да әсәйең ҡушҡан йомоштан баш тартаһы булма, килешмәй, – тип ейәнен сисендерә башланы. Ә Сәрбиямал әбей, һандығынан төйөнсөк алып, сығып китте.

Ул тирләп-бешеп улының өйөнә килеп ингәндә, шыбыр тиргә батҡан Шәмсинур, өйәнәгенә түҙә алмай, карауатында бөгәрләнгән рәүештә ята ине. Сәрбиямал ҡулын тиҙ генә һабынлап йыуҙы ла килене янына килде.

– Эйе, килен, ваҡыты етте шул. Сабыр ит, артыҡ өҙгөләнмә, тәүгегә түгел бит. Хоҙай насип итеп, һау-сәләмәт бушанырға яҙһын. Йә, тубыҡтарыңды бөгөп, арҡаңа ят, – тине кендек инәһе булып күпте кисергән Сәрбиямал. – Нишләмәк кәрәк, бала табыу – ҡатындар иңенә төшкән бурыс инде.

Бисмиллаһи иррахмани рахим, тип әбей устарын майланы ла башта Шәмсинурҙың туптай ҡабарған ҡорһағын һәрмәп, тикшереп сыҡты. Шунан тыуымды устары менән һыйпап, түбәнгә йүнәлтте. Шәмсинурҙың «Ой, мама!» тип ыңғырашҡанын кендексе әбей ҡолаҡҡа ла элмәй, әйтерһең дә, уның аһ-зарын бөтөнләй ишетмәй.

– Әҙерәк мөҙҙәте етмәйерәк түгел инеме шул, нишләп былай булып ҡуйҙы әле был? – тип үҙ алдына һөйләнде Сәрбиямал. – Ошо көндәрҙә был бисара килендең күргәне арҡаһында өйәнәге алдан башланды, күрәһең. Иншалла, ана, еүеше лә аҡты! Алла бойорһа, хәҙер сабыйҙың башы ла күренер. Көсән, килен, бар хәлең менән көсән! Хәҙер, балам, хәҙер бушанырһың. Бына, Алланың рәхмәте, башы ла күренде. Башы сыҡҡас, күте сыҡмай ҡайҙа барһын! Аллаға шөкөр! Ана, үҙе лә һоп итеп ҡалды.

Сабый, үҙенең донъяға килгәнен хәбәр иткәндәй, өй яңғыратып ҡысҡырып та ебәрҙе.

– Тауышы көр генә, Алла бойорһа, миңә оҡшап йырсы булыр, – тип йылмайҙы Сәрбиямал. – Һөйөнсө, килен, шалҡандай ҡыҙ бала таптың!

Әбей, эргәһендә ятҡан ҡайсы менән кендекте ҡырҡып бәйләгәс, сабыйҙы ике ҡуллап өҫкә күтәрҙе. Сәрбиямал ҡәнәғәт ине – бына Абдрахман менән киленгә Хоҙай матур ҡыҙ бүләк итте. Оҙон ғүмерле булып, ата-әсәһен ҡыуандырырға насип булһын!

Әбей күҙен дә асмай йомарланып ятҡан баланы аҡыртып йылы һыу менән йыуҙы ла, алдан әҙерләп ҡуйған сепрәккә урап, хәлһеҙләнгән әсәһенең ҡырына һалды.

– Мә, килен, һиңә Хоҙайҙан бер бүләк, – тине Сәрбиямал.

– Рәхмәт, ҡәйнәм, шатлығы уртаҡ булһын. Тик атаһы ғына күрә алманы, бик көткәйне, – Шәмсинурҙың һуңғы һүҙенә Сәрбиямал әбей түҙә алманы. Былай ҙа еүеш керпектәрен сипылдатып ҡаҡты ла иланы ла ебәрҙе. Ә Шәмсинурҙың Абдрахман сығып киткәндән алып ғөмүмән күҙҙәре бер минутҡа ла кипмәгәйне.

– Мин, килен, ҡайтмам инде, һине яңғыҙ ҡалдырғым килмәй: тәрбиә ҡылырға барыбер бер кеше кәрәк, – тине әбей һәм Шәмсинур эргәһендә ҡунырға ҡалды.

Сәрбиямал һурпалы аш ашатып, сәй эсергәс, әсә кеше иҙерәп йоҡоға талды. «Аллаға шөкөр. Барыһы ла имен-аман тамамланды. Киленде ыҙалатып, ҡултығынан урҙаға аҫып ҡуйыуҙың хәжәте лә булманы. Изге күңелле әсәнең тыуымы һәр саҡ шулай еңел үтә ул», – тип йомғаҡланы Сәрбиямал бөгөнгө сауаплы һәм яуаплы вазифаһын.

Шулай итеп, ҡырҡ ятып ҡырҡ торғанда ла башҡа килмәгән Абдрахманды кинәт юғалтыу ҡайғыһына юлыҡҡан Шәмсинур өсөн тормоштоң яңы, иң ауыр һәм ҡайғылы осоро башланды. Элекке кеүек иргә арҡаланып, еңелсә, бала хоҡуғында хәсрәтһеҙ, хәстәр-вайымһыҙ йәшәүҙе көндәлек тормош ауырлыҡтары алмаштырҙы. Баштараҡ, сит ерҙә, бер ниндәй туған-тыумасаһыҙ, яңғыҙ мин нисек тормош көтөрмөн, тип көнө-төнө йәш түккән Шәмсинур тора-бара үҙен ҡулға алды. Ул юҡҡа ғына, Абдрахман хөкөмгә тарттырылғас, Йәйкар араһы кешеләре беҙҙән йөҙ борорҙар, ситләшерҙәр инде, тип уйлаған икән. Киреһенсә, Абдрахман киткәненә бер нисә көн дә үтмәне, уның сабыйы донъяға килгәнен ишетеп, ҡулдарына күстәнәс тотҡан Йәйкар ҡатын-ҡыҙҙары, килендәре көнөнә әллә нисә тапҡыр килеп, өй тәрбиәләп, аш-һыу әҙерләп йөрөнө. Ирҙәрҙән иң башта товарищество ағзаһы Әүхәҙи, комсомолдар башлығы Мөхәммәтнур Өмөтҡужин килеп, кәртә-ҡура таҙартып, көн һайын мал ашатып-эсереп йөрөнө. Ә инде Игебаевҡа йыраҡыраҡ булһа ла ҡәрҙәш тейеш Сафыя Өмөтҡужина ысын-ысынында Шәмсинурҙың ярҙамсыһына ғына түгел, ә иң яҡын әхирәтенә әйләнде. Арыу-талыуҙы белмәгән Сафыя кибетендә ла һатыу итте, Шәмсинурҙың һыйырын да һауҙы, өйөн йыуҙы, әсә менән сабыйҙы ҡараны, көн аша тигәндәй был өйҙә йоҡларға ла ҡалды. Хатта аҙнаһына бер тапҡыр ихаталағы мунсаны яғып, Шәмсинурҙы йыуындырып торҙо. Күпме генә ҡарышмаһын, Вахитты ла мунса төшөрҙө, ҡайын миндеге менән ләүкәлә сабынырға өйрәтте. Билдәле, башта Сафыя әмерҙәренә артыҡ ҡолаҡ һалмай, үҙҙәренсә йәшәргә самалаған Шәмсинур менән Вахит уның ата холоҡло, көслө ихтыярлы Ғәлимйән хажи ҡыҙы икәнен, күрәһең, онотоңҡорап ташлаған. Һуңынан бер ваҡытта ла ике ҡабатламай торған Сафыяның әмере был өйҙә ҡағиҙәгә әүерелде.

– Уй, Сафыя, һиңә бик ҙур рәхмәт инде. Бигерәк уңғанһың, ошоға тиклем мин һине бөтөнләй белмәгәнмен икән. Әгәр һин ир булһаң, биллаһи, мин һиңә генә сығар инем, – тип көлдө Шәмсинур, Сафыяны ҡосаҡлап.

– Ул һүҙҙе, еңгә, миңә һин генә әйтмәйһең. Нишләйем һуң, холҡом шулай булғас. Мине ҡайһы саҡ ниндәй ғәййәр, усал атайым да еңә алмай, ҡул ғына һелтәй торғайны, – тип йылмайҙы Сафыя. – Шулай бер мәл, – тип һөйләне ул булған хәлде, – атайым ат ектереп, мине Мортазиндар кибетенә араҡыға ебәрергә булды. Улар бынан егерме саҡрымдар самаһы Әмин тауынан ары Йайыҡ ашаһындағы утарҙа яталар ине. Минең әле бала тиерлек сағым. Атайымдың уландары, минең ҡустылар, тик һуңынан ғына тыуҙылар. Ул көндө беҙгә ниндәйҙер ҡунаҡ килергә тейеш ине. Кантонданмы, волыстанмы. «Сафыя, кейен!» – тине атайым. «Нишләп?» – тип һораным мин. «Мортазин утарындағы кибеттән араҡы алып килергә кәрәк!» – тип атайым миңә күҙен еңдерә ҡарап ҡуйҙы ла өҫтәлгә аҡса ырғытты. Ә мин урынымдан ҡуҙғалмайым да. «Йәһәт бул, ниңә ығышаһың?» – тип атай мәрхүм тағы екеренде. «Һинең араҡыға бармайым!» – тип ҡырҡа әйттем. «Нисек?» «Бына шулай!» – тинем дә ҡымшанмайынса тик ултырам.

Атайым ишек башындағы элеүле торған ҡамсыһына йәбеште. Мин күлмәгемде ҡайтарып иҙәнгә яттым да: «Мә, арҡамды яр, ләкин бармайым тигәс бармайым!»– тип ҡысҡырҙым, үҙем илайым. Атайым ҡамсыны иҙәнгә күтәреп һуҡты ла,

өҫтәлдәге аҡсаны кеҫәһенә тығып, араҡыға үҙе китергә мәжбүр булды... Мин шулай ул, еңгә. Кеше мине тик яҡшылыҡ менән генә еңә ала. Мине көсләтеп бер ни ҙә эшләтеп булмай!

– Һуңынан да атайың һүҙен бер ҙә тыңламаныңмы?

– Юҡ, тыңланым. Ипләп әйтһә, хәләл йомош ҡушһа, һәр саҡ тыңлап торҙом, ләкин хәрәмгә мине бер кем дә ҡуша алманы. Атайым да башҡаса бер ҡасан да ҡамсыға йәбешмәҫ булды.

– Сафыя ҡайынһеңлем, һиңә был холҡоң менән киләсәктә йәшәү бик еңел булмаясаҡ, – тине Шәмсинур, көрһөнөп.

– Булһа булыр инде. Ә мин үҙ холҡомдо төҙәтә алмайым. Һайт тигәнгә тайт тип, мин юртаҡҡа юрға булып бер ҡасан да юрғаламам. Әсәйем дә, башҡорт бер ҡасан ҡол булмаған, тип әйтә торғайны.

– Мин һине, Сафыя, аңлай алманым. Төшөндөрөп бир инде, – тип үтенде Шәмсинур.

– Кеше хәбәренең хаҡлығына ышанмайынса тороп, мин бер ваҡытта ла уға ҡушылясаҡ йәки ул фекерҙе яҡлаясаҡ түгелмен. Мин ғүмергә дөрөҫлөк яҡлы буласаҡмын.

– Сафыя аҡыллым, һиңә был ҡарашың менән киләсәкке тормошоңда йәшәүе бик ауыр буласаҡ. Ғүмер тик изгелектән генә тормай, уға яуызлығы ҡуша үрелеп килә бит, – тине Шәмсинур, Сафыяны ҡосаҡлап. – Көслө кеше һин, әхирәт, Хоҙай һиңә, изге йөрәкле ҡыҙға, бәхетле тормош насип итһен, һин ундай бәхеткә тулыһынса лайыҡ.

***

Март урталарында инде өйҙә генә түгел, ихатаһында ла йомош-юлын үҙ аллы атҡара башлаған Шәмсинурға Баҡыр-Үҙәк руднигының директоры Фәйзи Фәттәхов килеп китте. Егеп килгән пар атын ихата эсенә индерҙе лә: «Мөмкинме?» – тип ҡысҡырҙы һәм, яуап та көтөп тормай, ишек асып, тупһа аша атланы.

– Исәнмесез, Маргарита Ивановна, – тип исем-шәрифен әйтеп иҫәнләште Фәттәхов. Шунан Шәмсинурға ярҙамға килгән таныш булмаған ике ҡатынды күргәс: «Һеҙҙә кеше бар икән!» – тип өҫтәне.

Нисек кенә холҡо менән һөмһөҙөрәк кеше булмаһын, ул өйҙәге үҙгәрештәрҙе күреп аптырабыраҡ ҡалды. Ысынлап та, өйҙөң элекке йыйнаҡлығынан бында бер ни ҙә ҡалмаған. Урҙаға баланың йыуылған сепрәк-сапрағы ғына түгел, сәңгелдәк тә эленгән, ҡаҙанда ҡайнаған һыуҙың быуы түшәмгә күтәрелгән. Өйҙә түҙеп торғоһоҙ эҫе.

– Үтегеҙ, иптәш директор, сисенегеҙ, – тине Шәмсинур, ҡулын алъяпҡысына һөртөп. – Ултырығыҙ, аптырамағыҙ. Бына ошолай тормош көтәбеҙ. Сабый тыуғас, элекке таҙалыҡ, тәртип бөттө.

– Нисауа, нисауа, тормошта мындый ғына хәлләр була. Былар барысы ла ваҡытлы мәшәҡәт. Ғәфү итегеҙ, мин хәҙер, – тип ул яңынан тышҡа сығып китте.

Күп тә үтмәне, ул күсере менән икәү әллә ни саҡлы күстәнәс күтәреп, яңынан килеп инде.

– Мына мында, Маргарита Ивановна, ҡош сөтөннән башҡа бетә әйбер бар: сезгә генә түгел, сабыйға да җитәрлек, азығы да, кийеме дә... Безнең рудник җитәкчелегеннән сезгә бүләкләр. Хәттә бала уйынчыклары да салды безнең кызлар, – тип көлдө рудник директоры.

Ишек төбөндә бер нисә йәшниктә өйөлөп ятҡан күстәнәстәрҙе күргәс, Шәмсинур ни эшләргә лә белмәне, күңеле тулып китте. Күҙенә эркелгән йәште һөртөп, бер урында тик тора алмай тызынған директорҙың ҡулын ҡыҫты.

– Маргарита Ивановна, сезгә бу бүләкләрне без җылатыр өчен түгел, шатландырыр өчен килтердек. Җыламағыз, дошмандарны кинәндермәгез, – тине Фәйзи Фәттәхов ысын күңелдән.

– Рәхмәт инде, директор иптәш, иғтибарығыҙ өсөн мәңге бурыслыбыҙ. Тик нисек хисаплашырбыҙ икән? – тине Шәмсинур икеләнеберәк. – Абдрахман ҡайтҡас түләрбеҙ инде.

– Борчылмагыз, тик кайтсын ғына. Хаҡы түләнгән, изгелеген күрегез. Әйткәндәй, Игебаев белән булған ваҡыйғаны Филипп Афанасьевич белә, ишеткән – хәбәр иттеләр. Шушы араларда, юлы төшсә, килеп китеүе лә ихтыймал. Уның эше менән шәхсән шөғөлләнәм, дип әйткән иде. Сәләм әйтергә ҡушты.

– Беҙҙең рәхмәтебеҙҙе тапшырығыҙ. Шундай юғары етәксе булһа ла, оло йөрәкле кеше икән, – тине Шәмсинур һәм тағы ла мыршылдап алды.

– Шундай ул безнең хуҗа. Әй, бөтөнләй онытып торам, исәүән! Управляющий сезне үзебезнең больница штатына эшкә алырға бойорды. Урынығыз әлегә буш, сезне көтә. Теләгән чакта рәхим итегез. Яҙгы пычраклар үткәнче эшкә үзебез йөрөтөрбез, ә аннан күҙ күрер, – Фәйзи Фәттәхов тағы ла бер ҡыуаныслы яңылыҡ еткерҙе.

Тик шунан һуң ғына кинәт аптырауға ҡалған Шәмсинурҙың иҫенә төштө:

– Ошондай ауыр саҡтарҙа ярҙам итеүегеҙ өсөн ҙур рәхмәт. Сисенегеҙ, эш кешеһе бит һеҙ, ашап-эсеп китегеҙ. Һеҙ ҡалдырған «Смирновская» һаман хужаһын көтөп ултыра, – тип мөләйем генә йылмайҙы хужабикә.

Был һүҙҙе ишеткәс, туҡтарға ниәте булмаған директорҙың да ихтыяры бушағандай тойолдо. Рәхмәт әйтеп, Фәттәхов сисенә башланы. Улар йыуынғанса «Насип булһа, был фәрештәләр эсемлегенә берәр ваҡыт кире әйләнербеҙ әле» тип үҙе ҡалдырып киткән батша араҡыһы өҫтәлгә килеп тә ҡунды. Тағы ла был яҡтарҙа һирәк осрай торған тоҙло ҡыяр, тоҙло кәбеҫтәләр теҙелгәс, ихлас холоҡло директор, телен сартлатып, өҫтәл артына ултырҙы.

Нескә билле рюмканы бер-ике күтәргәс, директор маҡтай-маҡтай аҙыҡ-әүҡәткә куреште. Ә күсере, сисенеп тә тормай, өҫтәл артына үтеүҙән ҡырҡа баш тартып, рәхмәт әйтеп сығып китте.

Шәмсинурға ярҙамға килгән Яйҡар ҡатындары директор ауыҙын түңәрәкләндереп, «ах та ух» килеп араҡы эскәнен усаҡ эргәһендә биттәрен усы менән ҡаплап, ҙур тамаша ҡылып күҙәтеп торҙо. Шулай ҙа береһе түҙә алманы:

– Ул тиклем ағыу кеүек әсе булғас, нишләп шуны ыҙалап эсәләр икән? – тигән булды. Һаҡ ҡолаҡлы Фәттәхов уның һүҙен шундуҡ эләктереп алды.

– Мыннан кире ирләрегез эчә торган булса, аларны сүкмәгез, жәлләгез, ул мескеннәр гүмер буйы ыза чигә, – тип ул ҡатындарға ҡарап йылмайып ҡуйҙы.

– Шулайҙыр, беҙ ни, ҡараңғы ауылда ятып, ҡайҙан беләбеҙ, – тигән булды теге ҡатын.

– Рәхмәт, Маргарита Ивановна, мынысин минең управляющийга калдырыйк, – тип шул арала быштыҡ бите ҡыҙара бүртеп өлгөргән Фәттәхов урынынан торҙо.

– Эсеп бөтөрөгөҙ, уның өлөшөнә лә табылыр. Юлға сығыр алдынан тағы ла берҙе күтәрегеҙ, – Шәмсинур ҡыҫтаһа ла, Фәттәхов башҡа ултырып торманы. «Атҡа ауыр була»,– тип яуапланы ла кейенә башланы.

– Һич оялып тормагыз, Маргарита Ивановна, сезгә генә түгел, малыгызга да ачыгырга бирмәбез. Управляющий шулай бойорды, – тине Фәттәхов һуңғы һүҙендә. Ул ҡатындарҙың ҡулын һелкә-һелкә хушлашты ла тышҡа атланы.

– Бик тә ҡыҙыҡ кеше. Көпә-көндөҙ араҡы эсә, – тине баяғы телсән ҡатын, директор сығып киткәс.

Бына тыны бөтөп Сафыя килеп инде.

– Былар ниндәй яҙыулы магазин йәшниктәре? – тип һораны ул инеү менән.

– Баҡыр-Үҙәк директоры Шәмсинурға бүләктәр килтерҙе.

– Вәт яҡшы кеше икән! Мин уны күргәнем бар. Бик йылғыр әҙәм. Әйҙә, йәшниктәрҙе асып ҡарайбыҙ, ни килтерҙе икән ул телдәр татар? – тине Сафыя һәм йәшниктәрҙе аҡтарырға ла тотондо.

Был мәлдә инде бер кем дә оялып-баҙнатһыҙланып торманы, барыһы ла йәшниктәрҙе уратып алды. Килтерелгән күстәнәстәрҙе Сафыя алып биреп торҙо, ә башҡалары берәмләп өҫтәлгә һалып торҙо.

– Бына ун әсмуха стопитый ҡытай сәйе, барыһы бер ҡаҙаҡтан артыҡ, быныһы – шәкәр, ә бынауһы – кәнфит. Бына яулыҡтар – ун дана, был – еңгәмә атластан күлмәклек, ә былары – бала юрғаны, төргәктәр, ебәк биләүҙәр, хатта ҡурсаҡтарға тиклем биргәндәр. Ай-һай, бик бай кешеләр икән прииск кешеләре, ни тиклем йыуаса тейәп килтергәндәр!

Шәмсинур иҫ-аҡылдары китеп күстәнәс һанаған ҡатындарға берәр әсмуха сәй бирҙе, баштарына яулыҡ япты. Яйҡар араһы бисәләренең ҡыуанысының сиге булманы.

Ләкин бөгөнгө шатлыҡ бик тиҙҙән ҡараға мансылып, Шәмсинур өйөнә киренән әйләнеп ҡайтты. Баҡыр-Үҙәк рудниги директоры «арестант ҡатыны»на мул бүләктәр тапшырыуын ауылдағы төрлө кеше төрлөсә ҡабул итте. Берәүҙәр «Кәзүннәй байлыҡты әрәм-шәрәм итеүгә күп аҡыл кәрәкмәй» тип йөрөһә, икенселәре «Бушлай йөҙ дисәтинә беҙҙең ерҙе ҡулына төшөргәс, ул директор шуның хаҡын сығара инде. Тиҙҙән шура рәйесе Ғәлиәкбәргә лә күстәнәс килтереп ауҙарырҙар әле. Уның да был ерҙең һатыуҙа хеҙмәте ҙур» тигән фекер йөрөттө. Ә инде быны ишетеп ҡалған Уйылдан тағы ла ҡәтғиерәк әйтте: «Төрмәлә ятһа ла, уның яҡлаусылары күп. Ҡарға күҙен ҡарға суҡымай инде ул...» Шулай ҙа бындай ҡаты ҡараш белдергән Уйылдандың тынысһыҙ күңеленә: «Әгәр берҙән-бер көндө беҙҙең шаҙра аҡланып, һыу төбөнән яңынан ҡалҡып сыҡһа? Алла һаҡлаһын! Йәшәргә бирмәҫ, тереләй йотор...» – тигән шомло икеләнеү төйөнләнде.

Ошо көндәрҙә Шәмсинур тағы ла бер күңелһеҙ ваҡиғаға тарыны. Һуңғы ваҡыт тамам ҡоторонған Ялан ауыл Советының һалым агенты Зәйнетдин Ҡотломбәтов килеп, налог иҫәбенә һыйырҙы алам, тип ҡурҡытып китте. Баҡтиһәң, ул волосҡа барып, ауыл Советы ҡуләмендә налог буйынса бурыслы бер кем булмаҫ, тип вәғәҙә биргән икән. Иптәш Сталин тапшырған мөһим йөкләмәне үтәүҙә иптәш Ҡотломбәтов йәнен дә, тәнен дә аяманы. «Налог түләргә хәлебеҙ юҡ бит, күҙ терәп торған берҙән-бер һыйырыбыҙ ҡаҙалып үлде!» йәки «Ана, ҡыҙылдар яғында башын һалған аталарынан түләтегеҙ!» тип сәбәп тапҡан ауылдаштарын ҡат-ҡат кәнсәгә саҡыртты: өгөтләне, ҡурҡытты, янаны. Тик уҫал телле, яһил ҡарсыҡ Өмөгөлсөм генә Зәйнетдинде төп башына ултырта яҙҙы.

– Йә, Өмөгөлсөм әбей, хөкүмәт алдындағы налогыңды ҡасан түләп бөтөрәһең? – тип осоп ҡунды Зәйнетдин таяғын эскәмйәгә һалып, алдына килеп баҫҡан, ҡыу ағастай, тормошта япа-яңғыҙ тороп ҡалған ҡарсыҡҡа. Уның бойондороҡһоҙ рәүеше, ялҡынлы ҡараш атып торған уҫал күҙҙәре һалым агентын һағайта төштө.

– Мин һеҙҙең ул налогығыҙҙы бетемде биреп түләйемме? – тип ысҡындырҙы әбей.

– Ә һин ауыҙыңды үлсәберәк ас, юҡһа ул һүҙең өсөн шауҙырлап барып рәшәткә артына эләгеп ҡуйыуың бар, – тип ярһыны агент.

– Атаҡ, ҡурҡыттың! Барам, бөгөн үк китәм. Унда ла шул өс йөҙ грамм нурмаһын биреп торалар ҙыр әле. – Әбей сыбарлай-сыбарлай үҙ хәбәренә кереште. – Бында ас-яланғас интеккәнсе, лутсы төрмәһенә барам.

– Телеңә һалышма, өс көндән аҡсаңды килтереп һалмаһаң, өйөңдәге йыһазыңа опись үткәрәм, шуны белеп ҡуй! – Агент һуңғы сара менән әбейҙе ипкә килтерергә самаланы, уның һүҙенә ҡолаҡ та һалмаған уҫал әбей сырыш бите яҙылғанса, бер-ике генә ҡалған тешен күрһәтеп йылмайып ебәрҙе.

– Ҡана, аҙыраҡ ултырып торайымсы. Аяҡтарым талып китте. Ултыр, тип тә әйтмәйһең, бигерәк тә эсең тар әҙәм икәнһең, – тип таяғы ятҡан эскәмйәгә барып ултырҙы. – Опись үткәрәм, тиһең инде, ә? Башҡа эшең булмаһа, әйҙә, үткәр, ләкин һике аҫтында көнө-төнө тамаҡ һорап сырылдаған сиңерткә, аслыҡтан иҙәндә ҡырылып ятҡан тараҡандан ғәйре минең тупаҡ өйөмдә һыйыр мөгөҙөнә лә элерлек нәмәм юҡ! – Әңгәмәне бөткәнгә хисаплап, әбей урынынан ҡуҙғала башланы.

Еңелергә өйрәнмәгән Зәйнетдин, башҡа дәлил таба алмағас:

– Һинең налогыңды, Өмөгөлсөм әбей, иптәш Сталин үҙе көтә бит! – тип әйтергә мәжбүр булды.

Тормоштан тамам төңөлөп, алланан да, мулланан да ҡурҡыуҙан үткән ҡарсыҡ тешһеҙ бөршәйгән ауыҙын ҙур асып, кәүеш кенә тәне һелкенгәнсе кеткелдәп көлдө лә:

– Үҙеңдең Сталиныңа әйт: бер хәйерсе әбейҙе көтөп тормаһын, ары китә торһон. Ауыҙын аса, үпкәһе күренеп, бер аяғын гүргә һуҙып торған әбей һеҙгә нишләп кәрәк булды әле? Көндә «алға» ла «алға» тип һөрән һалаһығыҙ, әллә ул Сталинығыҙҙың алға барырлыҡ хәле бөтә башланымы? – тине.

Былдай ҡурҡыныс һүҙҙәрҙән налог агенты артына саҡ шыр ебәрмәне. Янъяғына алан-йолан ҡаранып алды ла, тороп, артындағы ике яҡҡа асмалы тәҙрәне шартлатып бикләп ҡуйҙы. Галифе салбарынан батмустай ҡулъяулыҡ сығарып, ҡапыл маңлайына бәреп сыҡҡан бөрсөк-бөрсөк тирен һөрттө лә тағы урынына ултырҙы.

– Былай, Өмөгөлсөм әбей, – тине ул, тауышын түбәнәйтеп, – телеңде тыймай ләпелдәгән өсөн төрмәгә ултыраһың бит!

Ҡарсыҡ киткәс, Зәйнетдин ике сикәһен ҡыҫып оҙаҡ ҡына уйланып ултырҙы. Быға са ул бер кемдән дә шул тиклем ҡурҡыныс һүҙҙәрҙе ишеткәне юҡ ине. Нишләргә? ГПУ-ға хәбәр итергәме? Улай эшләһәң, үҙең яҙғанды иҫбатлай алмаһаң? Донъянан ваз кискән был әбейҙән барыһын да көтөргә була. Ҡыямат көнө килеп еткәс, ҡарсыҡ әйткәненән баш тартып, һырт биреп ҡуйһа нишләрһең?

Агент ағыу телле ҡарсыҡ менән башҡаса бер ҡасан да осрашманы, Өмөгөлсөм булған ерҙе бер саҡрым урап йөрөнө.

***

Ләкин Игебаев ғаиләһенә килгән ҡайғының ҡара һөрөмө генә яҙғы ҡояшты ҡаплай алманы. Яҙ килеүен хәбәр иткәндәй, ҡояш Әмин тауы өҫтөндә оҙағыраҡ тороп, зәңгәр күк көмбәҙенән үҙ нурҙарын йомартыраҡ һипкән һәм көләсерәк йылмайған төҫлө тойолдо. Туйҙырған оҙон-оҙаҡ ҡыш бөткәнен иң беренсе булып хәбәр итеүсе туп-туп булып осҡан ҡара сәүкәләр ҡыштан ҡалған һалам өҫтөнә ябырылып, Ялан игенселәрен ҡарҙан әрселә башлаған, йәйрәп ятҡан баҫыуға саҡырҙы. Кешеләр генә түгел, ихаталағы йорт малы ла ҡышҡы йоҡонан уянып, сыуаҡ урында йыйылып, күҙҙәрен йомған килеш саскау һыуыҡтарҙа өшөгән һыртын йылытты.

Яҙ һулышын үҙ сарлағында ауылдаштарынан иң беренсе булып тойған кеше Ҡәҫтәрән Ғәлимов хисаплана. Граждандар һуғышы тамамланып, йәш Совет республикаһы тыныс төҙөлөшкә тотонғандан һуң Ялан ауылында ул иң һуң йоҡоға талған һәм таңды иң беренсе ҡаршылаған кешеләрҙең береһе. Алтмышты

ҡыуып барыуына ҡарамаҫтан, әле дүрт ботлоҡ иген тоҡтарын ике ҡултығына ҡыҫтырып елтерәтеп йөрөгән Ҡәҫтәрәндә эш ҡомары бер илегә лә кәмемәгән. Совет власы иҡтисад йүнәлешен боҙоп, ауыл кулактарына, йәғни улар телендә «һары ҡорттар»ға, һөжүм башлағаны бирле, Ҡәҫтәрән бына нисә йылдар инде: «Етте, буйтым етте, Алла бойорһа, быйыл яҙғы бураҙнаға аяғымды баҫмайым, бер батман да иген сәсмәйем!» – тип ҡәһәт итеп ҡарай, ләкин, ғәҙәттә, ул йоҡлаған сарлаҡ тәҙрәһен яҙ ҡояшының үткер нурҙары мансый башлауы менән, йоҡоһонан яҙа. Түшәгендә борғоланып ята-ята ла, өйҙәгеләр уның киң итеген кейеп, юғары ҡаттан баҫҡыс буйлап тыҡ-тыҡ аҫҡа төшөп килеүен ишетеп уяна. Иң башта ул аласыҡ аҫтына ҡышҡыға ҡуйылған сәсеү ҡорамалдарын ҡарап сыға, шунан орлоҡ келәтенә керә. Ҡышҡы дымлы ҡар буранында тутыҡмаһын өсөн брезент менән урап ҡуйған бығаулы йоҙаҡтарҙы тикшерә, ә унан инде ул ике үгеҙ торған һарайға килә. Үгеҙҙәре, хас хужаһы кеүек, яҙ яҡынлашҡанын тойомлап, оҙон йәй буйы үҙ елкәләрен сейләтеп бөткән ағас ҡамыттарын, баҫыу ыҙандарын һағынып мөңрәп тауыш бирә. Март аҙаҡтарында бөтә эштәрҙән бушатылып, һолоға ҡуйылған аттар ҙа, яҙ мөҙҙәте етеп, күңеленә толҡа таба алмай йөрәкһегән хужалары кеүек, таҡта иҙәнле һарайҙың иҙәнен туҡылдатып, сапсып алалар. Хужаның йүткергәненә яуап биргәндәй, наҙлы ғына кешнәгән тауыш ишетелә. Былай ҙа ярһып, саҡ торған Ҡәҫтәрәндең йөрәге түҙмәй. Ул, кейеп сыҡҡан тунын лапаҫ аҫтына элә лә, еңел сәкмән кейеп, билен һыға быуып, эшкә тотона. Башта бер нисә урынға аҫылған фонарҙарҙы яндырып ебәрә: был бөтә төр малға һалдат казармаһындағы һымаҡ «Подъем!» иғлан итеүҙе аңлата. Ҡәҫтәрәндең иркен ихатаһы мал, ҡош-ҡорт тауышы менән тула. Инде ҡояш һауалағансы Ҡәҫтәрән Ғәлимовты иртәнге сәйгә лә саҡырып ала алмайҙар. Өйҙәгеләр берсә ҡайнап, берсә һыуынған самауыр ҡуҙын әллә нисә тапҡыр терелтә. Бөтә малын тәрбиәләп, ашатып-һуғарып, улар торған аҙбарҙы таҙартыуҙы тамамламай тороп уның өсөн өйгә инеп сәй эсеү юҡ. Үҙе малайлыҡта йөрөп күнеккән ошо ҡәтғи ҡағиҙәгә Ҡәҫтәрән ғүмере буйы хыянат итмәй йәшәй. Тик ләж ятып ауырып китеү, бик мөһим йомош-юлға сығыу йәки ҡыш байында була торған ҡунаҡ мәжлестәре генә хужаның был мотлаҡ үтәлмеш ҡағиҙәһен боҙоп ҡуя. Ләкин эш өсөн тыуған Ҡәҫтәрәндең ҡанына һеңгән был шөғөлөн бер ниндәй ҙә уйын-көлкө, ашамаҡ-эсмәк тамашалары алмаштыра алмай. Башҡа кешенеке һымаҡ, бында эште илке-һилке башҡарыу юҡ, бөтә нәмә үҙ урынында, уның өҫтө таҡта менән көпләнгән ихатаһында – Ялан ауылынығынан тыш бүтән, икенсе донъя. Бында үтә атмалы ситәндәр, тау өйөлөп ятҡан ҡар, тупһа эргәһендә әҙәм тайып ҡоларлыҡ, һыйыр буғы менән ҡуша ҡатҡан боҙлауыҡтар ҙа юҡ. Был ихатала ниҙәр эшләнгәнен урамдан күреү мөмкин түгел, сөнки уратылған ҡоймаларҙа сысҡан түгел, ел дә инерлек ек ҡалмаған. Ике мөйөштә ике – ҡатын-ҡыҙ һәм ирҙәр өсөн дә айырым ағас бәҙрәф ултыра. Ә шул уҡ мәлдә Ялан ауылы кешеләренең байтағы истинжә* өсөн генә түгел, башҡа йомоштарын башҡарыу өсөн дә, ҡаҙаҡ әйтмәксе, «далаға шыға».

Бөгөн шулай ҙа Ҡәҫтәрән йорт эштәрен сомтор тоторға булды, сөнки уның үҙ ҡорҙашы, күптән осрашмаған зельскийҙы, ә, хәҙергесә әйткәндә, шура рәйесе Ғәлиәкбәр Аласовты күрәһе бар.

Ул кәнсәгә барып ингәс тә өҫтәл артында ултырған рәйескә ҡараш ташланы. Ғәлиәкбәрҙең сусайып сыҡҡан яңаҡ һөйәге, эскә батҡан күҙ соҡорҙары, былай ҙа ҡуңыр ҡаҡса битенән шына һымаҡ аҫҡа һуҙылған осло эйәге, ғөмүмән барлыҡ бөтмөшө Ҡәҫтәрәнде ғәжәпкә ҡалдырҙы.

---

*Истинжә — тәһәрәт (ғәрәпсә).

– Уҙаман, һин ысынлап та бик ҡаты ятып алғанһың, ахыры. Бөтөнләй төҫөң ҡасҡан, – тине Ҡәҫтәрән.

– Эйе, ҡорҙаш, ҡап-ҡапыл ауырып алынды. Әжәл ауырыуылыр, тип уйланылғайны... Мына, Аллаға шөкөр, шыуышып эшкә килдем әле. Әллә ҡайҙа һыуыҡ тейеп, көнө-төнө ҡарҡылдап йүткерелде, күкрәк ҡыҫты, йөрәк сәнсеп йонсотто, – тип яуапланы Ғәлиәкбәр.

«Алдашаһың, һине түшәккә Абрахмандың ҡулға алыныуы йыҡты»,– тигән уй килде Ҡәҫтәрән башына, ләкин ул, әҙәп һаҡлап, өндәшмәне.

– Шулай инде, уҙаман, эш ҡартлыҡҡа табан бара, аҙымдар тарая, ауыл осондағы йортобоҙға ла ара яҡыная.

– Шулай, шулай...

Улар бер аҙ өндәшмәй ултырҙы. Шунан һүҙҙе Ғәлиәкбәр башланы:

– Бына яҙ етеп килә. Кәпирәтсиә аша халыҡҡа кредит иҫәбенә ауыл хужалығы ҡорамалдарын ҡайтарыу мәле етте. Кредитҡа алған аҡсаны түләү мөҙҙәте лә килеп баҫты. Әле ошо көнгә тиклем Абдрахман ширҡәтенең ни менән шөғөлләнергә тейешлеге лә асыҡланмаған, шул эсте бошора. Ул яҡын арала Игебаевтың тырышлығы менән ҙур ғына хужалыҡҡа әйләнеп китмәксе ине. Хәҙергә шул ширҡәттең Ғәлимйән тирмәне генә дығырлап ултырған була. Ә ҡалған яғын хәстәрләгән әҙәм юҡ, – Ғәлиәкбәр донъя хәлдәрен бошонҡо ғына барлап алды.

– Әйткәндәй, ул ширҡәтегеҙгә берәй өмөт бармы? – тип ҡыҙыҡһынды Ҡәҫтәрән. – Уның хужаһы кем хәҙер, быйыл нисегерәк эш башлап ебәрергә торалар?

– Хужаһы тип ни, камсамулдар менән ауыл йәштәре үҙҙәренең башлыҡтары Мөхәммәтнурҙы ширҡәт рәйесе итәйек тип тумбыталар шикелле. Бер ҙә белмәйем, рәсми тәсдиҡ итә алдылармы, юҡмы, мынауы науҡасы* аяҡтан йығып, белә алғаным юҡ. Бөгөн генә килеп ултырыуым бит. Волостан килгән ҡағыҙҙарҙы ҡараған да юҡ әле.

– Ай-һай, бер кемгә кәрәкмәгән йыйылыштарҙы бөтөрөп, анау «Даешь пятилетку!» тигән ҡыҙыл сепрәген ташлап, аяғындағы сандалийын сисеп, сәкмәнен ете аршын билғау менән быуып эшкә керешһә, берәй нәмә сығарыр, юғиһә Хажи ҡоҙанан ҡалған мөлкәтте исраф итеүҙән ғәйре күргән юҡ әле.

– Уныһы шулайын шулайҙыр. Муйынына ҡамыт кейҙерһәң, бураҙнаны боҙа-боҙа булһа ла һөйрәп алып китер, бәлки.

– Быныһы бик шикле. Ни өсөн тигәндә, ҡырҡ ата балаһына хужа булып, йөкмәтелгән вазифаны урын-еренә еткереп башҡарыу өсөн, беренсенән, аҡыллы баш кәрәк, ә Мөхәммәтнурҙа баш бар, тик эсенә мейе урынына кәбәк тултырылған, икенсенән, кешене эшләтерҙән элгәре ер эшкәртеү, мал көтөү шөғөлөн энәнән ебенә тиклем үҙеңә белеү фарыз. Ғүмерендә үҙ ҡулы менән һабан һөрөп, бер сажин ергә бер теүәтәй иген сәсмәгән кешене башлыҡ итеү – һабантуйҙа күҙ бәйләп көршәк ватырға маташыу менән бәрәбәр. Шунан тағы ла өҫтәр инем, – Ҡәҫтәрән тауышын түбәнәйтте. – Ергә бит плакат йыйылыш кәрәкмәй, уны яратып һәм белеп эшкәртеү мөһим.

– Бик ҡаты әйттең, ҡорҙаш. Оҙон ҡолаҡтарға барып етмәһен, Аллам һаҡлаһын, әллә нәмә йәбештерерҙәр үҙеңә.

– Былай ҙа былар йәбештермәһә, икенселәр әҙер тора. Ҡасан да булһа беҙҙе Себер оҙатмайынса тыныслана алмаҫтар инде былар. Тик көнө генә бөгөн түгел, – тип Ҡәҫтәрән үҙ һүҙен бик төшөнкө тамамланы.

– Шулай инде ул. Мин һин әйткән менән риза. Ләкин күпме йүнле ирҙәрҙе 14-се йылғы һуғыш, Граждандар һуғышы, Зәки ғәскәре юҡ итте, йот һәм тиф

---

*Науҡас — сир, ауырыу (ҡаҙаҡса).

алып китте? Ә анау Поленов күпме бынамын тигән ир-азаматты ҡылыс, штык аша үткәрҙе? Иншалла, ярай әле, үтмәҫ салғы сапҡан бакуйҙа ҡалған үлән һымаҡ, ауыл һайын һерәйеп биш-алты ир генә тороп ҡалды. Яҡшыларын, эш мәнеһен белгәндәрен беҙгә Питербурҙан ебәрмәҫтәр. Уларҙың ни ҡылғанын буйтым күрҙек! Беҙгә, ҡорҙаш, шул булған мөхәммәтнурҙар, уйылдандар менән эш итергә тура килә. – Ҡәҫтәрәнгә өгөт-нәсихәт уҡып алды шура рәйесе.

«Сүтәкәй, өҫтәл артында ҡарасҡылай бөршәйеп ултырһа ла, баш биргән беҙҙең башлыҡ...» – тип уйлап алды ла:

– Һин, уҙаман, бик шикле фекерҙәр әйтеп ҡуйҙың бит әле. Ундай нәмә башыңа килгән хосуста ла теш араңдан сыҡмауы хәйерлерәк, заманы тағы ла бик хәүефлегә әйләнеп бара... – тип Ҡәҫтәрән иҫкәртмәй булдыра алманы. – Белмәҫһең, был хөкүмәт иң юғарынан алып Ирәндек төпкөлөндә ятҡан ауылдарға тиклем үҙ халҡын юҡ итеүгә тотондо түгелме?.

– Ашарын ашалған, йәшәрен йәшәлгән. Былайтып ҡуҡандап ултырған йомран шикелле йәшәгәнсе, тиҙерәк икенең бере булғаны яҡшы. – Үҙ сиратында, Ғәлиәкбәр ҙә «күпте күргән күк ял»дың төбөрөн тикшермәгә булды.

– Улайға китһә, минең яҙмыш та ҡыл өҫтөндә тора, беҙҙе тиҙерәк хәл итерҙәр, ахыры. Бына тиҙҙән һин үҙең мине кәнсәгә саҡырып, башта твердый налог йөкмәтеп сығарасаҡһың. Шунан инде камсамулдарҙы, ыштанһыҙ ярлы-ялпыны эйәртеп беҙҙең игенгә, малға тотонасаҡһығыҙ. Иң һуңынан үҙебеҙҙең үңергә йәбешерҙәр. Шуны эшләмәһәң, Ғәлиәкбәр уҙаман, һине Себер тарафтарға этап менән беҙҙән алда оҙатырҙар.

Ҡәҫтәрәндең был ҡурғаштай атылған ауыр һүҙҙәренән Ғәлиәкбәрҙең бите аяныслыраҡ төҫкә инде, тарамыш муйыны аҫҡараҡ бөгөлдө, күреүе насарая башлаған берҙән-бер күҙе алдында ҡуйы томан хасил булғандай тойолдо.

– Ҡорҙаш, һинең һуйыр таштай ҡаты, ауыр һүҙҙәреңде ҡабул итеүе ҡыйын. Ләкин әйткәндәрең бөкиллеһе лә раҫ. Икебеҙҙең дә яҙмыш бер еп менән сырмалыуы бик тә мөмкин.

Шура кәнсәһендә ҡабат гүр тынлығы урынлашты. Инде был юлы сәйер тынлыҡты Ҡәҫтәрән боҙҙо:

– Уҙаман, беҙ алышҡан фекер теш егенән сығып китмәһен. Көнәлгәре үҙ-үҙебеҙгә йыназа уҡып ултырмайыҡ әле. Унықы алда, әлегә барыбыҙға ла бөгөн көн итмәк фарыз, муйыныңа арҡан һалып булмай...

– Шулай инде ул...

– Беҙгә, Ғәлиәкбәр уҙаман, Абдрахман тоҡандырып ебәргән мынауы ширҡәт утын һүндермәү яраyын күрергә кәрәк. Нисек әйтһәң дә, ауыл халҡының бер өлөшө ул ойоштороған тауаричестуаға ҡарап, уға өмөт бағлап тора. Үҙҙәренең тәүге емешен күрҙеләр, ергә ерегеп, төрлөһө төрлө кәсеп менән донъя көтөп ятҡан көндәре... – Ҡәҫтәрән оҙаҡ ҡына тәҙрәгә ҡарап ултырҙы ла һүҙен дауам итте. – Шулай булғас, шура башлығы булараҡ, һин уларҙың эше менән ҡыҙыҡһынып, ҡайһы бер мәсьәләләрен хәл ҡылыуҙа ярҙам ҡулы һуҙмаҫһыңмы икән, тип килдем әле. Төп йомошом да шул ғына ине. Абдрахман ҡоҙа менән ярышып эш башлағайныҡ. Үҙең беләһең, баҫыуың эргәһендә ыҙандаш кеше эшләһә, әҙәмдә эш ҡомары, кәсеп сәме арта. Шунан Абдрахман донъя белгән, кәңәш бирерлек кеше ине...

– Шулай, шулай... Фекерең изге... Бына аяҡҡа баҫа алғас, бергәләп әҙерәк шуларҙың эшенә йән өрөп ебәрербеҙ, – тине Ғәлиәкбәр, әңгәмәсенең фекерен хуплап.

Ҡәҫтәрән тороп китер алдынан ғына ҡаға-һуға һорап ҡуйҙы:

– Ғәлиәкбәр уҙаман, быйылға, сәүиттәр әйткәнсә, киң ҡатлам кешеләренә

мынауы твердый налог йәки хөкүмәткә ниндәй миҡдарҙа иген тапшырыу ҡағыҙҙары килмәгәнме әле? Һиңә хәҙергә бер ни ҙә мәғлүм түгелме?

– Юҡ, юҡ, ҡорҙаш, хәҙергә бер ни ишетелгәне юҡ. Уйлауымса, налог һәм икмәккә һалыу миҡдарҙары былтырғынан күпкә юғары буласаҡ. Был турала волземотделдан килгән вәкилдәр ҙә һөйләгәйне... Быйыл Совет власы ул мәсьәләне бик ҡоро ғына хәл итмәксе. Февраль айында Себер яҡтарына барып ҡайтҡан Сталинды ул яҡтың кешеләре бик асыуландырып ҡайтарған, тип ишеткәйнем.

«Уныһын беҙ ишетеп түгел, гәзит уҡып та белеп ятабыҙ». Ҡәҫтәрән, тағы ниҙер әйтергә теләп, урынында бер нисә тапҡыр әйләнде лә хушлашып сығып китте.

Күпме генә мейеһен шығырлатып уйлаһа ла, «туғыҙ ҡырлы» Ҡәҫтәрәндең кәнсәгә килеү маҡсаты Ғәлиәкбәр ҡартҡа йомаҡ булып ҡалды. «Ҡәҫтәрән Ғәлимовты ҡарун һанаһалар ҙа, былна сүтәки ауыл кешеләре, уларҙың киләсәге хаҡында хәстәрлек күреп йөрөй. Ширҡәт эше менән дә ҡыҙыҡһына. Күрәһең, үҙ ауылына ҡарт көнөндә берәй изгелек ҡылырға уйлайҙыр»,– тип Ғәлиәкбәр уның ҡапыл килеп сығыуын яҡшыға юраны.

Ә Ҡәҫтәрәндең бөгөнгө килеүенең төп маҡсаты бөтөнләй икенсе, ҡатмарлыраҡ ине: «Өмөтбай арығы» ширҡәтенең эш барышы хаҡында хәстәрлек һыны күрһәтеп, икенсе йылға төшәсәк һалым һәм хөкүмәткә икмәк һатыу заданиеһын белеп ҡайтыу. Быйылғы иген һалымы Ялан шураһына нисә бот ҡына булмаһын, хөкүмәт уның һөҙөмтәһен дөйөм хисаплай. Питербур, Мәскәү эшселәренә ул икмәк Ҡәҫтәрән байҙан тартып алынғанмы, әллә Абдрахман ширҡәтенән тейәлгәнме – мөһим түгел, тик уның өҫтәлендә генә булһын. Икмәккә уның адресы ла, исем-шәрифе лә яҙылмай. Абдрахман ширҡәте иген сәсеп, мул уңыш үҫтереп алһа, ҡалған айырым хужалыҡтарға, байҙарға иген тапшырыу еңелгә килә. Хөкүмәткә лә игенде кемдән талап алған – уныһы барыбер. Шуға күрә Ҡәҫтәрән эшен ташлап, ширкәт эшмышы менән ҡыҙыҡһынған булып, кәнсәгә йүгерҙе. «Беҙҙең икмәкте тартып алып, үҙебеҙҙе Себер һөрһә, Сәүиттең үҙ коммуналары, үҙ ширҡәттәренә йәбешмәй әмәле ҡалмаясаҡ»,– тип фекер йөрөттө Ҡәҫтәрән.

***

Март айының бер айлы кисендә йорт эсендә эш тамамлап, ятырға йыйынған Шәмсинур менән Сәрбиямалға йүгереп Вахит килеп инде.

– Өләсәй, әсәй, олатайым ныҡ ауырып китте. Арҡаһына ятты ла ҡурҡыныс хырылдай.

– Бөгөн тамағына эстеме һуң?

– Иртәнсәк ҡайнатҡан самауырҙан бер сынаяҡ сәй эсте лә башҡа тамаҡҡа торманы. Һыу ғына эсеп торҙо.

– Ә мин бешереп киткән туҡмасты эсмәнегеҙме ни һуң?

– Мин төшкөһөн эстем, ә олатай ашҡа әйләнеп тә ҡараманы.

– Әй, әттәгенәһе, нишләп алайтып ауырайып китте икән? Бер ҙә бирешмәй, беше генә йөрөп ятҡан була ине, – тип һөйләнә-һөйләнә, Сәрбиямал өтәләнеп сығып та китте.

– Вахит, балам, һин хәҙергә уларға бармай тор, йәме? Бөгөн бында ғына йоҡлаһың, – тине Шәсминур улына.

Сәрбиямал әбей һөрөнә-төртөнә өйгә етеп ишек асҡанда, Әбдәлғәлим ҡарт донъя менән хушлашып, күптән үткәйне инде. Тупһаны аша атлағас та, ҡәҙимге булмаған тынлыҡ буйынса тәжрибәле ҡарсыҡтың күңеле өй эсендә үлек ятҡанын тойғайны. Ул шәм яндырҙы ла мейестең ситенә ҡуйҙы. Аҡылы менән был өйгә бөгөн ғазраил килгәнен һиҙһә лә, йөрәге менән былдай юғалтыуға

ризалаша алманы. Йүгереп һикегә менде, көҙгө алып, уны бабайының танау тишегенә ҡуйҙы. Ләкин Әбделғәлимдең йөрәге туҡтап, ғүмере һүнгәйне, бармаҡ остары күгәрә лә башлағайны. Ҡарсыҡ, илай-илай, көс-хәл менән бабайының ҡулдарын ҡайырып, күкрәк өҫтөнә һалды. Яулығын сисеп, үлгәндең аҫылынып төшкән эйәген башы менән ҡуша өҫкә тарттырып бәйләне. Эсе күбә башлаған ҡартын дебет яулыҡ менән ҡаплап, өҫтөнә үҙе тотоноп йөрөгән бысағын һалды.

– Үлер алдынан, бәлки, мине күреп, берәй васыят әйтергә уйлағандыр... Була алманым бит, бәхил бул инде, мине кисер, асыуыңды ҡәбереңә алып китмә, ятҡан түшәгеңдә ҡалдырып кит, – Сәрбиямал ҡартының күкрәгенә ятып, төн буйы илап сыҡты. Уның өсөн бөгөнгө төндән дә ауыр, ҡайғылы, оҙоно булмағандыр.

Ошо рәүешле өйҙән сыға алмай, ул таңға тиклем мәйет һаҡлап ултырҙы. Тик һыйыр һауып, тәрбиәләп йөрөгән йәш ҡатын килгәс кенә, Сәрбиямал күршетирәне йәүкәләп, Әбделғәлим ҡарттың үлеме тураһында хәбәр бирҙе.

Кеше йыйыла башлағас, мәсет ихатаһында ятҡан димде* килтерҙеләр. Мәйетте шунда һалып, димде иҙән уртаһына ҡуйҙылар. Күрше-күлән генә түгел, бөтә Яйҡар араһы, ауылдың йәше-ҡарты йыйылды. Ингән һәр бер кеше «Бик изге мосолман ине», «Бик тә ғәҙел кеше булды», «Донъя көтөүгә бик тә ихлас, бөтә кешегә лә изгелек ҡылырға ынтылып торҙо», «Урыны йәннәттә булһын!» тиеште.

Уны Ялан ауылының яңы зыяратына ҡуйҙылар. Йыназа уҡып, мәйеттең ҡәберен күмгәндән һуң, үрге мәсет имам-хатибы:

– Йә, ағай-эне, үҙ фекерегеҙҙе әйтегеҙ: түбәнге мәхәлләнең Әбделғәлим исем-шәрифен йөрөткән ошбу ҡәбер эйәһе мосолманы ниндәй кеше ине?– тип һораны.

Бөтә йыйылған ирҙәр бер тауыштан «Яҡшы кеше булды» тип әйттеләр. Ә ҡайһы берҙәре өҫтәп тә ебәрҙе:

– Холҡо бик ҡыҙыу булһа ла, кешегә зыяны теймәне, бер кемгә лә ҡул күтәрмәне.

– Сәрбиямал еңгәй менән пар күгәрсен һымаҡ бик татыу йәшәнеләр. Кешене рәнйетмәне, барлыҡ атҡарған ғәмәле хәләл булды, ауыл халҡы алдында намыҫы пак булып донъя ҡуйҙы.

Гүр саҙаҡаһы таратылғандан һуң имам-хатиб артынан ҡайтыу яғына эйәргән мосолмандарҙың береһе:

– Ҡырҡ аҙым һананым, ошо ваҡытта Әбделғәлим ағай яңынан терелеп ултырҙы инде, – тине.

– Тиҙҙән Мөнкир менән Нәнкирҙең ғүмер буйы яҙған ғәмәл дәфтәрен мыҫҡалға һалып үлсәй башларҙар, – тип өҫтәне икенсеһе.

Шулай итеп, Беренсе бөтә донъя һуғышында үҙенең өлкән улы Вахитты юғалтҡан Әбделғәлим ҡарт берҙән-бер иҫән ҡалған Абдрахманының ҡулға алыныу фәжиғәһен тыныс ҡына кисерә алманы, һуңғы көндәрҙә йыш ҡабатлана башлаған йөрәге һыҙланыуына түҙә алмай, барлыҡ донъя хәстәрен Сәрбиямалға ҡалдырып, кинәт вафат булып ҡуйҙы.

Ауылдың имам-хатибы үҙенең ҡара тышлы ҡалын дәфтәренә: «1928 йылның 30 мартында йомға көн Әбделғәлим уғлы Игебаев 69 йәшендә дәрель фанадин дәрель баҡыға рихләт әйләде. Ужыты 1859 йыл. Жаны жәннәттә улсин»,– тип теркәп ҡуйҙы.

Бынан теп-теүәл алты йыл элгәре, 1922 йылдың февраленең асҡау, күҙ асҡыһыҙ буранлы көнөндә, Абдрахмандың Нәмәстән алып ҡайтып төшкән кәләше

*Дим — мәйетте эсенә һалып, зыяратҡа алып бара торған дүрт һаплы носилка.*

Маргаританы бәддоға уҡып өйөнән ҡыуып сығарған Сәрбиямал ҡарсыҡты бөгөнгө яҙмыш ошо кафирә киленгә килеп, баш һалмаға мәжбүр итте. Яйҡар араһы, тын алмай, килен менән ҡәйнә араһында һис шикһеҙ тоҡанырға тейешле низағты көттө. Ләкин Абдрахман өйөнөң мөрйәһенән янғын төтөнө сыҡҡанын бер кем дә күрә алманы. Яҙмыштары тигеҙләнгән урыҫ ҡатыны – Ялан килене Маргарита менән Сәрбиямал ҡарсыҡ ҡосаҡлашып илаштылар-илаштылар ҙа, ике өйҙөң бөтә мөлкәтен берләштәреп, әсә һәм ҡыҙ һымаҡ, өр-яңынан донъя көтөргә тотондолар.

Ләкин бөтә Ялан ауылына үрнәк булырлыҡ ике милләт ҡатынының бергәләп донъя көтә башлауы ла кешеләрҙе тыныс ҡалдырманы, улар тураһында баштараҡ тағы ла бер талай һүҙ ҡуйырып алды:

– Ай-һай, ике йыныс кешеһе бер мөйөштә һыйыша алырмы икән?

– Мәрйә барыбер мәрйәлеген итер, Сәрбиямалдың аяҡ-ҡулын бәйләп, ауыҙына сепрәк тығып, балаһын етәкләр ҙә берҙән-бер көн стансыға ҡасып китер.

– Аҫтыртын ғына ике донъяны ла осороп яталыр әле. Улар халҡына ни ышаныс?

Ә инде Игебаевтың ғаиләһен ене һымаҡ күргән Уйылдан:

– ГПУ алып киткән ерҙән ошоға тиклем бер әҙәм дә кире ҡайтып килгәне юҡ. Бөтә донъяны өптәр ҙә, Сәрбиямал әбейҙе урамда ҡалдырып, берәй урыҫ артынан эйәреп китер әле, – тигән хәбәр таратты.

***

Быйыл яҙ бик дөргән килде. Апрель баштарында Ҡоруҙәк ташып, ауыл уртаһындағы ағас күперҙе, нисек кенә уны ергә ҡағылған бүрәнәләргә бәйләп нығытып ҡарамаһындар, ҡоторған ташҡын беләк йыуанлығы арҡанды ептәй өҙөп, уны ағыҙып алып китте. Ауыл ике өлөшкә бүленеп, күперһеҙ ҡалды, бәйләнеш бөтөнләй өҙөлдө. Ике яҡта тороп ҡалған мал-тыуар, юлаусылар Ҡоруҙәк һыуының ҡайтҡанын көттө.

Оло Ҡыҙыл ташҡыны ҡаршыһындағы Ҡабаҡ битләүенә тиклем йәйелде. Верхнеурал, Баймаҡ яғынан килгән атлы юлсылар ике яҡта тороп ҡалды. Ғәҙәттә, бындай ваҡытта Ялан халҡы ташҡын мәлендә емерелә торған бейек Ҡыҙыляр башына балаларын да, малын да ебәрмәй. Үкенескә ҡаршы, ҡорбанһыҙ булмай: йә шаршыға эләгеп, һыу аша сығырға маташҡан кешеләрҙең кәмәһе түңкәрелә, йә мурҙаһын ҡарарға йөрөгән берәйһе Ҡыҙылда батып үлә.

Бына ошондай көндәрҙең береһендә, бөтә ерҙе яҙ һулышы солғап алған мәлдә, Шәмсинурҙар ҡапҡаһы алдында йыйылған ҡар һыуын сәсрәтеп, Ялан кешеләренә таныш булған еңел автомобиль килеп туҡтаны. Кабинаһынан, бер аяғы зәғиф булыуға ҡарамаҫтан, үҙенең сос хәрәкәте менән ауыл халҡын ғәжәпкә ҡалдырған тау тресы управляющийы Үлмәсов килеп сыҡты. Был юлайы еңел машина тирәһенә кешеләр йыйылмаһа ла, уларҙың баштары тәҙрәләренән күренде, сөнки был тамаша Ялан халҡына аңлашырлыҡ түгел ине. Байтаҡ ҡына ауылдаштар Шәмсинурҙан «халыҡ дошманы ғаиләһе» тип йөҙ бороп, һырт биргән мәлдә, шундай ҙур етәксе машина менән ҡапҡаһы төбөнә килеп туҡтаһынсы!

Өйҙәгеләр ҙә кем килгәнен шәйләп өлгөрҙө, сабый арҡаһында боларған өйҙө ашыҡ-бошоҡ тәртипкә килтерҙе. Бына ҡулдарына ҡағыҙ йәшник тотҡан водителен эйәртеп, ишекте бер-ике тапҡыр төкөлдәтте лә, Филипп Афанасьевич ҡояштай ялтырап үҙе килеп инде. Һаулыҡ һорашып-нитеп тормай, ул туп-тура Шәмсинурға ҡаршы атланы. Сәрбиямал ниндәйҙер миһырбанһыҙлыҡ һиҙеп, ауыҙын ҡапланы ла секерәйгән ҡарашын килененә текәне. Ул төҫмөрләгән тамаша оҙаҡ көттөрмәне. Үлмәсов иҙән уртаһында күҙе йәшкәҙәп торған

Шәмсинурҙы үҙ ҡосағына алып, күкрәгенә ҡыҫты һәм арҡаһынан тупылдатып һөйҙө. Сәрбиямал ҡарсыҡ был күренеште кисерә алманы, башын түрбаш яғына борҙо. Тик килгән кешенең «Ҡыҙым, ҡыҙым...» тип өндәшеүе генә көнләшеүҙән шартлар сиккә еткән Сәрбиямалды бер аҙ һыуындыра төштө. Әммә уның күңелендә түрә менән килене араһындағы мөнәсәбәттең паклығына шик тә тыуҙы. «Туҡта, туҡта, әле балам, Абдрахманым, һау йөрөп ҡайтһа, атаңды танытыр әле!» – тигән янау хисе әбей йөрәгендә бөрөләнә биреп ҡуйҙы.

Тәүге күрешеү тойғолары бер аҙ һүнә төшкәс, ихлас холоҡло Филипп Афанасьевич бер нисә аҙым артҡа китеп, урынында ҡуҙғалмай торған Маргаритаға текләп ҡарап алды ла:

– Маргарита Ивановна, һеҙ сабыйҙан һуң бигерәк тә матурайғанһығыҙ, биттәрегеҙ йәшәреп киткән. Донъяға килгән ҡыҙығыҙ менән ысын күңелдән ҡотлайым! – тип хужабикәнең ҡулын ҡыҫты. – Сабыйға ниндәй исем ҡуштығыҙ?

– Ҡәйнәмдең теләге буйынса Хәфиә тигән исем бирҙек.

– Бик матур исем тапҡанһығыҙ. Ҡыҙығыҙ бәхетле булһын! – тип Филипп Афанасьевич Шәмсинурҙың ҡулын ҡабат ҡыҫты.

«Был нимә эшләй, битһеҙ!? Нимә һөйләгән була, кеше ҡатынын аҙҙырып, ниҙәр ҡылана?» – Шундай уйҙар Сәрбиямалды тәрән хафаға һалды. «Бар, юлыңда бул, йәш бисәләрҙе бүләк биреп ҡотортоп тормаға, уның ире бар!» – тип ҡысҡырғыһы килде. Ләкин, эсендә көнләшеү уты дөрләп янһа ла, тыйылып ҡалды, әҙәп һаҡланы.

– Бына яңы тыуған балаға күстәнәс килтерҙек, ҡабул итеп алығыҙ, – тип Үлмәсов үҙ шоферы ултыртып киткән йәшниккә ишара яһаны.

– Рәхмәт инде, Филипп ағай, әле үткәндәгеһен дә ашап бөтөрмәнек, – тип ныҡ тулҡынланған Шәмсинур тағы күҙ йәшен тамыҙып алды.

– Әйҙә, төпкә уҙығыҙ. Хәҙер самауыр ҡайнатабыҙ, – тип ул ҡәйнәһенә ҡараны, ләкин Сәрбиямалдың, «кәзәһе төкөп», түрбашта ҡымшанмай ҙа тик ултырғанын күргәс, самауырға үҙе тотонорға мәжбүр булды. Үлмәсов ултырған урынынан кинәт торҙо ла:

– Рәхмәт, Маргарита Ивановна, борсолмағыҙ, минең һис кенә лә ваҡытым юҡ. Бында емерелгән Ҡыҙыл күперен ҡарарға ғына килеүем, – тине.

– Юҡ, юҡ, мин һеҙҙе ашатмай-эсермәй ебәрә алмайым. Абдрахман быны белһә, оҡшатмаҫ, сисенегеҙ, ҡулығыҙҙы сайығыҙ. Ҡәйнәм, анау машина йөрөтөүсене саҡырып ҡына индер инде, – тип Сәрбиямалға өндәште.

Ләкин «артҡы шәрифенә ышлыя ҡыҫылған» ҡәйнә, ишетмәмешкә һалышып, башын ситкә борҙо. «Ярай әле, Үлмәсов ағай бер ни ҙә һиҙмәй, юғиһә хәҙер үк тороп, ишекте шарт ябып сығып китер ине»,– тип уйлап алды Шәмсинур.

Үлмәсовҡа тик хужабикәнең ҡәтғи әмеренә буйһонорға ғына ҡалды. Шәмсинур шоферҙы алып инде. Ҡунаҡтар урындарына ултырғас, хужабикә өйҙә булған бөтә затлы аҙыҡ-әүҡәтен өҫтәл өҫтөнә теҙҙе.

Һый-хөрмәткә хайран Үлмәсов:

– Өҫтәлегеҙгә үткән килгәндә лә ғәжәпләнеп ҡайтҡайным. Бындай тәмле-татлы әйберҙәр һеҙҙең уңғанлығығыҙҙың емешелер... – тип хужабикәнең егәрлеген маҡтап алды.

«Килендең һалпы яғына һалам ҡыҫтыра, ҡарт төлкө, ҡалай таҫма телле боҙоҡ кеше!» – Сәрбиямал ябынған яулыҡ аҫтынан күҙәтеүен дауам итте, урынынан ҡуҙғалмай, ниндәйҙер мөғжизә көткәндәй булды.

Шәмсинур әле тығыны асылмаған «Смирновская»ны килтереп ултыртҡас, Үлмәсовтың былай ҙа ирегән күңеле бөтөнләй тирелеп төштө.

– Бына һиңә әкәмәт! Һин революциянан һуң берәр ерҙә өҫтәлгә батша замандағы араҡыны ҡуйғандарын күргәнең бармы? – тип ул шоферына өндәште.

– Юҡ. Ишеткәнем бар, әммә күргәнем булманы.

– Бына шулай ул бында. Маргаритала был «зәм-зәм» һыуын сығара торған үҙ заводы бар, күрәһең. Улар шунан башҡа араҡыны өҫтәлгә ҡуймайҙар .

Әллә шатлығынан, әллә эске тулҡынланыуынан биттәре алһыуланған Шәмсинур:

– Ғәфү итегеҙ, Филипп Афанасьевич. Мин тығынын аса алмайым. Үткән килгәндәге һымаҡ, үҙегеҙ асып... Беҙҙең өйөбөҙҙә эсеүсе бер ҡасан да булманы.

– Ярай, ярай, тик өҫтәлгә генә килһен, ҡалғанын үҙебеҙ башҡарырбыҙ, – тип Үлмәсов мисәтле араҡы шешәһенең боғаҙынан тотоп, һелкеп алды ла уң ҡулының усы менән төбөнә һуҡҡайны, шешә тығыны шартлап әллә ҡайҙа осоп та китте.

– Ай-һай, бындай эсемлекте элек байҙар ғына эсә торған булғандыр. Бындай нәмә ауыл кешеләренә ярамай, һәм һин уларға ҡуйма ла, Маргарита! – тип шаяртты Үлмәсов.

Ҡунаҡ тағы бер рюмка эсте лә: «Мә, Маргарита Ивановна, быныһын ултыртып ҡуй, тик йәшергән урыны ышаныслы булһын, юғиһә, берәйһе белеп ҡалһа, өйөгөҙгә һуҡмаҡ һалыр»,– тип мәрәкәләне.

Бер сынаяҡ сәй эсеп, өҫтәлдәге аҙыҡ-әүҡәттән ауыҙ иткәс, Үлмәсов етди һүҙгә күсте:

– Мин һеҙгә ике йомош хаҡында әйтергә индем. Беренсеһе: мин ошо араларҙа Абдрахманды хөкөм аҫтынан ҡотҡарыу мәсьәләһен ҡуҙғатып йөрөйөм. Абдрахман волость етәкселәре ошаҡлауы арҡаһында ҡулға алынғас, улар менән һөйләшеүҙе кәрәк тапманым. Йылайыр кантоны кимәлендә һөйләшергә тура килде. Улар минең был йомошта ярҙам итергә булды. Әле Игебаевты фирҡәнән сығарыу тураһында бер ниндәй ҡарар юҡ, һәм уның эше ҡаралмаған. Шулай булғас, партия ағзаһы булған кешене хөкөм аҫтында тотоу законды боҙоу булып тора.

Икенсеһе. Иртәгәһе көндән Баҡыр-Үҙәк руднигы больницаһы үҙ штатына керетеп, Һеҙҙе эшкә алды. Бына шул приказ нигеҙендә Һеҙ иртәнән башлап эшләй башларға тейешһегеҙ.

Элгәрге ғәҙәтенсә, ҡулдарын күкрәгенә ҡуйып торған Шәмсинурҙың тағы ла күңеле тулды. Бер аҙ күкрәге һелкенеп торҙо ла, тағы илап ебәрҙе. Әсе күҙ йәше аша:

– Мин һеҙгә рәхмәтемдән башҡа бер ни ҙә әйтә алмайым, шундай изге йәнле кешене Хоҙай һаҡлаһын! – тине ул.

Үлмәсовтың әйткән һүҙҙәрен яңы ғына бер епкә теҙеп, мейеһенә һеңдерә генә башлаған әбейҙең, Филипп Афанасьевич урынынан тороп, шатлығынан күңеле лыҡа тулған ҡатынды яуырынан һөйә башлауы булды, башы буталды, күҙ алды ҡараңғыланып китте. «Абдрахманды был әҙәм ни өсөн ҡотҡарырға булды икән, киленде нишләп эшкә саҡыра, был илтифатлығы өсөн был кешене ни менән бәхилләндерергә бурыслыбыҙ?» – Ошондай һорауҙар яңы ғына ике оло ҡайғы кисергән ҡарсыҡтың башын бутаны, аҡын томаланы.

– Ҡыҙығыҙға нисә ай тулды инде? – тип һораны кейенергә башлаған Үлмәсов.

– Икенсе ай менән бара. Кеше таный башланы инде, – тип йылмайҙы Шәмсинур.

– Ә, улай булғас, ҙур ҡыҙ булып килә бит, – көлөп ебәрҙе Үлмәсов һәм ҡапыл етдиләнде. – Эшләй башлағас, уны ҡайҙа, кем ҡулына ҡалдырып китә алаһығыҙ?

– Әгәр инде эшләргә булһам, минең ҡәйнәмдән башҡа бер кемем дә юҡ. Риза булһа, уның ҡарамағына ҡалдырырмын, – тип ауыҙынан быға тиклем бер һүҙ ҙә сығармаған Сәрбиямал ҡарсыҡҡа эйәк атты.

– Апай, мин киленегеҙҙе Баҡыр-Үҙәк больницаһына эшкә саҡырам. Иртәгәһенән эшләй башларға мөмкин. Баланы бағып торорға ризаһыңдыр бит? – тип Сәрбиямалға ҡараны.

– Атаһы төрмәлә ултыра тип, сабыйҙы сит кеше ҡулына тапшырып булмай бит. Ҡарармын ҡарамай ни, мин ғүмеремдә аҙ ҡараманым балаларҙы. Күҙ терәп торған яңғыҙ улымдың балаһы ла! – Сәрбиямал, мәрхүм Әбделғәлим ҡарт һымаҡ, ҡырҡараҡ яуап бирҙе.

– Әле Абдрахман улығыҙға ярҙам итеү хәстәре менән йөрөп ятам. Теләк телә, апай, бәхетегеҙҙән, күп тә үтмәй ҡайтып та төшөр, бәлки.

– Амин! Иншалла, бөтөнләй ҡыутомшоҡ, бәхетһеҙ бала түгел ине, кешегә лә яуызлығы теймәне. Хоҙайҙын хикмәте, ни сәбәп менәндер инде шул төрмәләренә инеп китте шул. Теләк теләмәгән ҡайҙа инде ул, атаһынан бигерәк шуға көнө-төнө илап, күҙемде бөтөрөп ултырам, – тип яңы ғына был «ҡурҡыныс, тәрбиәһеҙ» әҙәмде эстән ҡарғаған ҡайтымһаҡ әбейҙең күңел көҙгөһө яҡтыра төштө.

– Шулай булғас, Маргарита Ивановна, иртәгәнән башлап Һеҙҙе алырға күсер менән ат килә башлаясаҡ. Эш көнөгөҙ алты сәғәт: йә төшкә тиклем, йә төштән һуң. Шулай итеп, бер-ике ай беҙҙең ат менән йөрөрһөгеҙ, ә унан һуң күҙ күрер. Уға тиклем Абдрахман да ҡайтып төшөр, бәлки.

– Уңайһыҙыраҡ булһа ла әйтәйем: эшләргә мин риза. Ғаилә лә булғас, кемдер эшләргә, аҡса табырға тейеш. Ләкин мин ат менән йөрөүгә ҡаршымын, рәхмәт. Дүрт саҡрымды ни! Ауылдан һеҙҙә әллә нисә ир, ҡатын-ҡыҙ эшләй, көҙҙән уҡыусы балалар мәктәпкә йөрөй башлар, шуларға эйәреп йөрөрмөн.

– Ә нишләп әҙер аттан баш тартаһығыҙ? – тип һораны бер аҙ ғәжәпләнгән Үлмәсов. – Юлдар боҙолһа, юл насарая торған...

– Ауылда Абдрахмандың дуҫы ла, дошманы ла етәрлек. Тағы ғәйбәт таралыр. Уны алып китеүенә шатланып, ҡыуанып һикереүселәр ҙә юҡ түгел. Һеҙҙең иғтибарығыҙҙы «совет власы дошманына» ярҙам итеү тип аңларҙар... Үҙегеҙгә тап төшөүҙән ҡурҡам. Хәҙергә кеше күҙенә артыҡ күренмәҫкә тырышабыҙ, һеҙгә лә беҙҙән ситтәрәк тороуығыҙ яҡшыраҡ булыр, Филипп Афанасьевич, – тине Шәмсинур үтенгән юҫыкта.

– Нисауа, нисауа, һөйләрҙәр ҙә туҡтарҙар. Иртәгә директор ебәргән ат ҡапҡағыҙ төбөндә ваҡытында көтөр. Аҙаҡ күҙ күрер. Әлегә ат менән йөрөп, юлды өйрәнерһегеҙ. Йә, хушығыҙ, сәйегеҙ өсөн рәхмәт.

Филипп Афанасьевич йылы хушлашты. Күңелдәре тулған ике ҡатын автомобиль күҙҙән юғалғанса тәҙрәнән ҡарап ҡалды.

Өҫтәлдәге һауыт-һабаны йыйыштырып бөтөр-бөтмәҫтән,– хәҙер әйтмәһә, онотор төҫлө,– Сәрбиямал үҙ киленен эргәһенә ултыртты.

– Килен, мөйөштә ултырған әбейҙең ни эше бар, тип тә уйлауың бар, ләкин был салыш аяҡ керәшен миңә оҡшап етмәй.

– Нишләп, ҡәйнәм?

– Килеп инер-инмәҫтән алаптай ҡулдары менән һине ҡосаҡлап ята ла баһа. Бик тәрбиәһеҙ кешегә оҡшай. Абдрахман юҡта ул бәндәнең таҫма теленә ышанып, юлдан сығып ҡуймағайың, тип бик шикләнәм. Балалар бар бит. Бер аулаҡта тап итеп, һәләк итеп ҡуймаһын, тиеүем. Ул рудник тигән ерҙә теләһә ниндәй, иманы осҡан халыҡ йыйылған, ти. Бына шул, килен,– тип һүҙен тамамланы ҡарсыҡ, күҙен сырт-сырт йомоп.

– Уй, ҡәйнәм, аҡыллым! Рәхмәт инде шулай яҡын күргән өсөн. Кәрәк икән христианса, кәрәк икән мосолманса ант итәм: минең Абдрахмандан башҡа бер кемем дә юҡ, булмаясаҡ та. Беҙҙе хатта үлем дә айыра алмаç, биллаһи! – Шәмсинур ҡәйнәһенә ҡарап торҙо ла теҙ сүгеп илай башланы.

– Тор, балам, улай итмә. Йә Вахит килеп инһә, ҡурҡыр, – тип Сәрбиямал киленен торғоҙоп, үҙе эргәһенә ултыртты. Шул рәүешле үҙ ҡайғыларына сумып, оҙаҡ ҡына бер-береһенә һыйынып һүҙһеҙ ултырҙылар.

Тик һуңынан ғына, эңер төшкәс, Үлмәсов ишек төбөнә ҡуйып киткән күстәнәс быларҙың иҫенә төштө. Ҡыҙыл таҫма менән бәйләнгән ҡағыҙ йәшникте асып, ундағы бүләктәрҙе Шәмсинур берәм-берәм өҫтәлгә теҙеп торҙо.

– Бына, ҡәйнәм, һиңә кешәмир яулыҡ та аяғыңа тас үҙеңә яраРлыҡ тәрән калуш һалғандар, – тип бүләктәрҙе Сәрбиямалға һуҙҙы.

Йәштән яҡындарынан йыуаса алырға күнеккән ҡарсыҡ аяғындағы иҫке ҡатаһын ырғытып, өр-яңы калуш кейеп алды, башына биҙәкле яулыҡ ябынып, стеналағы көҙгө алдына баҫты.

– Байытты бит беҙҙе был Хоҙай бәндәһе. Ҡарамаҡҡа былай әҙәпһеҙ тойолһа ла, бик тә йомарт кеше булып сыҡты ла баһа был түрә. Хоҙай ғүмер бирһен изге йәнгә!

Ҡәйнәһенең бер нисә сәғәт эсендә үҙ фекерен әллә нисә төргә әйләндереүе Шәмсинурҙы, берҙән, шатландырҙы, икенсенән, шикләндереп тә ҡуйҙы, сөнки элгәрге ваҡыттарҙа уның ҡәйнәһе ныҡ ихтыярлы, әйткәненән һис кире ҡайтмай торған бер һүҙле ҡатын ине. «Ҡәйнәмде лә ҡайғылар ҡартайтты, бала холоҡло булып бара. Уныһы бәлә түгел, аҡылы ғына бер төрлө булып китмәһен инде, Хоҙай һаҡлаһын!» – тигән уйға килде Шәмсинур.

***

Иртәгә Баҡыр-Үҙәккә эшкә йыйынғас, өйҙә хужа булып ҡаласаҡ ҡарсыҡ ниҙәр эшләргә, уйындан өҫтө-башы бысрап ҡайтып ингән Вахит ниҙәр башҡарырға тейешлеген Шәмсинур эргәһендә диҡҡәт менән тыңлап ултырған Сәрбиямалға бик тәфсирләп аңлатты. Үлмәсов ҡалдырып киткән аҙыҡ араһында, белгән шикелле, биш-алты ҡаҙаҡ маный ярмаһы ла булып сыҡты.

– Мына самый сабый ризығы, ошоны бешереп ашатырһың. Был балалар имеҙлеге була. Һөт йылытып, шуны ауыҙына ҡаптырырһың. Мин юҡта Хәфиә маҙаһыҙламаç. Ул, атаһына оҡшап, бик түҙемле бала булмаҡсы, – Шәмсинур ҡулындағы ҡыҙын супылдатып үбеп алды. – Бына иртәгә мин һине өләсәйеңә ҡалдырып китәм, бергәләп донъя көтөрһөгөҙ.

– Ай-һай, килен, ул нәмәңде мин эшкиндерә алһам ярар ине, – тип икеләнде Сәрбиямал.

Шәмсинур тимер туҫтаҡ алып, уға бер сынаяҡ һөт ҡойҙо ла ҡуҙ өҫтөнә ултыртты. Ҡыҙыу ҡуҙ өҫтөндә һөт ҡайнап сығыу менән, бер аш ҡалағы ярма һалды, бер-ике киҫәк шәкәр ҙә төшөрҙө. Бер аҙ ҡайнағандан һуң: «Бутҡаны ошолайтып бешерегеҙ, һыуынғас, ашарға ла була»,– тип туҫтаҡты ситкә шылдырҙы.

Баланан алда, Шәмсинур сынаяҡ аҫтына бутҡаны әбей менән улына һалып бирҙе. Быңдай тәмле нәмәне ғүмерендә тәүге күргән Вахит бутҡаны нисек йотоп ебәргәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

– Уй, тәмлекәс! Әсәй, ниңә элек быңдай бутҡаны бирмәнең? – тип ҡысҡырҙы иҫе киткән малай.

– Ай-һай, бик татлы ризыҡ икән, бойҙай бутҡаһы ары торһон, – тип Сәрбиямал ҡарсыҡ та маҡтап алды.

– Ә бына бәпәйгә сепрәк аша ашатырһың. Шулай итеп. – Шәмсинур бутҡа һалынған сепрәкте Хәфиәнең ауыҙына тығыуы булды, уныһы, шәкәр тәмен тойоп,

сәпелдәтеп имә лә башланы. – Шунан һуң балаға шәкәрле сәйҙән башҡа бер ни ҙә кәрәкмәй. Аңланыңмы?

Күп тә үтмәй, уларҙың ҡапҡаһы төбөнә Үлмәсов ебәргән ат килеп туҡтаны. Барлы-юҡлы, тик байрам өсөн генә һаҡлаған затлы кейемен кейеп, Шәмсинур күрепле кырандасҡа килеп ултырҙы. Фаэтонға* тартым арба кузлаһында** сыҡайып ултырған күсер, оло ғына йәштәге кеше, уның менән ултырыр тип көттө. Шәмсинурҙың арҡыры һалынған йомшаҡ күн ястыҡтың ситенә генә ултырғанын күҙ ҡырыйы менән күреп, ул: «Ханым, мендәрҙең уртаһына ултырығыҙ, минең урыным ошо!» – тип ҡысҡырҙы.

Билдәле, Шәмсинурҙың мыкты бәхмис атҡа егелгән күсерле кырандасҡа ултырып ҡайҙалыр юлға сығыуы күрше-күлән күҙенә салынмай ҡалманы. Абдрахман ҡатынының алдан юрауы дөрөҫкә сыҡты. Ул кис эштән ошо рәүешле үк ҡайтып төшөүенә: «Элгәре Абдрахманы өйҙә саҡта һәр ваҡыт йәйәү йөрөгән Шәмсинурҙы, ирен ҡулға алғас, күсерле кырандасҡа ғына ултыртып йөрөтә башланылар», – тигән хәбәр таралды.

Көндөҙ бала йоҡлаған саҡта ҡапҡа тышында ҡуйылған эскәмйәлә ултырған Сәрбиямалдан бер нисә үткенсе ауылдаштары:

– Бөгөн һеҙҙең Шәмсинурығыҙ, бай бисәләре шикелле, күрепле кырандасҡа ултырып ҡайҙалыр киткәйне, әллә урыҫ яғынан уны берәйһе алырға килгәнме? – тип һорашып та алды.

– Имсәк сабый балаһын ҡалдырып, күсерле бәхмискә ултыртып, Сәрбиямал еңгә, килененде ҡайһы яҡҡа оҙаттың? – тип һорашҡан, төбөнә төшмәйенсә ҡуҙғалмаған ауыл бисәләренә мәрхүм ире һымаҡ танау сөйөргә яратҡан әбей бер нәмәһен дә йәшермәй, тағы ла ҡабартыңҡырап һөйләп бирҙе.

– Абдрахманым түрә-ҡара менән танышырға, аралашырға бик маһир булды бит. Уның үҙен дә, эшен дә яраттылар. Анау Баймаҡтағы иң ҙур хужа, аяғынан зәғиф Үлмәсбаев тиме, эйе, шул кеше улымдың бик яҡшы танышы булған икән. Улым өй эшләткәндә лә машинаһы менән килеп ярҙам итеп киткәйне. Бына һуңғы килгәнендә киленде Баҡыр-Үҙәк руднигы бальнисына духтыр итеп тәғәйенләп киткәйне. Килен йәш сағында духтырлыҡҡа уҡыған бит. Бына бөгөн шуны ат менән килеп алып киттеләр, – тип Сәрбиямал, борсаҡты һибә-һибә, хәлде һөйләп бирҙе.

– Килененден дүрт-биш саҡрымды йәйәү үтмәгә саты береккәнме әллә?

– Униһы минең өсөн ҡараңғы. Түрәләр ни эшләгәнен үҙҙәре беләләр әле. Һеҙгә килеп кәңәш һорап йөрөмөҫтәр инде. – Сәрбиямал дорфа ғына яуапланы.

– Ана, беҙҙең ауылдан Баҡырҙа нисә бөкилле әҙәм эшкә йәйәү йөрөй. Быгаса тиклем бер нәмәләре лә төшөп ҡалғаны юҡ.

– Улар бит ҡара эштә эшләйҙәр. Ә минең киленем духтыр!

Шәмсинур тәүге эшенә барған сәғәтендә үк Сәрбиямал менән ауылдаш бисәләр араһында ошондайыраҡ хәбәр булып алды. Билдәле, башҡа бүтән яңылыҡтар һымаҡ, был һүҙ ҙә һөйләнелгән урынында тик кенә ятманы, телдән телгә, ҡолаҡтан ҡолаҡҡа күсеп, ҙурая, тулылана барҙы. Быға һәр кем булдыра алған ҡәҙәре үҙ өлөшөн индерҙе.

...Рудник асылыр-асылмаҫтан биш бүлмәле, ике яҡта ике бейек болдорло Ғәлимйән хажиҙың Баҡыр-Үҙәккә һатып ебәргән йортонда участка больницаһы астылар. Яланға килен булып төшкән Шәмсинур әле был мөһабәт йорт үҙ нигеҙендә ултырған сағында: «Ошо серле кешенең йортон инеп бер күрәһе,

*Фаэтон — рессорлы еңел арба.*

*** Кузла — алда күсерҙең урыны.*

уның эсендә ниҙәр барын беләһе ине, унда нисек ғүмер кисерәләр икән»,– тип уйлай торғайны. Бына бөгөн ҡасандыр ошолайтып хыялланған Шәмсинурҙы күсер ҡиблаға ҡараған бейек болдор эргәһенә килтереп төшөрҙө лә, тағы ҡасан килергә тейешлеген һорап, үҙ юлына китте. Үҙе хаҡында төрлө легенда, фараздар тыуҙырған был йорт рудниктың ситендәге ҡалҡыулыҡта, үҙ хужаһы һымаҡ, бейектән ғорур күренеп ултыра.

Үҙҙәренә сыбыҡ осо булһа ла туған тейеш атаҡлы Ғәлимйән йортоноң бейек болдоронан тулҡынланыу кисергән Шәмсинур коридор буйлап эскә үтте. «Главный врач участковой больницы Воронин Степан Петрович» тигән яҙыуҙы уҡыны ла ишек шаҡыны. Эстән тоноҡ ҡына, ләкин хәрбиҙәрсә «Можно» тигән аныҡ тауыш ишетелде.

Ишеккә ҡаршы өҫтәл артында өҫтөнә аҡ халат, башына ҡар һымаҡ күҙ яуын алып торған ҡалпаҡ кейгән киң яурынлы, мыйыҡлы кеше Шәмсинурҙы аяғүрә баҫып ҡаршы алды. Тышҡы ҡиәфәте менән мөслимә ҡатын-ҡыҙҙары менән ҡатнаш никахтан тыуған ҡуңыр битле, ҡыҫығыраҡ күҙле, казактарға тартым урта йәштәрҙәге кеше ине был.

Ул үҙен «Степан Петрович» тип таныштырҙы. Өҫтәл ҡырынан урын күрһәтте.

– Һеҙҙе, ханым, кем тип атайыҡ?

– Маргарита Ивановна тип суҡындырылғанмын, ә мосолманса Шәмсинур исемен йөрөтәм.

– Яҡшы, яҡшы. Был яҡтарға һеҙҙе ниндәй яҙмыш ташланы? Ишетеүемә ҡарағанда, һеҙ Ялан ауылында тормоштаһығыҙ...

– Эйе. Ялан ауылы Абдрахман Игебаев тигән кеше менән никахлашҡанмын. Етенсе йыл бергә ғүмер иткәйнек.

– Нишләп улай күңелһеҙ генә «иткәйнек» тиһегеҙ? Хәҙер ҙә йәшәп ятаһығыҙҙыр бит?

– Үкенескә ҡаршы... – Шәмсинур һүҙен бөтөрә алманы. Уның күҙендә йәш бөрсөктәрен күреп, Степан Петрович ғәфү үтенде.

Билдәле, был ҡатындың ире хөкөм аҫтында булыуын байтаҡтан белеүенә ҡарамаҫтан, Степан Петрович был турала уның үҙ ауыҙынан ишеткеһе килгәйне. Ун һигеҙенсе йыл ҡыҙылдарҙың Пенза дивизияһы менән был яҡтарға килеп сығыуын, ләкин Нәмәстә тиф эләктереп, Шәмсинурҙың Аполлинарий Христофорович ҡарамағында тороп ҡалыуын ишеткәс, баш врачтың ҡуңыр битенә етдилек билдәләре йүгерҙе, тырпайып торған мыйығын йәшерергә теләгәндәй, усы менән ҡапланы ла, башын тағы ла аҫҡараҡ эйеп, ҙур ҡыҙыҡһыныу менән Шәмсинурға текәлде.

– Ә, Абдрахман тиһегеҙ бит әле... Уның менән ҡайҙа осраштығыҙ?

– Һуғыштан ҡайтҡан был егетте егерме икенсе йылдың башында был яҡтарҙа ныҡ таралған ваба, тиф ауырыуына ҡаршы ойошторолған санотрядта осраттым.

– Яҡшы, яҡшы... – тип һүҙҙы нишләптер Степан Петрович.

– Шунан ни, беҙҙе яҙмыш Яйыҡ буйындағы казактарға килтерҙе. Андрей Иванович Белов исемле бер бай казакта биш йылға яҡын уларҙың балалары хоҡуғында йәшәнем.

– Ҡайҙа йәшәнегеҙ?

– Обручевка тигән хуторҙа.

– Беләм, беләм. Егерме икенсе йыл беҙ ҙә шул уҡ эштәр менән бөтә Яйыҡ буйлап йөрөп сыҡтыҡ. Мин һеҙҙең ул Обручевка хуторында ауыл Советы председателендә, фамилияһы Дедко инеме, ҡунып та сыҡҡайным. Бик тә ярлы ғаилә ине.

– Тап шул Дедко асҡан медпунктта мин оҙаҡ ҡына эшләп алдым,– тине Шәмсинур.

– Бына һиңә кәрәк булһа! Беҙ икебеҙ ҙә бер ҡамырҙан бешерелгән икәнбеҙ, бер үк һуҡмаҡтан йөрөгәнбеҙ. Мин Аполлинарий Христофоровичты ла бик яҡшы беләм, һәр саҡ ҡатнашып йәшәнек. Бик яҡшы табип, тәжрибәле белем эйәһе. Бында килерҙән алда мин Хәлим больницаһында мөдир булып та алдым. Ысынлап та, һуңғы йылдары бер тирәлә уралғанбыҙ икән.

Шәмсинур нисек кенә яңы хужаһының биографияһында аҡ таптарҙы асыҡлау маҡсатында һорау бирергә уҡталмаһын, үҙ ғүмерендә байтаҡты кисергән Степан Петрович хәҙергә барыһын да асып һалманы. Белеме буйынса фельдшер ғына булыуына ҡарамаҫтан, көнсығышҡа сигенгән аҡтарҙың полк врачы булып хеҙмәт итеүен, Ҡыҙыл станицаһы өсөн барған ҡаты һуғыштарҙа Муса Мортазин бригадаһына әсир төшөүен йәшереп ҡалдырҙы.

Артабан әңгәмә эш мәсьәләләренә күсте. Степан Петрович ашыҡмай ғына бындағы хәлдәр тураһында һөйләй башланы.

– Беҙҙең биш кешелек стационарыбыҙ бар, ауырыуҙарҙы ҡабул итә торған амбулаториябыҙ ҙа уның менән бергә урынлашҡан. Врачтар ҙа, шәфҡәт туташтары ла етешмәй. Урындағы халыҡтан белгестәр бөтөнләй юҡ. Больницаның мөдире лә, хужалығын да алып барыусы – мин. Халыҡ мәҡәлендә әйтелгәнсә, «тегенсе лә, ураҡсы ла, һыбыҙғы уйнаусы ла» булып сығам. Саратов университетының медицина бүлегендә уҡып йөрөгәндә Беренсе донъя һуғышына алынғайным, шинелде егерменсе йылдарҙа ғына систем. Фельдшер ғына булыуыма ҡарамаҫтан, гел врач вазифаһын башҡарып килдем. Беҙҙә тағы бер теш врачы, һеҙҙән башҡа, ике шәфҡәт туташы эшләй. Беҙҙең өҫтә аптека барлығын да ҡушһаң, эш етерлек. Бына шулай беҙҙең хәлдәр, тора-бара үҙегеҙ ҙә күнегеп китерһегеҙ. Һөнәрегеҙ буйынса Һеҙ кем булаһығыҙ? – Степан Петрович Шәмсинурға һораулы ҡараш ташланы.

– Симбирскиҙа һуғыш мәлендә медицина училищеһы тамамлағайным. Тормошҡа сыҡҡас, Свердловскиҙа ҡыҫҡа курстарҙа уҡыным. Медпункта мөдирлек итеүем хаҡында әйттем шикелле.

– Яҡшы, яҡшы. Һеҙҙе нисегерәк файҙаланыу тураһында уйлап ултырам. Һеҙҙе стационарға ҡуйып булмаҫ, сөнки унда эш тәүлек әйләнәһендә. Ҡайһы саҡта биш койкалыҡ бүлмәлә ауырыуҙар ун кешегә етеп китә. Бынан тыш, күптәр көндөҙ килеп, укол ҡаҙатып йә дарыу алып йөрөй. Шунда эшләү Һеҙгә ҡулайлыраҡ булыр. Эш көнө унда алты сәғәтлек, ййығыҙға ҡарарһығыҙ. Тик Һеҙҙең алдағы көндәрҙә ҡасан эш башлауығыҙ миңә генә түгел, ауырыуҙарға ла мөһим.

– Мин риза. Миңә иртәнге туғыҙҙан эш башлау уңайлыраҡ булыр, – тине Шәмсинур.

– Ярай, бик яҡшы. Баҡыр-Үҙәк руднигында ғына түгел, был тирәлә иң ныҡ таралған сирҙәрҙән – үпкә ауырыуы, трахома, биҙгәк һанала. Һуңғыһы менән бигерәк бала-саға интегә. Бынан тыш, шахтаның яңы ғына эшләй башлауына ҡарамаҫтан, забойщиктар араһында силикоз ныҡ тарала. Эш шунда: яңы шахтаға төшкән ир-ат менән бер рәттән ер аҫтында эшләүселәр араһында элекке Рәмиев, Кабанов шахталарында эшләп, силикоз эләктереп йонсоған кешеләр байтаҡ. Ул – Һеҙҙең өсөн ишетелмәгән яңы сир: баҡыр колчеданының ауыр саңы кеше үпкәһенә тула ла бөтә тын юлдарын ҡаплай. Үпкә лә зарарлана.

Степан Петрович, артынан эйәртеп, яңы шәфҡәт туташына бөтә кабинеттарҙы күрһәтеп сыҡты. «Эш урынығыҙ бына ошо була»,– тип ыҡсым ғына бүлмәне күрһәтте. Уртала аҡ митҡал менән ҡапланған, ауырыуҙарҙы ятҡырып ҡарай торған урындыҡ, өҫтәлдә картотека, бүлмәнең бер тәҙрәһе ҡиблаға ҡараған.

– Әйткәндәй, коридорҙа Һеҙҙе беренсе пациентығыҙ көтөп ултыра. Сисенеп, халатығыҙҙы кейегеҙ ҙә яңы эшегеҙгә тотоноғоҙ. Ул ауырыу – рудниктың иң алдынғы забойщигы Харрасов Сөнәғәт. Уның диагнозы – грудная жаба. Уға камфара уколы тәғәйенләнгән. Инъекция әҙер, шприцтар ҡайнатылған, рәхим итегеҙ!

– Степан Петрович, нишләптер бөгөн бик тулҡынланам, күптән бер кемгә лә укол ҡаҙағаным юҡ, – тине Шәмсинур ҡалтыранған тауыш менән. Ысынлап та, бер нисә йыл ҡулына шприц тотмаған ҡатындың арҡа һөйәгенән тир бәреп сыҡты.

– Нисауа, нисауа, был тулҡынланыуығыҙ ваҡытлығыса ғына, тора-бара һәммәһе лә урынына ултырыр.

Степан Петрович, башын тығып, ауырыуҙы бүлмәгә саҡырҙы. Ҡулында шприц тотоп торған Шәмсинур, бит йыйырсыҡтарына тиклем күгелйем колчедан туҙаны ҡунған шахтерҙың күҙҙәренә тура ҡарарға ҡурҡҡан кешеләй, ҡарашын мөйөшкә текәп, Харрасовтың яҡын килгәнен көттө.

Күлдәктең еңен беләгенең төбөнә тиклем төргән забойщиктың туп кеүек йомро ҡулдарын күргәс, Шәмсинурҙың, һуңғы ваҡытта ҡаҡшаған нервыһы арҡаһында, бармаҡтары ҡалтыранып ҡуйҙы. Шуға күрә  Харрасовтың тимер һымаҡ ҡатҡан ҡулына тәүге ынтылыуҙа энәһен ҡаҙай ҙа алманы. Уны диҡҡәт менән күҙәтеп торған Воронин:

– Туташ, йәһәтерәк булығыҙ, тәүгә эшләмәйһегеҙ бит! – тип ҡысҡырҙы. Мөдирҙең ҡаты әмере Шәмсинурға ғына түгел, ҡулындағы энәгә лә көс биргәндәй булды. – Бына шулай, арыу сыҡты бит.

Уколды бигүк оҫта эшләмәгәнен тойомлап, Шәмсинур уңайһыҙланып ҡына шахтерҙан һораны:

– Ағай,  бик ауырттырманыммы?

– Юҡ, беҙ бындайға өйрәнгәнбеҙ инде, – тип яуапланы шахтер мәрәкәләгән һымағыраҡ.

Шулай итеп, Шәмсинур Игебаеваның Баҡыр-Үҙәк дауаханаһында тәүге эш көнө башланды. Тора-бара үҙен тыныс тота башланы,  хәрәкәттәре етеҙләнде, нервылары ла үҙ урынына ултырҙы. Ул беренсе тапҡыр рудник фаэтонында өйөнә ҡайтып төштө лә, тарала башлаған ғәйбәтте туҡтатырға теләгәндәй, ҡаҙна аты менән йөрөүҙән ҡырҡа баш тартты. Артабан Ялан ауылы менән Баҡыр-Үҙәк араһын ул, башҡа ауылдаштары кеүек, йәйәү тапай башланы.

«Бына юл ситенә терәлеп йомғаҡ түбә ята, тимәк, ауылдан  саҡрым ярым үттем. Ана, уң ҡулда һөҙәк кенә күтәрелгән Ҡаҙаҡ үлгән сағылы битләүендә ауылдаштары тарафынан ҡаҙылған балсыҡ соҡоро – юлдың уртаһына еттем. Алда Баҡырға етәрҙән алда юлды арҡыры киҫеп үткән һуңғы үҙәк күренде. Ә инде уның алдағы үренә менһәң, рудниктың иң ҡалҡыу урынында ҡыҙыл ҡалай менән ябылған, ҡыйығы ҡояшта ялтыраған минең дауахана күренеп тора»,– тип тирә-яҡты күҙәтеп йылдам атлап барған Шәмсинур яңынан-яңы нәмәләрҙе күрҙе. Бына әрәмәлектән көлтә кеүек елгә елберҙәп ултырған ҡылғанға тиклем теп-теүәл мең дә ике йөҙ илле аҙым икән, тимәк, ул ара һигеҙ йөҙ етмеш биш метрға тиң.

Шулай итеп, юлдағы ғына түгел, тирә-йүндәге үҫемлектәрҙе, хатта унда-бында күренгән эреле-ваҡлы таштарҙы, элек ат менән үтеп киткәндә абайламаған соҡор-түмәрҙәрҙе һанай-һанай, Шәмсинур көн һайын ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла юлдың йомғағын ураны. Атлағанда йырлап барыу шул тиклем күңелле, барып еткәнде лә һиҙмәйһең. Юлда уйланып барырға ла ярата Шәмсинур: «Шулай алты ай йәйәүләп үтһәм, был мин үҙемдең тыуған ерем Симбирскиға етеп, кире

урап ҡайтыу менән бәрәбәр. Ошо рәүешле һау-сәләмәт 12 йыл йәйәү йөрөһәм, Ер шарын урап үткән һымаҡ булам. Күҙ алдына ла килтерә алмаҫлыҡ ара! Кеше үҙ ғүмерендә нисә саҡрым араны үтә икән?...Йылайырҙа төрмәлә ултырған Абдрахманым янына барып, нисә тапҡыр кире әйләнеп ҡайтыр инем?..» Шәмсинур ошо һорауҙар менән күктәге әллә кемгә мөрәжәғәт иткән төҫлө тойолдо.

***

Абдрахмандың кинәт күҙҙән юғалыуы иң башта «Бергәләшеп ер эшкәртеү ширҡәте»нә тәьҫир итте. Йөйөнән һүрелә башлаған иҫке кейем шикелле, уның эшмәкәрлеге тарҡалыуға йүнәлде. Элекке кеүек намыҫлы хеҙмәтте, сәмләнеп эшләү, ойошҡанлыҡты илке-һалҡылыҡ алмаштырҙы. Яңы башлыҡ итеп тәғәйенләнгән Мөхәммәтнурҙы бер кем дә ысын хужа тип ҡабул итмәне. Ә инде Уйылдан кеүегерәк «ҡырҡ кеше – бер яры, яңғыҙ кеше – бер яры» законы менән йәшәргә өйрәнгән кешеләр уны туранан-тура инҡар итте. Ҡыҫҡаһы, эшмәкәрлеге йомғаҡтай тәгәрәп алға барған ширҡәт бер урында тапана башланы. Әйтерһең дә, ширҡәт арбаһына элекке юртаҡ бәхмис урынына сығынсы ат ектеләр.

Был хәлдең тиҫкәре яҡтары оҙаҡ көттөрмәне, бүҫерелеп килеп тә сыҡты. Иң башта Абдрахман барҙағы Баҡыр-Үҙәк менән үҙ-ара килешеп келәттән рудникка иген ебәреү тәртибе боҙолдо. Ширҡәт башлығы Игебаевтың ҡулында «Баҡыр-Үҙәк руднигы тәьминәт бүлеге тейешле игенде тулыһынса келәттә һаҡланған килеш алды» тигән рәсми документ булыуға ҡарамаҫтан, келәттә ике яҡтан да берәр кеше эшләп торҙо. Улар ҡасан, күпме иген ебәрелеүен көн һайын үҙ дәфтәрҙәренә теркәп барҙылар. Ҡалған иген иҫәбе һәр саҡ билдәле булды, ике кеше ҡулдарында ике асҡыс тотто. Абдрахманды алып китеүҙең икенсе көнөнә үк ширҡәт кешеһе эшкә сыҡманы һәм һуңынан бөтөнләйгә юғалды. Мөхәммәтнур келәттең асҡысын уның өйөнә барып, бисәһенән алып китте лә: «Беҙҙең кеҫәлә уларҙың документы бар. Унда икенсе кешенең эшләүе хәжәт түгел»,– тип асҡысты тәьминәт бүлеге вәкиленә тапшырҙы. Ә бынығы, игенгә берҙән-бер хужа булып алғас, уны ситкә елгәрергә тотондо. Арба юлы төшкәс, көндәрҙең бер көнөндә Ялан ширҡәте келәтен Белорет ГПУ-һынан килгән кешеләр мисәтләп китте. Күп тә үтмәй, тикшереү башланды. Быға етди сәбәп тә бар: Белорет баҙарында ошо ширҡәт келәтенән тейәлгән биш йөк иген менән килгән ике кешене тоттолар. Бына шунан башланды ла инде ығы-зығы. Тәүҙә «Ширҡәт башлығы Игебаев тәьминәт бүлегенә игенде тапшырып еткермәгән, үҙ-ара ниндәйҙер йәшерен һөйләшеү булған икән» тигән хәбәр таралды. Һуңынан тәьминәт бүлеге башлығының, Игебаевҡа ышанып, игенде үлсәмәйенсә өйөмөндә ҡабул итеүе асыҡланды. Ул кешене бер аҙ тәфтишкә йөрөттөләр ҙә аҙаҡ ултыртып та ҡуйҙылар. Ҡалған игенде яңынан үлсәп, ике йөҙ бот игендең етмәүе комиссия тарафынан раҫланды. Билдәле, был мәсьәләлә ширҡәтте ғәйепләргә тырышһалар ҙа, нигеҙлек, йәғни рәсми тел менән әйткәндә, енәйәт составын таба алманылар. Шулай ҙа Абдрахман Игебаевтың намыҫына барыбер ҡара тап яғылып ҡалды.

Абдрахмандың юҡлығы бында ғына һиҙелмәне. Һәр көн тигәндәй уның булмауы ширҡәттең бәкәленә һуға торҙо. Йыл да ошо мәлдә Абдрахман ширҡәт ҡатындарын ғына түгел, хатта Шәмсинурын да триер, веялкаларҙа сәсеү орлоғон таҙартырға сығара торғайны. Уның менән бер рәттән орлоҡто ярауайлаштырыу һәм ағыулау эшенә тотонорҙар ине. Ләкин быйыл ширҡәттең иң актив ағзаһы Әүхәҙи ошо мәсьәлә буйынса Мөхәммәтнурға һәм башҡаларға бер нисә тапҡыр һүҙ ҡуҙғатырға тырышып ҡараны, ләкин ҡашынған кеше булманы. Ә

ҡайһы берҙәре хатта «Беҙҙең ата-бабалар ғүмер-ғүмергә игенде ағыуламайынса, шул көйөнсә сәскән, беҙҙең башҡорт ғәләменә уның һис бер хәжәте юҡ» тип ҡәтғи баш тартты. Был мәсьәләлә лә Уйылдандың үҙ фекере булды. «Китегеҙ әле, шул Абдрахмандың юлын ҡыумағыҙ. Уның урыҫ арбаһына күптән ултырғанын белмәйһегеҙме ни? Беҙҙе шул казактарға суҡындыра алмай, башы баструкка оҙатылды», – тине ул, ауыҙын йырып.

Ширҡәттә һәр береһе үҙен хужа, тигеҙ ерҙә уба һанаған ағзалар Мөхәммәтнурҙы «боронғо ата-олаталар һуҡмағына» төшөргә күндерҙе. Ә инде үҙ ғүмерендә бер ҡасан да игенселек ғәмәле менән шөғөлләнмәгән Мөхәммәтнур: «Ярай, арала борон-борондан иген сәскән кешеләр ҙә бар, беләләрҙер әле. Эште еңеләйттеләр»,– тип кинәнде генә. Абдрахмандың көҙҙән һатып алып, мискәләргә тултырып ҡуйған формалины таш кеүек ҡатып, файҙаланмай ултырып ҡалды. Ҡалды ғына түгел, ширҡәткә бәлә килтерҙе. Ул кибеп ҡатҡан ағыуҙы, Мөхәммәтнур ҡушыуы буйынса, дөйөм ҡыйлыҡ өйөмөнә ауҙарҙылар. Көтөүҙән тороп ҡалған ике һарыҡ ул ағыуҙы ашап үлгәс, һарыҡтар эйәһенә ширҡәттең яңы хужаһы үҙ малын биреп, көс-хәл менән мәхкәмә* язаһынан саҡ ҡалды. Шунан Мөхәммәтнур ул формалинды Мөгәзәй һыртындағы Өлкән сағыл үңеренә соҡор ҡаҙытып, ер аҫтына күмеп ҡотолдо. Был ваҡиға иген ҡоротҡостарына ҡаршы сығарылған формалинға ҡарата ауыл халҡы араһында кире ҡараш тыуҙырҙы. Ширҡәт таралып, кешеләр һуңынан колхозға дөйөмләшкәс тә, был иген ағыуына оҙаҡ ҡына сиркәнеп ҡаранылар.

Ширҡәттә баш-баштаҡлыҡ китте. Һуңлап ҡына башланған сәсеүҙә ҡатнашырға тейешле тартыу көсө – аттарҙы айырып ашатыуҙа шул уҡ хужаһыҙлыҡ килеп сыҡты. Элек ул эште Абдрахман даими үҙе күҙәтеп бара торғайны. Ә быйыл һәр атҡа тейешле һоло, арпаны таратып бирҙеләр ҙә, башҡаса быны менән ҡыҙыҡһынған кеше булманы. Таратылған аҙыҡ ат ауыҙына теймәй, нигеҙҙә халыҡтың ҡышты йонсоп сыҡҡан малына тотонолдо. Кешенең үҙ малы һимерҙе, ләкин һабанға, сәскескә тәғәйен аттар ябығыуын дауам итте.

Ширҡәттең был хужаһыҙлығына беренсе булып Әүхәҙи ғауға күтәрҙе. Ләкин уның ғәҙел тауышына ҡолаҡ һалыусы булманы. Абдрахман барҙа кәңәшләшеп, бер табандан эшләгән берҙәм ғаилә сәсеү алдынан йөйөнән сатнай башланы. Башта Әүхәҙи, ә уның артынан ширҡәттең эшен төпкә егелеп тартҡан тағы ике кеше был товариществонан сығыу тураһында Мөхәммәтнур алдына ғариза һалды. Ә Әүхәҙи үткән йылғы яҙғы һабанда ике рәтле сәскестә Абдрахман тарафынан эшләргә өйрәнгән берҙән-бер кеше ине.

«Өмөтбай арығы» ширҡәтен алда тағы ла ауырыраҡ һынауҙар көткән икән.

Яҙғы сәсеүгә һанаулы ғына көндәр ҡалғас, Баҡыр-Үҙәк руднигы менән ширҡәт араһында ер дәғүәһе килеп сыҡты. Эш шунда: үткән йылғы яҙғы сәсеү мәлендә рудниктың төньяҡ-көнсығыш битләүендә йәйрәп ятҡан йөҙ дисәтинә ер майҙаны, артабан руда эҙләү һәм табыу эштәрен йәйелдереү маҡсатында, Башҡортостан Йөмһүриәте Халыҡ Комиссарҙары Советы ҡарары менән илле йылға рудник ҡарамағына бирелгән. Абдрахман Игебаев менән Башҡортостан тау тресы управляющийы Үлмәсовтың телдән генә килешеүе буйынса, ул ширҡәткә файҙаланыу өсөн тик бер нисә йылға ғына рөхсәт ителгән булып сыҡты. Шуға күрә Абдрахман, үҙе эшләгән саҡта бер ниндәй ҙә шөбһәнең тиҙ генә сыҡмаҫына ышанып, ул майҙанды икенсе йыл сәсеү маҡсатында туңға һөрҙөрөп, тырматтырып ҡуйған. Кем белә, әгәр Игебаев әле лә ширҡәт менән етәкселек итһә, ул «бер нисә йыл» һаман да дауам иткән булыр ине. Ләкин Абдрахман ҡулға алынғас, был мәсьәләгә рудник хужаларының мөнәсәбәте бөтөнләй кирегә үҙгәрҙе.

---

**Мәхкәмә — суд (ғәрәпсә).*

Атҡа атланып Баҡыр-Үҙәккә сапҡан Мөхәммәтнурҙы Фәйзи Фәттәхов кабинетына индермәй, байтаҡ ҡына ҡабул итеү бүлмәһендә тотто. Рәсми урындарҙа бер ниндәй ҙә һөйләшеү тәжрибәһе булмаған Мөхәммәтнурҙың шундуҡ сикәһе ҡорошто. Ул директор дәрәжәле кешеләргә рөхсәт һорап, сират көтөп инеү тәртибе бар икәнен үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр белде. Ингәс тә ишек тотҡаһына йәбешкән Мөхәммәтнурҙы иренен буяған, ҡарамаҡҡа сибәр генә мәрйә тиҙ үк урынына ултыртты. Әйткәндәй, бындай «ҡанлы ауыҙлы бисәне» лә ул тәүге мәртәбә күрә ине. Тик оҙаҡ ҡына көттөрөп, бер аҙ һыуындырып алғас, Мөхәммәтнур директор кабинетына инергә рөхсәт алды. Ҡамсыһын ҡулына тотоп бүлмәгә килеп ингән оҙонтороҡ, аҡ шаҙра битле кешене күргәс, мәрәкәләп һөйләшергә ятарҡан хужа татарсалап:

– Абзый, әллә ҡамчың белән мине ҡайызларға кердеңме? – тип йылмайҙы. Ҡолаҡҡа ҡатыраҡ Мәхәммәтнур директорҙың кинәйәле һүҙен йүнләп ишетмәүҙән ғәйре аңламай ҙа ҡалды.

– Нимә тинең, төшөнмәнем?

– Әллә бирегә мине ҡамчың белән суҡтырырға кердеңме, дим.

Мәхәммәтнур шунан һуң ғына ауыҙын киң итеп йырып, күҙҙәре йомолғанса йылмайҙы.

– Юҡ, юҡ, директор иптәш. Иген сәсер ваҡыт етте, беҙгә ер кәрәк, – тине иҙән уртаһында тапанып торған Мәхәммәтнур.

– Мин җир хуҗасы түгел бит. Мин җир белән сату да итмим. Мин баҡыр рудасы чыгарам, хөкүмәткә алтын табам. Ултырығыз, сөйләгез, сез кем буласыз?

Мөхәммәтнур директорға ҡырын торған ултырғысҡа ултырҙы. Ҡамсыһын бөкләп, уны алдындағы өҫтәлгә һалып ҡуйҙы. Уның аяғындағы сандалийына, беләгендәге «Даешь пятилетку!» тип яҙылған ҡыҙыл сепрәккә ҡарап, директор был ҡунаҡтың кем һәм ни өсөн килгәнен күптән һиҙенгәйне. Шулай ҙа был таныш булмаған кеше менән әңгәмәләшеү Фәттәховҡа мәҙәк тойолдо.

– Мин Ялан ширҡәтенең яңы рәйесе Мөхәммәтнур Өмөтҡужин булам. Беҙ бөгөн-иртән сәсеүгә сығырға торабыҙ. Ләкин беҙҙең баҫыуҙы ҡарарға ебәрелгән кешебеҙҙе һеҙҙекеләр ҡыуып ҡайтарған. Бынан һуң беҙ сәсә башлағас, ундай низағ булмаһын өсөн, иҫкәртергә килдем, – тине Мөхәммәтнур, мәсьәләне хәл ителгән хисаплап.

– Ул җир нинди хоҡуҡ белән сезнеке була, ди. Бу йөз дисәтинә җир сезнеке түгел, безнеке. Совнарком ҡарары белән ул илле җылға безгә беркетелгән.

– Был ниндәй хәбәр? Ул ерҙе ғүмер-ғүмергә беҙ эшкәрткән, хан заманынан ул Ялан ауылыныҡы һанала. Әгәр белергә теләһегеҙ, уның сиреге минең атайым – Фәйзулла хажиҙың ере, – Мөхәммәтнурҙың битенә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе...

– Шулай икән. Мин, әлбәттә, сезнең әткәгез хаҗи әфәндене хөрмәтлим, ләкин сезгә мәглүмдер: 17-се йылғы революция җиргә хосуси милекне бетерде. Хәзер бөтә җир дәүләтнекенә әйләнде, шул исәптән хаҗи әфәнденең җирләре дә. Бына шулай, рәис иптәш.

– Ә беҙ барыбер сәсәбеҙ!

– Бу дәғүгә тығыла күрмәң. Бу баш китмәле эш. Мына ул хәзер кемнеке! – Фәттәхов өҫтәленән Халыҡ Комиссарҙары Советының ташҡа баҫылған ҡарарын сығарып, Мөхәммәтнур алдына һалды. Өҫтә ике бүлкәткә урыҫса һәм ғәрәпсә яҙылған шыма ҡағыҙҙы ҡулына тотоп, иҫкесә арыу ғына белем алған ширҡәт башлығы: «Башҡортостан Автономиялы Совет Социалистик Йөмһүриәте. Халыҡ Комиссарҙары Советы» тигәнде уҡыны ла ҡарарҙың йөкмәткеһенә күҙ йүгертеп сыҡты. Ә үҙе эсенән генә: «Ысынлап та, был ҡағыҙ бик мөһим дөкәминт икән. Абдрахмандың ҡулға алыныуына өсөнсө айға китте бит, нишләп беҙ, һыу

мейеләр, ошоға тиклем был мәсьәләне хәл итмәгәнбеҙ. Был турала бынан ике ай элек анау Әүхәҙи тауыш та сығарып ҡарағайны...» – тип Мөхәммәтнур үҙен әрләп тә алды. Ләкин, рәтләп һөйләшеү урынына, буш моҙға ҡыпшырлатып, директорҙы ҡапаҡларға уйланы.

– Беҙ ул ерҙе үткән көҙ яҙғы сәсеүгә әҙерләп, туңға һөрөп, тырматып ҡалдырҙыҡ. Беҙ шуға ышанып, башҡа бер дисәтинә лә ерҙе яҙғы эштәргә әҙерләмәнек. Мин ҡайтҡас та ул баҫыуға кеше, сәскестәр сығарам һәм иртәгәнән башлап сәсеү эшенә тотонасаҡбыҙ, – тип Мәхәммәтнур һул усына ҡамсы менән шапылдата һуҡты ла ишекте шарт ябып сығып та китте.

Был эштең ауыл менән рудник араһындағы низағҡа әйләнерен Фәйзи Фәттәхов, билдәле, байтаҡтан бирле һиҙенеп йөрөй ине. Ләкин «Ер кемгә кәрәк, шул артынан йөрөһөн, килһәләр, һөйләшербеҙ. Әгәр, Абдрахман бар саҡтағы һымаҡ, киләһе йылда ла үҙ икмәктәрен рудникка тапшырыуҙы хәл итә алһаҡ, быйыл да унда иген сәсеүҙе рөхсәт итербеҙ, бәлки», – тип уйлағайны директор. Шулай ҙа көн элгәре эш күрергә күнеккән Фәйзи Фәттәхов был турала управляющийға әллә ҡасан үк иҫкәртеп ҡуйғайны. Ләкин ҡайһы саҡта ҡырҡыуыраҡ һуға торған Филипп Афанасьевич быны ишетергә лә теләмәне. «Ширҡәт кешеләренең ул ерҙә аяҡ эҙҙәре лә булмаһын. Быйыл ул урында разведка майҙаны асабыҙ»,– тип яуап бирҙе. Ә Фәйзи Фәттәхов был хәл буйынса үҙ фекерен белдерҙе: «Әлбиттә, ширҡәт башлығы Абдрахман Игебаев булһа, Филипп Афанасьевич ул тиклем разведка эшен тиҙләтмәҫ ине. Уға тотонорға яҡын бер-ике йыл эсендә трестың да, беҙҙең дә бер ниндәй мөмкинселек юҡ. Әле уның өсөн кәрәкле техника, ҡоролмаларға заявка ла бирелмәгән, электроэнергия мәсьәләһе лә асыҡланмаған».

Ҡамсылы Мөхәммәтнур кабинеттан сығып киткәс тә, рудник директоры өс адресҡа: Башҡортостан тау тресына, партияның волком һәм кантон комитеттарына телеграмма һуҡты. Партия ойошмаһы секретарын, профсоюз етәксеһен, баш инженерҙы һәм башҡаларҙы кәңәшмәгә саҡырып, ер мәсьәләһендә ҡупҡан дәғүәнең асылы менән таныштырҙы. Ләкин төплө бер фекергә килә алманылар. Баш инженер:

– Иртәгә иртә менән ул майҙанға тау-ҡотҡарыу взводын сығарырға кәрәк, – тип ҡаты ғына әйтә һалды.

– Бәлки, ҡулдарына ҡорал да бирергәлер? – тине кемдер.

– Юҡ, ул ерҙе ауыл менән ҡала араһындағы һуғыш майҙанына әйләндерһәк, барыбыҙ ҙа тарихҡа кереп ҡалырбыҙ, – тине директор, йөҙөнә етдилек һыҙаттары һирпеп.

Ә партойошма етәксеһе:

– Директор иптәш, ширҡәт етәкселәре менән һөйләшеү өсөн абруйлы кешеләрҙән торған делегация ебәрәйек. Мәҫәлән, унда беҙҙең алдынғы шахтер, хеҙмәт ударнигы, әйткәндәй, үҙе шул яҡ кешеһе Харрасов Сөнәғәт бара алыр ине. Бик тә ярайһы, ипле кеше. Байрам тантаналарында сығыш яһағаны ла бар, уны беләләр. Ярҙамға Ялан ауылынан беҙҙә эшләгән шахтерҙарҙы ҡушырға була. Әйҙә, һөйләшһендәр ауылдаштары менән, – тип кәңәш итте.

Һуңғы тәҡдим менән директор ҙа риза булды. Икенсе көнө, төш ауғас, Яланға Сөнәғәт Харрасов етәкселегендә рудник вәкилдәре килеп төштө. Ауыл кешеләре, Баҡыр-Үҙәктә эшләп йөрөгән таныштарын күргәс: «Анауы Шәкирйән менән Ғүмәр, теге «ҡарағалпаҡтар»ҙың иң кесеһен әйтәм, түштәренә ҡыҙыл сепрәк тағып, әллә кем булып кәнсә яғына үтеп киттеләр...Ни йомош менән йөрөйҙәр икән?» – тиеште.

Был кешеләрҙең ни йомош менән килгәндәрен ауыл халҡы тик ваҡыт үткәс

кенә ишетте. Шулай ҙа рудник вәкилдәре һуңланы. Баҡыр-Үҙәктән ярһып ҡайтып төшкән Мөхәммәтнур кисә үк комсомолдар һәм активистарҙы йыйып, фекер төпләне лә шундуҡ волость комитетына сапты. Мөхәммәтнурға ауыл йәштәренең кәңәше бер генә, ләкин ҡәтғи булды: «Нисек тә ауыл ерҙәрен Баҡыр-Үҙәк рудниғына бирмәҫкә! Был ер борон-борондан атай-олатайҙарға инсеп, Грамота менән тапшырылған. Һәм бында бер кемдең дә ҡыҫылышы булырға тейеш түгел!» Ә инде һәр саҡ кешеләрҙе ҡотортоп, низағ сығарырға әҙер Уйылдан: «Ниңә ул ҡырым-ҡытайҙан килгән килмешәктәрҙән үҙ еребеҙҙе һорап торорға, сығабыҙ ҙа сәсә башлайбыҙ. Әгәр инде ҡаршы торһалар, аталарын танытып ҡайтарабыҙ!» – тип һөрәнләне.

Ялан ауылының ҡыҙыу башлы кешеләре ысынлап та Октябрь инҡилабынан һуң барлыҡ ерҙең дәүләт милегенә әйләнеүен ҡолағына ла элмәне һәм был мәсьәләне элеккесә хәл итергә ныҡышты.

Вәкилдәр менән һөйләшеү өсөн Ғәлиәкбәр Аласов ҡарттан башҡа кеше ҡалмағайны, ләкин уның да ауылдаштары хәл ҡылған ҡарарҙан айырым фекере булманы.

– Ер беҙҙеке. Быйыл да, киләсәктә лә уны сәсәбеҙ һәм сәсәсәкбеҙ. Һин, Сөнәғәт ҡустым, кеше арбаһына ултырып, буш артынан йөрөйһөң. Һинең шахтала ударник икәнеңде беләбеҙ, уныһы өсөн һин, билдәле, маҡтауға лайыҡ. Ер мәсьәләһен күтәреп, һин ауылдаштарыңа ҡаршы сығып йөрөмә, – тине Ғәлиәкбәр ҡарт.

Баҡыр-Үҙәк кешеләре Шәкирйәндәрҙең иркен ихатаһында бесәй үләне өҫтөндә ултырып сәй эстеләр ҙә ҡайтып киттеләр.

– Ҡуйығыҙ әле, егеттәр. Был бер ҙә оҡшамаған эшкә ҡыҫылып, ауылдаштар менән сәкәләшмәйек. Әйҙә, түрәләр үҙҙәре башлаған, үҙҙәре хәл итһен, ҡатнашмайыҡ был эшкә, – тиеште бәғзеләре.

Ул арала булмай, ҡулына партияның волость комитетынан фарман тотоп, ҡояштай ялтырап Мөхәммәтнур ҡайтып төштө.

– Тапҡандар кәсеп! Ай-һай, уларға ер кәрәк булған икән. Бирермен мин уны һеҙгә! – Ул ҡулындағы ҡамсыһын йомарлап тотоп, Баҡыр-Үҙәк ятҡан тарафҡа янап ҡуйҙы. – Бына волкомдан ул ерҙе бөгөн дә, киләсәктә лә файҙаланыу өсөн ташҡа баҫылған ҡағыҙ алып килдем, – Мөхәммәтнур түш кеҫәһенән фарман сығарып, атынан төшөр-төшмәҫтән, уны елгә елберҙәтеп күрһәтеп алды.

Ләкин уның Нәмәс төбәгенән алып ҡайтҡан ҡағыҙын Баҡыр-Үҙәктә иғтибарға алыусы ла кеше булманы. Мөхәммәтнурға биреп ҡайтарған бойороҡто раҫлап, волость комитеты Баҡыр-Үҙәк директорының телеграммаһына ҡаршы яуап та бирҙе. Шулай ҙа Фәттәхов волком фарманын да, уның телеграммаһын да һанға һуҡманы һәм һаман үҙ фекерендә ҡалды. Күп тә үтмәй, Башҡортостан тау тресы управляющийы Үлмәсовтан да телеграмма алдылар. Ләкин бөтөнләй икенсе төрлө: «Ерҙе сәсеү өсөн биреү тураһындағы һөйләшеүҙе туҡтатырға бойорам!» тиелгәйне унда.

Байтаҡ ғүмерен дәүләт эшендә үткәреп, ҡаты тәртипкә, бойороҡтарҙы камил үтәргә күнеккән Фәйзи Фәттәхов, кабинетында үҙ ярандарының да ултырыуына ҡарамаҫтан:

– Мына бу чын документ. Бу һәр кәлимә сүзе волком телеграммасын эшереп сала ул! – тип фәстереп тә ебәрҙе.

Ә кантон етәкселәренән бер ниндәй ҙә яуап булманы, сөнки был мәсьәлә буйынса Халыҡ Комиссарҙары Советы ҡарарының күптән ғәмәлгә инеүен улар яҡшы белә ине.

Ләкин һәр саҡ ҡатмарлы булған ер мәсьәләһенең бик ябай ғына хәл ителә

торған юлдарына төрлө ойошмаларҙың төрлө кәртәләре ҡуйылып бөткәйне. Ошо дәғүә башланғас та, рудниктың йылғыр директоры һөрөлгән ерҙең уртаһына разведка ҡоролмалары ташый башланы, быраулау станоктары килтертеп, уларға махсус биналар төҙөргә ҡушты. Әллә ҡайҙан генератор табып, эште төндә дауам итеү өсөн электр тоҡандырып ебәрҙе. Ҡиммәтле төҙөлөш материалдарын һаҡлау һылтауы менән был урынға тәүлек буйына ҡоралллы һаҡсылар ҙа ҡуйҙы. Быны күреп, Яландың ширҡәт кешеләре Уйылдан етәкселегендә аттарына атланып килеп тә ҡарағайны. Ләкин улар үҙ ерҙәренә яҡын килергә ҡурҡып, ситтән генә ҡарап торҙолар ҙа кире боролдолар, сөнки унда ла, бында ла яурындарына мылтыҡ аҫҡан һаҡсыларҙы күреп шөрләнеләр. Волость етәкселеге менән трест һәм рудник араһындағы дәғүә дауам итте, ләкин яҙғы көн был талаш-тартыштың бөтөүен көтөп торманы, бер-бер артлы үтә торҙо. Инде сәсеү мөҙҙәтенең дә уртаһы үтте, ә ширҡәт эше бер аҙым да алға ҡыбырламаны. Сәсеү өсөн һәр кемдең биләмәһе көҙҙән үк әҙерләнеп тә бөткәйне, тик бер кем дә үҙенең әҙер ерен ширҡәткә бирергә ынтылып торманы.

Май урталарында ғына волость ер бүлегенән землемер, агрономдар килеп, Әмин тауында ҡасандыр элекке Тамъян-Ҡатай орлоҡсолоҡ совхозы һөрөп, иген сәскән, ә хәҙер инде күкһел-йәшел ҡуйы ҡарағура баҫҡан йөҙ дисәтинә буш ерҙе ҡырҡып китте. Әммә ҡалдау ерҙе күтәреп, яҡшылап иген сәсергә ширҡәт кешеләренең ҡулынан килмәне, сөнки улар бик күпкә һуңланы. Өҫтән-мөҫтән булһа ла һөрөп, әйләндерелгән ҡаты ерҙе ҡат-ҡат тырматып, июндең уртаһына тиклем һуҙып, илле дисәтинәләп бойҙай сәсергә генә өлгөрҙөләр. Ай аҙағында һалҡынса көндәр, туҡтауһыҙ ямғырҙар китте. Ә был инде ашлыҡ күтәрелеүгә түгел, ә гөрләп ҡый үләне үҫеүгә булышлыҡ итте. Ширҡәт үҙ ерендә гәрәбәләй орлоҡ сәсеп, билсән, алабута, уларҙан бейегерәк тә, ҡуйыраҡ та ҡарағура үҫтерҙе.

Июль баштарында ғына «Өмөтбай арығы» ширҡәтенең ғаризаһын ҡарап, Нәмәс волосы мәхкәмәһе «Товарищество үткән көҙ йөҙ дисәтинә ер һөрөп түккән сығымдарҙы ҡайтарыуҙы Баҡыр-Үҙәк рудниғы идараһына йөкмәтергә» тигән ҡарар сығарҙы. Унан һуң да әллә нисә комиссия эшләп, ул сығымдарҙың аҡсалата миҡдарын сығара алмай, ике яҡты ла байтаҡ ыҙаландырҙы. Ошо уңайлы мәл менән файҙаланып, нигеҙҙә һәр саҡ кеше малына ҡыҙыҡҡан комсомол активистарынан торған ширҡәт ағзалары хөкүмәттән алған кредитты рудник иҫәбенә ҡайтарыу өсөн бик тырышып ҡарағайны, ләкин унда ла дәүләт аҡсаһын һанай белә торған кешеләр бар булып сыҡты. Дәүләт аҡсаһын дәүләттән умырып алырға теләүсе комсомолдарҙың тырышлығы елгә осто. Рудник белгестәре, Ялан кешеләре шикелле, аҡса таптырғанда бармаҡтарын күккә төртөп иҫәпләмәне, аттарының эш сәғәте дауамында күпме норма башҡарыуын берәмтекләп һанап сығарҙы. Рудник ширҡәткә йәмғеһе бер мең илле һум аҡса түләне лә был мәшәҡәтле эшкә нөктә ҡуйҙы.

Бер нисә көн үтеүгә, рудник директоры ҡушыуы буйынса, майҙандан бөтә техника, ҡорамалдар кире Баҡыр-Үҙәккә ташытылды. Төҙөй башлаған биналарын да һүтеп, рудникка алып киттеләр. Уның ҡарауы, был ергә инде Ялан ауылының бер кешеһе лә аяҡ баҫа алманы. Етмәһә, ҡоролмалар арҡаһында тапалған ерҙе тырматып, рудниктың ярҙамсы хужалығы, һуңыраҡ булһа ла, үҙ малына ашатыу өсөн һоло сәсеп ебәрҙе. Баҡыр-Үҙәк директорының был майҙанда «төҙөлөш йәйелдереп ебәреүе» бер ҡатлы Ялан кешеләренең күҙен буяу өсөн генә эшләнгән икән.

Шулай итеп, дәүләт менән Ялан крәҫтиәндәренең ер өсөн тартҡылашыуы, ҡағиҙә булараҡ, хөкүмәт файҙаһына тамамланды. Был тамашаны ситтән күҙәтеп йөрөгән Ҡәҫтәрән Хәйруллин: «Хөкүмәт менән яғалашҡанда, еңермен тимә!

Романовтар батшалығы ғына түгел, Совет власы ла халыҡты талау, иҙеү өсөн генә яралған власть ул! Ана, мыҡты Мөхәммәтнур ҙа «миллион тәңкә ҡайырып алам» тип хөкүмәт менән яғалашырға маташҡайны, тапалып ятып ҡалды. Ә бына хөкүмәткә бурысың булһа, ул боғаҙыңды һығып ала беләә. Биргәндә хәҙерге власть бармаҡ араһынан һығып сығара, ә алғанда – ун бармағын умырып ала. Донъя яралғаны бирле хөкүмәтте бер кем дә ота алғаны юҡ!» – тип, бер ҙә тартынып тормай, ауыл араһында һөйләнеп йөрөнө.

«Өмөтбай арығы» ширҡәтенең түбәнгә тәгәрәй башлауы күпте күргән Ҡәҫтәрәндең күңелендә шатлыҡ тыуҙырманы, ә бит көҙгө икмәк тапшырыу мәлендә ул был ширҡәттең ярҙамына бик ныҡ өмөтләнгәйне. «Ширҡәт ни тиклем хөкүмәткә игенде күберәк тапшырһа, ҡалған Ялан крәҫтиәндәренә икмәк тапшырыу шул тиклем еңелгә киләсәк». Хәҙер иһә ширҡәтең ошо фурмылы бөлгөнлөк хәленә төшәп ҡалһа, ауыл шураһына тура килгән икмәк заданиеһын хөкүмәт ҡалған яңғыҙаҡ крәҫтиәндәрҙән, шул иҫәптән Хәйруллиндан да, һығып аласаҡ. Хәҙерге хөкүмәткә, Яйыҡ казагы Карягин әйтмәксе, «бирбар», йәғни кемдән алһа ла – барыбер.

Егерме һигеҙенсе йылдың ямғырлы көҙө ширҡәт эшмәкәрлегенә ясин уҡыны, сөнки ул эш һөҙөмтәһе буйынса банкрот булып ҡалды. Уның бөтә мөлкәте һатыуға сығарылды. Абдрахмандың тырышып һалдырған иген келәтен, ябыҡ ырҙыны менән уның аҫтында торған иген һуҡҡыс машинаһын Баҡыр-Үҙәк руднигының яңы ойошторолған ярҙамсы хужалығы һатып алды. Ә инде Хәлим потребителдәр йәмғиәте менән тартҡылашып алған ауыл хужалығы ҡорамалдарын төрлө яҡтан килгән билдәһеҙ кешеләр ташып бөттө. Барлыҡ икмәк запасын һәм йыйып алған уңышты дәүләт үҙ файҙаһына конфискациялап, икенсе, ышаныслыраҡ келәттәренә күсертеп һалды. Айырым кешеләр ҡулында торған ат, арба, ҡамыт-сбруйҙы ла онотманы банк вәкилдәре. Кемдең күпме бурысы барын хисаплап сығарҙы ла түләнеп бөтмәгән аҡсаны банкка ҡайтарыу мөҙҙәтен билдәләне. «Әгәр ҙә күрһәтелгән ваҡытҡа аҡсалата бурыс керетелмәһә, айырым кеше ҡулындағы мөлкәт тә һатыуға сығарыласаҡ»,– тип алдан киҫәтеп ҡуйҙылар.

Хөкүмәттең яңы иҡтисади сәйәсәтенә ярашлы, Абдрахман Игебаев тырышлығы менән тыуған «Өмөтбай арығы»ның бергәләшеп ер эшкәртеү ширҡәте шул уҡ хөкүмәт «ярҙамында» мәңгелеккә донъя ҡуйҙы.

***

Ҡулға алынған Абдрахман Игебаевтан ай ярым тигәндәй берниндәй ҙә хәбәр-хәтер булманы. Шәмсинурҙың төндәр буйы серем итә алмай, һары ҡайғынан быуылып-быуылып илауын Сәрбиямал әбейҙән башҡа бер кем дә ишетмәне. Абдрахман ГПУ ҡулына эләккәндән һуң, Оло Ҡыҙыл буйына теҙелгән күп ауылдар аҙна тирәһе бер ғауым шаулап алдылар ҙа, ул тауыш һүнә, йәйелгән түңәрәк тарая-тарая юғала барып, кире Ялан ауылына әйләнеп ҡайтты. Был ваҡиғаны иҫкә алыусылар һаны кәмей барып, уның менән ҡыҙыҡһыныусылар, быны хәтерләүселәр юҡ хисабында ғына тороп ҡалды. Был бөтмәҫ ауыр ҡайғыны ауылдаштары Шәмсинур менән Сәрбиямал күңеленә тапшырҙы, уларҙың иңенә һалды. Тик әле тормошҡа бала күҙе менән ҡараған Вахит өсөн генә «уның атаһы һаман Баймаҡ яҡтарында оҙайлы командировкала йөрөп ята һәм өйгә бер тоҡ күстәнәс күтәреп ҡайтып төшөргә тейеш» ине. Бала атаһын түҙемһеҙлек менән көттө. Сыҙамлығы бөткәс, ҡапҡа тышына сығып, ауыл осонан алыҫҡа һуҙылған юлға оҙаҡ ҡына ҡарай башланы. Бәғзе мәл Вахит:

– Әсәй, атайым Баймаҡҡа йәйәү киттеме ни? Нишләп беҙҙең атыбыҙ һаман да

һарайҙа тора? – тип әсәһенә бәйләнде. Бындай саҡтарҙа тамағына төйөн тығылған Шәмсинур, башын ситкә бороп, күҙҙәренә эркелгән йәштәрен баланан йәшерергә мәжбүр була.

– Балам, атайыңды Баймаҡтан килгән Үлмәсов тигән ағайҙың автомобиленә ултыртып алып киттеләр.

– Ә һуң ул ҡасан ҡайта? Минең һағынғанды белмәйме ни? Һине арыҡҡа бесән сабырға алып барам, бәләкәй салғы ла эшләйем, тигәйне, – тип тынғы бирмәне. Эскерһеҙ баланың шундай һорауҙары әсәһенең йөрәгенә ҡыҙҙырылған энә булып ҡаҙалды. Ул йыш ҡына һорау биреп, әсәһенең һағыш тулған зәңгәр күҙҙәренә текләп торор булып китте. Бындай саҡта әсә һағышы уның күңеленә лә күскән кеүек тойолдо. Ләкин бындай хәл мәңге дауам итмәйәсәген дә Шәмсинур яҡшы аңлай ине.

Май айының бер ҡояшлы көнөндә, ваҡыт кискегә һарыҡҡас, осраҡлы ғына килеп сыҡты был ваҡиға. Мөхәмәтйәр ҡарттарҙың өй артында йыйылып, ике төркөмгә бүленеп, малайҙарҙың «ули»* һуғып йөрөгән сағы ине. Ул көндө ауыл һайын ҡыҙырып йөрөгән баба** Яланға килеп сыҡҡан икән. Быны ни икәнен аңлаған малайҙар, был хәбәрҙе ишеткәс тә, төрлөһө төрлө яҡҡа ҡасып бөттө. Иҫләрәктәре хатта Өлкән сағылға табан йүгерҙе. Ә бәләкәйерәк, аңһыҙ малайҙарҙы аталары ҡулдарынан тотоп, өйҙәренә тартҡыланы. Ә ҡарышҡандарына: «Әйҙә, балам, ауылға уйынсыҡтар тейәп күсмәнде*** килгән, һиңә «ҡуянат» бирә, ти. Ул һине көтөп соланда тора. Егелгән арбаға ултыраһың да – ана, туптура айға осаһың», – тип әкиәт һөйләп, ҡайтырға күндерәләр. Вахит артынан бер кем дә килмәне. Атаһы етәләп алып ҡайтып барған һуңғы малай артына боролдо ла: «Вахит, һинең атайың юҡ. Ул төрмәлә ултыра», – тип үсәгәндәй китеп барҙы.

Яңғыҙ ҡалып, былай ҙа үҙ хәленән кәмһенеп торған Вахит йүгереп ҡайтып инде лә Хәфиәгә бутҡа ашатып ултырған Сәрбиямалға йәбеште: «Өләсәй, төрмә нимә ул?» Әгәр әсәһе өйҙә булһа, бәлки, ейән менән өләсәһе араһында кинәт килеп сыҡҡан был сетерекле һорауға үҙе ҡыҫылыр ине. Ләкин бер ҡатлы Сәрбиямал уға тәфсирләп яуабын биреп тә өлгөрҙө.

– Төрмә ул, балам, элекке замандан кешене ябып ҡуя торған насар нәмә. Ана, атайың мөгәзәй эргәһендә эшләтте бит әле, бына шуның һымаҡ таш келәт. Шунда ат урлаған, кеше туҡмаған йәки талаған яуыз әҙәмдәрҙе ҡул-аяҡтарына тимер бығау һалалар ҙа ябып ҡуялар. Төрмәнең тышында, улар ҡасып китмәһен өсөн, мылтыҡ аҫҡан ҡараулысы тора.

Ейәненең был һорауҙы нишләп биргәнен аңғармайыраҡ ҡалған ҡарсыҡ төрмә тураһында тағы ла ентекләп, сурытыбыраҡ һөйләргә ыҡталғайны, уны Вахит итәгенән тартып туҡтатты.

– Минең атайым ат урлағанмы, әллә кеше туҡмағанмы? Уны нишләп төрмәгә бикләнеләр? – тине лә атаһынан инде нисәнсе ай күстәнәс көтөп ятҡан Вахит ҡысҡырып илап ебәрҙе. Ҡурҡыуҙанмы, Сәрбиямал ҡулындағы сабый ҙа ҡапыл ҡысҡырып иларға тотондо. Үҙ ғәйебен яңы ғына аңлаған ҡарсыҡ: «Эй, иҫәр баш, нишләп кенә әйттем был һүҙемде!?» – тип үҙе лә илай башланы.

– Уй, балаҡайғынам, ҡайҙан ишеттең һин был насар һүҙҙе? Ниндәй ҡара йән еткерҙе был хәбәрҙе?

– Малайҙар әйтте, – тине Вахит, илауҙан туҡтап.

*Ули — мәғәнәһе таяҡ менән юғарыға һуғылған ағас киҫәген икенсе яҡтың ояһына һалыуҙа булған балалар уйыны. Рустарҙың лапта уйынына оҡшаш.

**Баба — балаларҙы сөннәткә ултыртыусы кеше.

***Күсмәнде — арҡаһына һандыҡ аҫып, ауылдан ауылға йөрөп ваҡ-төйәк һатыусы.

– Вәт, йөҙө ҡаралар, шуны балаға еткерергә... Әйтерһең дә, ул бер ҡыуаныс хәбәр, – тип ыуаланды Сәрбиямал.

Хәҙер инде Вахит:

– Атайымды бикләгән ул яман келәт ҡайҙа? Әйҙә, өләсәй, өсәүләп барып, ҡарауылсыны беҙҙең Кетмерҙән талатайыҡ та атайымды алып ҡайтайыҡ, – тип өләсәһенә йәбеште. Аптырауҙың сигенә сыҡҡан ҡарсыҡ:

– Уй, балам, нишләп кенә башланың был һүҙеңде? Ҡайһы ҡороғор теле ҡысып һөйләне һиңә был яман һүҙҙе? – тип илаулауын белде.

Нәҡ бөтә өй зыулап ятҡан саҡта Баҡыр-Үҙәктән Шәмсинур ҡайтып инде. Әйткәндәй, уның байтаҡтан бирле йәйәү йөрөй башлағанын рудник директорына күптән еткергәйнеләр инде. Ошо көндәрҙә рудникка килеп сыҡҡан мәлдә Башҡортостан тау тресы управляющийы Филипп Афанасьевич Үлмәсов, үҙенең хәл итә торған эштәре тамамланғас, Маргарита Игебаеваның тормошо менән ҡыҙыҡһынды.

– Теге ҡулға алынған Абдрахман Игебаевтың ғаиләһе ни рәүешле йәшәй, беҙгә бер ниндәй йомош менән мөрәжәғәт иткәне булманымы? – тип һорағайны.

Фәттәхов, ваҡыт табып, Воронин кабинетына үҙе килергә мәжбүр булды. Шәмсинурҙы баш врачҡа саҡырҙылар. Башына аҡ ҡалпаҡ, өҫтөнә бөтә килешле кәүҙәһен һылап торған халат кейгән шәфҡәт туташын күргәс, матур ҡатын-ҡыҙҙы урап үтергә күнекмәгән директорҙың йәшел күҙҙәрендә иблис шәүләһе ялтлап китте. Фәйзи Фәттәхов, урынынан тороп, Шәмсинурҙың йомшаҡ ҡул һыртын үбеп алды.

– Был кейемегеҙҙә сез, Маргарита Ивановна, ожмах чибәрләренә ошайсыз. Биллаһи, сезгә безнең рудник һауасы килешкән, ахыры, йәшәреп, пешкән алмаға ошап киткәнсез.

Быньдай балдай һүҙҙәрҙе үҙ ғүмерендә бер кемдән дә ишетмәгән Шәмсинур ҡолаҡ остарына тиклем ҡыҙарҙы, оҙон керпектәрен аҫҡа һирпте лә, бер һүҙ өндәшмәй, стена ҡырындағы ултырғысҡа барып ултырҙы. Директорҙың үҙен маҡтауына битарафлыҡ күрһәтеүе Фәттәховты бер аҙ уңайһыҙ хәлдә ҡалдырҙы. Ул ҡатындар менән һәр саҡтағыса шаяртып һөйләшеү ғәҙәтен шундуҡ һыпырып ташланы ла етди төҫ алды.

– Мин, Маргарита Ивановна, сезне бер ничек тә аңламыйм. Нишләп минем ярдәмдән, йәғни рудник аты белән эшкә йөрүдән баш тарттығыз? Кеме ошамады: атымы, кучереме? Әллә кучер берәй тупаслыҡ күрсәттеме?

– Юҡ, юҡ, директор иптәш, былай миңә уңайлыраҡ. Йәйге тәбиғәткә һоҡланып, үҙ яйым менән ҡайтам. Беҙгә йәйәү йөрөү бик файҙалы, юғиһә өйҙә саҡта тышҡа сығып та булмай, – тине Шәмсинур әҙәпле генә.

– Чынлап та башҡа чәбәпләр юҡмы? Сезнең рудник аты белән эшкә йөрүегез кемгәдер ошамайдыр, бәлки?

– Уныһы ла бар. Ләкин ул төп сәбәп түгел.

– Маргарита Ивановна, сезгә дөресен әйтәм, мине Баймаҡта күргән сайын, безнең управляющий Филипп Афанасьевич һәр ваҡыт сораша. «Һин, Фәттәхов, шул ғаиләне күҙ уңыңдан төшөрмә. Хужаһы ҡулға алынһа ла, улар бер ниндәй матди һәм әхлаҡи ҡыйынлыҡ кисермәһен. Уларҙың хәлдәрен үҙең даими тикшереп тор», – дип кисәтеп кенә тора.

Ошо урында ул, күҙҙәрен уйнатып, «Маргарита Ивановна, мин Һеҙҙе управляющийҙән көнләшә башланым» тип ысҡындырырға ла уйлағайны, ләкин ҡолағын ҡарпайтып, хәбәрен тыңлап ултырғанВорониндан тартынды. Ә уныһы инде, директорға ярарға тырышыпмы:

– Сударыня, хужалар һеҙҙең турала шундай иғтибар, хәстәрлек күрһәткәндә,

һеҙҙең тиҫкәрелек бер ҙә оҡшап етмәй. Ололарҙың һүҙен тыңларға, иғтибарын ихтирам итергә кәрәк, – тип һүҙгә ҡыҫылды.

– Әгәр минең сезгә ҡарата илтифатсыҙлыҡны белеп ҡалса, биллаһи, Филипп Афанасьевич миңә иртәгә үк шелтә иғлан итәчәк. Сез быны теләмәйсездер бит? – тип директорҙың шаян күҙҙәре тағы ла майланып алды.

– Ярай, улай булғас, бөгөн һуңғы тапҡыр йәйәүләп ҡайтам да, иртәгә ат ебәрерһегеҙ, мин бик рәхмәтле булырмын, – тип яуапланы Шәмсинур.

Уның ыңғай һүҙен ишеткәс, Фәттәхов тиҙ генә хушлашты ла сығып та китте. Уның ҡыңғыраулы аттарының тауышы алыҫлашҡас, Колчак армияһында ғәскәри субординацияның нескәлектәрен ныҡ үҙләштергән элекке хәрби врач Воронин был һөйләшеүҙән үҙ һығымтаһын яһаны. Бәйләнештәре юғарыға, әллә ҡайҙарға олғашҡан быңдай серле ҡатын менән киләсәктә үҙ мөнәсәбәтенең тәрәнлеген, сиктәрен самаланы.

– Ундай иғтибар күрһәтәләр икән, файҙаланып ҡалырға кәрәк, хужаларҙың яҡты сырайы һәр кемгә эләкмәй ул, – тине баш врач.

Шәмсинур өйгә ҡайтып инеүгә, әбей менән малайы бер-береһенә асыуланышып, икеһе ике мөйөшкә ҡарап ултыра ине. Килен кеше бының сәбәптәрен асыҡларға кереште. Ләкин ошоға тиклем өйҙәге оло кешеләрҙең алдашып, дөрөҫөн әйтмәй йөрөгәндәре өсөн асыуланған Вахит бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Хәлде Сәрбиямал асыҡлап һөйләп бирҙе.

– ...Бына шулайтып ауыл малайҙары беҙҙең Вахитҡа, һөйөнсө һораған шикелле, әйтеп ҡайтарғандар, хәсистәр, – тип ҡарсыҡ ирендәрен ослайтып, ауыҙын йомдо. Сәрбиямал да, уртын тумпайтып, мөйөшкә текләп ултырған Вахит та хужабикәнең был дәғүәгә асыҡлыҡ индерәеүен көттө. Ләкин был «яңылыҡ»тан күңеле тулған Шәмсинур, ғәҙәтенсә, күҙенә эркелгән күҙ йәшен башын бороп һелкте лә өй эшенә тотоноп китте. Бер ни ҙә өндәшмәне.

Ошо көндән башлап сит кешеләр генә түгел, һиңә яҡын ололар ҙа үҙ балалары алдында алдаша икән, тигән фекер Вахиттың бәләкәй генә йөрәгенә мәңге уңалмаҫлыҡ яра һалды, ғүмергә юйылмаҫлыҡ тут булып ятты. Бойондороҡһоҙ, ғорур тәбиғәтле малайға холҡоноң бер киҫәге кителеп ҡалғандай тойолдо, ғүмер буйы һәр бер әҙәм үҙ башынан кисерергә тейешле бихисап ҡайғыларҙың тәүгеһе Вахит мейеһенә тәүге бураҙнаһын һалды.

Аталары һүҙҙәренә ышанып, сөннәткә ултыртыусы бабаның бысағы аҫтына «Ҡуянат алабыҙ» тип ятҡан ауыл малайҙары ла, тубалдай булып бот араларын тотоп, Мөхәмәтйәр ҡарттың өй артындағы бүрәнәлә үҙ уйҙарына сумған килеш көндәр буйы күктә йөҙгән ҡояшҡа ҡарап ултырҙы. Вахит та, был малайҙар ҙа бәғерһеҙ тормоштоң тәүге ҡайғыһын кисереүсе ҡорбандар ине.

***

Зарипов етәкселегендәге ГПУ хеҙмәткәрҙәре Йылайырға ҡайтып етеп, шундуҡ үҙ хужаларына үҙҙәре уйлап сығарған уйҙырманы еткерҙе: подследственный Игебаевтың Нәмәс төбәк больницаһында ятҡанын да әйттеләр. Енәйәтсенең ышаныслы ҡулда ҡалыуын дөрөҫләргә тырышып, доктор биргән рәсми ҡағыҙҙы начальник өҫтәленә һалдылар. Ләкин хеҙмәткәрҙәренең күҙҙәре ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла йүгереп тороуҙарынан эштең асылын һиҙеп ултырған ГПУ начальнигы төркөм башлығына күҙҙәрен аҡайтып, сәнскеле ҡараш менән өтөп алды:

– Мин һине нисә тапҡыр киҫәткәнем бар, сволочь: ҡулға алынған кешегә өҫтөнән йоҙаҡ һалмайынса, бармаҡ менән сиртергә лә ярамай, тип. Был бит һинең беренсе «батырлығың» түгел. Хәҙер уны алып ҡалған батша врачы контр

өҫтөнән ҡағыҙ төҙөп, уны инвалид яһап сығарһа, был бысраҡтан нисек таҙарынырбыҙ? Уның ҡара табы иң башта беҙҙең өҫкә яғыла. Һин ГПУ-ла бөгөн бар, иртәгә – юҡ, ә беҙгә эшләргә кәрәк бит әле! – тип Зариповтың ҡотон алды. Шунан ике сикәһен ҡыҫып уйланып ултырҙы ла дауам итте. – Бар, ана, башыңды ауырыуға һалып, кантон больницаһына инеп ят, күтеңә үткәнсе ят. Башың эшләмәһә, шулай була торған. Ҡулдағы ҡамсыны көнәлгәре сусаңдатмайҙар ул. Әгәр эш ҡатмарланып китһә, бәлки, һине нервы ауырыуҙарын дауалай торған Өфө больницаһына оҙатырбыҙ. Ҡорал, аммуницияны тапшыр ҙа, әйҙә, шагом марш! – тип аҫтына шыр ебәргән Зариповты кабинетынан ҡыуып сығарҙы.

Тап ошо мәлдә, ГПУ-лағы был һөйләшеүҙе ишетеп торған һымаҡ, Нәмәс түбәк дауахананың баш врачы Аполлинарий Христофорович йыртып ташланған документты яңынан ентеклеберәк төҙөп, үҙ сейфына тәрәнерәк тығып ҡуйҙы. «Һаҡланғанды һаҡлармын, тигән һүҙҙе юҡҡа ғына әйтмәйҙәр, – тип уйланы тормошта күпте күргән доктор. – Бәлки, Игебаевтың бында әлегеүе тураһында ниндәйҙер ышаныслы кеше менән Маргаритаға еткерергәлер, уның килеүе иренә тиҙерәк аяҡҡа баҫырға ярҙам итер ине». Ләкин йәш ҡатындың ирен был хәлдә күреүе үҙе бер фажиғәгә әйләнеүенән ҡурҡып, уйынан кире ҡайтты.

Ә Абдрахман докторҙың даими хәстәрлеге арҡаһында көндән-көнгә арыулана барҙы. Арҡаһындағы ҡамсынан ялланған эҙҙәр өҫтөнә ҡалҡып сыҡҡан көрән ҡутырҙар һыпырылып төштө. Башындағы яраһы ла әкренләп уңала башланы, иң мөһиме – аҡылына зыян булманы, иҫе дөрөҫ.

Игебаевты алып китеүҙәренә байтаҡ ҡына ваҡыт үтһә лә, Яланда ла, Баҡыр-Үҙәктә лә уның тураһында иҫкә алып торҙолар. Тау тресы управляющийы Филипп Афанасьевич сираттағы килеүендә лә Фәйзи Фәттәховтан Абдрахмандың ғаиләһе тураһында ҡыҙыҡһынды. Директор ултырған урынында борғоланып ҡуйҙы. Уның был һорауҙан уңайһыҙланғанын һиҙеп ултырған управляющий ярым асыулы ҡарашын түбәне лә:

– Нишләй, осаңа энә ҡаҙалдымы әллә? – тип һораны.

– Эйе, Филипп Афанасьевич, ҡаҙалды шул. Һеҙҙең ҡушыуығыҙ буйынса көн дә транспорт бүлеүҙән башҡа артыҡ эш ҡыйраҡҡан юҡ, – тине Фәйзи Фәттәхов, аҡ йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгертеп.

– Ҡайһылай ҙа шәп! Һинең өсөн кеше ҡайғыһы һәр саҡ төштән һуң булды инде. Ул ғаиләне онотторға һиңә оят түгелме? Игебаев алдында беҙ кәпәс сисеп баш эйергә тейешбеҙ. Ошо көнгә тиклем һинең руднигың уның икмәген ашап ята. Шул кешенең тирмәнендә тартылған он ылау-ылау һинең келәтеңә килеп тора. Әгәр ошо ширҡәт булмаһа, һин үҙеңдең тәьминәт бүлеге начальнигы менән ҡуша ҡулығыҙҙы һуҙып, кулактарҙан өй һайын икмәк һоранып йөрөр инегеҙ. Ә ул һеҙгә игенде үҙе келәте менән биреп ҡуйған. Ә шунан Ҡыҙыл йылғаһы буйындағы һинең ағас бысыу пункттарыңда, шахтаңда Ялан ауылынан нисә кеше эшләй? – Управляющий бер аҙ тын ултырҙы ла яңынан дауам итте. – Бында минең дә хата бар. Үткән йыл улар сәскән майҙанды быйыл да бирергә кәрәк ине, сөнки уларҙың икмәген барыбер беҙ ашайбыҙ. Беткә үсегеп тунды яҡтыҡ – шулай булып сыға түгелме? Бына быйыл ни ашарһың икән?

Филипп Афанасьевич тағы бер аҙ өндәшмәй ултырҙы, шунан йөҙө асылып китте һәм, йылмайып:

– Еттеме? – тип һораны.

– Муйындан ашты, – тине Фәттәхов, маңлай тирен һөртөп.

– Маргарита Ивановна был заманда ҡайҙа икән? Барып күрергә, хәл-әхүәлен белергә кәрәк ине.

Директор Воронинға шылтыратып, Маргаританың эштә икәнлеген белде. Бер

нисә минуттан, артынан ҡара-күгелйем төтөн борҡотоп, управляющийҙың еңел машинаһы дауахана болдоро алдына килеп тә туҡтаны. Быға тиклем тыныс ҡына йәшәп ятҡан дауаханала шау-шыу ҡупты. Үҙ ғүмерендә тормоштоң әсеһен-сөсөһөн байтаҡ татыған Воронин да ҙур етәксенең килеүенән ҡаушап ҡалды. Ашығыс рәүештә саң-туҙан ҡуптарып коридор, кабинеттарҙы, биш койкалыҡ стационарҙы тәртипкә килтерергә тотондолар. Былдағы хәлде белеп торған Филипп Афанасьевич тиҙ генә инеп китергә ашыҡманы. Бейек болдорҙа тороп, тирә-йүнде оҙаҡ ҡына күҙәтте.

– Урыҫ сиркәүе шикелле, больницағыҙ бик бейектә ултыра икән. Был Баҡыр-Үҙәктә иң ситтәге йорттор? Ҡыш, көҙ көндәре бик һалҡын булалыр, ел-ямғыр, буран уртаһында ултыраһығыҙ бит, – тине управляющий.

– Былай больницала һыуыҡҡа зарланып булмай, билдәле, ишек-тәҙрәләрҙе ентекләп нығытып ҡуябыҙ ҡыш алдынан. Ана, тегендә,– Фәттәхов ҡулын һуҙып күрһәтте, – бынан ике йөҙ метр юғарылыҡта, көньяҡтараҡ, төҙөлөштөң генераль планы буйынса, ике баҫҡыс мәктәп бинаһы төҙөү ҡаралған. Хәҙергә документация әҙерләп ятабыҙ.

– Һаман юғары менәһегеҙ икән. Ана, аҫтараҡ, баҡыр ятҡылығының уйһыулығында урын юҡмы ни? Поселокты ҡоймаҡ һымаҡ йәйергә түгел, бер урынғараҡ тупларға кәрәк. Үҙәктә төҙөлгән магазин, ашхана, клуб, стадиондарға ла халыҡҡа йөрөргә уңай булыр ине. Унан киләсәктә рудник поселогын телефонлаштырырға, электр үткәрергә лә тура килер.

– Әлбиттә, әлбиттә, Филипп Афанасьевич.

– Берәй ваҡыт тағы бергә ултырып, киләсәк төҙөлөштө ҡарап сығырбыҙ әле. Йәшәгән кешегә лә, дөйөм эшкә лә уңайлы булһын, – тип кәңәш бирҙе управляющий.

Әҙерәк дауахана эсендә ығы-зығы баҫылғанын һиҙеп торған Үлмәсов: «Әйҙә, Степан Петрович, биләмәләреңде күрһәт», – тип әйткәс, ҡуҙғалдылар. Бер һүҙ ҙә өндәшмәй, бүлмәләрҙе ҡарап йөрөгән етәксе дарыу еҫе аңҡып торған йыйнаҡ ҡына кабинетта шәфҡәт туташы кейемендәге Маргаританы осратты. Үлмәсов, артыҡ иғтибар итмәгән төҫтә, кинәт тулы, сибәр битенә ҡыҙыллыҡ йүгергән Игебаев ҡатынының ниндәйҙер тылсымлы йылылыҡ бөркөп торған йомшаҡ ҡулын еңелсә генә ҡыҫты. Башҡаса уға диҡҡәт күрһәтеп тороуҙы етәксе кеше кәрәк һанаманы.

– Дауалайбыҙмы? Эш бармы? – тип кенә һорап алды.

– Етәрлек. Эш юҡлығына бер ҙә зарланып булмай, Степан Петрович барыбыҙға ла йомош табып тора, – тип йылмайҙы Маргарита.

Бөтә дауахананы ҡарап, ауырыуҙарҙы күреп сыҡҡас, Филипп Афанасьевич бөтә хеҙмәткәрҙәрҙе баш врач кабинетына йыйырға ҡушты. Кеше менән һөйләшеү етәксенең ҡағиҙә рәүешендә ҡулланған эш ысулы ине. Төрлөһө төрлө урында урынлашҡан дауахана хеҙмәткәрҙәрен Үлмәсов башта үҙенең ҡарашы аша үткәрҙе, унан үҙе менән таныштырҙы.

– Бына һеҙгә үҙемде күрһәтергә, һеҙҙе лә күрергә килдем, – тине етәксе, мәрәкәләп. – Тәүҙә һеҙҙең баш врач Степан Петровичтың бәләкәй генә сығышын тыңлап алайыҡ.

Рудник буйынса ғына түгел, дауаханаға беркетелгән ауылдар халҡының һаулыҡ торошо, улар араһында ниндәй ауырыуҙар өҫтөнлөк итеүе хаҡында Степан Петрович ентекле мәғлүмәт бирҙе. Санитар-гигиена мәҙәниәтенең ерле халыҡ араһында бик түбән кимәлдә тороуын билдәләп: «Әле халыҡ электән ҡалған һаулыҡҡа зарарлы ғөрөф-ғәҙәттәрҙән айнып бөтә алмай. Күп урында мулла-монтағайҙарҙың өшкөрөм-төкөрөмөнә беҙҙең ярҙамға ҡарағанда йышыраҡ

мөрәжәғәт итә. Йөклө ҡатындар күп осраҡта кендексе әбейҙе өҫтөн күрә. Шуның арҡаһында фажиғәле хәлдәр ҙә осрап тора. Халыҡ күҙ ауырыуҙарынан интегә, ләкин улар иртә менән, биш тинен йомоп, ауыл муллаһына йүгерә. Ауылдарҙа бәҙрәф, мунсалар һирәк. Шахтерҙар араһында уларға ғына хас силикоз сире йышая. Уны дауалауҙа беҙҙең бер ниндәй ҙә тәжрибә юҡ», – тип тамамланы һүҙен Степан Петрович.

Диҡҡәт менән тыңлап, үҙ блокнотына ниҙер теркәп ултырған Филипп Афанасьевич урынында ҡуҙғалып алды ла:

– Иптәштәр, ғәфү итегеҙ, ултырып ҡына һөйләшәйек, – тип, тәпәш өҫтәл аҫтына һыймаған зәғиф аяғын уның ҡырына терәп, һүҙен дауам итте. – Һеҙҙең менән йышыраҡ осрашырға ине лә бит, ләкин минең ундай форсат юҡ. Аҡ халатлы хеҙмәткәрҙәрҙең миңә бирәһе һорауҙары, үтенестәре барҙыр, бәлки? Тартынып ултырмағыҙ, аңлашайыҡ, ҡулдан килгән ҡәҙәре ярҙам итергә тырышырмын.

Әллә рудниктың яңы ғына башланып тороу сәбәбенәнме, управляющийға терәлеп тигәндәй ултырған йәш табиптар бик асылып барманы. Тик стационарҙа эшләгән йыуантыҡ шәфҡәт туташы ғына:

– Начальник иптәш, беҙ хеҙмәтләндергән ауылдарҙан ҡапыл ауырып киткән кешеләрҙе алып килер өсөн бер егеүле ат кәрәк ине. Уны беҙ үҙебеҙ ҙә йөрөтә алыр инек. Юғиһә, ауырыуҙарҙы ваҡытында килтереп булмай, – тип һораны.

Уның һорауын шундуҡ Степан Петрович эләктереп алды. Ул саф башҡорт телендә:

– Нәфисә, был һорауҙы Нәмәс төбәгенең баш врачы Аполлинарий Христофоровичҡа бирергә кәрәк. Участка больницаларына бөтә кәрәк нәмәгә аҡсаны шул ағайың бүлә, – тине.

– Ярай, ярай, Степан Петрович. Ханымдың һорауы төбәккә барып еткәнсә әллә ни тиклем ғүмер уҙыр. Был эште иртәгәнән башлап ойоштороуҙы рудник директоры Фәттәховҡа ҡушам. Билдәле, был беҙҙең эш түгел, ләкин, кеше һаулығы тураһында һүҙ барғанда, бер арбалы ат менән хисаплашып булмай. – Управляющий директорға эйәк ҡаҡты, унан блокнотына тағы ла ниҙер яҙып ҡуйҙы.

– Филипп Афанасьевич, ҡыйын булһа ла, һорамай әмәл юҡ. Нәмәс төбәк шураһының әле генә табиптарға торлаҡ төҙөп бирергә сәрмәйәһе етмәйерәк. Беҙҙең хеҙмәткәрҙәр барыһы тигәндәй йәш кешеләр, Баҡыр-Үҙәккә эшләргә килеп өй һалған хужалар өҫтөндә йәшәй. Билдәле, үҙҙәре гигиена талап иткән кешеләрҙең беренсе нәүбәттә заманса йәшәү шарттары булырға тейеш...

– Дилбегәне ҡыҫҡараҡ тот, Степан Петрович, – тип бүлде уны Филипп Афанасьевич, сынйырлы сәғәтенә ҡарап.

– Ҡыҫҡаһы шул: төҙөлөп ятҡан эшселәр ятағынан беҙҙең табип-табибәләр өсөн дүрт-биш бүлмә бирә алһағыҙ, бик тә ярап ҡалыр ине, – тине баш врач.

Филипп Афанасьевич директорға ҡараны. Йылғыр холоҡло Фәйзи Фәттәхов уның уйлағанын элеп тә алды.

– Хәҙергә, Филипп Афанасьевич, атылмаған айыу тиреһен бүлмәй торайыҡ әле. Сабыр итәйек. Егерме кешелек ятаҡтан урын һорап минең өҫтәлдә илле ғариза ята, – тине директор.

– Ысынлап та, был мәсьәләне ашыҡтырмау дөрөҫөрәк булыр. Уның бик ауыр икәнен мин дә яҡшы аңлайым. Тресҡа ҡараған ете приискының етеһендә лә был – етди проблема. Рудниктарға килгән яңы кешеләрҙең ҡулдарындағы кәйлә-көрәгенән ғәйре бер нәмәһе лә юҡ. Килгән бере, хәле булһа, һуҡыр сысҡан шикелле соҡоп, ер аҫтына керергә тырыша. Землянканың ниндәй торлаҡ икәнен һеҙгә һөйләп тораһы түгел. Ҡыш булһа, түбәһен тигеҙләп ҡар баҫа, яуын-

сәсен булһа – түбәһенән шыбырлап һыу яуа. Ҡыйын йәшәйбеҙ, – управляющий туҡтап алды ла һүҙен дауам итте. – Бөтә приискыларыбыҙ ҙа сиҙәм ҡыртышынан һалынған землянкаларҙан ғибәрәт. Ағас йорттарҙы хәҙергә тик Американан килгән һәм дә киләсәк тау белгестәренә генә һалабыҙ. Нишләп капиталистик илдәрҙән килгән сит кешеләр – бейек ағас йорттарҙа, ә ер аҫтындағы шахтала, былай ҙа ҡояш яҡтыһын күрмәгән үҙебеҙҙең совет кешеләре, эштән ҡайтҡас, тағы ла ер торлаҡта йәшәргә тейеш? Был ғәҙел дә, дөрөҫ тә түгел. Бындай тигеҙһеҙлекте бөтөрөү – беҙҙең бурыс. Совет кешеһе яҡын киләсәктә ҙур, яҡты, эсендә һыу ағып торған, бәҙрәфле ағас йорттарҙа йәшәргә лайыҡ. Һәм беҙ шулай эшләрбеҙ ҙә!

– Ыста, өй эсендә бәҙрәф булһын, ти... Алла һаҡлаһын, бындай оятһыҙ эшкә нисек бармаҡ кәрәк? Әмеректәге халыҡ эшкә йәйәү түгел, самокат менән йөрөй, тиҙәр, – тиеште халыҡ.

– Бына шулай. Тиҙҙән бәҙрәф, һыу булған йорттарҙы төҙөй башларбыҙ. Уларҙың һәр мөйөшөн электр уты ҡояштай балҡытып торасаҡ. Ҡандала, тараҡан булмаясаҡ яңы йорттарҙа. Килер шундай көн – беҙҙең кешеләр ҙә Америка халҡы һымаҡ йәшәй башлар. Хатта яҡшыраҡ та!

Ә инде һеҙ күтәргән мәсьәлә буйынса мин ошо көндәрҙә Өфөлә Совнарком рәйесе Мөхәммәтҡолов Әхсән ағайыбыҙ менән осрашасаҡмын. Әҙерәк сәрмәйә менән ярҙам итһә, һеҙҙә генә түгел, башҡа рудниктарҙа ла табип-табибәләр ҙә кешеләрсә йәшәй башлар. Иң башта һеҙҙең үҙегеҙгә өлөшләтә булһа ла яҡшыраҡ тормош шарттары тыуҙырып, төҫлө сәнәғәттә эшләгән эшсе-хеҙмәткәрҙәрҙе төрлө өшкөрөүсе, кендексе әбейҙәр тырнағынан йолҡоп алып, алдынғы совет медицина фәне менән солғап аласаҡбыҙ, – тип осланы сығышын управляющий.

– Маргарита Ивановна, ғәфү итегеҙ, Һеҙ бер нисә минутҡа ғына ҡалығыҙ, – тип өндәште Үлмәсов иң алдан ишеккә ынтылған Игебаеваға.

– Ә беҙгә? – тип һораны Фәттәхов менән Степан Петрович бер юлы.

– Ҡалығыҙ. Беҙҙең Маргарита ханым менән бер ниндәй ҙә сер юҡ, – тип управляющий директор һәм баш врачҡа эйәк атты.

Өҫтәл ҡырына килеп ултырған Маргаританы Филипп Афанасьевич башта диҡҡәт менән ҡарап алды. Етәксенең етди, тура ҡарашынан тартынып, ул башын аҫҡа эйҙе. «Былай кәүҙәһе бер аҙ һурыға төшһә лә, элекке матурлығын ташламаған. Бит алмалары элеккегә ҡарағанда ла сағыуыраҡ...» – Шундай һығымта яһаны Үлмәсов. Бөтә кәүҙәһен ҡыҫып алған халат эсендә дәрт һәм көсғәйрәт һирпеп торған ҡыҙыу, һығылмалы, һөттән аҡ тән барлығын донъя күргән етәксе шундуҡ баһалап алды. Ләкин күңеле төбөндә нәфселе күҙҙәрен йыҙлатып, йоҡоһонан уяна башлаған үҙ иблисенә Филипп Афанасьевичтың көслө ихтыяры кинәт кенә ауыҙлыҡ һалды. Битендә төҫмөрләнә башлаған бәйһеҙлек һыҙаттарының эҙен дә ҡалдырмай юйып ырғытты ла етди төҫ менән өндәште:

– Әйҙәгеҙ, Маргарита Ивановна, һис бер тартынып тормай, Игебаев киткәс ни рәүешле йәшәп ятаһығыҙ, – үҙ тормошоғоҙҙо һөйләп бирегеҙ әле. Ниҙәр борсой, ниндәй ярҙамға мохтажһығыҙ? Игебаевтан хәбәр-хәтер бармы?

Филипп Афанасьевичтың ихлас һүҙҙәре һуңғы ваҡыттарҙа ҡайғы-хәсрәт утында янған Маргаританың күңелен йомшартып ебәрҙе, ул оҙон керпектәрен аҫҡа һирпеп, күҙҙәрен еүешләтеп алды. Шунан усына йомарлаған ҡулъяулығы менән күҙ йәшен һөртөп, әҙәпле генә:

– Ғәфү итегеҙ инде, бында бер ниндәй ҙә ғәйебегеҙ юҡ. Һеҙҙең генә түгел, беҙҙең дә күңел шөрөптәре бушап китте әле, – тип Филипп Афанасьевич эргәһендә йөҙҙәре боҙолоп ултырған ирҙәргә ҡараны.

– Беҙҙең ябай тормош менән ҡыҙыҡһыныуығыҙ өсөн ҙур рәхмәт, Филип Афанасьевич. Былай ашау-эсеүгә ҡытлыҡ кисергән юҡ. Йүнләп иген сәсә алмай ҡалһалар ҙа, ширҡәт кешеләре лә ярҙам ҡулын һуҙып торалар.

Сәсеү тураһында ишеткәс, Үлмәсов урынынан ҡалҡынып ҡуйҙы, рудник директорының күҙенә ҡарап «Быныһы инде, Фәйзи, һинең менән минең егетлек!» тигәнерәк ишара яһаны. Ләкин еңелсәрәк холоҡло рудник хужаһы үҙ етәксеһенең кинәйәһен аңламаны. Ул үҙ ҡарашын сибәр ҡатын йөҙөнән ала алмай ултыра ине.

– Рудник беҙҙең ғаиләгә: миңә, ҡәйнәмә, улыма заборный книжка* бирҙе, уға ай һайын сәй-шәкәрен, башҡаһын алып торабыҙ.

– Ә яңы тыуған ҡыҙығыҙ, исеме Хәфиәме әле, уға нишләп карточка юҡ?

– Уның тыуыуы хаҡында шаһәдәтнамәне тәьминәт бүлегенә тапшырмағанбыҙ әле.

Бүлмәлә ултырған бар кешеләр ҙә Үлмәсовтың хатта яңы тыуған сабыйҙарҙың да исемен белгәненә хайран ҡалды.

– Тиҙерәк документтарҙы тапшырып, уға ла карточка яҙҙырығыҙ. Игебаевтың үҙе юҡта донъяға килгән сабыйы ла баһа!

Был һүҙҙәрҙән һуң Маргаританың күҙендә йәнә йәш бөртөктәре күренде.

– Абдрахмандан берәй хәбәр юҡмы?

– Юҡ шул, китте лә юғалды. Ғәлиәкбәр ағай Нәмәскә барып белешеп ҡарағайны, ләкин бер ни ҙә белә алманы. Беҙҙең иң ҙур ҡайғыбыҙ, Филипп Афанасьевич, – Абдрахмандың һыуға батҡан шикелле ғәйеп булыуы. Бик ауыр кисерәбеҙ беҙ шул юғалтыуҙы. Хатта беҙ генә түгел... – Артабан Маргаританың һүҙен дауам итергә хәле етмәне, күңеле тағы ла тулышты.

Филипп Афанасьевич өҫтәл артынан тороп Маргаританың һулҡылдап ҡалтыранған йомшаҡ арҡаһына ҡулын һалды.

– Зинһар, илама, Маргарита! Игебаев бесән кәбәнендә юғалған энә түгел, табырбыҙ. Әлегә уның эше менән ныҡлап шөғөлләнгән юҡ. Йәйге айҙарҙа алтын табыуҙы бик ныҡ арттырырға ниәтләнеп торабыҙ. Ваҡыт юғыраҡ. Ошо көндәрҙә кантон мәркәзенә барып, был эште асыҡларға тырышырмын. Һөҙөмтәһен иң тәүҙә Һеҙгә белдерермен. Өҙгөләнмәгеҙ, тағы аҙ ғына сабыр итегеҙ, – тип Үлмәсов үҙ алдында баҫып торған Маргаританы күкрәгенә ҡыҫып һөйҙө.

– Ярай, беҙгә китергә ваҡыт етте. Хуш, ҡыҙым!

Айырылышыу минуттарын ауыр кисергән кешеләй, управляющий әкрен генә ишеккә атланы. Оло етәксенең үҙ ҡулы аҫтындағы унарлаған рудник, фабрикаларының хәстәрлектәре менән тулған башына бер ғаилә ҡайғыһының нескә ебе лә үрелеп китте. Филипп Афанасьевич был епте фекерҙәр йомғағына урап, үҙенең хәтер һандығына һалып ҡуйҙы. Уға буйһонған меңәрләгән кешенең һәр береһенең үтенесе тейешле яуап алырына ныҡ ышана, сөнки етәксе әйткән һүҙ ҡәҙеренә күптән төшөнгәйнеләр инде. Машинаһына ултырғанға тиклем ул Игебаевтың фамилияһын ауыҙ эсенән бер нисә ҡат ҡабатлап алды.

***

Баҡыр-Үҙәктән Баймаҡҡа еткәнсе соҡор ҙа саҡыр арба юлынан һелкенә-һелкенә ҡайтып барған Үлмәсовтың уйында ике яҡта ла өлпәк башлы ҡылғандың сәскә атыуы, күҙ күреме далала, күктә лә, ерҙә лә бер ниндәй йән эйәһенең осрамауы әллә ни төрлө хыялдар, яҡшы өмөттәр уятты. «Бына ошо диңгеҙ һымаҡ

* *Заборный книжка – ул саҡтарҙа эшсегә һәм уның ғаиләһенә аҙыҡ-түлек алыр өсөн бирелә торған карточка.*

даланы иңләп ятҡан ҡылған яланынан яҡын киләсәктә тимер юл һалыныр. Бөгөнгө кеүек кеше йонсотоп, аттар арытып, дөйәләр егелгән ылау менән заводҡа баҡыр рудаһы ташыу тик кешеләр хәтерендә генә һаҡланып ҡалыр. Ялан яңғыратып ҡысҡырған паровозға тағылған тиҫтәләгән вагондар ҡышҡы күҙ асҡыһыҙ бурандарҙа әле бата-сума ике-өс көн буйына заводҡа ташыған йөктәрҙе ике-өс сәғәттә килтереп еткерер...» Кабинаһының эсе һары күн менән көпләнгән еңел автомобилдә яҡты хыялдар ҡосағында йөрәкһеп килгән Филипп Афанасьевич үҙе етәкселек иткән Тау тресының киләсәген тиҙҙән һалынасаҡ тимер юлдан ҡылғанлы даланы яңғыратып алға сапҡан паровоз йөрөшө менән сағыштырҙы. «Бына 1927 йылда Баймаҡ баҡыр заводы илгә 1950 тонна бик кәрәкле һары металл бирҙе. Баҡыр ғынамы ни? Завод коллективы иретеп оҙатҡан баҡыр составынан йәш Совет йөмһүриәте үҙенең данлыҡлы ун йыллығына 600 боттан артыҡ саф алтын, меңәр бот көмөш алды. Дәүләт ҡаҙнаһына илдә тағы ниндәй завод шул тиклем мәғдән тапшырғаны бар? Башҡортостанда ғына түгел, илдең Ауыр сәнәғәт халыҡ комиссариатының төҫлө металлургия тармағында Баймаҡ баҡыр заводына тиңләшерлек тағы ниндәй предприятие бар? Юҡ, яҡын йылдарҙа ғына булмаҫ та!..

...Ә нимә? Нишләп мин үҙ хеҙмәтем менән ғорурланмаҫҡа тейеш?! Нишләп миңә, кисәге ябай инженерға, үҙемдең юғары «ҡыҙыл директор» исемем менән маһаймаҫҡа? Лондондан килгән килмешәк лорд Лесли Уркварт, Красноуфимск сауҙагәре Кабанов үҙҙәре төҙөгән яңы мейестәрҙә бай ятҡылыҡтарҙың колчеданын иретеп, 1914 – 1917 йылдар эсендә генә йәмғеһе 2100 тоннанан ашыу баҡыр бирһә, мин етәкселек иткән Тау тресы иҫкергән ҡоролмаларҙа, Америка-Англия инженерҙарының ярҙамынан баш тартып, бер йыл эсендә генә ике мең тоннаға яҡын баҡыр иретте. Быны тик большевиктар партияһының еңелмәҫ идеяһы менән ҡоралланған, кисәге ағас һуҡа менән ер һөрөп, ҡул менән иген сәскән совет кешеһе генә булдыра ала!»

Күңеле яҡты өмөт менән тулған етәксене бөйөк маҡсаттар тағы ла юғарыға, асманға, сөйә. «Бына ошо һикәлтәле ат юлдарын тиҙҙән, Отасы* тауында асылған тимер рудаһы эшкәртелә башлағас, Магнит – Сибай, ә, бәлки, Магнит – Файзулла – Йолалы тимер юлы алмаштырыр. Ә уның бер тармағы, һис шикһеҙ, Баймаҡ заводына ла килеп етәсәк. Был тимер юлдың һис кенә лә булмауы мөмкин түгел, сөнки Бөрйән–Түңгәүер кантонында ғына тип иҫәпләнгән миллион тонналыҡ марганец ятҡылыҡтары бар. Тимәк, Магнит домналары тимер рудаһын иретә башлаһа, уның технологик ҡушымтаһы булған марганецты файҙаланмай әмәле юҡ. Бына шул саҡ, осҡан торналар шикелле теҙелешеп, бере артынан икенсеһе ығышып барған, йөктәренә руда тейәп тартҡан ҡаҙаҡ дөйәләренән ҡотолорбоҙ...»

Быны тик үҙ хыял теҙмәләре генә икәнен онотоп барған Үлмәсов, еңел машинаның ағас рүлен әйләндереп ултырған шоферына боролоп:

– Верно я говорю, Вася? – тип һораны.

Йыш ҡабатланған былдай һорауҙарға күнегеп бөткән һары сәсле водитель, төпсөнөп тә тормай:

– Верно, Филипп Афанасьевич, – тип яуапланы.

Баҡыр ятҡылығы янында урынлашҡан Бәләкәй, Сибай ауылына етәрәк оҙон ҡалҡыулыҡҡа күтәрелә башлағас та, управляющийҙың машинаһы руда тейәгән дөйә ылауҙарын ҡыуып етте. Ниндәйҙер дүрт тәгәрмәсле атһыҙ арбаның дырылдап

---

*Отасы – Магнит станцияһында тимер рудаһы ятҡылығы асылған тау исеме.*

үҙҙәрен ҡыуып етеп килгәнен һиҙеп ҡалған дөйәләр, шөкәтһеҙ морондарынан күбек сәсеп, яман тауыш сығарып, ыҙғырыша башланы. Ҡарышҡандай, водитель машина ҡабырғаһындағы әсе тауышлы сигналын да ҡысҡыртып ебәргәс, дөйәләр, «ут арбаһы»нан өркөп, юлдың ике яғына һирпелде.

Быйндағы ҡаҙаҡтарҙан кәүҙәһе һәм йәше менән дә күпкә ҡиммәтле ылау башлығы Бүребаев Ҡораш әкә* дөйәләрен ҡурҡытып үтеп киткән управляющийҙы «Әкәң ауызын... ҡылайым» тип ҡарғап тороп ҡалды. Ләкин автомобиль йөрөтөүсеһенең был килешмәгән ҡылығы ғорурлыҡ хисендә ирәбәләнеп килгән Үлмәсов тарафынан бер ниндәй ҙә шелтә тапманы. Киреһенсә, баҡыр рудаһы, алтын-көмөш тейәп, ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла сапҡан паровоздар менән һаташып килгән трест управляющийы күңелендә машинаһының йөк төйәлгән ҡаҙаҡ дөйәләрен туҙҙырып китеүе «капитализм ҡалдығы»н тапап үтеү тантанаһы һымаҡ тойолдо. «Бына шулай, ыңрашып, көйшәнә-көйшәнә ығыш аҙымдар менән саҡ шылышып килгән дөйәләрҙе ҡыуып етергә, уҙып китергә!» – тип тә ҡысҡырғыһы килде Үлмәсовтың һәм ул, эске кинәнесен йәшерә алмай, артына боролоп ҡараны. Ылау башлығы Бүребаев Ҡораш етәкселегендә башҡа ҡаҙаҡтар, төрлө яҡҡа таралған дөйәләрен, аҡырта-аҡырта, киренән юлға төшөрөргә маташа ине. Нәҡ ошо ваҡытта ғына Түбә руднигының йәш эшсе шағиры Батыр Вәлит тарафынан уның үтенесе менән тигәндәй ижад ителгән шиғри юлдар иҫенә төштө:

*Бегун йүгерә заводҡа*
*Пар йырлаъан тауышҡа*
*Геүләп, сайҡалып.*
*Иҫке тормош күҙ һөртә,*
*Шыңшый-шыңшый йәш бөркә,*
*Ситкә тайпылып.*

«Бына шулай, шыңшый-шыңшый ситкә тайпылығыҙ, яңы тормошҡа юл бирегеҙ» тигән күтәренке оран солғап алғайны Филипп Афанасьевичтың барлыҡ бөтмөшөн. Ул «Күк Ирәндек» көйөнә ауыҙ эсенән генә мөңрәп йырлай ҙа башлағайны. Ҡапыл шул мәлдә генә юлдың һул яғында йәйрәп ятҡан Күлтүбән күленең өҫтө елгә быжырланып ҡайнарға тотондо, баш осонда ҡолаҡсындай ғына ҡара болот пәйҙә булды. Ул күк көмбәҙендә унда-һанда күренә башлаған киҫәк-киҫәк болот йыртыҡтарын үҙ аймауына тарта башланы. Унан-бынан ҡушылған киҫәктәрҙән ямалған ҡорама түшәк күл өҫтөн ҡаплап алған ҙур юрғанға әүерелде. Был ҡара тауға оҡшаған киртләс-киртләс болоттарҙы әлдән-әле көсәйгән дауыл көнбайышҡа, Ирәндек армыттарына, табан ҡыуҙы.

– Давай, Вася, машинаңды йәлләмә, ҡыу! Хәҙер ғәрәсәтле ямғырға эләгәбеҙ, – тип ҡысҡырҙы Үлмәсов.

Уның киҫәтеүен көтөп кенә торған һымаҡ, тәүге эре ямғыр бөрсөктәре брезент менән ябылған автомобиль түбәһенә тупылдап төшә лә башланы. Тиҙҙән ел-дауыл менән ҡуша ҡойма ямғыр яуырға тотондо.

– Филипп Афанасьевич, Хәсән ауылында ямғыр тымғанын көтөп торайыҡ. Бигерәк тә ҡурҡыныс яуа бит, – тине Вася, машина ишегенән башын тығып.

– Юҡ, юҡ. Иртәгә Йылайырға юлланабыҙ. Ваҡыт юҡ, Баймаҡта эштәр муйындан.

Бейештәр төйәк иткән Хәсән үрен үтеп, бер нисә саҡрымға һуҙылған Ирәндек битләүе ҡалҡыулығына күтәрелә башлағас, ағас тырнаҡтар менән ныҡытылған автомобиль тәгәрмәстәре уйһыуыраҡ урында көпсәгенән батып та

* Әкә — оло йәштәге ир кешене хөрмәтләү һүҙе (ҡаҙаҡса).

өлгөргәйне. Шулай ҙа машина алға барыуын дауам итте. Ләкин Урғаҙа йылғаһының кисеүен аша сыҡҡас, юлдың ҡара тупрағы бутҡаға әйләнгән тағы ла оҙайлыраҡ ҡалҡыулыҡта автомобиль яңынан батҡаҡҡа сумды. Сумды ла, йөрөтөүсе Василий нисек кенә уны алға-артҡа сайҡалтып ҡарамаһын, бөтөнләйгә ныҡлап ултырҙы. Күк күкрәп яуған ҡойма яуын тышҡа сығып, тәгәрмәстәр аҫтын таҙартырға мөмкинлек бирмәне. Брезент өҫтөнә шыптырлап яуған ямғыр тауышын тыңлап, хужа менән водитель, һәр береһе үҙ уйҙарына бикләнгән килеш, байтаҡ ҡына өнһөҙ ултырҙылар.

– Бына ошондай ҡойма ямғыр ваҡытында бысраҡта ултырған юлаусы ни эшләй, Вася? – тип һорап ҡуйҙы Үлмәсов.

– Атының йөгөн еңеләйтеп, юлын дауам итә. Беҙҙең кеүек автомобиль менән батҡан юлаусылар йә алдан, йә арттан килгән ямғырға эләккәндәрҙе көтә. Әгәр инде ҡуржынында аҙыҡ-әүкәте булһа, тамаҡ ялғап ала.

– Бик дөрөҫ әйттең, Вася. Әйҙә, саквояжды ас. Беҙ ҙә әүкәтләнеп алайыҡ.

– Беҙҙә аҙыҡ ҡына түгел, майшәм – шахтерҙарҙың карбид лампаһы ла бар.

– Бик тә хуп. Ашап, күңелде күтәреп алайыҡ, ямғыр ҙа тымыр, бәлки.

Ләкин, завод оҫталары үҙ хужаларына эшләп бүләк иткән йыймалы өҫтәлдә әүкәтләнеп алыу менән, ямғыр туҡтау ғына түгел, күнәк менән ҡойған кеүек, көсәйгәндән-көсәйҙе. Көнсығышҡа бормаланып һуҙылған, Ирәндек башын ҡаплап алған болоттар тағы ла ҡуйырып ҡарайҙы. Алды менән үргә ҡарап батҡан автомобиль тирәләп юғарынан аҫҡа йүгергән шарлауыҡтар ҡулсаһында ҡалған ике кеше үҙҙәрен диңгеҙ уртаһында ҡалған елкән кәмәһендәгеләй хис итте. Былай ҙа нурҙарын һаран ғына һибеп торған ҡояш Ирәндек армыттары артына йәшеренде.

– Ҡайҙа әле, Василий, минең мылтыҡты алып бир. Кәрәге тейер, бәлки, – тине кинәт яҡты хыялдарын эс бошорғос пәрҙә ҡаплаған управляющий.

Үҙенең Ирәндек ҡуйынында батып ултырғанын ишетһәләр, Хоҙайҙың берәй изге кешеһе ярҙамға килеп тә етер, тип өмөтләнеп, Үлмәсов мылтығының көбәген тышҡа сығарҙы ла һауаға атып ебәрҙе. Ләкин ҡояшлы аяҙ көндә тартылған ҡылдай зыңғырлап торған мылтыҡ тауышы элекке һымаҡ тауҙарҙы гөрһөлдәтә алманы, көслө шаңдау урынына батҡаҡҡа таш менән һуҡҡандай шап иткән тауыш ҡына ишетелде.

Тик йәйге иләҫ-миләҫ ҡыҫҡа төндөң ҡараңғылығы тау итәген үҙ ҡосағына бөтөнләй сорнап алғас ҡына, ямғыр туҡтап, һил булып ҡалған тынлыҡта Урғаҙа йылғаһы тирәһендә кеше, дөйә тауыштары ишетелде. Улар яҡынайғандан-яҡынайҙы. Бына үҙе артынан бер төркөм яңы ғына «ҡәһәрле капитализм ҡалдығы» тигән ылаусыларҙы эйәрткән ҡаҙаҡтарҙың башлығы Бүребаев Ҡораш үҙе таныған управляющийҙың батып ултырған автомобиленә терәлде. Башына мөйөшләп тоҡ ҡаплаған, аяғына ҡуныстары тубыҡ өҫтөнә сығып торған йылы күн итек, өҫтән ямғырҙан ҡаптырлап торған брезент плащ кейгән дәү кәүҙәле ылау башлығы алда килгән дөйәһен туҡтатты ла батҡаҡҡа сумып, һүнеп ҡалған машинаны ҙур һаҡлыҡ менән бер тапҡыр урап сыҡты. Эстән тауыш биреүсе булмағас, автомобиль тәҙрәһенән эскә ҡараны ла:

– Упрамай, «ут арбасы»нда беҙҙең ҡожамыз Фәкә утырады, ғой! – тип ҡысҡырҙы. Машина эсендәгеләр, тамаҡ туйҙырып алғандан һуң, ултырған урындарында ҡаты йоҡоға талған... Ҡораштың тауышына шул рәүешле үк кейенгән бер нисә ҡаҙаҡ йүгереп килеп етте.

– Безнен Фәкә тәгәрмәшенә гиен батып утыра екән. Кәзер шыгарыу гирек. Бар, дөйәләрне экил, – тип бойорҙо Ҡораш.

Күмәк кеше тауышына Филипп Үлмәсов та уянып, кабинаның ишеген асып, эстән тауыш бирҙе:

– Кораш жолдас икән, ғуй! – Көслө ямғырҙан һуң ҡуйы бутҡаға әйләнгән ҡара тупраҡҡа батып, байтаҡ ваҡыт сыға алмай ыҙа сиккән Үлмәсовтың башында дөйәләр ылауын мыҫҡыллау ҡайғыһы күптән осҡайны инде. – Рәхмәт яуғыры, Кораш әкә!

Күп тә үтмәй, постромкаларынан ысҡындырылған дөйәләрҙе бер-береһенә тағып, автомобилгә эләктерҙеләр ҙә, Ҡораштың ҡул һелтәүе менән, улар ыңғыраша-ыңғыраша машинаны ҡуҙғатып һөйрәп алып киттеләр. Арттан этеп ярҙам итеүҙең кәрәге лә булманы. Дүрт дөйә, аҡыра-баҡыра, автомобилде үргә тартты, ләкин текә ҡалҡыулыҡҡа менеп етер алдынан ул яңынан батты. Нәҡ шул мәлдә иң алда килгән дөйә «ут арбаһы»н ергә йөгөнөкләп, тубыҡланып һөйрәй башланы. Унан күрмәксе, постромкалар тағылған бүтән дөйәләр ҙә ергә сүкте. Машина тәҙрәһенән тамаша ҡылып ултырған Филипп Афанасьевич башына тағы ла бер ҡыҙыҡ уй килде. «Киләсәктә лә ошо капитализм ҡалдыҡтарына көн ҡалыр микән, алдағы көндә лә социализмдың «арбаһы»н иҫке тормоштан ҡалған дүрт аяҡлы дөйәләр һөйрәрме? Булмаҫ-булмаҫ, ышанмайым. Күпмелер ваҡыт үткәс, заманса техникаға атланған социализм өсөн көрәшселәр ат һәм дөйәләрҙе мәҙәк итеп кенә һөйләрҙәр...»

Ошо ваҡиғанан һуң туғыҙ йыл ваҡыт үтер. Башҡортостан тау тресының элекке управляющийы Үлмәсовты, социализм ҡорған илдә, НКВД хеҙмәткәрҙәре ҡаты яуапҡа тарттырып, «халыҡ дошманы» тамғаһы баҫып, Сергиевск урманында утын тейәлгән бәләкәй сананы йөгөнөкләп һөйрәргә мәжбүр итер. Социализм – капитализм йәмғиәтенең үле тыуған балаһы икәнен, был ике йәмғиәттең үҫеш юлдары бергә үрелеп, ҙур ҡаршылыҡтар аша барыуын Үлмәсов ваҡыт үткәс кенә тулыһынса аңларын башына ла килтермәй ине.

Ҡыраҙдың башына менгәс, ҡаҙаҡтарҙың ысын күңелдән күрһәткән ярҙамына ҙур ризалыҡ белдереп, управляющий өҫтәре бысранып бөткән юл кешеләренең барыһының да берәм-берәм ҡулдарын ҡыҫып сыҡты. Автомобиль төтөн сығарып дырылдай башлау менән, хәлдән тайған дөйәләр, тағы ла ҡурҡып, тартҡылаша башланы. Үҙ хужаларын бәләнән ҡотҡарып, күңелдәре тынысланған руда ташыусы бер ҡатлы ҡаҙаҡтар управляющий машинаһы күҙҙән юғалғансы оҙатып ҡарап ҡалдылар.

***

Үлмәсов үҙенең был командировкаһынан, хөкүмәт йомошон башҡарыуҙан бигерәк, Маргарита Игебаева менән осрашыуҙан ҙур тәьҫир менән ҡайтты. Абрахмандың һәм уның ғаиләһенең яҙмышы Үлмәсов өсөн йылдам ғына хәл ителергә тейеш мәсьәләгә әүерелде. Был еңел булмаған бурыс уның күңеленә бер төйөн булып ятты.

Баймаҡҡа ҡайтып бер нисә көн үткәс, управляющий Йылайырға юлланды. Партияның кантон комитеты һәм кантон башҡарма комитеты менән киләһе йылда волостарҙан заводҡа руда, ағас-таш ташыу өсөн күпме ылау сығарыу мәсьәләһен хәл итеү тора ине уның алдында. Хөкүмәт тарафынан үткән йыл Башҡортостан тау тресына Американан ҡайтарылған унлаған «Форд» машинаһы трест талабының ундан бер өлөшөн дә ҡәнәғәтләндермәй... Шуға күрә хөкүмәт наряды менән тәғәйенләгән йөҙәр баш «йәнле тартыу көсө» уның өсөн хәл иткес мәсьәлә ине. Бынан тыш, кантон ҡарамағындағы ун ике волостан нисә кеше һәм йөк бүленәсәк, уларҙы бергә туплау киләһе йылға бесән, һоло ғына түгел, рудниктарға йөк менән килеүсе аттарҙы һәм кешеләрҙе урынлаштырыу, йәшәү тәү шарттарын булдырыу – барыһы ла мәшәҡәтле эштәрҙең бер өлөшө генә.

Партияның кантком бюроһы ағзаһы булараҡ, Үлмәсов комитет секретары

Самохин менән, ғәҙәттә, үҙен иркен тота. Республикала иң ҙур предприятие булғас, урындағы власть вәкилдәренең дә йәшәйеше тиҫтәләрсә ептәр менән уға бәйле: юлдар, күперҙәр һалыу, рудниктар урынлашҡан ерендә мәктәп, медпункт, магазиндар төҙөү һәм башҡа мөһим эштәрҙе ғәмәлгә ашырыу трест иңенә төшә. Шулай итеп, Тау тресы урындағы властарҙың ярҙамынан тыш йәшәй алмаған кеүек, ауыл, төбәк шуралары ла трестың даими ярҙамына мохтаж.

Шуға күрә Башҡортостан тау тресы управляющийының абруйы кантонда ғына түгел, республикала ла ҙур. Уның һүҙенә ҡолаҡ һалалар, хәл ҡәҙәре ярҙам итергә тырышалар. Бына ошоға ышанып та, хөкүмәт йомоштарын башҡарғандан һуң, кантком алдында Үлмәсов Абдрахман Игебаев мәсьәләһен дә хәл ҡылмаҡсы... Етмәһә, икеһе лә – партияның Башҡортостан Өлкә комитеты ағзаһы, республика күләмендәге йыйылыштарҙа, хужалыҡ активтарында ошо төбәктең көнүҙәк мәсьәләләрен бер юҫыҡтараҡ, килешеп хәл итергә өйрәнгәндәр. Управляющий бөгөн дә һуңғы йылдарҙағы ошо рәүештә килешеп эшләү, уй-фекерҙәр берҙәмлегенә иҫәп тотоп килде.

Филипп Афанасьевич автомобилен туп-тура кантон идараһына борорға ҡушты. Уның менән күптән күрешмәгән кантон башлығы Самохин, үҙе әйтмәксе, «Совет Рәмиевы»н ҡушҡуллап ҡаршы алды. Урынынан тороп, бәләкәй өҫтәл артына күсеп, ҡунаҡ ҡаршыһына ултырҙы ла:

– Йә, Филипп Афанасьевич, был арала күҙгә-башҡа күренмәй, ниҙәр атҡарып йөрөйһөң? Үткән бюро ултырышына ла килә алманың, ҡайҙалыр йөрөп ҡалдың... Һинең партия тәртибен боҙа башлауың тураһында махсус ултырыш саҡырырға кәрәк булмаҫмы икән? – тип көлдө.

– Мин күптән совет батрагына әйләнгәнмен, көнө-төнө алтын, баҡыр тип сабам. Йыл һайын уларҙы ҡаҙып алыу планы арта, ләкин уға бинаән матди-материаль тәьмин итеү элекке кимәлдә ҡала бара. Транспорт етешмәй, электр энергияһы тураһында һөйләп тә тораһы юҡ. Һеҙ байҙарға баш эйеп килмәй, ни хәл итәһең? – тип мәрәкәләне управляющий.

– Бик бөлөнөп китмә әле. Һиндәй тормош беҙҙең төшөбөҙгә лә инмәй. Һин партия, совет власының батрагы булһаң, беҙ уның ысын ҡоло булабыҙ. Тыныс тормошто күргән юҡ, йоҡо теймәй, кантондың ун ике волосын урап сыҡҡансы ике аҙна ваҡыт үтә. Беҙҙә лә хәлдәр элеккесә. Кантон өсөн кредит алыу, игенселәрҙе ауыл хужалығы ҡорамалдары менән тәьмин итеү йылдан-йылға ҡатмарлаша, ә хөкүмәт икмәкте дауайлап ҡына тора. Бына бизмәнеңә һалып үлсәп ҡара: кемдең тормошо ауырыраҡ, беҙ кейгән ҡамыт мөйәтенең ҡайһыһы елкәне нығыраҡ һуға, – тип Самохин тулы битенә йылмайыу йүгертеп, ҡалын елкәһенә усының ҡыры менән һуғып алды.

– Улайға китһә, икебеҙ ҙә тимерлек һандалы менән сүкеш араһындағы совет батрактарына әйләнгәнбеҙ. Һин минең эште күҙ алдына яҡшы килтерәһең бит. Баҡыр планы артҡандан-арта, уны бит ябай таштан иретеп булмай. Баҡыр рудаһы – колчедан кәрәк. Ә уның ятҡылыҡтары йыл һайын бөтә, ярлылана бара. Ул ятҡылыҡтар ҡайҙа? Һинең көньяҡтан көнсығышҡа йәйрәп ятҡан кантон ерҙәре ҡуйынында. Ә был ерҙәргә һин хужа! Яңынан-яңы ятҡылыҡтар асмайынса, планды үтәп булмай. Бына шул саҡта һин, волость етәксеһе булараҡ, тресты мөмкин тиклем талап ҡалаһың да инде. Кемгә күпер, кемгә юл, бәғзеләренә клуб, медпункт кәрәк. Шунһыҙ һеҙҙән ер алып булмай. Ер булмаһа – разведка туҡтай, эшкәртелгән ятҡылыҡтарҙы ҙурайтып булмай. Һеҙҙең халыҡ ер өсөн ғүмер буйы һуғышҡан, һәр бер метры өсөн һушыңды алырға әҙер.

– Башҡаса нисек булһын, уларға ла йәшәргә кәрәк бит.

– Шулай ҙа ул...Тик беҙҙе талауҙың да сиге булырға тейештер бит. Батша заманында ерҙе Рәмиев һымаҡ байҙар крәҫтиәндәрҙән һатып алһа, мин, совет предприятиеһының етәксеһе булараҡ, шулай уҡ уны һатып алырға мәжбүрмен. Бында ниндәй айырма бар? Айырма тик шунда: әгәр Шакир Рәмиев ер өсөн халыҡҡа мәсет, сиркәү төҙөһә, мин клуб, магазин, мәктәп төҙөтәм. Мәгәр ул сереп байыған миллионер булған.

– Бер нәмә лә үҙгәрмәне, элек тә, бөгөн дә барыбер, тиһең инде, – тине Самохин, йылмайып.

– Барыбер түгел. Минең хәл насарыраҡ. Сөнки ер өсөн Шакир Рәмиев үҙ кеҫәһенән түләгән, ә мин законһыҙ рәүештә дәүләт аҡсаһын түгәм дә аҙаҡтан ҡойроғомдо йәшерергә мәжбүрмен. Рәмиев әфәндегә алтын табыу ҡырҡ мәртәбә еңелерәккә төшкән. Бер һүҙ менән әйткәндә, һин мине ныҒыраҡ иҙәһең, ҡатыраҡ талайһың.

– Кит, мин, Йылайыр кантон комитеты секретары, һине талайым, тимәксе булаһыңмы? – Хахылдап көлөп ебәрҙе Самохин.

– Тап шулай, минең ысын талаусым нәҡ һин булаһың да инде!

Шулай итеп, үҙ-ара мәрәкәләп һөйләшеп алғандан һуң, Самохин аяғүрә баҫып Филипп Андреевичтың ҡулын дуҫтарса ҡыҫып алды. Был ярым шаярыу әңгәмәләрендә, әлбиттә, ысынбарлыҡ та юҡ түгел ине.

– Филипп Афанасьевич, артыҡ үпкәләмә инде, мин һинең тормошоңдо бер аҙ еңеләйтә алам да баһа!

– Ни рәүешле?

Самохин түш кеҫәһенән сылбырлы сәғәтен сығарып, уға ҡарап алды.

– Бында гәпләшеп ултырып, төштө еткергәнбеҙ бит! Әйҙә, ашап алайыҡ. Һиңә Йылайыр бәшмәге менән атаҡлы масал* билмәне бик һирәк эләгә бит, шуны тәмләп киләйек әле.

– Әле мин йомоштарымды хәл итеп бөтөрмәгәнмен бит, – тине Үлмәсов, йөҙөнә борсолоу һыҙаттары сығарып.

– Бына шунда йомошларбыҙ ҙа. Уларҙы хәл итергә унда еңеләрәк тә булыр, бәлки. Киттек. Бер юлы машинаға ултыртып йөрөтөп тә ҡайтарырһың. Әйткәндәй, юл буйындағы яңы ашхананы ла күреп китерһең.

Самохин оло ҡунаҡты ашханаға алып китте. Ул Баймаҡтан килгән юл ситендә, Йылайыр түбәһенең аҫтындараҡ, урынлашҡайны. Улар арт яҡтан кантон етәкселәре инеп ашап йөрөй торған ун – ун ике кешелек ыҡсым ғына йыйыштырылған бүлмәгә инде.

– Ҡара-ҡара, нисек матур ғына оялап алғанһығыҙ һеҙ бында! – тине Үлмәсов, ғәжәпләнеүен йәшермәйенсә.

– Һиңә генәме ни айырым бүлмәлә әүәтләнеп йөрөргә. Һинең завод ашханаһында ла махсус ИТР-ҙар бүлмәһе бар ҙа инде, беҙ ниңә һеҙҙән кәм булырға тейешбеҙ. Беҙҙең Йылайырҙы ҡала тип йөрөтәләр, ә һинең хәҙерге Баймағың – тик эшселәр ҡасабаһы ғына. Айырманы һиҙәһеңме, Филипп Афанасьевич? – тине Самохин, ҡәнәғәт ҡиәфәт менән.

– Һиҙәм. Һиҙелеп кенә түгел, күренеп тә тора.

– Нимәһе күренеп тора һуң?

– Ана, бүлмәгеҙ түренә Ленин даһиҙы элеп ҡуйғанһығыҙ. Ул бит, туҡта, Йылайыр большевиктары мин һыҙған юлдан нисек баралар, күпме араҡы эсәләр икән, тип даими күҙәтеп торалыр, тим.

---

**Масал — элекке батша приказчигы Мосалев исеме менән ул яҡтағы урыҫтарҙы шулай атайҙар.*

– Һин һәр саҡ берәй нәмә уйлап сығараһың инде. Бындайға һин оҫта. Онотоп торамсы, әйҙә, ҡулдарҙы йыуып алайыҡ, – Самохин ҡулйыуғыс торған мөйөшкә ымланы. – Атыу, ашар алдынан ҡулдарын да саймай, тип һөйләп йөрөрһөң тағы.

– Белмәйем, һыйың нисек булыр әле? Һеҙҙең турала шуға ҡарап фекер йөрөтөргә тура килер.

– Улай тигәс, тырышмайынса булмай икән!

Өҫтәл артына уҙҙылар. Уларҙы көтәүелләп торған кеүек, түштәре ҡалҡып торған, сиртһәң ҡаны сығарлыҡ бер таҙа, сибәр ҡыҙ төпкө бүлмәнән йүгереп сығып ҡаршыланы.

– Беҙгә оло ҡунаҡ килде. Нимәләрең бар, барыһын да сығар. Сәй-мәйҙе лә онотма.

– Бер минут!

Бына улар алдында ике тәрилкә менән бәшмәк, ике сынаяҡҡа ҡушымта булып ҙур ҡорһаҡлы сәйнүк ултырҙы. Юлдан сарсап килгән Үлмәсов ике усы менән сәйнүкте тотто ла ғәжәпкә ҡалды.

– Иван Афиногенович, һин миңә әллә шишмә һыуы тәҡдим итәһең инде? Сәйең һыуыҡ та баһа.

– Эсеп ҡара, йылынырһың, был – беҙҙең фирменный сәй, – тип йылмайҙы кантон башлығы.

Сәйнүкте ҡулына алып, ике сынаяҡ өҫтөнә үтә күренеп торған көмөштәй ялтыр шыйыҡса ҡоя башлағанда танауына араҡы еҫе бәрелгәс тә, Үлмәсов йәнә көлөп ебәрҙе.

– Бына яңылыҡ! Урман кешеләре хәйләкәр була, тип мин әллә нисә тапҡыр ишеткәнем бар ине, ысынлап та шулай икән.

– Беҙ урман араһында ятҡас та, араҡыны ижау менән һемерә, тип уйланыңмы? – тине Самохин, үпкәләберәк. – Һеҙҙә генә ул араҡыны боғаҙынан тотоп, өҫтәлгә тыпылдатып ултыртып ҡуялар. Шунан «Коммунистар көпә-көндөҙ араҡы эсәләр» тигән ғәйбәт тарала.

– Ысынлап та, бындай асышты беҙҙә лә ғәмәлгә керетмәй булмай. Быны кантон начальниктары ғына уйлап сығарыуы мөмкин.

– Әйҙә, Филипп Афанасьевич, алдыңда торғанды күтәр ҙә һиңә ҡарап ятҡан бәшмәктәрҙе тәмләп ҡара. Ауыл менән ҡала дуҫлығы өсөн!

Улар сәкәштеләр ҙә сынаяҡтарын бер тынала йотоп ҡуйҙылар. Икеһе лә берҙәй, мунса эләүкәһендә сабынған шикелле, «ах та ух» килеп, ирендәрен түңәрәкләндереп, тындарын тышҡа өрҙө.

– Бигерәк тә шәп нәмәң булды был, Иван Афиногенович. Әллә һинең өсөн Һарыҡташта бындай эсемлекте махсус ҡыуалармы?

– Шулай булмай һуң? Крәҫтиән бишмәте кейеп йөрөһәк тә, беҙҙе Ырымбур яҡтары ла яҡшы белә. – Самохин бер аҙ борсаҡ шыттырып алды. – Әйҙә, әүәткә ынтыл. Икмәктән ауыҙ ит, ошо бүлмә өсөн айырым бешертәбеҙ беҙ уны. Ҡалалағы һымаҡ, аяҡ менән тапалған ҡамырҙан бешкән икмәкте ашамайбыҙ.

Бер аҙ ҡапҡылағандан һуң, билмән алып килделәр. Самохин сәйнүк тотҡаһына яңынан йәбеште.

– Иван, етеп тормаҫмы? – тип Үлмәсов аяғүрә баҫҡан Йылайыр хужаһына ҡараны.

– Әйҙә, был фани донъяла һыңар күҙ менән йөрөмәйек әле. Икәү булһын.

– Улайһа, яртыһынан ғына һал, – тип ризалашты башы шаулай башлаған управляющий.

Билмәнде татып ҡарағас, сәй эсер алдынан Самохин эшлекле әңгәмәгә күсте:

– Әйҙә, Филипп Афанасьевич, һөйләп ебәр, ниндәй елдәр, ниндәй йомоштар ташланы һине беҙгә? Туҡһан саҡрым ер үтеп, кантон башлығын ғына күрергә килмәгәнһеңдер бит.

– Әлбиттә. Ләкин, иң беренсе нәүбәттә, ысынлап та, һине күреү теләге килтерҙе бында мине. Шахталарҙа, бегун фабрикалары, баҡыр заводының төтөнлө цехтарында йөрөй торғас, күңел екһенеп китә, барлыҡ бөтмөштө бәҫ баҫа башлай, тыныслыҡҡа, иркенлеккә, таҙа һауаға мохтажлыҡ тыуа, – Үлмәсов туптура Иван Афиногеновичтың күҙҙәренә ҡараны. – Һиңә һөйләп тораһы юҡ, үҙең дә шундай уҡ ҡамытҡа егелгәнһең. Эштәребеҙ бик ҡатмарлы, ифрат яуаплы. Эдуард Янович* менән Әхсән Баймурзиевичтың* шылтыратмаған йәки телеграмма һуҡмаған көнө юҡтыр. Һиндә лә шулаймы, әллә беҙҙә генә шулай интектерәләрме?

– Беҙҙә лә шул инде. Икмәк, налог тип йәнде алалар. Бына тиҙҙән кулактарҙы боғаҙынан алырға әҙерләнеп ятабыҙ. Волостарҙа уларҙы раскулачивать итеү буйынса комиссиялар төҙөлә. Һәр ауылда кулактарҙың һаны дөрөҫләнә. Тиҙҙән уларҙы ҡайҙа, ҡасан оҙатыу мәсьәләләре лә хәл ителәсәк. Ошо уңай менән бәйле, кантонда төрлө хәл-ваҡиға, провокациялар йышайҙы. Ҡолаҡты ла, күҙҙе лә бик һаҡ тоторға тура килә. Сталин иптәштең Себергә йөрөп ҡайтыуынан һуң ағымдағы момент бик ҡырҡыулашты.

– Беҙ ҙә, сәнәғәт тармағына ҡараһаҡ та, хәл-әхүәлдең бик ҡырҡыу икәнен һәр күҙәнәгебеҙ менән һиҙеп йөрөйбөҙ. Рудниктарға, шахталарға ситтән һөрөлгән кешеләрҙе ҡабул итергә тура килер. Эшселәр етешмәй, беҙ уларҙы ҡайҙан алырға тейеш?

Ошо етди һөйләшеүҙән һуң Филипп Афанасьевич башҡа мәсьәләләргә күсте. Улар икәүләп кантон башҡарма комитеты һәм Башҡортостан Йөмһүриәте Халыҡ Комиссарҙары Советы төшөргән нарядты ҡарап сыҡты, уның волостар буйынса бүленешен тикшерҙе.

– Минең янда һандар юҡ. Мин уларҙы теп-теүәл иҫләмәйем, ләкин ылау һәм кешеләр бүлеп биреүҙә Башсовнаркомдың беҙгә ҡарата яңылыш мөнәсәбәте үтәнән-үтә күренеп тора. Кантон буйынса үткән йылғы дөйөм һан минең хәтерҙә. – Самохин бер аҙ уйланып алды. – Ул биш-алты меңдән артырға тейеш түгел, ә быйыл ете мең ярым ылау яҙып ҡуйғандар. Мин, Филипп Афанасьевич, һине нисек кенә ихтирам итһәм дә, ундай һанды үтәп сығыу мөмкин түгел һәм ул булмаясаҡ та. Бында быйылғы хәл-ваҡиға мөһим урын аласаҡ. Әгәр йыл тыныс булһа, партия синфи көрәш йәһәтенән кулактарҙы юҡ итеү һөжүменә күсеп китмәһә, бәлки, ул нарядты үтәмәгән хосуста ла, шул самаға еткерергә булыр ине, һиңә һөйләп тораһы түгел: ылау, кешеләрҙең байтағы шул ҡатламдар иңенә төшә. Ярлы-ялпының нимәһен алаһың, ул үҙе, ауыҙын асып, хөкүмәт ҡулына ҡарап тора.

– Уныһы шулай, билдәле. Ләкин беҙ ошоға тиклем һинең менән бер-беребеҙгә һырт ҡуйышмай, уртаҡ тел табып эшләп килдек, киләсәктә лә шулай булыр, тип ышанам, Иван Афиногенович.

– Тырышырбыҙ, әлбиттә. Ураҡ менән сүкеш берҙәмлегенә тап төшөрөргә юл ҡуймабыҙ. Әйҙә, шуны тағы ла бер аҙ нығытып ҡуяйыҡ. – тине Самохин һәм сәйнүккә ынтылды.

– Мин риза, – яуапланы Үлмәсов, эштең яртыһы хәл ителеүенә ҡәнәғәтләнеп.

---

* *Тәүгеһе — Башҡортостан Йөмһүриәтенең беренсе секретары, икенсеһе — Совнарком рәйесе Мөхәммәтҡолов.*

Әңгәмәселәрҙең мөнәсәбәттәре эскән араҡы тәҡәбелеһенә яҡыная, эҫеләнә барҙы.

– Иван Афиногенович, һин «Смирновская» тигән батша араҡыһын эскәнең бармы? – Үлмәсов күҙҙәре майлана башлаған кантон башлығына көтмәгәндә шундай һорау бирҙе.

– Һин нимә, әллә яңылышып бараһыңмы? Батшаның ҡолатылыуына ни заман, уның араҡыһын мин ҡайҙан табайым? Был – берҙән. Икенсенән, мин был һорауыңдың бер ниндәй мәғәнәһен күрмәйем. Булмаһа, аңлатып бир.

– Хәҙер, хәҙер аңлатам, Иван. Сабыр ит, – быға тиклем үҙен беше хисаплап йөрөгән Үлмәсовтың да быуын, тел шөрөптәре байтаҡ ҡына бушай башлағайны. – Эш шунда: һинең НКВД егеттәре бынан бер-ике ай элек Нәмәс волосы Ялан ауылының берҙән-бер коммунисын «уң тайпылыш»та ғәйепләп, ултыртып ҡуйғандар.

– Хәтеремдә, хәтеремдә...Быйыл март баштарында ГПУ начальнигы Брагинский миңә ул турала хәбәр иткәйне. Һинең коммунисың партияның Нәмәс волосы дөйөм йыйылышында яңы иҡтисади сәйәсәт буйынса Бухарин-Рыков ҡараштарын яҡлап сығыш яһаған. Мин ул контрҙы ҡулға алырға үҙем бойороҡ биргәйнем. Әллә һинең ул дошман менән берәй танышлығың бармы? Улай булһа, нишләп һин ошоға тиклем йомран һымаҡ йәшенеп яттың? Ул һинең танышың икәнен белгәндә, мин уға бармаҡ та тейгеҙмәгән булыр инем, биллаһи! Кантон менән бәйләнешең бар, бының өсөн бында килеп йөрөүҙең кәрәге лә булмаҫ ине. Әҙме ни донья мәшәҡәте?

– Иван Афиногенович, ул кеше минең Ялан зонаһында күҙ терәп торған берҙән-бер йүнле иптәш, намыҫлы коммунист ине. Әлбиттә, миңә уның партия йыйылышында нимә һөйләгәне ҡараңғы. Ләкин тикшереп тормай, уны туп-тура төрмәгә бикләүҙе мин һис аңлай алмайым.

– Бик яҡшы кеше инеме ни? Кисә ултыртһаҡ, бөгөн үк сығарып ебәрәбеҙ беҙ уны. Кантонда ундай хәлдәр булғылап тора: берәүҙе ултырталар, икенсеһен сығарып ебәрәләр.

– Игебаев бик тәртипле, иң мөһиме – беҙҙең власҡа йәне-тәне менән бирелгән кеше. Үҙ ауылында бергәләшеп ер эшкәртеү ширҡәте ойоштороп, ҙур уңыштар өмөт иткән кеше ине, – бер аҙ күңеле бушаған Үлмәсовтың тауышы ла һиҙелерлек йомшарҙы.

– Шунан?

– Шул. Бына ошо кешене НКВД ҡулынан йолоп алырға кәрәк. Ул беҙгә бик тә кәрәкле, файҙалы шәхес. Яңы асылған Баҡыр-Үҙәк руднигы тураһында беләһеңдер. Унда бергә бер булғайныҡ та кеүек. – Самохин, ризалығын белдереп, баш һелкте. – Беҙ булған саҡта шахтерҙар шахтаға төшөп яталар ине. Хәҙер улябыҡ шахтаның горизонты алтмыш-етмеш метрға етте. Баймаҡ заводына иң бай руданы Баҡыр-Үҙәк руднигы биреп тора. Мин уны ташыу өсөн көн һайын йөҙәрләгән ылау тотам. Хатта Орск эргәһендәге Ҡара Туғай ҡаҙаҡтары менән һөйләшеп, уларҙың ҡырҡ-илле дөйәле ылауҙарын да ошо эшкә йәлеп иткәнмен.

– Ярай, мин риза. Әйҙә, баяғы мәсьәләгә кире ҡайтайыҡ. Әле Игебаевтың шәхси фирҡә эше кантон бюроһында ҡаралғаны юҡ, былай булғас, беҙ һинең кешеңде законһыҙ рәүештә тотҡонда яҭҡырабыҙ, эйеме?

– Шулай шул! Ошо коммунист ярҙамы менән беҙ Яландың йөҙ дисәтинә һөрөнтө ерен ҡысҡыртып тигәндәй тартып алдыҡ. Етмәһә, рудник ана шул Абдрахман Игебаев етәкселек иткән ширҡәт икмәген ашап ята. Ә быйыл нимә булырын күҙ алдыма ла килтерә алмайым.

– Ни булды һуң, иген сәскәндәрҙер бит?

– Юҡ шул, Иван Афиногенович, уның башлығын ҡулға алғас, ширҡәт банкротлыҡҡа сыҡты. Бөтә мөлкәтен аукцион аша һатып ебәрҙеләр. Приискынан дүрт саҡрымда ятҡан ширҡәт юҡҡа сыҡҡас, рудникты туйҙырыр өсөн хәҙер әллә ҡайҙарҙан иген ташырға кәрәк. Бында минең тағы ла бер хатам бар. Баҡыр-Үҙәк эргәһендә үткән йыл ширҡәт тунға һөргән йөҙ дисәтинә ерҙе уларға бирмәй, йәнәһе лә, беҙгә тап ошо майҙанда разведка эштәре йәйелдерергә кәрәк, тип тартып алдым. Уларҙың ширҡәтен ғүмергә һөрөлмәгән икенсе урынға ҡыуып ебәрҙем. Бында мин ғәйепле.

– Улай булғас, әйҙә, ул кешеңде азат итәйек тә, ғәйебең булғас, үҙеңде ултыртайыҡ.

– Ысынлап та, шулай эшләһәгеҙ, ғәҙелерәк булыр ине. Нахаҡтан ғаиләһе лә, үҙе лә интекмәҫ ине. Әйҙә, Иван, мине ултырт! – тип Үлмәсов кинәт урынынан тороп, билендәге наганын, шунан партия билетын өҫтәлгә һалды.

Бер ваҡытта ла бындай тамашаны күрмәгән Самохин, ғәжәпкә ҡалып:

– Филипп Афанасьевич, ҡыҙмай тор! Наганыңды яңынан тағып ал, билетыңды кеҫәңә кире тыҡ. Тыныслан! – тине.

Самохин тиҙ генә сынаяҡтарҙы йәнә тултырҙы. Быныһы инде икеһе өсөн дә шыма китте. Ике етәксе оҙаҡ ҡына тымып ултырҙы, һәр кем үҙ фекерҙәренә бикләнде. Һуҙылған тынлыҡты беренсе булып Самохин боҙҙо:

– Быңа уйлап-уйлап ултырам да осона сыға алмайым. Баяғы һүҙҙе һин нишләп «Смирновская»нан башланың әле? Бында уның ни ҡыҫылышы бар?

– Бар шул, Иван, бар.

– Йә, сер булмаһа, һөйлә әле? – Самохин күҙҙәрендә ҡыҙыҡһыныу осҡондары уянды.

– Ниндәй сер булһын, тыңла... Шул Игебаев тигән егет һәр саҡ өҫтәлгә «Смирновская» ҡуя ине. Ну, малай, бер-ике йотһаң, үҙәккә тиклем үтә! Шулай ҙа икенсе көн бер ни һиҙҙермәй. Тән еңеләйеп китә, йәнәһе, һин әллә ниндәй ауыр йөктө бушатҡанһың, көн буйы осоп ҡына йөрөйһөң. Ул һиңә дәрт өҫтәй, көсғәйрәт бирә. Ә әле эсеп ултырған эсемлек һине баҫа, иҙә, рухты төшөрә, һинең барлыҡ бөтмөшөңдө моңһоулыҡ хисе солғап ала.

– Ә ул Игебаев дуҫың уны ҡайҙан алған икән? – тип һораны Самохин, ҡыҙыҡһыныуын йәшерә алмай. – Үҙенең заводы юҡтыр бит?

– Юҡ, әлбиттә, – тип көлөп ебәрҙе Филипп Афанасьевич. – Был иптәштең үҙенең бәләкәй генә махсус склады барҙыр, сөнки барған һайын ул өҫтәлгә «Смирновская» ултырта. Ғәжәп, малай!

– Уны берәй ваҡыт миңә лә тәмләп итергә насип булыр микән?

– Булыр, тик һин башта Игебаевты төрмәнән сығар. Шунан беҙ һинең менән икәүләп уға барып төшөрбөҙ. Үҙең күрерһең уның ихлас, намыҫлы икәнен. Әйткәндәй, Иван Афиногенович, һин был эште нисегерәк атҡарып сығармаҡсыһың?

– Уныһы – минең хәстәр. Уйлашырмын, хәл итермен. Шуның менән хуш итәбеҙме? Әллә тағы дауам итергә теләгең бармы, Филипп Афанасьевич?

– Юҡ, рәхмәт, Иван. Ошонда нөктә ҡуйайыҡ... Изге сәғәттә булһын!

Былай ҙа зәғиф кенә аяҡлы Үлмәсов ҡыйынлыҡ менән урынынан тороп, Самохинды бер ҡосаҡланы ла ишеккә табан атланы. Эштең асылын барлыҡ күңеле менән һиҙенеп ултырған шоферы Вася машинаһын болдорға уҡ терәп, хужаһын коридорҙа көтәүелләй ине. Филипп Афанасьевич ишектән күренгәс тә, уны ҡултыҡ аҫтынан аймап, автомобиль кабинаһына, алғы урынға, ултыртып ҡуйҙы. Кантон башлығы эскә башын тығып, Үлмәсовтың арыу ғына ҡыҙарған битенән үбеп оҙатып ҡалды.

***

Икенсе көнөнә эшкә килгәс тә, партияның Йылайыр канткомы секретары Самохин урындағы ГПУ начальнигын кабинетына саҡырып алды. Игебаев мәсьәләһе тураһында һүҙ барасағын Брагинский төҫмөрләй ине. Кисә Башҡортостан тау тресы управляющийының машинаһы кантон болдоры эргәһендә килеп туҡтағас та, күпте күргән Брагинский был «салыш аяҡ»тың ни өсөн таң менән партияның кантон комитетына килеү маҡсатын төшөнгәйне. Уларҙың яңы ғына төҙөлгән кантон ашханаһында оҙаҡ ҡына ниндәй һүҙ алып барыуы тураһында Брагинский һиҙенгәйне, тик әңгәмәнең нескәлектәрен белмәй ине, дөйөм һүҙ мотлаҡ Игебаевҡа ҡағыласағы ГПУ начальнигы өсөн асыҡ булды.

Башҡортостан тау тресы управляющийының ни рәүешле ошо төбәктә ҙур абруй менән ҡаҙанған Абдрахман Игебаев менән бәйләнешкә инеүе, үҙ ауылында төпләнергә хыялланған был коммунисҡа трест етәксеһенең йорт төҙөүҙә ихлас ярҙамы – барыһы ла һары бөҙрә башлы Брагинскийға мәғлүм. Хатта Баҡыр-Үҙәккә һуңғы килгән саҡта Үлмәсовтың Ялан ауылына юл һуғып, Абдрахмандың ҡатынына инеп сығыуы, мул ғына бүләктәр тапшырыуы, рудник дауаханаһында был ҡатын менән әңгәмәһе, ул ғына ла түгел, управляющийҙың Маргаритаға «Абдрахман эше» менән шөғөлләнергә биргән вәғәҙәһенә тиклем бөтә төбәктәрҙә оя ҡорған «ГПУ һайыҫҡандары» начальник ҡолағына шиҡрыҡлап киткәйне инде. Ләкин ошондай йәшерен тәфтиш, шымсылыҡ, айырым кешеләр артынан һағалау-бағауыл ойоштороуҙа «тешен ҡойған» Брагинский, күрәһең, ҡартайып барыу ғәләмәтенәндер, был юлы, ашығып, ҙур хата ебәрҙе. Партияның кантком секретары һәм Башҡортостан Йөмһүриәтендә ҙур абруйлы төҫлө сәнәғәт етәксеһенең күптән таныш, таныш ҡына түгел, дуҫ булыуҙарын ГПУ начальнигы һанға һуҡмайыраҡ ташлаған. Уйлана-уйлана, Брагинский башын ватты. Ватырлыҡ та шул. «Барыһы ла алдан һыҙылған план буйынса бара ине, ҡулым аҫтында эшләгән наҙан, тупаҫ «урман айыуҙары» барыһын да селпәрәмә килтерҙеләр. Ҡулға эләгер-эләкмәҫтән, Игебаевты Нәмәс юлында туҡмап, эште һәләк иттеләр. Хәҙер, теләйһеңме – теләмәйһеңме, миңә ошо Урал аръяғының абруйлы ике етәксеһе менән төкөшөргә, кәрәк икән – яғалашырға тура киләсәк. Игебаевтың ҡаты туҡмалып больницала ятыуы, ошо көнгә тиклем уның фирҡәлек эшенең асыҡланмауы эсте бошора. Әгәр ошо үҙең тағатып ебәргән йомғаҡты ваҡытында йыйып, осон йәшерергә өлгөрә алмай ҡалһаң, шыр урман араһында ятҡан Йылайыр төрмәһендә үҙеңдең башың сереүе бар»,– тип күңелһеҙ генә уйланды ГПУ начальнигы. «Эх, Брагинский, Брагинский… Ошо хәлгә ҡалырмын, тип кем уйлаған? Ҡырҡ ятып, ҡырҡ торғанда ла бындай хәлдең килерен кем белгән? Эй, яҙмыш, яҙмыш… Ә бит ҡасандыр Рәсәй Ваҡытлы Хөкүмәтенең эске эштәр министры әмерен генә үтәп йөрөгән киң яурынына жандармерия полковнигы погондары таҡҡан ҙур шәхес инең бит. 1917 йылдың июль айында «Большевиктар башлығы Владимир Ленинды табып, ҡулға алырға!» тигән бойороҡ тап миңә, Якиман районы жандармерия начальнигы Брагинскийға, тапшырылғайны бит. Шунан һуң аҫҡа тәгәрәй-тәгәрәй, һин ошо Йылайыр урмандары араһында аҙашып ҡалдың. Элек һин кем инең дә бөгөн ниндәй байғош көнөнә төштөң? Батша хөкүмәтенең, Рәсәй империяһының беренсе дошманы Ленинды ҡулға алыу менән Урал аръяғы далаларында юғалып ҡалған Ялан ауылының хәйерсе товарищество башлығы, ниндәйҙер бер наҙан башҡорт Игебаевты хөкөмгә тарттырыу эше менән ниндәй арауыҡ!? Уның тәүгеһе ете ҡат күк йөҙөндә эшләнһә, икенсеһе – ҡараңғы соҡор төбөндә. Сағыштырырлыҡмы ошо ике ара: күк йөҙө һәм ҡомаҡтар мыжғыған тәрән соҡор төбө? Әйткәндәй, улар тик бер яғы менән генә сағыштырырлыҡ

ваҡиғалар: унда ла, бында ла минең яҙмышыма емергес бәреү. Тәүгеһе күк күкрәп йәшен сатнауы булһа, һуңғыһы хром итегеңдең сакауай табаны менән үҙ тиҙәгеңде бысрата баҫыу…»

Һәр саҡ ыҫпай кейенгән Брагинский ҡуйы йөнтәҫ ҡаштары аҫтында тәгәрәп торған йәшел күҙҙәрен кантон башлығына төбәне. «Ҡалай һөҙөп ҡарай, ҡәһәрең, әллә кисәге Үлмәсов менән төшөрөп ултырғанды һиҙендеме икән?» – Иван Афиногенович, үҙ уйынан үҙе шөрләгәндәй, урынында борғоланып алды. Ә Брагинскийҙың төҫө-ҡиәфәте һәр саҡтағыса тыныс, кәкрерәк танауы аҫтындағы бармаҡ баҫымындай аҡ мыйығы ла ентекләп ҡырылған. Һәр ваҡыт наган урынына биленә ялтырауыҡ Коровин пистолеты ла портупея ҡайышына эленгән. Уның күҙгә кеүек ялтырап, йыуан балтырҙарын ҡыҫып торған хром итектәрен күргәс, Самохин байтаҡтан бирле таҙартылмаған, туҙанға батҡан ботинкаларын өҫтәл аҫтына тәрәнерәк йәшерҙе.

– Тыңлайым. Диҡҡәт менән тыңлайым, – тип, ҡалыная башлауына ҡарамаҫтан, әле мыҡты кәүҙәһен тура тотҡан Брагинский үксәләрен шаҡыны.

– Ултыр, Исаак Яковлевич, – тип кантон хужаһы урын тәҡдим итте. ГПУ начальнигының тулы битендә тулы тыныслыҡ, үҙ бөтмөшө менән ҙур ҡәнәғәтләнеү һыҙаттары төҫмөрләнде. – Йә, кантон биләмәләрендә бөгөнгө көндә ниндәй хәлдәр бар? Ул-был ғәҙәттән тыш ваҡиғалар юҡмы?

– Барлыҡ ун ике волостан да бөгөнгә мәғлүмәт йыйып бөтөрә алманыҡ. Ләкин ҡайһы бер ваҡиғалар хаҡында әйтергә була.

– Йә, йә, Исаак Яковлевич!

– Сталин иптәштең Себер яҡтарында йөрөп ҡайтыу ваҡиғаһы урындағы кулактарҙы, юғары ҡатлам кешеләрен ныҡ һағайта төштө. Ауыл кулактары быйыл йыл да сәсеп килгән баҫыу майҙандарын ҡырҡа ҡыҫҡартырға тотондо. Ырымбурға яҡын ауылдарҙа иген йәшереү осраҡтары асыҡланды.

– Ә нишләп Ырымбур тирәһен айырып әйтәһең?

– Эш шунда: Яйыҡ буйы казактары беҙҙең башҡорт ауылдарындағы байҙарға ҡарағанда алданыраҡ һиҙенә, йылдамыраҡ эш итә. Ә урман-тау зонаһына был шипкерт әле барып етмәгән.

– Тағы ниҙәр бар?

– Беҙҙең агентура мәғлүмәттәре буйынса, бай ҡатлам ғына түгел, урта хәлле ауыл кешеләре лә малдарын һуя башланы. Шул арҡала ауыл баҙарҙарында иттең хаҡы күпкә арзанайҙы.

– Ә был ваҡиғаның ағымдағы момент менән бәйләнеше ниҙә?

– Бында туранан-тура бәйләнеш бар. Ни өсөн тигәндә, көтөүлектәр, болонлоҡтар әҙ урында хәлле кешеләр ошоға тиклем ихаталағы малын, нигеҙҙә, иген, атап әйткәндә, һоло, арпа ашатып тәрбиәләне. Иген баҫыуҙарын ҡыҫҡартыу сәбәпле, байҙар келәтендә хәҙер был культураларҙың запасы байтаҡҡа кәмене. Был инде ауыл малы һанының ҡырҡа кәмеүенә килтерҙе. Бигерәк тә тартыу көсө – аттар һаны кәмей.

«Күрҙеңме һин уны! Үҙ ҡулы менән бер теүәтәй ҙә иген сәсмәгәненә ҡарамаҫтан, ауыл хәлдәрен һыу һымаҡ белә. Ә үҙе – оҙон ғүмер Мәскәүҙә йәшәгән кеше. Беҙҙең урындағы туңбаш түрәләрҙең береһе-бер кантондағы хәл-ваҡиғаларҙы ошолай асыҡ итеп миңә еткергәне юҡ. Уларҙың күбеһе байҙарҙың балын, араҡыһын эсеп, был ҡатлам ниндәй иҡтисади үҙгәрештәр кисереүе хаҡында уйына килтергәне лә юҡ», – тип уйлаған Самохин:

– Тағы ниҙәр бар? – тип һораны.

– Һөйләй башлаһаң, донъя хәле ҡатмарлы бит ул, көн һайын тигәндәй тормош үҙгәреп тора. Юғары ҡатлам һәм уның эйәрсендәрен Сталин иптәштең

икмәк әҙерләү мәсьәләһенә бәйле «Правда» гәзитендә баҫылып сыҡҡан мәҡәләһе ныҡ һағайтты. Ундай кешеләр араһында элекке вайымһыҙлыҡ бөттө. Хәҙер улар көндәлек эштәрен ҡараңғы ваҡытҡа күсерҙе. Шуға күрә беҙҙең бөтә оператив төркөмдәрҙең эшен дә төн мәленә күсерергә тура килде, – тип ентекле яуапланы Брагинский.

– Шымсылар, ауылдағы «күҙ-ҡолаҡтар» төндә эшләргә, көндөҙ ял итергә мәжбүр, тип әйтмәксеһеңме?

– Нәҡ шулай. Байҙар, ағымдағы мәлде һиҙеп, ашығыс рәүештә үҙҙәренең мөлкәтенән ҡотолорға тырыша.

– Аңламаным. Асыҡлабыраҡ һөйлә әле.

– Эш шунда, Иван Афиногенович: ауылдың «һары ҡорттары» мал менән бер ҡатарҙан йорт-ҡураһын да һата. Аҡса туплайҙар. Байыш волосының бер нисә кулагы үҙҙәре йәшәгән алты мөйөшлө йортон һатып та өлгөрҙө. Оҡшаш хәлдәр башҡа волостарҙа ла һиҙелә. Юғары ҡатлам кешеләре, мөлкәт һатып, хосуси милкенән бушанырға, ҡотолорға тырыша. Ҡайһы бер ауылдарҙа бындай бәндәләр, үҙҙәрен ярлы уклад кешеләре хисабына индереп, ярлы-ялпы сәкмәнен кейеп, хөкүмәттән хатта кредит һорарға баҙнатсылыҡ итә.

– Эйе, эйе. Шулай итеп, кантон биләмәләрендә иҡтисади хәл кинәт үҙгәреш юлына баҫты, ауыл хужалығында аҙыҡ-түлек етештереү кимәле түбәнгә тәгәрәйәсәк, тимәксеһең инде? Ә ундай әҙәмдәр үҙ йорт-ҡураһын кемгә һата һуң?

– Кемгә булһын, төрлө фәҡир-фоҡораға. – Самохиндың битендә тағы ла аңламамыш һыҙаттары беленде. – Уларҙан урыҫ ҡапҡалы, ике парадлы болдорҙан ғибәрәт йорттарын аҡсалы кешеләр, сауҙагәрҙәр генә түгел, беҙҙең совет учреждениелары ла һатып ала. Ошо көндәрҙә генә кантондың финанс бүлеге, Сосновка кулагының йортон һатып алып, үҙ учреждениеһына төкәтмә һуғып ята.

– Эйе, шулай. Ә был процесҡа берәй төрлө законлы тоҡҡарлыҡ яһап булмаймы? – тип һораны Самохин.

– Хәҙергә рәсми рәүештә бер ниндәй ҙә күрһәтмә юҡ. Шулай итеп, тиҙҙән башланасаҡ раскулачиваниенан беҙҙең кантон артыҡ файҙа ала алмаҫ... Ул мәлгә өлгөр кулактар төп мөлкәтенең күбеһен осороп бөткән буласаҡ. Хөкүмәткә уларҙың милегенең ҡалдыҡтары ғына эләгәсәк. Ҡаҫмарт, Һүрәм, Һаҡмар буйындағы он тартып ултырған һыу тирмәндәрен һатыу башланды хәҙер. Оло Ҡыҙыл буйындағы Ялан ширҡәтенең һыу тирмәнен Магнитныйҙа йәшәгән бер сауҙагәр алырға ныҡыша...

Был ширҡәт тураһында һүҙ сыҡҡас, кантком секретары, йоҡоһонан уянғандай, һиҫкәнеп китте. Ә быны хәйләкәр Брагинский юрый хәбәр итте, үҙе кантком секретары был яңылыҡты нисек ҡабул иткәнен диҡҡәт менән күҙәтеп торҙо. Игебаев эше буйынса иртә менән уны канткомға саҡырырға тейешлеген йылғыр Брагинский Үлмәсов ашхананың ҡунаҡ бүлмәһендә кисә ултырғанда уҡ мейеһенә һалып ҡуйғайны. Уның менән оҙон-оҙон һүҙ ҡуйыртып ултырыуын ГПУ начальнигы кантон хужаһының Игебаев ваҡиғаһына тура тотонорға баҙнатсылыҡ итмәүе, ҡойроҡ йәшерергә маташыуы менән аңлатты.

– Әйткәндәй, Абдрахман Игебаевтың эше ни рәүешле тора? Нишләп бөгөнгө көнгә ҡәҙәр материалы тоҡҡарлана. Уның фирҡә ағзалығын хәл итеп ҡуйырға күптән ваҡыт түгелме һуң? – тип Самохин аҫҡы ирен сите менән генә йылмайған һын күрһәтте.

«Бына ошонан башларға кәрәк ине һиңә әңгәмәңде, секретарь иптәш, ҡойроҡ борғоламайынса ғына!» – тип уйланы Брагинский һәм, уйлағанын белдермәйенсә, етди генә һөйләй башланы:

– Ул кеше, беҙ уйлағанса, бер ҡатлы ғына булып сыҡманы. Яландан сыҡҡас,

Нәмәскә етерҙән алда кесе ярауға сананан төшкән Игебаев ҡарағас төбөнә йығылып, башын ярҙы. Был хәл – асыҡтан-асыҡ симуляция, уны башҡаса баһалап булмай. ГПУ хеҙмәткәрҙәре тәүге ярҙам күрһәтеп, иҫен юғалта башлаған Игебаевты тиҙ генә земский больницаһының баш врачы ҡарамағына тапшырҙылар. Ул контр хәҙерге көндә Нәмәстә дауаланып ята.

– Нисек инде улай? Уның янында кешегеҙ юҡмы ни? Әгәр уның менән берәй хәл булып ҡуйһа, нишләрһегеҙ?

– Ул яғы уйланылған. Нәмәс больницаһының баш врачы «Тәфтиш аҫтындағы Игебаев тулыһынса минең яуаплылыҡта» тигән рәсми ҡағыҙ биреп ебәргән. Әлегә был мәсьәлә ошо рәүешле тора.

– Аңлашыла, аңлашыла, – тип Самохин нишләптер Брагинскийға һынасыл ҡарап алды ла бармаҡтарын быялаға сиртеп ҡуйҙы. – Ә волоста уның фирҡә мәсьәләһен ҡарамағандармы икән?

– Унһы минең өсөн ҡараңғы. Игебаев – сәйәси енәйәтсе. Минең ҡулда кантон прокурорының уны хөкөм аҫтына алыу тураһында ордеры бар, шул еткән, – тип Брагинский әңгәмәне рәсми юҫыҡта тамамлап ҡуйырға тырышты.

– Ярай, хәҙергә... Һинең кантком етәкселегенә бер ниндәй ҙә һорауҙарың юҡмы?

– Юҡ, әлегә юҡ.

Кантком секретарына, ысынлап та һорау биреүҙең мәғәнәһе юҡ ине, Брагинский был хәлде үҙе өсөн күптән асыҡлағайны. Әкрен генә идараһына йәйәүләп ҡайтып барған ГПУ начальнигының башында төрлө уйҙар сырмалды: «Эй, Самохин, Самохин. Уның фирҡә хәлен минән һорап ултыраһың. Абдрахман Игебаевтың шәхси эшен ҡарап, Нәмәс волкомы бюроһы күптән инде уны фирҡәнән сығарып ташланы. Был миңә икенсе көнөнә үк мәғлүм булғайны инде. Ә һин, кантком секретары була тороп, ошо көнгә ҡәҙәр ул мәсьәләлә томана көйөнсәһең. Батша прапорщигы Кейекбаев һиңә ҡарағанда күпкә аҡыллыраҡ, алыҫтан күрә. Игебаев хаҡында материалды кантколға ебәрмәгән, сөнки шикләнә. Беренсе булып башына туҡмаҡ алаһы килмәй. Батша хакимиәте һәм Совет власының ғәрәсәтле ваҡиғаларын үҙ башынан кисергән тәжрибәле юрист Исаак Брагинскийҙың бындағы урман төпкөлөндә айыу шикелле үҙ өңөнә бикләнеп, айҙар буйы табан имеп ятырға хаҡы бармы? Юҡ. Донъя йөҙөндә иң уҡымышлы, мәғрифәтле һәм йылғыр, хәйләкәр һәм отҡор халыҡтың алдынғы вәкиле булараҡ, ошондай ҡатмарлы хәлдә ҡул ҡаушырып, яҙмыш ҡушҡанын көтөп ултырырға тейешме Брагинский? Юҡ, әлбиттә! Хәрәкәт итергә, кантком кешеләренән элгәре Абдрахман Игебаевты күрергә, һөйләшергә кәрәк. Уның хаҡында ГПУ кешеләре сығарған версияны Игебаевтан шәхсән раҫлатыу мотлаҡ. Ниндәй саралар менән булһа ла. Ашығырға, был эште тиҙ хәл итергә...»

***

Канткомдан ҡайтыу менән, Брагинский үҙ күсеренә ат егергә ҡушты ла бер аҙ уйға ҡалды. Яңғыҙ китергәме, әллә берәй кеше алырғамы? Йылайыр менән Нәмәс араһы Петербургтың Нева проспекты түгел. Юлда урман тулған бандиттарҙың ҡорбаны ла булыуың мөмкин. Ул үҙе менән яңы ғына Өфөнән Йөмһүриәттең ГПУ начальнигы Кульбитский практикаға ебәргән йәш юрист Зеликманды алырға булды. Ләкин практикант ошо хәбәрҙе ишетеү менән ҡойолоп төштө, сөнки Урал ҡараҡ-бандиттарҙың ояһы икәнлеге тураһында ул бында килгәс тә әллә ниндәй шөбһәле хәбәрҙәр ишетеп өлгөргәйне. Шуға күрә, Брагинскийҙың бойороғон ишетеү менән, башын ауырыуға һалды. Ләкин үҙ буйһоноусыһының һап-һау икәнен үтә күреп торған Брагинский ҡаты ғына әйтте:

– Борғоланма. Хәҙер үк йыйын. Бында беҙҙең милләт вәкилдәренең яҙмышы

хәл ителә торған ваҡиға тора алда. Әгәр мин бынан китһәм, һеҙҙе барығыҙҙы ла һепереп, Йылайыр ярынан осорасаҡтар. Йәһәт бул!

Начальниктың «милләт яҙмышы» тураһында бигүк аңлайышлы булмаған һүҙе Лев Зеликманды шундуҡ ризалыҡ бирергә мәжбүр итте. Ихатала ҡыңғырау тауышын ишеткәс, Брагинский урынынан һикереп торҙо ла күсергә асыҡ тәҙрәнән: «Ҡыңғырауҙарыңды дыңғырлатма, дуғанан сисеп, ҡалдырып кит!» – тигән әмер бирҙе.

Шунан ул ярҙамсыһын саҡырып, бер-ике көнгә Байыш волосына мөһим эш менән барып ҡайтырға тейешлеген белдерҙе. Тройка ҡапҡанан атылып сыҡҡас та, көньяҡҡа, Байыш йүнәлешенә, ҡарай юл тотто. Йылғаға төшөп етер алдынан начальник аттарҙы уңға күтәрелгән тыҡрыҡҡа, йәғни Нәмәс волосына һуҙылған юлға төшөрөргә ҡушты.

– Нәмәскә! Ялан юлы менән түгел, урманға ҡарай тарт.

Хужаһының һәр саҡ юл яҙҙырып йөрөүенә күнеккән башҡорт күсере уның уйын шундуҡ аңлап алды. Баймаҡ волосы Йылым-Ишбирҙенең урман юлына төшкәс кенә, Брагинский рессорлы көймәлә юлдың һәр шипкертенә лә һеркелдәп килгән йәш юлдашына мәсьәләнең асылын төшөндөрөп бирҙе. Һүҙ аҙағында «Әгәр ошо «алыш» та кантком менән управляющийҙың яғы еңһә, был кантон ГПУ-һындағы барлыҡ беҙҙең милләт хеҙмәткәрҙәрен осаларына шарт тибеп, Бердичевҡа ҡыуасаҡтар», – тине Исаак Яковлевич, мәғәнәле ҡарап. Ҡарпайып торған ҡолаҡтарын остазы ауыҙына терәп, хәбәр тыңлап килгән бөҙрә баш Зеликман, ризалығын белдереп, баш ҡаҡты.

– Бына шулай ул, Лева, тормош. Йәшәү – һәр саҡ көрәш ул. Беҙгә быуаттар буйына ҡаты һынауҙар үтергә тура килде. Батша заманында ла беҙгә еңел булманы, ул саҡта ла беҙҙе ҡыуып йөрөттөләр. Совет власы ваҡытында ла беҙҙең урын түр башында булмаясаҡ. Күреп, ишетеп йөрөйһөңдөр: Мәскәү, Ленинград, Киевта беҙҙекеләрҙең тетмәһен тетеп яталар. Лев Борисович Бронштейндың Сталин тарафынан ҡайҙа һөрөлгәнен ишеткәнһеңдер бит?

– Юҡ, Исаак Яковлевич. Ысынында мин уның кем икәнен дә белмәйем.

– Ай-бай, һиңә оят түгелме ни, большевиктар партияһы юлбашсылары араһында Лениндан ҡала икенсе урында торған бөтә донъя йәһүдтәренең атаҡлы остазын белмәҫкә? Украинаның Бобринец районынан сыҡҡан дворян балаһы Троцкий-Бронштейндың исеме бар донъяға мәғлүм. Беҙҙең контораға көн дә килеп торған гәзиттәрҙе уҡымайһыңмы ни?

– Юҡ, Исаак Яковлевич, уҡымайым шул.

– Партия, Совет власы органдары нәшер иткән гәзиттәрҙе лә ҡарап бармағас, ни уҡыйһың һуң?

– Дөрөҫөн әйткәндә, мин һөнәрем буйынса әҙәбиәтте даими уҡып торам, әгәр ваҡыт ҡалһа, Талмудты уҡырға тырышам.

– Һин нимә, Совет власы һине Мәскәү синагогаһына* раввин** итеп ҡуйыр тип көтәһеңме ни? – тип рәхәтләнеп көлөп ебәрҙе аптыраған Брагинский.

– Улай булһа, яҡшы булыр ине. Мин бит, был һеҙгә мәғлүм, раввиндар тоҡомонан. Раввин булыу – минең хыялым.

– Беләм дә ул, ләкин һин был хыялыңдан ваз кис! Һинең ошо алйот башыңда йөрөткән өмөтөңдө берәйһе ишетеп ҡалһа, иртәгә үк эштән ҡыуып сығарасаҡтар. Ә инде раввин балаһы икәнеңде кеше араһында ысҡындырһаң, миңә һине ҡулға алып, Йылайыр төрмәһенә ултыртырға ҡушасаҡтар. Төшөндөңмө?

---

**Синагога — йәһүдтәрҙең ғибәҙәт ҡылыу урыны.*

** *Раввин — синагога хужаһы, ғибәҙәт алып барыусы дини зат.*

– Төшөндөм дә ул, ләкин Аллаһыҙ дәүләтте, динде танымаған хөкүмәтте теге донъяла ҡаты һынауҙар көтә бит.

– Бындай юҡ-бар хәбәрҙе кешегә һөйләй күрмә. Беҙҙең дәүләттең, йәмғиәттең идеологияһы атеизм икәнен һин, брат, ошо көнгә тиклем ишетмәнең юҡ инеме ни?

– Былай университетта һеҙ әйткәнсә уҡыттылар-уҡытыуын, ләкин мин быны тик имтихандар тапшырыу өсөн генә уҡыным.

– Да... Беҙҙә бына ниндәй кеше практика үтеп ята икән, белмәгәнмен. Әгәр һин ошо иҫәр фекерҙәреңдән ҡотола алмаһаң, киләсәктә урының бик алыҫта, Аҡ диңгеҙҙәге Соловки тигән ерҙә, буласаҡ.

– Ә беҙ үҙебеҙ өсөн дини кадрҙар әҙерләмәһәк, СССР-ҙағы йөҙәрләгән синагогаларҙа кем эшләр? Аллаға кем тоғро хеҙмәт итер?

– Ҡабатлайым: юҡ-бар нәмә менән ҡанғырма. СССР – атеистик дәүләт, уға раввиндар ҙа, поптар ҙа, муллалар ҙа кәрәкмәй. Әле хөкүмәттең уларға ҡулы теймәйерәк тора, уның һеҙҙең һымаҡтар менән шөғөлләнергә ваҡыты юҡ. Культура революцияһы байрағы аҫтында ул барлыҡ ғибәҙәтханаларҙы: синагога, мәсет, сиркәүҙәрҙе тиҙҙән емерәсәк, ер менән тигеҙләйәсәк. Ә инде имен ҡалғандарының манараларын ҡолатып, урындағы хакимиәт уларҙан клуб йәки халыҡ йорттары яһаясаҡ, ә ҡайһы урындарҙа уларҙы мал ҡураһы итеп файҙаланасаҡтар.

– Мин... ышанмайым, – тине практикант.

«Был малай ипкә килерлек әҙәм түгел. Бик йәл, бының эсендә нимә ятҡанын алдараҡ белмәгәнмен. Ҡайтҡас уға ыңғай аттестация яһарға ла тиҙерәк Йылайырҙан олаҡтырырға кәрәк. Мин етәкселек иткән ГПУ-ла дини фанатик эшләгәнен белеп ҡалһалар, тиремде тунарҙар». Нәмәскә барып еткәнсә Брагинский көймәлә үҙе менән йәнәш талғын ғына тирбәлеп килгән Лев Зеликманға бер һүҙ ҙә өндәшмәне һәм үҙе менән был шикле кешене юлға алыуына ныҡ үкенде.

Аҡ күбеккә батҡан аттарҙы ғүмере буйы күсер булып Урал юлдарын күп тапаған Айытбай земство дауаханаһы болдорына терәне. Билдәле, был йөрөк, талымһыҙ аттар менән Нәмәскә көн яҡтыһында уҡ етер ине, ләкин, Этҡол волосына ҡараған Яйыҡбай ауылына килеп еткәс, Брагинский башын сығарып, бер ҡояшҡа, бер сәғәтенә ҡарап алды ла аттарҙы яйлатырға ҡушты. Шуға күрә Нәмәс волосы учреждениелары урынлашҡан ярайһы ғына бейек түбәгә улар эңер төшкәс кенә күтәрелде. Юл буйы төрлө күңелһеҙ уйҙарға күмелеп ултырған Брагинский көймәнән һикереп төштө лә ян-яҡҡа ҡаранып алды. Партияның волком бинаһында бер ниндәй ҙә ут янмағанына тамам ышанып, ул дауахананың ҡыҫынҡы ғына коридорынан юғарыға күтәрелде. Өҫтө быяла менән бүленгән ишектән шәм яҡтыһы коридор стенаһына шәүлә төшөрҙө. Бына яуырынан кәкрәйгән бер кешенең шәүләһе үтеп китте. Брагинскийҙың йөрәге жыуу итеп ҡалды. «Бынығы ҡарт доктор. Бәлки, минең кешеләр һөйләүенсә, теге мыҡты Игебаев та бында ултыралыр» – тип уйлап, ГПУ начальнигы тағы бер аҙ көтәүелләп торҙо. Ләкин икенсе кешенең күләгәһе күренмәне. Сыҫҡан аңдыған бесәй кеүек, Брагинский, урынынан йомшаҡ ҡына ҡуҙғалып, ишеккә килде. Бүлмәлә доктор бер үҙе генә ине. Өҫтәл артында ниҙер яҙып маташа. Исаак Яковлевич ҙур һаҡлыҡ менән тәҙрә сиртте.

Кинәт һиҫкәнеп торайған доктор талған күҙҙәрен ишеккә төбәп: «Рәхим итегеҙ!» – тип өндәште. ГПУ хеҙмәткәрҙәренең килерен көнө-төнө көтөп ултырған доктор өҫтөнә хром кәжән, портупеяһына наган таҡҡан хәрби кейемдәге кешенең етеҙ генә ишек аша уҙыуын тыныс ҡабул итте. Оҙон юл буйы батша заманында

университет тамамлаған берҙән-бер доктор менән нисегерәк һөйләшергә тейешлеген ҡат-ҡат башынан үткәргән ГПУ начальнигы, һис бер икеләнеп тормайынса:

– Мин – кантон ГПУ-һы начальнигы Брагинский Исаак Яковлевич, – тип кеҫәһенән мөйөшөнә ураҡ-сүкеш төшкән ҡыҙыл ҡатырғалы танытмаһын һуҙҙы.

– Юҡ-юҡ, кәрәкмәй. Ышанам, – тине Аполлинарий Христофорович, мәрмәр һымаҡ аҡ бармаҡлы ҡулдарын күтәреп. – Мине килеүегеҙҙең маҡсаты ғына ҡыҙыҡһындыра, – тип тә өҫтәне.

– Хөрмәтле доктор, Һеҙҙең ошо күркәм, данлыҡлы больницағыҙҙа хөкөм аҫтына алынған Игебаев атлы кеше ятырға тейеш. Минең бурысым – уның ошо сәғәттә ниндәй хәлдә булыуын, ниндәй сирҙән дауаланыуын асыҡлау. Иң мөһиме – тәфтиш аҫтындағы ул гражданиндың әле бында күпме ятыу ваҡыты ҡыҙыҡһындыра.

– Аңлашыла, сударь, аңлашыла, – тине Аполлинарий Христофорович.

Брагинский, бәлки, тупаҫ ҡына яуап та ҡайтарған булыр ине. Ләкин был осраҡта элекке батша белгесенең шул уҡ заман кешеһенә ошо рәүешле өндәшеүе, киреһенсә, ниндәйҙер йән рәхәтлеге, элгәрге «алтын дәүер»ҙе хәтерләткән кеүек тойолдо.

– Ул кеше беҙҙең дауаханаға бик ауыр, иҫен юғалтҡан хәлдә керҙе. Ҡанын күп юғалтыу арҡаһында яҙмышы үлем менән тамамланырға тейеш ине. Тик һеҙҙең хеҙмәткәрҙәрҙең ваҡытында килеп әйтеүҙәре һәм беҙҙең ашығыс саралар уны үлем тырнағынан йолоп алып ҡалырға мөмкинлек бирҙе.

Брагинскийҙың туҡ, дүрткел битендә бер ниндәй ҙә үҙгәреш һиҙелмәне, ул һәйкәл кеүек ултырыуын дауам итте.

– Ә инде диагноз мәсьәләһенә килгәндә... – Доктор ашыҡмай ғына кәштәнән тейешле ҡағыҙҙарҙы табып алды. – «Осона ауыр предмет ялғанған ҡамсы менән һуғыу һөҙөмтәһендә арҡала – өҙгөләнгән яра, шул уҡ әйбер менән һуғыу нәтиҗәһендә маңлай һөйәгенең сатнауы». Был – беренсе диагноз.

– Әллә башҡаһы ла бармы?

– Бар. Уныһы хатта мөһимерәк, – тип Аполлинарий Христофорович ҡағыҙҙы ГПУ начальнигына һуҙҙы.

Брагинский, байтаҡ йәштә булыуына ҡарамаҫтан, ауыҙын йыбырлатып ҡулындағы ҡағыҙҙы күҙлекһеҙ уҡып сыҡты ла:

– Был диагнозды кем ҡуйҙы? – тип һораны.

– Ғәҙәттә, сирле кешегә уны доктор ҡуя. Ә был диагнозды консилиум ҡуйҙы, уны дәғүәләшеп инҡар итеп булмай.

– Ә беҙ уны инҡар итербеҙ. Беҙҙең кешеләрҙең иҫбатлауына ҡарағанда, был хәл – Игебаевтың симуляцияһы ғына. Ул, юрамал һөрөнгән булып, маңлай һөйәген ватҡан. Шул саҡта беҙҙең хәҙмәткәрҙәр уның эргәһендә булған һәм Игебаевтың был этлеген үҙ күҙҙәре менән күреп торған. Ысыны бына шулай уның! – Брагинский таһырайған күҙҙәре менән ашарҙай булып докторға текәлде.

Ләкин дәлилдәр менән арҡаһын ныҡ терәгән үҙ һүҙле докторҙы урынынан ҡымшатырлыҡ түгел ине.

– Ярай, шулай ҙа булған, ти. Ә һуң уның арҡаһын нагайка менән кем ҡайыҙлаған? Шулай уҡ үҙ теләге менән түмәргә ҡолағанмы?

– Уныһын миңә үҙемә күрергә кәрәк. Бәлки, уның арҡаһында бер ни ҙә юҡтыр, – тине көслө ҡаршылыҡҡа тап булғанын аңлай башлаған Брагинский.

– Рәхим итегеҙ, иптәш начальник, теләһәгеҙ – хәҙер үк.

Ошо хәлдең килеп сығырын алдан белгән шикелле, доктор бөгөн генә

Абдрахман менән һөйләшеп ултырғайны. Ярайһы ғына төҙәлә башлаған Игебаев, доктор килеп ингәс тә, мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйҙы.

– Аполлинарий Христофорович, башымдағы бинт аҫты тәҡәт бирмәй ҡысыта... Бинтты йолҡоп ташлап, шатырлатып тырнағы килә, уф! – тине Абдрахман, саҡ түҙеп.

– Юҡ инде. Түҙергә тура киләсәк. Ҡысытыу – ул йәрәхәттең төҙәлә башлау билгеһе. Тимәк, яраң уңала башлаған.

– Балнистән сығырға ла ваҡыттыр инде, бик ялҡытты бит.

– Бик шәбәйгән икән берәү! Һин әҙерәк уйлап ҡара. Бөгөн мин һине больницанан сығарһам, иртәгә үк Йылайыр төрмәһенең ҡаҡ таҡтаһына барып ятасаҡһың. Тағы ла шулар ҡулына барып эләгәсәкһең! Ятҡан урының тыныс, тамағың туҡ, артабан ятыуыңды бел! Аңланыңмы?

– Аңланым, доктор.

– Бына шулай. Билдәле, ГПУ хеҙмәткәрҙәре үҙҙәре сығарған уйҙырманы ҡабатлап торорҙар, йәнәһе, үҙ маңлайыңды һин үҙең яралағанһың. Ҡыҫмаҡҡа ла аласаҡтар, бәлки, тағы ла туҡмалырһың, шулай ҙа беҙҙең һүҙ бер булырға тейеш. Уларҙың язалауына түҙә алмай, улар һүҙенә ауһаң, ул саҡта беҙ икебеҙ ҙә бер камерала ултырасаҡбыҙ, икебеҙҙе лә бер еп менән бәйләйәсәктәр, енәйәт ҡанунының бер матдәһен йәбештерәсәктәр. – Доктор бер аҙ ғәмләнеп ултырҙы. – Шуның өсөн маңлайыңдан да, арҡаңдан да бинттарҙы әлегә алмайбыҙ. Бына ошо ойош, ҡатҡан ҡаны күренеп торһон. Насар төш күрҙем, бөгөн булмаһа иртәгә кантондан ГПУ түрәһе килеп төшөргә тейеш. Башыңды ауырыуға һал да тик ят. Ул түрә килгән хосуста ла, мин иҫән саҡта, һинең менән бер ни эшләй алмаясаҡ. Ҡара уны, ныҡ тор. Һөйләштекме?

– Эйе, доктор.

«Большевиктар өсөн генә юҡ ул Алла. Ә беҙҙең өсөн ул бар һәм буласаҡ. Ярай әле, Абдрахманды киҫәтеп өлгөрҙөм, кисәге кеүек, бөтә бәйләнгән бинттарҙы ырғытып ташлап, уның иҙән буйлап шағыр-шоғор йөрөп ятҡанын теге кеше күргән булһа, ни булыр ине? Килгән арбаһына ултыртып, Йылайыр төрмәһенә алып барыр ине. Һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар...»

Палата ишеген асҡас та тимер карауатта башы ҡанға батҡан, бинт менән уралған мыҡты кәүҙәле кешене күреп, Брагинский һиҫкәнеп артҡа сикте.

– Ҡурҡма, ҡурҡма, гражданин начальник, уҙығыҙ, – тине ике күҙе генә баҙлап ятҡан Игебаев һәм, карауатын шығырлатып, ингән икәү яғына боролоп ятты. – Рәхим итегеҙ, – тип аҙаҡ күгәреп кипкән ирендәрен теле менән ялап ҡуйҙы.

ГПУ начальнигы менән доктор йәнәштәге һөйәнмәҫһеҙ ултырғыстарға ултырҙы. Ғүмере буйы кеше ҡанынан сирҡанған Брагинский күңеле менән тәфтиш аҫтындағы был кешенең шулай уҡ туҡмалыуын көтмәгәйне. «Сволочтар, өйөрлө наҙандар!» – тип ул эсенән үҙ ярандарын ҡәһәрләп ҡуйҙы.

– Да, гражданин Игебаев, ныҡ ҡына йығылғанһың. Ағас төбө лә нисектер уңайһыҙыраҡ эләккән икән, – тине Брагинский, Абдрахмандың шешмәкле ҡуңыр күҙҙәренә ҡарап. Уҫал күҙҙәр!

Быны ишетеү менән былай ҙа айҙар буйы асыуы ҡайнап ятҡан Игебаевтың сикә һөйәктәре шығырлап ҡуйҙы, танау ярылары ағара башланы, эске көсөргәнештән ҡуңыр битендәге саҡ беленеп торған шаҙралары яҙыла төшкәндәй тойолдо.

– Аңлауымса, миңә ҡарата язаны ойоштороған бандиттарҙың етәксеһе үҙе килгән... – тине һәр бер һүҙен сөй ҡаҡҡан һымаҡ көсөргәнеш менән сығарған Игебаев.

– Инер-инмәҫтән нишләп шулай ауыр һүҙҙәр менән ташланаһығыҙ? Мин һеҙҙе ғүмеремдә беренсе тапҡыр күреп торам. Әйҙәгеҙ, беҙ һөйләшеүҙе ундай юғары тондан башламайыҡ әле. Һүҙҙе былай башлаһаҡ, беҙ бер нисек тә килешә алмабыҙ, – тип Брагинский әңгәмәне тыныс үҙәнгә күсерергә самаланы.

– Минең һеҙҙең менән әңгәмәләшеп ултырырға ниәтем дә, теләгем дә юҡ!

– Нишләйһең, беҙҙе нисек кенә баһалаһағыҙ ҙа, нисек кенә күрә алмаһағыҙ ҙа, был эште аҙағына тиклем алып барып еткереү беҙгә, беҙҙең ойошмаға йөкмәтелгән.

– Һөйләшеүебеҙҙән бер ниндәй ҙә файҙа булмаҫ, – тине лә Абдрахман, ыңғыраша-ыңғыраша, ятҡан урынында ҡуҙғалып алды.

– Башта танышайыҡ, бер-беребеҙгә ҡарашып алайыҡ. Мин Йылайыр кантоны ГПУ начальнигы Брагинский булам, – Исаак Яковлевич үҙ һүҙҙәренә яғымлылыҡ һыҙаттары өҫтәргә тырышты.

– Күреп торам. Һуҡыр түгелбеҙ.

– Тағы ла шул уҡ балыҡ башы! Әйҙәгеҙ, әҙәмсә һөйләшәйек әле. Әңгәмәне, бәлки, матур ғына ослап, килешә алырбыҙ.

– Һеҙҙең менәнме? Яҡшы һөйләшеү бер ҡасан да булмаясаҡ һәм көтмәгеҙ ҙә! – Башта бер аҙ тулҡынланып һәм ҡаушап ҡалған төҫлө тойолған Игебаевтың һүҙҙәре ҡатылана барҙы.

– Аполлинарий Христофорович, зинһар өсөн, беҙҙе ҡалдырып тороғоҙсо. Беҙ икәүҙән-икәү генә ирҙәрсә һөйләшеп алайыҡ, – тине Брагинский, бик тә иғтибарлы күренергә тырышып.

– Рәхим итегеҙ, мин киттем, – «Ҡотолдом» тигән кешеләй, доктор урынынан торҙо. Сығып китер алдынан ул Игебаевҡа бик мәғәнәле ҡараш ташланы.

Доктор киткәс, ГПУ начальнигының тыны иркенәйеп киткәндәй булды. Ул Абдрахманға яңынан һөжүм башланы.

– Гражданин Игебаев, һеҙ нисек кенә сығынламағыҙ, беҙ барыбер үҙебеҙҙекен иҫбатларбыҙ, ә инде ул ваҡытта беҙҙең тарафтан үҙегеҙгә ҡарата бер ниндәй ҙә яҡшылыҡ көтмәгеҙ. Әгәр инде ошо һөйләшеүҙә был эште үҙегеҙ ҡылған итеп раҫлаһағыҙ, был осраҡта һеҙгә лә, беҙгә лә артабан еңелерәк булыр. Барыбер тәфтиш эшен аҙағына еткәнсә беҙ алып бараса̇ҡбыҙ, шулай булғас, баштан уҡ боҙолошорға һеҙгә бер ниндәй ҙә сәбәп юҡ.

– Мин булмаған ғәйепте үҙ өҫтөмә ала алмайым. Бына былар барыһы ла – һеҙҙең хеҙмәткәрҙәрҙең этлеге, һеҙҙең почерк, һеҙҙең «оҫталыҡ»,– Игебаев бер аҙ ҡалҡынып, күлдәк итәген яуырынына ҡалҡытты. – Бына ҡарағыҙ кешеләрегеҙҙең ни башҡарғанын! – Ул арҡаһын асып, стенаға боролоп ятты.

Ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла ялланып ҡутырлап ҡатҡан көрән төҫтәге ҡамсы эҙҙәрен күргәс, Брагинскийҙың күҙҙәре аҡайҙы. Эсенән ГПУ начальнигы үҙ хеҙмәткәрҙәрен һүгеп, хатта күңеленән Игебаевтың асыуы ҡабарыуы менән ризалашҡандай ҙа булды.

– Нимә, гражданин начальник? Мин үҙ һыртымды үҙем түмәргә бәргән булып сығаммы? Арҡамда ла түмәр эҙҙәреме?

Ләкин Абдрахмандың был асыулы һүҙҙәрен Брагинский ишетмәмешкә һалышты. Ул, бер ни ҙә булмаған төҫлө:

– Шулай итеп, һеҙ, гражданин Игебаев, ҡылған эшегеҙҙән баш тартаһығыҙ икән. Мин тәҡдим иткән килешеү шарттарын ҡабул итмәйһегеҙ, тимәк.

– Шулай, тик шулай ғына. Был ғына ла түгел. Миңә аяҡҡа баҫырға насип булһа, ГПУ хеҙмәткәрҙәренең был вәхши яуызлығын бөтә донъяға фаш итәм!

– Ай-һай, өлгөрә алмаҫың! – Ҡыҙа башлаған Брагинский «һин»гә күскәнен

һиҙмәй ҙә ҡалды. – Һине партияның волкомы ғына түгел, кантком бюроһы ла фирҡәнән алып ырғытты. Шулай итеп, һин хәҙер коммунист та, бер кем дә түгел. Һине ГПУ ҡарамағына тулыһынса биргәндәр булып сыға, ә беҙ һинең һымаҡтар менән шаярырға өйрәнмәгәнбеҙ.

– Мине тиҙ генә һындыра алмаҫһығыҙ. Һеҙҙең яуыҙлыҡтарығыҙ тураһында кәрәк урындарға күптән яҙып ебәрелгән. Әле мин яуап көтөп ятам. Наҙан ғына күренһәк тә, башҡорт балалары әле һәм үҙ еребеҙҙә йәшәйбеҙ. Беҙҙе һинең һымаҡтар ғына сүгендерә алмаҫ!

– Ошомо һуңғы һүҙең?..

– Эйе, башҡа әйтер һүҙем юҡ!

Туҙынған Брагинскийға ишекте шарт ябып сығып китергә генә ҡалды. Ул яңынан доктор кабинетына инде.

– Теге арҡыры башҡорт аяғына баҫҡанмы? Урамға-фәлән сыға торғандыр, көндәр буйы карауатында аунап ятмайҙыр бит?

– Уға прогулкаға ғына түгел, коридорға сығырға ла рәхсәт ителмәй. Әле ул тик үҙ койкаһында ғына ултырып тора, – тине доктор был мәсьәлә уны бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмаған һында.

– Ярай, доктор. Тағы ла бер яҡшы кеше менән танышыуым өсөн яҙмышыма рәхмәтлемен. Бер нисә көндән һеҙгә ярҙамға мин берәйһен ебәрермен.

Үҙ хужаһының ҡылыҡтарына күнегеп бөткән күсер Брагинскийҙың сығып, Йылайырға ҡайтырға әмер биререн һиҙемләп торғайны. Шуға күрә ул аттарын һоло ашатып, эсереп, арҡалыҡтарын күтәреп маташа ине.

– Аттар әҙерме? Хәҙер үк кире боролабыҙ. Аттарыңды йәлләмә. Иртәнсәк ҡояш ҡалҡыуға беҙ Йылайырҙа булырға тейешбеҙ, – тип ашыҡтырҙы ГПУ начальнигы.

***

Көймәлә һуҙылып ятҡан Зеликманды Брагинский һөйәп ултыртты ла, арҡаһын терәп, күҙҙәрен йомдо. Ләкин уның йомола башлаған күҙҙәре алдына ала-сола булып ҡайыҙланған, көрән ҡутыр баҫҡан Игебаевтың киң арҡаһы килеп баҫты. Уның тубалдай итеп бәйләнгән бинттары араһынан секерәйеп, уттар сәсеп торған усал ҡарашы ГПУ начальнигының йәнен өшөттө, уның барлыҡ булмышын, йөрәген ҡауғатҡан ҡурҡыу хисе солғап алды. Әле үҙенең оҙайлы тормош юлында байтаҡ нәмәне үҙ башынан кисергән Брагинский бындай ҡурҡыу белмәҫ, ғәййәр һәм ҡаҡшамаҫ ихтыярлы кешене осратҡаны юҡ ине. Бөтөнләй зиһене таралып, ҡурҡышынан көймәлә бөршәйеп ултырған Исаак Яковлевичҡа танауы ҡырҡылған, арҡаһы һанһыҙ һуҡтырыуҙарҙан ҡайыҙланған, ләкин ҡыйыулығы һынмаған Салауат, яңынан терелеп, уның ҡаршыһына үс алыу өсөн килеп баҫҡан кеүек тойолдо. «Үҙе үлем өҫтөндә ята, ә нисек һөйләшә был башҡорт! Ҡамсылап ҡына был кешенең умыртҡа һөйәген һындырып булмаясаҡ. Ундайҙы ҡапаҡлап ҡына өркөтә алмаҫһың. Һөйләшеүен ҡара һин уның! Башҡорттар араһында урыҫ телен шулай киҫәп һөйләшкән кешене тәүләп күрәм. Тауышы ла тамағынан гөрһөлдәп сығып тора бит. Билдәле, беҙҙең башһыҙ алйоттар урынына йүнлерәк кешеләр булғанда, Игебаевты ныҡлап урынына ултыртырға булыр ине, ләкин һуңланыҡ. Ул хәҙер – Самохин кешеһе, Үлмәсов менән икәүләп улар уны берәй шелтә-фәлән менән ҡотолдороу сараһын күрергә тырышасаҡ. Был хәлдә улар үҙҙәренекен ғәмәлгә ашырмай туҡтамаясаҡ. Ә, бәлки, башҡорт уларҙың тыныуҙарын һиҙәлер, шуның өсөн дә батыр булып ҡыланалыр? Бәлки, бәлки... Уның фирҡә хәлен канткомда тикшергәндә, һис шикһеҙ, Брагинский фамилияһы ла ҡалҡып сығасаҡ. Миңә лә берәй партия

яҙаһы сәпәрҙәр, ҡыҙыулыҡ менән вазифамда ҡалыу-ҡалмауымды да хәл итеп ҡуйыуҙары ихтимал. Бер оппортунисты ҡулға алған өсөн эшенән ҡыуылһа, бөтә цивилизациянан мәхрүм булған Уралдың ҡараңғы төбәгендә һуҡыр сысҡан көнөнә ҡалған яңғыҙ Исаак ҡайҙа барырға тейеш? Бындай хәлдән һуң уның кемгә хәжәте бар? Юҡ, юҡ. Кантком бюроһын үткәреүҙән алда был Уралдың ҡараңғы мөйөшөнән – айыуҙар иленән һырт биреп һыпыртырға кәрәк!...»

Ошо уйҙарҙан һуң Брагинский шундай еңел булмаған һығымтаға килде. Төнө буйы аттарын йәлләмәй ҡыуған күсер ГПУ начальнигын һәм сыҡҡандан алып йоҡонан башы сыҡмаған һарыбаш Зеликманды ҡояш сығыуға Йылайырға килтереп еткерҙе.

– Аттарыңды туғарып тәрбиәгә ҡуй ҙа күҙ алдынан юғал! Һораһалар: беҙ Байыш волосына барып ҡайттыҡ. Нәмәскә барып әйләнгәндә Йылайырҙың бер эте лә һиҙенергә тейеш түгел, – тигән әмер бирҙе начальник үҙенең өнһөҙ-һүҙһеҙ күсеренә.

Зеликманға ла ҡәтғи бойороҡ:

– Һин бөгөн идара тирәһендә һерәйеп, күҙгә салынып йөрөмә. Һин дә Байыш волосына барып ҡайттың. Бөгөн эштә күренмә, фатирыңда йоҡоңдо бөтөрөп, иртәгә һуңламай эшкә килерһең, аңлашыламы?

– Әлбиттә. – Практикант әйберҙәрен алып, тиҙ генә торлағына йүнәлде.

Брагинский йүгереп өйөнә инеп юғалды. Өҫ-башын алмаштырып, йәһәт кенә ҡырынды ла, йоҡо бүлмәһендә хырылдап ятҡан бисәһен дә уятмай, эшкә ашыҡты. Идарала һаҡта торған хеҙмәткәрҙән:

– Бер ҡайҙан да шылтыратманылармы, бер кем дә мине таптырманымы? – тип һораны.

Уныһы, үрә ҡатып:

– Никак нет! Бөтә урында ла тәртип. Һеҙҙе һорашҡан кеше булманы, – тип яуапланы.

Шундай яуап алғас, йөрәге бер аҙ урынына ултырған Брагинский үҙ кабинетына инеп, тәҙрә пәрҙәләрен асып ебәрҙе. «Иң башта Нәмәскә бергә барған Зеликманға аттестация яҙып, бынан ҡайтарырға. Һәпрә булһа ла, үҙебеҙҙең кеше. Унан тыш, минең ҡанат аҫтында ел-ямғырһыҙ эшләп йөрөгән тағы берике егетте, ҡулдарына документ тотторop, бынан тайҙырырға. Рәсәй киң, берәй йәһүд ояһына барып урынлашырҙар әле. Мин бынан шылыу мәсьәләһен хәл итерҙән алда, ана шул егеттәрҙең яҙмышын хәстәрләргә кәрәк. Шулай эшләмәгәндә, бында уларҙың бөҙрә баштарын икенсе көнөнә үк ашаясаҡтар. Икенсе урында үҙ йүндәрен үҙҙәре күрһен... »

Зеликманға иртәгәһенә Брагинский характеристика биргәс, ул бер ҙә аптырап торманы. Аяҡ-ҡулын ергә тейҙермәй үҙен маҡтап яҙылған рәсми ҡағыҙҙы бөкләп, ҙур кинәнес менән кеҫәһенә тыҡты. Уны аҫтан ғына күҙәтеп ултырған Брагинский:

– Йә, Зеликман дуҫ, аңлашыламы?

– Тулыһынса аңлашыла!

– Бар, канцелярияға инеп, практикаң уңышлы тамамланыу сәбәпле һине республика ГПУ-һы ҡарамағына ебәрелеү тураһында ҡағыҙ ал.

– Рәхмәт һеҙгә, хөрмәтле Исаак Яковлевич, минең турала атайҙарса ихтирам күрһәттегеҙ, – тине Зеликман, тулҡынланып.

– Ярай, ярай, ләкин һин теге талмуд-малмудыңды башыңдан сығарып ташла. Ул, беренсенән – киләсәге булмаған эш, икенсенән, синагога мөнбәренән ҡолап имгәнеүең ихтимал. Хуш.

Шулай итеп, яҙмышының нисек хәл ителерен көтөп-нитеп тормайынса, артынан эйәртеп алып килгән бер төркөм милләттәштәрен, төрләһөнә төрлө сәбәп табып, Брагинский бер нисә көндә таратып ебәрҙе. Партияһыҙ булыуҙарынан файҙаланып, был мәсьәләлә бер кем менән дә кәңәшләшеп торманы. Тәфтишселәр етешмәүе лә артыҡ борсоманы уны, сөнки хәҙер Йылайыр кантоны уныҡы түгел ине. Уның исемен Брагинский ҡара менән буяп, күңеленән мәңгегә һыҙып ташланы. Хәҙер уға үҙе тураһында уйланырға ла мөҙҙәт етте.

Кисен кабинетта бер үҙе ҡалғас, Исаак Яковлевич Башҡортостан Йөмһүрәтенең ГПУ башлығы Кульбитский менән һөйләшергә хәл итте. Уға, ғәҙәттәгесә, Өфөнө тиҙ генә бирҙеләр. Телефон трубкаһын ҡулына тотҡас, усы тирләй башланы, ҡулъяулығын сығарып, усын да, трубканы ла һөртөп алды. Тәүҙә теге башта ниндәйҙер аңлайышһыҙ ҡыштырҙау, һуңынан Кульбитскийҙың тыныуы ҡолағына сағылды. Начальник уның ҡолаҡ төбөндә генә тын алып торған кеүек тойолдо Брагинскийға.

– Тыңлайым, Исаак, ниңә тынып ҡалдың. Тыңлайым, – тип ул һүҙен яңынан ҡабатланы. – Һөйлә, ундай мөмкинлегең юҡ икән, бер-ике ауыҙ һүҙ менән булһа ла хәлеңде аңлат.

Ләкин Брагинский тураһында ғына түгел, башҡа уның ише кешеләр хаҡында аталарса даими хәстәрлек күрһәткән Кульбитскийҙың йылы һүҙен ишетеү менән, Исаактың лыҡа тулған күңеле бөтөнләй бушап китте, ул, кинәт йомшарған танауын мырш-мырш тартып, бер нисә буталсыҡ һүҙ генә әйтә алды:

– Хөрмәтле Ицхак Львович, был төбәктә беҙең эштәр бик хөрт – ҡойроҡҡа баҫтылар. Ошо көндәрҙә күрше юғары йортта минең мәсьәлә ҡараласаҡ. Киләсәккә өмөт юҡ... – Өҙөп-өҙөп Брагинский етәксеһенә кинәйә менән хәлен аңлатырға тырышты.

– Шулай уҡ бик ҡатмарлымы ни? Һинең тәжрибәң менән дә баш китерлек булғас, шәп түгелдер шул, – тип Кульбитскийҙың өндәшеүе булды, былай ҙа күҙҙәре йәшкәҙәп торған Исаак Яковлевич биреште, ҡып-ҡыҙыл сикәһе буйлап бөрсөк-бөрсөк әсе йәш тәгәрәне.

– Ниңә тауыш сығармайһың, үҙеңде ҡулға ал, – тип бойорҙо телефондағы тауыш. Йылайырҙа эштәрҙең бик ҡатмарлашыуын идара башлығы барлыҡ булмышы менән тоя ине. – Бер нисә көндән телеграмма алырһың. Оҙон юлға йыйын. Мәскәү тарафына китергә әҙерләнеп тор, – тип өҫтәне Ицхак Львович һәм трубканы һалды.

Брагинский тәҙрә пәрҙәләрен төшөрөп, шығырлап ятҡан иҙәндә бер аҙ үрле-түбәнле йөрөп алды ла, мөйөштә ултырған сейфын асып, унда йыйналған ҡағыҙҙарҙы, эш папкаларын ентекләп тикшерә башланы. Һайлап алған бер ҡосаҡ ҡағыҙҙарҙы мейес ауыҙына тыҡты ла ут төртөп ебәрҙе. «Әйҙә, янһын, беҙҙе бысратырлыҡ бер ниндәй ҙә эҙ ҡалдырырға ярамай был айыуҙар төйәгендә!» – тип мығырҙанды ул. Шулай ҙа ҡағыҙҙар араһынан кантон һәм волость етәкселәре өҫтөнән бер нисә йыл эсендә йыйылған материалдарҙы, уларҙың үҙ-ара ҙур даирә етәкселәре хаҡында һөйләшкән, бәғзеләрҙең партия сәйәсәтенә белдергән мөнәсәбәттәре, кантон күләмендә шымсыларҙың исемлеген айырым папкаға һалып, шпагат ебе менән бәйләп ҡуйҙы.

Кинәт килеп тыуған быңдай мәсьәлә бигерәк тә үҙ кадрҙарының яҙмышын хәл иткәндә һәр саҡ етеҙлек күрһәтергә күнеккән Кульбитский был юлы ла эште бик сомтор тотто. Үҙәктең кадрҙар буйынса идаралығы менән һөйләшеп, Мәскәүҙәге ГПУ хеҙмәткәрҙәрен әҙерләй торған юғары курсҡа бер урын һораны. Был урында ла Кульбитскийҙың һәр үтенесен бер ҡасан да кире ҡаға алмаҫлыҡ үҙ кешеһе

ултыра ине. Мәскәүгә барып сыҡҡанда Башҡортостан Йөмһүриәтенең ГПУ идаралығы начальнигы ундағы етәкселәрҙең ауыҙын май-бал менән күптән япҡайны инде. Хатта ҡама тун, ҡамсат бүректәр аша йылғыр Ицхак уларҙың бисәләре йөрәгенә лә үтеп ингәйне. Шунан һуң ҙур йөмһүриәт ГПУ-һы начальнигының, бигерәк тә үҙ ҡаныңдың тоғро вәкиле булған начальниктың үтенесен нисек кире ҡағаһың? Икенсе көнөнә үк Кульбитскийға Мәскәүҙән телеграмма юлыкты. Уны тотоп ул йөмһүриәттең «йәшел йорт»о хужаһы Юревичҡа йүгерҙе. Ғәҙәт буйынса, йөмһүриәт хужаһына инеү өсөн бер ҡасан да сират көтөп күнекмәгән ГПУ начальнигы туп-тура Башобком йортоноң беренсе кабинетына килеп инде. Ҙур өҫтәл артында үҙ креслоһына ярым ятып кем мендер күңелле әңгәмә алып барған Эдуард Янович, эйәк ҡағып, ултырырға ишара яһаны. Эске көсөргәнештән тирләп бешкәндәй, көнөнә әллә нисә рәүешкә керергә күнегеп бөткән Кульбитский башындағы фуражкаһын алып алдына ҡуйҙы, кеҫәһенән дүрткә бөкләнгән ҡулъяулыҡ сығарып, маңлайындағы тирен һөртә башланы. Бына был юлайы ла ул мөлдөрәмә күҙҙәрен тултырып хужаға төбәне, эшлекле сырайына етди сифат шәүләһе һирпте.

– Нимә, Ицхак, йөҙөң боҙолған, әллә тағы берәй сетерекле хәл килеп сыҡтымы? – тип һораны Өлкә комитет секретары үҙенә барлыҡ булмышы менән иғтибар бөркөп торған ГПУ башлығынан.

– Беҙҙең шулай инде, көн һайын әллә нисә әмер. Әле бына яңы ғына Мәскәүҙән телеграмма алдыҡ – үтәү ваҡыты ике генә көн. Әйтерһең дә, беҙ бында – янғын һүндереүселәр! – Папкаһынан сығарып, «үтә йәшерен» тигән телеграмманы хужа алдына һалды.

– Эй, Ицхак, Ицхак, бигерәк паникерһың да инде…Бындай ҡағыҙҙар миңә көнөнә унарлап яуып тора. Уның һәр береһенә йөрәкһеп, нервыңды туҙҙыра башлаһаң, яңынан бер-ике йылдан ил һағында торған Кульбитскийҙан ни ҡала? – тип йылмайҙы тыныс холоҡло Эдуард Янович.

– Бына, уның үтәлеш срогына иғтибар иттегеҙме? Ысынлап та ике генә көн! Ваҡытында өлгөртә алмаһаң, һиңә шелтә биреп, киҫәтергә тотоналар.

– Беҙҙең вазифа шулай. Һинең һымаҡ сыбыртҡыһыҙ юрта торған аттың да дилбегәһен бушатырға ярамай. Ағымдағы ҙур бурыстар атҡара торған заман шуны талап итә, ҡәҙерлем.

– Уныһын мин дә яҡшы аңлайым ул. Ләкин үҙемдә Һеҙҙең ише тотороҡлолоҡ, аҡыллылыҡ, сабырлыҡ тәрбиәләп булманы инде. Һөрлөгөп йығылғанса йөрөрбөҙ, ахыры.

Кульбитский, уңайлы мәлдән файҙаланып, хужа алдында эш күплегенә һәм үҙенең урынбаҫарҙары араһында ышаныслы кеше юҡлығына зарланып алды.

– Бындай яуаплы урынға бик лайыҡ кешене тәҡдим итергә кәрәк. Киләсәктә республика өсөн үҙен аямай, янып эшләй торған кадр булһын, – тине Эдуард Янович.

– Ундай кешеләр бар ҙа ул... – тип ысҡындырҙы Кульбитский, төҫөнә уйсан ҡиәфәт сығарып.

– Булғас һуң, әйт, ниндәй тәҡдимдәрең бар?

– Мин Йылайыр кантоны ГПУ начальнигы Брагинский хаҡында уйлағайным. Бик тәжрибәле, төплө кеше, юғары профессионал. Курсты тамамлағас, бәлки, республика аппаратына күсереп булмаҫмы, тип уйланылғайны. Быға нисек ҡарайһығыҙ?

– Эш буйынса мин ул иптәште бик аҙ беләм, шуға ла уның профессиональ

сифаттары тураһында бер нәмә лә әйтә алмайым. Ләкин кантон буйынса даими именлек юҡ: уғрылыҡ көслө, был төбәктә бай ҡатлам кешеләре иген йәшерә, хөкүмәт заданиеларын үтәүгә аяҡ сала. Әле киң рәүештә мал ҡырыу башланды. Хатта башҡа урындарҙа һүнеп барған бандитизм осраҡтары да Йылайыр кантонында йыш күҙәтелә. – Юревич ниндәйҙер икеләнеү һымағыраҡ фекерен әйтте.

– Эдуард Янович, Һеҙгә миңә ҡарағанда ла яҡшыраҡ мәғлүм: күпләп башҡорт йәшәгән тау-урман зонаһы – элек-электән бур-ҡараҡтар ояһы. Иң беренсе сиратта, ундай кантондарҙың урманын ҡырҡып бөтөрөргә кәрәк. Шунан һуң бандитизм үҙенән-үҙе ҡорор.

– Бик урынлы тәҡдим.

– Башҡа кантондарҙа ла шул уҡ хәл,– Исаак Яковлевич күҙҙәре менән стенала элеүле торған Башҡортостан картаһын эҙләп тапты. – Тик Урал алды зонаһында икмәкте күберәк йәшерәләр, йышыраҡ сауҙа итәләр, сөнки ул яҡта игенде күпләп сәсәләр, уңышты ла мулыраҡ алалар.

– Һинең кәйефеңә ҡарағанда, шул Брагинскийҙан да ҡулайлы кеше булмаҫ һымаҡ. Әйҙә, шул кандидатурала туҡталайыҡ улайһа! Курс бөткәс, ул кешеләр кире Башҡортостанға ҡайталыр бит?

– Нигеҙҙә шулай, ләкин ҡайһы ваҡыт ГПУ-ның Баш идаралығы бәғзеләрен үҙендә лә ҡалдыра, башҡа төбәктәргә лә ебәргеләй.

– Был кешең Башҡортостанға ҡайтһын әйҙә, мин ҡаршы түгелмен. Былай ҙа республиканың хоҡуҡ һаҡлау органдары кадрҙарға ҡытлыҡ кисерә. Телеграмма әҙерләп алып килгәнһеңдер бит. Бир, шуға ҡул ҡуйып, фатиха биреп ебәрәйек.

Телеграммаға имзаны ҡуйғас, Юревич, папканы алып китергә йыйынған Кульбитскийға мөрәжәғәт итеп:

– Йылайыр кантоны үҙ эсенә ун ике волосты алған ҙур башҡорт төбәге икәнен дә онотмағыҙ. Унда ебәреләһе кешенең башҡорт милләтенән булыуы ҡулайылыраҡ булыр ине, – тине.

– Мин үҙем дә шулай уйлайым да ул, ләкин урындағы халыҡтан органдарҙа эшләр өсөн кадрҙар юҡ тиерлек. Йәштәрҙән үрләтәйем тиһәң, күбеһенең белеме түбән, урта белемле кешеләрҙе лә табыуы ҡыйын, ә хоҡуҡ һаҡлау органдарында уларҙы көндөҙ ут менән дә табып булмай. Тәжрибәлерәк, белеме лә булған олораҡ кешеләрҙе барлай башлаһаң, ундайҙар йә Колчак армияһында, йә Вәлидов бандаһында хеҙмәт итеп, Совет власына ҡаршы ҡорал күтәргән. Башҡорт кадрҙары кәрәк, тип элекке поручик, прапорщиктарҙы яуаплы органдарға алып булмай бит.

– Әлбиттә, был турала һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел, шулай ҙа ГПУ-ны милли кадрҙар менән тулыландыра башларға кәрәк. Бөтә тармаҡтарҙа ла ситтән килгән кадрҙар менән генә эшләп булмай, урындағыларҙы ла үҫтереү – беҙҙең бурыс, – тине хушлашҡанда Юревич.

Кульбитскийҙың вәғәзенән һуң, партияның кантон комитеты етәксеһе Самохин исеменә Өлкә комитеттың беренсе секретары имзаһы менән түбәндәге телеграмма килеп төштө: «Йәшерен. Канткомпарт. Самохинға. Быны алыу менән урындағы ГПУ начальнигы Брагинскийҙы, ГПУ-ның Мәскәүҙәге юғары курстарына тәҡдим ителеүе сәбәпле, вазифаһынан бушатығыҙ. Уның урынына кандидатура тураһында һеҙҙең фекерегеҙҙе көтәбеҙ. Үтәү срогы ике көн. Обкомпарт. Юревич».

Ашығыс телеграмманы алыу менән, кантком секретары Брагинскийҙы үҙ кабинетына саҡырҙы. Ғәҙәтенсә ҡупшы кейенгән Исаак Яковлевич, үҙенең эске тулҡынланыуын ете ҡат ҡарыны аҫтына йәшереп, бер ни булмағандай, Самохин

алдына килеп баҫты. «Әллә ошо Брагинскийҙың өҫтө-башын таҙартыуҙан башҡа кәсебе юҡмы икән? Тышта ҡойма ямғыр яуа, ә уның салбары, френчы һәр саҡ үтекләнгән, ҡасан ҡарама – ялтырап тора. Ни тип әйтһәң дә, Мәскәү тәрбиәһе алған кеше шул», – тигән фекер йөрөттө кантон хужаһы.

– Хушлашырға тура килә беҙгә, Исаак Яковлевич, – тип башланы һүҙҙе Самохин.

– Бер ни ҙә аңламайым, – тип яуапланы Брагинский һәм, ике яуырынын ҡалҡытып, туҡ йөҙөнә моңһоу һағыш һыҙаттары сығарҙы.

– Ултыр, мә, уҡы, – Самохин юрамал ултырырға баҙнат итә алмай торған ГПУ начальнигына телеграмма һуҙҙы. Брагинский уны алып күҙ йүгертеп сыҡты ла, кинәт төҫөн үҙгәртеп, упайған йәшел күҙҙәрен кантон башлығына төбәне. Уның йәшкәҙәгән ҡарашында Самохинға мөкиббән бирелгәнлек төҫмөрләнә ине. Күңеле тулған Брагинскийҙың сикәһе буйлап хатта ике әсе йәш бөрсөгө тәгәрәне.
– Ҡыуанырға кәрәк, Исаак Яковлевич, ҡәҙерлем. Ярай, тынысылан. Айырылышыу минең өсөн дә еңел түгел, – тине Самохин йомшаҡ тауыш менән.

– Был, Иван Афиногенович, Һеҙҙең инициатива булдымы? Әгәр шулай булһа, мин ни ерем менән Һеҙгә ярамаНым икән? Мин бик нык борсолам. Ысынын әйтегеҙ инде, зинһар, – тип үтенде Брагинский.

– Юҡ, был минең фекер түгел. Тәҡдим юғарынан килде, – тип Самохин һуҡ бармағын түшәмгә сөйҙө.

– Һеҙҙең ҡулығыҙ аҫтында оҙаҡ йылдар эшләп, урындағы шарттарҙы биш бармаҡ кеүек белгән етәксенән эшкә өйрәнермен, тип уйланылғайны. Был тәҡдим һәм ваҡытһыҙ күсенеү кемгә хәжәттер инде? – тине, бар төҫө-ҡиәфәте менән үкенес белдереп, Брагинский.

– Юғарынан алыҫыраҡ та, күберәк тә күренә. Күрәһең, киләсәктә үҙеңә ҙурыраҡ, яуаплыраҡ вазифа йөкмәтергә итәләрҙер. Юғиһә, барымы самалы кадрҙы Мәскәүҙең юғары кустарында уҡытып, сәрмәйә һәм ваҡыт әрәм итмәҫтәр ине. Бәлки, берәй өлкә йәки йөмһүриәт ГПУ-һына үрләтергә уйлайҙарҙыр. Нишләп булмаһын, ти? Бик тә ихтимал.

Самохиндың яғымлы һүҙҙәре көнө-төнө «айыуҙар төбәге»нән һырт биреп ҡасырға хыялланған Исаак Яковлевичтың йомшарған күңеленә май булып ятты. Ләкин ул икенсене әйтте:

– Һеҙҙең, Иван Афиногенович, минең менән яңынан ҡулға-ҡул тотоношоп эшләргә ниәтегеҙ юҡмы ни? Һеҙ мине ситкә ебәрмәй тороғоҙ әле! Мин курсты бөткәндең икенсе көнөнә үк бында килеп етәсәкмен. Билдәле, Һеҙ риза булған хәлдә.

– Был ни тигән хәбәр? Юғарынан ни ҡушырҙар, шуны эшләрһең. Әйткәндәй, был мөһим сәйәси өлкәне хужаһыҙ ҡалдырып булмай бит. Һинең йөгөңдө тартырлыҡ кеше бармы? Уйлашайыҡ. Һин үҙең менән бер нисә ярайһы белемле, киләсәктә өмөтлө егет алып килгәйнең түгелме? Әйҙә, шуларҙың береһен һайлайыҡ.

– Эх, Иван Афиногенович, барыһы ла минең һымаҡ Йылайырға йәбешеп ятмай шул. Йәштәр бында килеп, бер аҙ төртөлөп ҡаранылар ҙа, Нәмәс волосының бер нисә шыр урман ауылдарына барып ҡайтып, берәм-һәрәм тайып бөттөләр. Барыһына ла йылы яҡтар: Одесса, Киев кәрәк. Ҡала малайҙары бит. Береһен дә тау-урман зонаһына оҙатыусыһыҙ ебәреп булманы, көнө-төнө бындағы бандиттар шәүләһенән ҡурҡып йәшәнеләр. Ундайҙарҙы һәр ваҡыт ҡулынан етәкләп йөрөтөп булмай бит. Киткәндәре хәйерле.

– Ә ваҡытлыса ҡуйырлыҡ берәй ышаныслы кадр бармы һуң?

– Бар, нишләп булмаһын? Мәҫәлән, беҙгә милиция аппаратынан күскән

Дәүләтшин тигән егет бар. Бик әүҙем, арымай-талмай эшләй торған кеше. Тик белеме генә самалы.

– Ул кешегеҙ бик дыуамал, яндырай күренә. Барған һәр ерҙә халыҡты атыу-аҫыу менән ҡурҡытып йөрөй түгелме? – тип һораны Самохин.

– Юҡ, баштараҡ шулай ине. Хәҙер, тәрбиәләй торғас, урынына ултырттыҡ шикелле.

– Ярай, улай булһа. Китер алдынан шул егет менән миңә инеп сығырһығыҙ.

– Ярай, Иван Афиногенович, барыһы ла һеҙҙеңсә булыр, – тип Брагинский сакауай табанлы итек үксәләрен шаҡып, уң усын йөрәгенә баҫып, түбәнселек менән башын эйеп, кабинеттан сыҡты.

Бер нисә көн үтеүгә инде бер аяғы менән Мәскәүҙә баҫып торған Брагинский үҙ вазифаһын башҡарыуҙы был эштә бөтөнләй тәжрибәһе булмаған, уҙ аллы ғына Сосновка урыҫтарынан белем алған Дәүләтшинға һөйәп, Һарыҡташ станцияһынан Һамарға китә торған поезға ултырҙы. «Кинелдә Өфө поезына ултырырмын. ГПУ-ның кадрҙар бүлегенә инеп, документтарҙы алырға ла, Кульбитскийға рәхмәт әйтеп, тиҙерәк Мәскәүгә тайырға кәрәк. Минең йүнһеҙ работниктарҙың Игебаевҡа ҡарата ҡылған тупаҫлыҡтары асылмаҫ һәм башҡа төйөндәр сиселмәҫ элгәре, Башҡортостан Йөмһүриәтенән китеү хәйерлерәк. Йәһәннәм төбөндә ятҡан Йылайырҙы, уның шыр наҙан ҡырағайҙарын ҡабат күрергә Хоҙай яҙмаһын! – тип уйлап, Брагинский үҙен ашыҡтырҙы. – Ә инде ваҡытлыса минең вазифаны башҡарыусы Дәүләтшиндың батша хөкүмәте заманында Баймаҡ-Таналыҡ волосы полицияһының шымсыһы булыуын, 1920 – 1922 йылдарҙа Урал аръяғындағы башҡорт болаһы ваҡытында шул уҡ кешенең баш күтәреүселәр башлығы Хажиәхмәт Унасовтың ат йөрөтөүсеһе булғанын белеп ҡалһалар, мине Дәүләтшин менән ҡуша бер камераға ябып ҡуясаҡтар. Тиҙерәк тайырға, ҡабат был яҡтарҙа күренмәҫкә!..»

Брагинский бөтә эштәрен тамамлап, ҡулына сургучлы пакет алғас, хушлашыу өсөн Кульбитскийға инде. Йылайырҙан тайырға сәбәп эҙләүенең төп асылын күңел күҙе менән үтә күреп ултырған Башҡортостандың ГПУ башлығы бишкә бөгөлөп ингән Брагинскийҙы бик ҡоро ҡабул итте һәм сөсөләнеп торманы.

– Һин, Исаак, ҡойроҡ болғама, икебеҙ ҙә бер-беребеҙҙе күптән беләбеҙ. Барыһын да йәшермәй асып һал, барыбер, күпме тырышһаң да, мине алдай алмаҫһың. Мин һиңә өс йыллыҡ сиркәү-приход мәктәбен тамамлаған Самохин түгел. Аңлашыламы?

Кульбитскийҙың сәнскеле ҡараштары, бигерәк тә уҡтай тура атылған киҫкен һүҙҙәре ҡулына пакет тотоп ҡанатланыбыраҡ килеп ингән тәкәббер холоҡло Брагинскийҙы бөршәйергә мәжбүр итте. Артабанғы яҙмышы алдында ултырған, һаҡалы ағара башлаған аҫҡаҡ битле ошо кеше ҡулында икәнен яҡшы аңлапмы, тотлоға-тотлоға, ниндәй ваҡиға уны ошо аҙымға мәжбүр итеүен асыҡтан-асыҡ һөйләп бирҙе. Кисәге кантон ГПУ-һы етәксеһе ауыҙынан сыҡҡан һәр бер һүҙҙе йотлоғоп тыңлап ултырған Кульбитскийҙың ҡаҡса бите бер ағарҙы, бер буҙарҙы, ике сикәһе тош-тош урынынан ҡыҙыл тап менән ҡапланды. Шулай ҙа уны бүлдермәне, аҙағына тиклем тыңлап ултырырға түҙемлеге етте. Брагинский енәйәт ҡиссаһын һөйләп бөткәнсә ҡулъяулыҡ менән тирләгән битен әллә нисә тапҡыр һөртөп алды. Һүҙен тамамлап, Исаак Яковлевич тәрән көрһөндө лә иҙәнгә текәлде.

– Хәбәрең бөттөмө?

– Бөттө.

– Аллаға шөкөр! Һеҙҙең суҡынмыш кантонығыҙҙа шундай йәки шуға оҡшаш сәйәси енәйәт нисә тапҡыр булды? Ошоноң ише енәйәт унарлап булғандыр, моғайын.

– Юҡ, быңдай сәйәси енәйәт мин Йылайырға килгәне бирле беренсегә... Башҡа ундай яңы иҡтисадҡа ҡағылышлы эштәр бер ҡасан да теркәлмәне.

– Шулай булғас, быңдай яуаплы эш башҡарыуҙы нишләп дыуамал туңбаштарға тапшырҙың? – тип һораны Кульбитский асыу менән.

– Үҙем иген йәшереүселәрҙең эше менән икенсе волосҡа киткәйнем, – тип шым яуапланы Брагинский, башын эйеп.

– Тапҡанһың эш... Ундайҙарҙы фашлап, уларҙың игенен тартып алыу өсөн урындағы астан интеккән ярлы-ялпы башҡорт бөткәнме? Һиңәме ни ошондай ябай эш менән шөғөлләнергә? Ярлы башҡортто бай ҡатлам башҡорттары менән һуғыштырыу – һинең бурысың! Синфи көрәш – большевиктар партияһының иң төп тәғлимәте икәнен, әгәр ул булмаһа, һин уны тоҡандырыусы булырға тейешлегеңде һаман төшөнә алманыңмы ни? Ниңә юҡ-бар эшкә үҙеңдең башыңды тығып йөрөйһөң?

– Уйлап еткермәгәнмен шул, Ицхак Львович, кисерегеҙ, түбәнселек менән үтенәм, ысынлап та, минең тарафтан ҙур хата ебәрелгән. Ябай хата ғына ла түгел, сәйәси хата. Был эште мин үҙ ҡулыма алырға тейеш инем.

– Һинең үкенеүҙән ни файҙа? Ваҡытында баш менән уйлап эшләргә кәрәк ине. Аҙаҡтан, ваҡыт үткәс, беҙ барыбыҙ ҙа аҡылға ултырабыҙ. Һине, Совет власының ғына түгел, батша заманындағы Енәйәт ҡанунын да һыу һымаҡ белгән кешене, быңдай хаталар яһаған өсөн һис тә ғәфү итеп булмай.

– Шулай килеп сыҡты инде...

– Һинең был хатаң бер ҙә кисерерлек түгел. Быңдай хәл килеп сыҡҡас та, һин уға сат йәбешергә тейеш инең. Сөнки, беренсенән, был ваҡиға төпкөл кантондарҙың берећендә булды. Икенсенән, ул сәйәси енәйәтте кем яһаған? Тау-урман араһында ятҡан Нәмәс волосы Ялан ауылының берҙән-бер коммунисы! Тимәк, партияның яңы иҡтисад сәйәсәтенә оппозиция Мәскәү, Ленинградҡа ғына түгел, төпкөл башҡорт ауылдарына ла үтеп ингән. Ә һин был сәйәси енәйәтте фашлай алған берҙән бер ГПУ начальнигы булһаң... Һиҙәһеңме?

– Һиҙәм, Ицхак Львович, – тине, бахырланып ҡына, Брагинский.

– Юҡ, төшөнмәгәнһең әле. Һуңғыһы бигерәк мөһим, сөнки һин ошо эште аҙағына тиклем матур итеп атҡарып сыҡһаң, беләһеңме, кем булыр инең?

– Аңлатып ебәрегеҙ инде.

– Аңлатам...Башҡортостан Йөмһүриәтендә партияның генераль линияһына ҡаршы сыҡҡан тәүге оппортунист башҡорт коммунисын төрмәгә ултыртҡан беренсе ГПУ начальнигы булыр инең. Шунан һиңә маҡтаулы реляция яҙып, түшеңә Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ордены тағырҙар ине.

Ҡыҙып-ҡыҙып һөйләгән Кульбитскийҙың ошо әрнеүле һүҙҙәренән һуң Брагинский еүешләнгән күҙҙәре менән хужаһына ҡарап, бер нисә мәртәбә ҡаты көрһөнөп ҡуйҙы.

– Бына хәҙер, һыуға төшкән тауыҡ һымаҡ, байғош булып ултыраһың. Һинең был наҙан, бысраҡ эшеңә һис бер аңлатма табып булмай. Башҡа был республикала күҙгә күренмәүең хәйерле. Иң тәүге сиратта, һин... Башҡортостан органдарында эшләп йөрөгән йөҙәрләгән намыҫлы беҙҙең милләттәштәр битенә төкөрҙөң. Төшөндөңмө, Брагинский?

– Төшөндөм, Ицхак Львович. Һеҙҙең бар һүҙҙәрегеҙ дөрөҫ, ғәҙел. Башҡа быңдай хәлдәргә юл ҡуймаҫҡа һүҙ бирәм.

Брагинский, башын ҡалҡытып, моңһоу күҙҙәрен начальнигына төбәне. Уның ҡарашында Башҡортостандың барлыҡ ГПУ-ларын ус төбөндә бейеткән Кульбитскийға ҡарата йәне-тәне менән бирелгәнлек, үҙен ҡорбан итергә әҙер булыу тойғоһо сағыла ине.

– Уҡыуыңды тамамлағас, Башҡортостанда һиңә ниндәйҙер эш тәҡдим итерҙәр, тип иҫәп тотма. Беҙгә һинең һымаҡ һеләгәйен ағыҙып йөрөгән хәстрүштәр хәжәт түгел.

– Хөрмәтле Ицхак Львович, шулай ҙа мин киләсәктә лә Һеҙҙең ярҙамығыҙға иҫәп тотмайынса булдыра алмам, – тине Брагинский ҡалтыранған тауыш менән. – Мине үҙегеҙ мәркәз аппаратынан ҡуҙғатып, ошо ҡараңғы төбәккә тартып алдығыҙ бит.

– Булғандыр, Исаак, булғандыр... Ул ваҡытта, тимәк, һинең турала яҡшыраҡ фекерҙә булғанмын. Башҡаса минән булышлыҡ көтмә. Бында һиңә урын юҡ. Башобком беҙҙең алға ГПУ органдарына төп халыҡ вәкилдәрен ылыҡтырыу бурысын ҡуя. Әҙәм көлкөһө: республиканың ГПУ органдарында төп халыҡтан ни бары ике тиҫтәләп кеше эшләй! Шулар араһында махсус белеме булған бишалты кешене генә күрһәтергә була. Бындай нисбәт беҙҙең халыҡ вәкилдәренә Башҡортостанда артабан урын ҡалдырмай. Уҡыуҙы тамамлағас, теләһә ҡайҙа кит, тик Башҡортостанға түгел.

Брагинскийҙың көрһөнөп ултырғанын күреп йомшара төшкән Кульбитский: «Әгәр инде китергә хәл итһәң, мин рекомендация бирермен, ләкин хәҙергә ошо һин ҡаҙыған батҡаҡ соҡоронан таҙарынып сығырға кәрәк. Башҡаға булдыра алмаһа ла, юҡ-барға сарбайлап бәлә һалырға оҫтарып алған һеҙҙең Самохин. Һин ауҙарған ағастың сәрпеүе беҙгә лә тейеүе бар», – тип уйланды.

– Ярай, Исаак, киләсәктә һаҡ бул. Һин ебәргән хаталар беҙҙең дошмандарҙың тирмәненә һыу ҡойорға булышлыҡ итте. – Кульбитский, уны ҡосаҡлап, ишеккә тиклем оҙатып ҡуйҙы. – Минең урында бүтән кеше булһа, һине урамға ҡыуып сығарыр ине. Ә беҙ һине юғарыға этәрәбеҙ, кеше итергә тырышабыҙ. Үпкәләмә, беҙ боронғо ҡанундарҙы үтәргә тейешбеҙ, беҙҙең арала байғош, меҫкен хәйерселәр булырға тейеш түгел.

***

Ошо ваҡиғаларҙан һуң ике аҙна үткәс, муйынынан эшкә батҡан кантком секретары Самохиндың иҫенә Игебаев төшкәс, ул, һәр ваҡыттағыса ҡабаланыпҡарһаланып, Нәмәс волосына инструкторын ебәрҙе. Кантком башлығы ашыға тип, был вәкил бик эләгеп-йығылып барманы: юл ыңғайында Иван-Кувалат ауылына инеп, туғандарында бер-ике көн ҡунаҡ булды. Уның тик бай ҡатламдан ғына торған яҡындары кантком тиклем канткомда – ҙур урында эшләгән яҡын ҡәрҙәшен тиҙ ебәргеләре килмәне. Өй беренсә йөрөп, көмөшкәнең ҡеүәтле «первач»ын тәмләп, ҡунаҡ булғанса байтаҡ ваҡыт үтте. Инструкторҙың бөгөн-иртән ГПУ яғаларынан алыуҙарын көтөп ятҡан туған-тыумасалары канткомда эшләгән туғанынан тормоштың ағышы ҡайҙа барыуын ҡат-ҡат һорашып, уның көмөшкә шауҡымы менән сыҡҡан һүҙҙәрен мыйыҡтарына урап ултырҙы. Ә теле асылған кантком эшмәкәре һәр мәжлестә ҡолаҡтарын ҡарпайтып тыңлап ултырған ауылдаштарына белгәнен дә, белмәгәнен дә кәрәгенән ғәйре һөйләп ташланы. «Хәҙер һеҙҙең барығыҙҙы ла ҡыҫмаҡҡа ала башлаясаҡтар. Партияның юғарынан күрһәтмәһе шундай. Ҡулығыҙҙағы икмәкте алыҫҡараҡ, тәрәнерәк йәшерегеҙ, малдарығыҙҙы ҡыҫҡартығыҙ, артыҡ мөлкәтегеҙҙе осора башлағыҙ, сөнки бөгөн-иртән Совет власы һеҙҙе бөтөрөү юлына баҫасаҡ.

Хәлегеҙҙән килһә, был яҡтарҙан табанығыҙҙы ялтыратығыҙ. Совет власының был сәйәсәтенә һеҙ генә түгел, хатта ҡайһы бер урындағы ҡыйыуыраҡ коммунистар ҙа ҡаршы. Бына мин шундайҙарҙың береһенең эшен тикшерергә волоска китеп барам. Бер һүҙ менән әйткәндә, ҡолағығыҙҙы һаҡ тотоғоҙ, йоҡоғоҙҙан уянырға ваҡыт».

Ауыл һайын алмаш аттарҙа килгән кантком инструкторын Иван-Кувалат кулактары, әлүән-әлүән затлы күстәнәстәр тейәп, Нәмәскә тройка егелгән үҙ көймәләрендә оҙатты. Ауылдаштары маҡтауынан айға менергә етешкән инструктор Нәмәскә тройка менән дә килеп төшкәс, башынан көмөшкә быуҙары осоп бөтмәгән был әҙәм үҙен, барлыҡ ғәләмдеке булмаһа ла, кантондың кендеге итеп хис итте. Ҡулына аҙыҡ-әүҡәт, ике шешә көмөшкә һалынған ауыр саквояжын ботона һуға-һуға, инструктор волком бинаһына юл тотто. Бәхетенә, «Игебаев эшенең нәтижәһен көтөп арыған» волком секретары Кейекбаев кабинетында булып сыҡты. Ғүмер баҡый кеше менән аралашып йәшәгән, арыу ғына йәшкә етеп, ауыҙына бер тамсы ла хәмер ҡапмаған Кейекбаев тар ғына бүлмәгә көмөшкә еҫе аңҡытып килеп ингән кантком вәкилен елкә шыртын торғоҙоп ҡабул итте.

«Ни сәбәп менән ошо көнгәсә яуапҡа тарттырылған енәйәтсе коммунист Игебаевтың «эше» хәрәкәтһеҙ ята, ә ул үҙе ҡайҙа һәм кем ҡарамағында?» – тиеберәк волком секретарын яғаһынан алырға самалап килгәйне кантком вәкиле... Ун йылдан ашыу батша армияһында хеҙмәт итеп, етди тәртипкә күнеккән элекке прапорщик иһә әле айнып та бөтмәгән инструкторҙы шундуҡ кире бороп сығарҙы.

– Беҙ партия линияһын тупаҫ рәүештә боҙған оппортунист Игебаевты фирҡә сафынан күптән сығарғанбыҙ. Бына – бюро ҡарарының күсермәһе, ә нөхсәһе канткомға фельдегерь менән әллә ҡасан ебәрелгән, – тип Кейекбаев ташҡа баҫылған ҡағыҙҙы уның алдына һалды. Саквояжын ике аяғы араһында ҡыҫып ултырған инструктор ике-өс көн ҡунаҡ булыуҙан ҡалтыранған ҡулына волком ҡағыҙын тотто ла күҙе алдында бейей башлаған яҙма юлдарын уҡырға маташты. Ләкин күҙе алдында елберҙәй башлаған ҡағыҙ битен өҫтәлгә һалырға мәжбүр булды. Был иҫерек башты нәфрәтләнеп осора һуғырға әҙер ултырған Кейекбаев кинәт урынынан торҙо ла волком ҡарарын үҙ ҡулына алды. Инструкторҙың алдына баҫып, сығарған ҡарарын уҡыған мәхкәмә рәйесе шикелле, уның ҡолаҡ төбөндә документтың йөкмәткеһен ҡысҡырып иғлан итте лә ҡағыҙҙы кире уның алдына ырғытты. Ә үҙе, эш бөткәнде аңлатырға теләгәндәй, өҫтәл артына баҫты. Кәперенеп килеп ингән инструкторҙың шундуҡ ҡыҙарған кикереге шиңде. Ул майлы күҙҙәре менән һеңгө кеүек торған волком секретарына аҫтан өҫкә ҡарап алды ла, бүтән һүҙ таба алмағас:

– Шунан, Кейекбаев иптәш? – тип өндәште.

Тегенеһе «Ултырған да шыуған» тип яуапларға ла уйлағайны, ләкин, ҡапыл ҡойолоп төшкән инструкторҙың күңелен уйлап:

– Ошо ҡағыҙҙы кеҫәңә һалаһың да көн кискә ауышыуҙан алда Йылайырға ҡайтыу яғын ҡайғыртаһың. Минең башҡа Һеҙҙең менән ләпелдәп баҙар асып ултырырға ваҡытым юҡ, – тине.

Иван-Кувалат ауылына таҡта ярырға барған кешеләренән унда канткомдан Нәмәскә килә ятҡан бер түрәнең ауыл кулактары менән ҡосаҡлашып эсеп йөрөүен ишеткән һиҙгер волком секретары был әҙәмдең нindәй эш менән килергә тейешлеген самалаңы һәм шул уҡ көндө Игебаевтың сират көтөп ятҡан документтарын Йылайырға оҙатып өлгөрҙө. Шуға күрә лә Кейекбаев бөгөн ҙур

кинәнес менән үҙ арҡаһын ныҡҡа терәгәйне. Ҙур ҡыйынлыҡ менән булһа ла мейеһен эшләтә башлаған инструкторҙың:

– Ә хәҙер енәйәтсе ҡайҙа, уның хәле нисек, партбилетын алдығыҙмы? Уны күреп һөйләшәһе, устав ҡушҡанса, унан партия тәфтише алаһы ине, – тип әйтергә аҡылы етте.

– Ошоноң менән был мәсьәләне ябыҡ тип иғлан итәбеҙ. Эшеңдең икенсе өлөшө, мырҙа, волость больницаһында. Ул кеше беҙҙең ҡарамаҡта түгел, уны һеҙҙең ГПУ кешеләре беҙҙең баш доктор ҡулына ҡалдырып киткән, сөнки ул иптәш ҡулға алынған саҡта бик ҡаты имгәнгән. Бына шул, – тине волком секретары һәм алдында ултырған ҡыңғырауҙы шылтыратты.

Кантон вәкиле ҡыңғырау тауышынан, йоҡоһонан һиҫкәнеп уянғандай, кинәт башын ҡалҡытты. Кейекбаев яңынан урынынан торҙо.

– Бына ошо ағайыңды волость больницаһының баш докторы Аполлинарий апаңа алып барып тапшыр, – тип иҙән уртаһында ялан аяҡ баҫып торған малайға әмер бирҙе. – Ярай, хушығыҙ. Самохин иптәшкә сәләм әйтегеҙ, – тип оҙатты Кейекбаев кантком вәкилен.

..Земство больницаһында кантком кешеһе менән һөйләшеү икенсерәк булды. Волость комитетындағы һымаҡ, бында артыҡ әҙәп һаҡлап торманылар.

– Ә, Игебаевмы? Эйе, эйе. Больницала бар ундай кеше. Аңлауымса, һеҙҙе уның хәле ҡыҙыҡһындыра, шулаймы?

– Шулай, шулай, доктор.

– Мине хәҙер утыҙ биш йыл инде Аполлинарий Христофорович тип йөрөтәләр. Мин ике власть докторы, батша заманында ла земство больницаһында эшләнем. Хеҙмәтемде батша Николай Икенсе үҙе алтын сәғәт менән баһаланы. Эш хаҡын алтын менән түләнеләр, Совет власы шикелле, ҡағыҙ аҡса менән иҫәпләшмәне, – тип һөйләнеп алды ҡарт доктор.

Уның тел төбөндә, мине элекке хөкүмәт юғарыраҡ баһалай ине, тигән фекер ятҡанын самалап ултырған кантком вәкиле: «Етте, туҡта һүҙеңдән, контр!» – тип өҫтәл һуғырға самалағайны ла, үҙ ауыҙынан сыҡҡан хәмер еҫен һиҙеп, ҡыу томшоғон сирып ултырған асыулы докторҙан шөрләпме, шымып ҡалды.

– Ул пациенттың хәле ҡәнәғәтләнерлек, тип әйтеп була. Март аҙағы – апрель баштарында уның торошо бик ауыр ине. Ныҡ яраланған көйөнсә уны ГПУ хеҙмәткәрҙәре миңә тапшырып китте. Бер нисә көндән һуң ғына иҫенә килде. Хәҙер инде кризис артта ҡалды... – тип ентекле яуапланы доктор.

Игебаевтың бәхете булған икән. Бөгөн генә, «бер аҙ билемде яҙып алайым әле» тип үҙ яҙмышын көтөп тамам әкәл сигенә еткән Абдрахманды ихатала таҡ та тоҡ утын ярып торған ерәнән үҙ палатаһына кире индергәйне доктор. «Әле һинең Ҡиәмәт көнөң килеп етмәгән, бөгөн-иртән һине ошо рәүештә күреп ҡалыуҙары бар, башҡаһына түҙҙең, инде хәҙер күп ҡалманы, бар, ятыуыңды бел!» – тип Игебаевты Аполлинарий Христофорович больницаға ҡыуҙы.

– Ә кем уны яралаған, әллә берәй бәлә-ҡазаға осранымы ул кеше? – тип һораны инструктор.

Доктор күптән әҙер ятҡан документтарҙы унан яуап көтөп ултырған вәкилгә һуҙҙы һәм өҫтәп әйтте:

– Пациент, бына шулай, ГПУ хеҙмәткәрҙәре тарафынан ҡаты туҡмалып, беҙгә ныҡ яраланған көйө тапшырылды. Иҫен юғалтҡан килеш уны ошо дауаханаға, минең ҡарамаҡҡа ҡалдырып киттеләр. Белгестәр диагнозы ҡулығыҙҙағы ҡағыҙҙарҙа асыҡ күрһәтелгән.

– Ә ГПУ кешеләре был хәлде нисек аңлатты? «Беҙ туҡмап уны шул рәүештә

килтерҙек» – тип әймәгәндәрҙер бит? – тип һораны аңы асыҡлана башлаған вәкил.

– Ҡайҙа ул?.. Улар ғәйепте бөтөнләйе менән ауырыуҙың үҙенә япһарҙылар. Йәнәһе лә, Игебаев йығылып, үҙен үҙе йәрәхәтләгән. Был, әлбиттә, енәйәт. Мин был хәлде шулай ғына билдәләй алам. Һеҙгә ул кеше менән осрашып, үҙе менән һөйләшергә мөмкин, – тип доктор урынынан тора башланы.

– Эйе, эйе. Мин әллә нисә саҡрым ер артылып, махсус ошо эш менән килгәнмен дә.

Инструктор доктор артынан эйәрҙе. Башы бинт менән уралған, больница халаты кейгән, башы ҡырылған бер дәү кешенең карауатта ултырыуы кантком вәкиленең йөрәгенә ҡурҡыу һалды. Күптән сиртелмәгән һаҡал-мыйыҡ төктәре ағарып һурыҡҡан шаҙра битенә сыҡҡан, тик уттай янған күҙҙәре генә күренеп торған был кешенең рәүеше, ысынлап та, әҙәм ҡурҡырлыҡ. Иҙәндә ғәжәпләнеп торған вәкилгә доктор бүкән һуҙҙы. Саквояжын иҙәнгә ҡуйып, вәкил оҙаҡ ҡына Игебаевҡа текләп ултырҙы.

– Һеҙ тәфтиш үткәрергә килгәс, бына, ҡарағыҙ... – Доктор Абдрахмандың башындағы бинтын тағата башланы. – Кантондың ГПУ хеҙмәткәрҙәре ғүмерҙә уңалмаҫлыҡ тамға ҡуйып киттеләр был иптәшкә. Маңлайындағы тәрән эҙҙәр – улар һуғып һалған йәрәхәт нәтижәһе. Ә бынығы – йыртылған яраны еп менән теккәндән һуң ҡалған юлаҡтар. Үкенескә ҡаршы, һынған маңлай һөйөген тигеҙ итеп уңалтып булманы. Маңлайы күгәреп, ғүмер-ғүмергә шулай ҡытыршы көйө ҡаласаҡ.

Ни әйтергә лә белмәгән инструктор ғәжәпләнеп ултырыуын дауам итте.

– Ул ғына түгел шул, тәфтишсе иптәш, – тип өҫтәп әйтте доктор. – Йә, Игебаев, артыңа әйләнеп ултыр әле, кантком вәкиле уныһын да күреп ҡайтһын.

Абдрахман карауатында әйләнеп ултырғас, уның халатын өҫкә күтәрҙе лә:

– Бынығын да күреп китегеҙ. Ҡулға алынған был егетте һеҙҙең кешеләр ни рәүешле һырлап беҙгә ҡалдырып киттеләр, ҡарағыҙ ҡанһыҙҙарҙың эшен. – Доктор нәфрәте йөҙөнә сыҡҡан асыу менән әйтеп һалды. – Улар кеше түгел, вәхшиҙәр!

Докторҙың әрнеүле һүҙҙәрен үҙенә тигәндәй ҡабул итеп ултырған инструктор уны урынына ултырырлыҡ һүҙ әйтергә лә уйлағайны, ләкин ниңәлер баҙнат итмәне. «Игебаевтың туҡмалыуы хаҡында тән яралары бигерәк тә асыҡ дәлил булып ярылып ята бит, ни тип уға һәм докторға бәйләнәһең. Шикләнергә урын юҡ», – тип кантком вәкиле айыҡ фекер йөрөттө.

– Гражданин Игебаев, Һеҙ ҙә доктор диагнозын раҫлайһығыҙмы, әллә Һеҙҙең был хәлгә ҡарашығыҙ икенсерәкме? – тип һораны ул.

Игебаев боролоп ултырҙы ла, ап-аҡ тештәрен ҡыҫып, йоҡа ирендәрен күгәргәнсе ҡымтыны ла, сүместәй йоҙроҡтарын төйөп:

– Минең хәлемдән килһә, мин ул ҡан эскес бәндәләрҙе ошо ҡулдарым менән быуып үлтерер инем! Ундайҙарҙың совет аппаратында еҫе лә булырға тейеш түгел. Бына кемдәр ул ысын халыҡ дошмандары! Әгәр ГПУ-ны был әҙәмдәрҙән тиҙ арала таҙартмаһаҡ, улар киләсәктә судһыҙ-ниһеҙ унар-йөҙәр кешенең башына етәсәк. Совет власы абруйына бысраҡ яғыусы был бәндәләр – йәмғиәт өсөн үтә ҡурҡыныс. Уларҙың урыны төрмәлә булырға тейеш, – тине Абдрахман, башын ситкә бороп.

– Игебаев иптәш, Һеҙ ошо һеҙҙең менән килеп сыҡҡан ваҡиға буйынса кантком исеменә аңлатма яҙа алаһығыҙмы? – тип һораны вәкил.

– Нишләп яҙмаҫҡа, яҙырмын. Ләкин ысынын әйтергә кәрәк: минең ҡәләм тотмағанға байтаҡ ваҡыт үтеп китте. Әҙерәк ҡытыршыраҡ булыр, ләкин кеше аңларлыҡ итеп яҙырға тырышырмын.

– Тағы ла бер һорау: Нәмәс волкомы бюроһында Һеҙҙең персональ эшегеҙ ҡаралған саҡта унда ҡатнашыуығыҙ ниңәлер теркәлмәгән. Быны сәбәбе нимәлә?

– Улар тикшергән саҡта мин унда барыу түгел, иҫемә лә килә алмай ошо карауатта аунап ята инем. Волком ул мәсьәләне минһеҙ генә тикшереп, хәл ҡылған. Һуңынан волкомдың бер эшмәкәре минең фирҡә билетын алырға килеп йөрөнө йөрөүен. Әлбиттә, мин уны биреүҙән ҡырҡа баш тарттым.

– Аңлашыла. Миңә бөгөн үк Йылайырға кире боролорға ҡушылған. Һеҙ, Игебаев иптәш, ҡыйын булһа ла, аңлатма ҡағыҙын сыймаҡлап әҙерләп ҡуйығыҙ инде. Ә хәҙер миңә ҡайтыу яғына ат-арба йүнләү өсөн Кейекбаев иптәш менән яңынан күрешергә кәрәк, – тип вәкил китергә ашыҡты. – Әйткәндәй, Аполлинарий Христофорович, әгәр ошо көндәрҙә Игебаев иптәште саҡырып телеграмма килеп төшһә, ул кантком бюроһына барып етерлекме? Уның сәләмәтлеге нисек?

– Уға тулыһынса нығыныу өсөн бер ай кәрәк. Уны ҡаҡ урман юлында һелкетеп, былай алыҫ араға алып китеү ғүмере өсөн ҡурҡыныс. Әлегә ул ятҡан урында ғына дауаланырға тейеш.

– Улай булғас, доктор иптәш, ошо турала һеҙҙән бюро исеменә мисәт баҫылған рәсми медицина раҫлауы мотлаҡ булырға тейеш. Шундай ҡағыҙҙы мин килеүгә таярлап ҡуйығыҙ инде.

– Уныһын эшләрбеҙ. Был бер ҙә тартып-һуҙып эшләнелә торған нәмә түгел. Бөтөн факттар күренеп тора. Быға үҙегеҙ ғыуаһ булдығыҙ,– тип доктор әле күңел тыныслығы урынына ултырып өлгөрмәгән Игебаевҡа ҡараны.

Көн кискә ауышып, ҡояш Яғалса ашаһына йәшеренә башлағас, волком секретарын табып һөйләшә алмаған вәкил яңынан волость больницаһына килде. Әҙерләнгән документтарҙы түш кеҫәһенә тыҡты ла башта ҡабарынып килеп ингән, ә хәҙер инде байғош хәленә төшөп ҡалған вәкил:

– Хөрмәтле Аполлинарий Христофорович, хәҙер бик һуң инде. Нәмәстә һеҙҙән башҡа урындағы кешеләр ҙә ҡалмаған. Мине урам уртаһында ҡалдырмаҫһығыҙ бит, берәй ат табып, яҡын ауылға алып барып ҡуйһалар, бик тә яҡшы булыр ине, – тип ялбарҙы.

– Билдәле, бында Һеҙ килгән бәхмис тройканы табып булмаҫ, ҡулымда эш атым ғына бар. Әгәр риза булһағыҙ, Икенсе Этҡол ауылына алып барып ҡуйырға әмер бирермен. Юл алдынан әҙерәк әүҡәтләнеп тә алырһығыҙ, бәлки. Ашханабыҙҙа борсаҡ ашы менән бутҡа булырға тейеш, – тине доктор.

– Рәхмәт Һеҙгә. Минең бер-ике тапҡыр ҡабырлыҡ аҙыҡ-әүҡәт бар ул барлығын, – тип вәкил, күрһәтергә теләгәндәй, саквояж тотҡаһына йәбешкәйне, унда ике шешә көмөшкә ятҡаны иҫенә килеп төштө лә, усы янған кеше һымаҡ, ҡулын тиҙ генә кире тартып алды.

Нәмәс волосына сыҡҡан, юлда арыу ғына ҡунаҡлау шауҡымы менән урмантау араһында һәүетемсә генә үҙ ғәме менән йәшәп ятҡан волость мәркәзенең «аҫтын өҫкә әйләндерергә» хыялланған кантком вәкиле көймәле тройка менән килеп, эш арбаһына егелгән сабан йөк атында ҡайтыу юлына сыҡты. Икенсе көнөнә Иван-Кувалатҡа килеп еткәс, ул ауыл осонда атын кире борҙо ла ауыл шураһына йәйәү генә атланы. Ләкин юлда таныш саквояж тотоп, һәлпәнләп атлап килгән яҡташын ауыл байҙары тағы ла эләктереп алдылар, һәм вәкил тағы ла шуларҙың ҡосағына сумды.

Партияның Үҙәк Комитеты секретары Сталин үҙенең Себергә барғандан һуң бер сығышында шуны әйткәйне: «Мин унарлаған... власть вәкилдәрен күрҙем.

Улар барыһы ла тигәндәй кулактар елкәһендә йәшәйҙәр, билдәле. Шуға күрә улар менән килешеп йәшәргә тырышалар. Минең һорауға улар, кулактар фатиры таҙараҡ һәм унда яҡшыраҡ ашаталар, тип яуап бирҙе...». Әйтерһең дә, Сталин махсус рәүештә ошо кантон вәкиле артынан эйәреп йөрөгән, сөнки был кеше тағы ла ауыл кулактарында буйтым ғына ҡунаҡ булып, бер нисә көндән кантон мәркәзе Йылайырға тройкала ҡайтып төштө.

***

Бер аҙ ваҡыт үткәс, партияның кантком секретары Иван-Кувалат комсомол ячейкаһынан бер төркөм йәштәрҙән үҙе ебәргән вәкилдең кулак арбаһына ултырып, уларҙың йырын йырлауы тураһында ентекләп яҙылған ҡолас буйы ялыу алды. Сүп өҫтөнә сүмәлә тигәндәй, шул кешенең тикшереү һөҙөмтәһе тураһында тапшырған документтарын ҡарап, эсе бошоп ултырған Самохинды был ялыу сығырынан сығарҙы. Кантон партия ойошмаһында беренсе булып яңы иҡтисади сәйәсәткә ҡаршы сығыш яһарға баҙнат иткән Ялан ауылы коммунисына өлгөлө суд ойошторop, республиканы бер шаулатырға өмөтләнгән Самохиндың хыялы көтмәгәндә һабын ҡыуығы кеүек шартлап ҡуйҙы.

«ГПУ начальнигы мине, кантком хужаһын, төп башына ултыртып китте – хәҙер минең рекомендация менән Мәскәү курстарында рәхәтләнеп йөрөй. Үҙе менән алып килгән юғары юридик белемле өс белгесте лә ҡайҙалыр урынлаштырып өлгөргән, уларҙың хәҙер ҡайҙа йөрөгәнен эт тә белмәй. Игебаевты ҡулға алырға киткән ГПУ төркөмөнөң етәксеһе Зарипов психиатрия больницаһында ята. Йылайыр кантонында хәҙер был эш менән бәйле ике генә кеше ҡалды: береһе – минең аппаратта эшләгән Иван-Кувалат кулактарының йырын йырлаусы инструктор, икенсеһе – Яланға барған төркөмдән, Игебаевҡа ҡарата бер ниндәй ҙә яуызлыҡ ҡылмаған кесе командир Кувшинов», – тип уйлай Самохин. Эш үткәс, иртәгә ошо мәсьәлә буйынса бюро йыйырға тейеш кантком башлығы, мейеһен шығырлатып, баш вата. Ватырлыҡ та шул. Бәлки, Игебаевты партиянан сығарып, яңынан төрмәгә ябырғалыр? Ул саҡта йәндәй дуҫ Филипп менән ара боҙоуҙан ғәйре, Игебаевты төрмәгә бикләп, уның телен тыйып буламы? Ул ГПУ работниктарының үҙенә ҡарата ҡылған енәйәтен асып һаласаҡ. Бына ята уның алдында Игебаевтың туҡмалыуы тураһында етди документтар. Нишләргә? Бына шундай сиселмәгән төйөн Самохинды борсой. Был ҡатмарлы хәлгә, бәлки, Филипп Афанасьевич асыҡлыҡ индерер, аҡыл бирер. Ул ҙур тәжрибә туплаған кеше, уның килеүен көтөргә кәрәк. Ғәҙәттә, ул бюроға бер-ике сәғәт алданыраҡ килә торған. Ошо уй Самохиндың көҙгө сырхау көндәй боҙолған кәйефен бер аҙ күтәргәндәй итте.

Әмәлгә ярағандай, Үлмәсов бюро башланырҙан алда һөйләшер өсөн Йылайыр кантонының көньяҡ-көнсығыш төбәгендә эшләгән разведка-эҙләнеү отрядының башлығын саҡыртҡайны. Кантком алдында еңел машина килеп туҡтағанда, отряд начальнигы күптән бейек болдорҙа көтөп тора ине инде. Ләкин Үлмәсов низер һиҙенде һәм үҙ кешеһе менән һаулашты ла, һөйләшеп тормай, Самохин кабинетына йәһәт кенә үтте. Уны дүрт күҙе менән көтөп ултырған хужа, урынынан тороп:

– Өлгөрөм кешегә кейек үҙе ҡаршы йүгереп килә, тиҙәр боронғолар, – тип ҡаршыланы.

Кантком секретары, Үлмәсовтың ҡаршыһына ултырып, бөгөн ҡараласаҡ мәсьәләнең асылын уға энәнән-ептән теҙеп һөйләп бирҙе.

– Эйе, Иван Афиногенович, беҙҙең хәлдәр маҡтанырлыҡ түгел икән. Бында бик оҫта итеп Соломон ҡарарын ҡабул итеү мотлаҡ.

– Уныһы ни тағы?

– «Бүре лә туҡ, мал да теүәл булһын» тигәнде аңлата.

– Дөрөҫ, тап шулай кәрәк.

Улар хәҙер инде икәүләп уйланды. Бер аҙ шым ғына ултырғас, Филипп Афанасьевич телгә килде:

– Беҙ нисек кенә итһәк тә, һин минең үтенесте иҫәпкә алаһыңмы-юҡмы, ләкин Игебаевты партиянан ҡыуып, төрмәлә тотоп булмай. Башҡортостанда беҙ бындай ҡытыршы сәйәси мәсьәләлә пионер булмайыраҡ торайыҡ. Әгәр был хәл башҡа кантондарға ла ишетелһә, республикала ҙур кампания башланасаҡ. Партия органдарына үҙҙәренә ҡаршыраҡ, телле-тешле коммунистарҙан ҡотолоу өсөн юл асыласаҡ. Ләкин бының бүтән, ҡатмарлыраҡ яғы ла бар. ГПУ тарафынан әле тәфтиш башланырҙан алда туҡмалып, ғәрип хәлендә тороп ҡалған Игебаевтың ауыҙына һалам тығып булмаҫ. Ул тауыш күтәрә башлаһа, һиңә хәйләкәр Брагинскийҙы ҡуҙғатырға, хатта уны ғына түгел, башҡаларын да яуапҡа тарттырырға тура киләсәк. Ә был инде йорт нигеҙен ҡуҙғатыу менән бәрәбәр.

Донъяның әсеһен-сөсөһөн күп татыған, ҡасандыр йәшерәк сағында эсерҙар йоғонтоһона бирелеп, «илдә социализм төҙөүҙең төп көсө ер эшкәрткән крәҫтиәндәрҙән ғибәрәт булырға тейеш» тигән фекерҙе алға һөрөп, большевиктарҙың «идея дошманы» мөһөрөн йөрөткән Үлмәсов өсөн Абдрахман Игебаевтың шул уҡ крәҫтиәнде яҡлап һөйләгән сығышы ғына түгел, ә тормошта ҡайһы бер практик башҡарып ятҡан ғәмәле лә күңеленә ятышлы ине. Эйе, Игебаевтың яңы иҡтисадтың йүнәлешен тәнҡитләп һөйләгән һүҙҙәре уның рухына тап килде, күңеленә майҙай һеңде. Шуға күрә күптән түгел, артыҡ мөһим эше булмаһа ла, йомош табып, Абдрахман яҙмышы тураһында белешеү өсөн Самохин эргәһенә Йылайырға килеп китеүе, билдәле, тиктәҫкә генә булманы. Шуғалыр ҙа бөгөн Игебаевтың яҙмышын хәл итеү мөҙҙәте еткәс, Үлмәсов ошо буталсыҡта уны ҡорбан итергә теләмәне.

– Минеңсә, Игебаев эшенең бюро өсөн бер ниндәй ҙә хәжәте юҡ. Ул беҙгә, сауҙәгәрҙәр әйтмәксе, дивиденд йәки файҙа бирмәйәсәк. Был шау-шыуҙың тишеген бәләкәйерәк ҡорбандар менән дә ябырға булыр, – тип тыныс әйтте үҙ фекерен управляющий.

– Нисек һуң? – тип һораны Самохин ҡыҙыҡһыныу менән.

– Бына һинең инструкторың бер аҙнанан артыҡ йөрөп, кулактарҙа ҡунаҡ булып ҡайтыуҙан башҡа ни ҡыйратты? Синфи һиҙгерлеген юғалтҡан өсөн уға берәй ҡаты шелтә иғлан итеп, эштән ҡыуырға кәрәк. Бынан тыш, Игебаевты бер ниндәй сәбәпһеҙ язалауҙа ҡатнашҡандарҙың өсөнсөһөн... Кувшинов тигән әҙәм бит әле?

– Эйе, эйе, – баш ҡаҡты Иван Афиногенович.

– Бына был бешәлкәһеҙ кеше, законһыҙлыҡҡа юл ҡуйып, ҡул ҡаушарып торған өсөн, партия язаһына тарттылырға тейештер!? Ә ул кеше һаман именаман, наганын тағып аппаратта эшләп йөрөй. Уны ла ҡыуығыҙ.

– Хәлдәр былай барһа, бәләнең башы, был эште килтереп сығарған коммунист, һин ҡанат аҫтына алған Игебаев күҙ уңынан төшөп китә түгелме? Уға ниндәй яуаплылыҡ йөкмәтергә теләйһең? Һин уны нисек кенә аҡларға тырышһаң да, ул – бөтә кантонда партияның сәйәсәтенә ҡаршы сығырға баҙнат иткән берҙән-бер кеше, – тип Самохин дуҫының йомшаҡ еренән матҡып тоторға тырышты.

– Һин, Иван Афиногенович, мине лә уның менән бер эскәмйәгә ултыртырға самалайһың, шикелле? Иңеңә ауырыраҡ күтәреп, эсеңдең бүһере ҡалҡып сығыуынан әҙерәк ҡурҡмайһыңмы? – тип мәрәкәләне Үлмәсов.

– Юҡ, юҡ, был тик дуҫтарса, яҡын итеп һөйләшеү генә, – Самохин дуҫын тынысландырырға ашыҡты. – Хәҙерге донъяға һис тә ышаныс юҡ. Үҙеңдең иң яҡының менән дә һуғыштырмаҫ тимә!

– Ғөмүмән, Игебаевтың эше беҙҙең бюро ҡарарының беренсе урынында торорға, таяҡтың йыуан башы уға төшөргә тейеш. Әгәр һинең ГПУ-лар уны хөкөм ҡарары сығарырҙан алда законһыҙ туҡмамаһалар, язаның иң ҡатыһын, һис шикһеҙ, Игебаев алырға тейеш ине, ләкин... – Үлмәсов бер аҙ уйланып ултырҙы. – Шулай булғас, уны «партия сафында ҡалдырмаҫҡа» тигән волком бюроһы ҡарарын ғәмәлдән сығарып, иҫәп карточкаһына индереп, ҡаты шелтә бирергә тура килер. Ә ҡалғандарын бюро барышында ҡарарбыҙ.

Ләкин кантком бюроһына йыйылған ғилем кимәле генә түгел, фекер йөрөтөү офоғы ла төрлөсә булған партия ағзалары, Самохин уларҙы мәсьәләнең асылы менән таныштырғас, ул һыҙған һуҡмаҡтан ғына барырға теләмәне. «Партияның тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү тәғлимәте – социализм йәмғиәтен алға этәреүҙең төп көсө» тип иғлан ителгән шаулы осорҙа хужалары алдан әҙерләп ҡуйған ҡамытҡа үҙ теләге менән муйындарын һонорға ашығып барманы.

Беренсе булып прокурор баҫты. Ул төкрөктәрен сәсә-сәсә һөйләгән уҫал сығышында «оппортунист, партияның ғына түгел, тотош халыҡ дошманы» Игебаевтың тетмәһен тетеп һалды. «Билдәле, бында уның ғәйебен йомшартырлыҡ бер дәлил – йәғни ГПУ хеҙмәткәрҙәре тарафынан туҡмалыу факты бар-барын, ләкин ул – бөтөнләй икенсе мәсьәлә. ГПУ башлығы, дары еҫен һиҙеп, Мәскәүгә олаҡҡан Брагинский һәм уның эйәрсендәре яза алырға тейеш. Ләкин был факттың Игебаев ҡылған енәйәткә бер ниндәй ҙә касафаты юҡ. Шулай булғас, мин «волкомдың оппортунист Игебаевты партиянан ҡыуырға» тигән ҡарарын тулыһынса яҡлайым һәм уны «ҡул аҫтына алырға» тигән үҙ ордерымды яңынан раҫлайым!» – тип тамамланы ул телмәрен.

Уның дошманды фаш итеп һөйләгән һүҙен канткомол сәркәтибе лә, beләгенә ҡыҙыл сепрәк таҡҡан, осоп-төшөп торған йәш кеше, яҡлап сыҡты. «Партияның сәйәсәтенә емергес удар яһаған оппортунист Игебаев кантком секретары Самохин иптәштең, – Иван Афиногенович был урында борғолана башланы, – үҙ ҡанаты аҫтына алырға тырышыуы канткомол етәкселегенә һис тә аңлашылып етмәй. Яңы иҡтисад нигеҙен ҡаҡшатырға, кулактар ҡотҡоһона бирелеп, халыҡ хужалығын хата юлдан алып китергә маташыусы дошмандарға фирҡә сафында урын юҡ. Уның һәм ундай кешеләрҙең урыны ана тегендә, яр башындағы тимер ишекле зинданда!» – тип комсомол башлығы кантком бинаһының тәҙрәһенән күренеп ултырған төрмәгә ҡарап һул бармағын һондо.

Ләкин бюрола икенсерәк фекерҙәге кешеләр ҙә юҡ түгел ине. Бигерәк тә Йылайыр кантонын ғына түгел, уның етәкселәрен дә ғүмер баҡый үҙ иткән, ғөмүмән был төбәк менән борон-борондан иҡтисади сәйәсәттә йәшәгән, уға терәлеп ятҡан Һабыр, Байыш волосы вәкилдәре, Үҫәргән яҡтарының башҡа етәкселәре, үҙ хужаларының тыныуын һиҙеп, прокурор, канткомол етәкселәренең тәҡдимен ҡәтғи кире ҡаҡты.

– Игебаев иптәш, уның тәржәмәи хәленән күренеүенсә, бай ҡатламдан сыҡҡан кеше түгел. Граждандар һуғышы осоронда, ҡайһы бер бөгөнгө коммунистар шикелле, үҙ ояһында йәшеренеп ятмаған. Совет власын, революцияны яҡлап йәнен аямай һуғышҡан. Үҙенең партия сәйәсәтен ныҡлы аңларлыҡ белеме лә бар кеүек. Ширҡәт башлығы булып, ана ниндәй эштәр башҡарып, ауыл ярлыларын яҡтыға, мул тормошҡа сығарырға барлыҡ көсөн һалған кеше. Бындай оҫта ойоштороусылар беҙҙә күберәк булһын ине. Мин уны партиянан сығарыуға бөтөнләй ҡаршымын. Шелтә биреп, фирҡәлә ҡалдырырға кәрәк, –

тине өҫтөнә кейгән кәзәкиһен ҡыҙыл билбау менән быуған мыҡты кәүҙәле Һабыр волосы сәркәтибе Атанғолов.

– Мин Атанғолов иптәштең тәҡдимен дөрөҫ тип табам һәм тулыһынса уға ҡушылам. Әгәр беҙ уның ише ваҡытлыса яңылышҡан, бигерәк тә төп халыҡтан сыҡҡан кадрҙарҙың, башына һуғып торһаҡ, социализм өсөн көрәштә алға бара алмабыҙ, – тине Байыш волосының башлығы Назаров, ғәрәптәргә тартым ҡуңыр ҡаҡса битле уҙаман. – Ә бына ғәйепһеҙ кешене уның фирҡә эше хәл ителмәйенсә законһыҙ рәүештә тыҡмап, йәрәхәт һалған Брагинскийҙың үҙен һәм уның эйәрсендәрен дә биләгән вазифаларынан бушатып, фирҡәнән ҡыуғанда, бик тә дөрөҫ һәм ғәҙел булыр. Ундайҙар беҙҙә һуңғы ваҡытта күбәйә башланы, уларҙың ҡулдарын мотлаҡ ҡыҫҡартырға кәрәк!

Самохин аҫтан ғына уң яҡта ултырған управляющийға ҡәнәғәт ҡараш ташланы ла, уның ишараһын аңлап, йомғаҡлау һүҙенә күсте:

– Билдәле, коммунист Игебаев ҙур сәйәси хата эшләгән. Аңлымы-юҡмы, ул оппортунизм һаҙлығына инеп батҡан. Бөгөн Совет власы сәйәсәтенә ҡаршы аҫтыртын көрәш алып барған бай ҡатлам кешеләре яғына күскән. Бының өсөн, әлбиттә, уны партия сафынан ҡыуырға кәрәк ине, һәм был ҡарар ғәҙел булыр ине. Ләкин… – Самохин уны тыңлап ултырған бюро ағзаларына күҙ йүгертеп сыҡты ла өҙөлөп ҡалған һүҙен ялғаны. – Ҡарағыҙ әле, ул асылда кем һуң? Ярлы ҡатламдан. Урал өлкәһе Ҡыҙыл волосындағы бер бай казактың батрагы. Шунда синфи көрәш утында сыныҡҡан, шунда партияға ингән. Тыуған ауылына ҡайтып, ер эшкәртеү ширҡәте ойошторған һәм ярайһы ғына уңыштарға өлгәшкән. Ҙур ғына һаналған Ялан ауылында ул яңғыҙ коммунист. Бына беҙ уның эше менән өс айға яҡын шөғөлләнгән арала, волостағы Игебаев ойошторған берҙән-бер тигәндәй уңышлы ширҡәт таралған, банкротҡа сыҡҡан…

– Бик тә шәп етәксе, өлгөлө коммунист булғас, әйҙә, Иван Афиногенович, уның эшен маҡтап «Йылайыр хәбәрҙәре» гәзитендә яҙып сығайыҡ, – тип Самохиндың һүҙен бүлде урынында сыҙамай ултырған прокурор.

– Бюроның эшен тамамлайыҡ та барыһын да: яҡшыһын да, яманын да яҙып сығайыҡ. Кантон территорияһында совет закондарының нисек үтәлеүе һәм баш-баштаҡлыҡ хөкөм һөрөүе арҡаһында Игебаевтың Йылайырға ла килеп етмәйенсә ҡырағайҙарса тыҡмалып, өс ай буйы дауаланырға мәжбүр булғанын да яҙып ебәрәйек, – тине Самохин, күҙҙәрендә нәфрәт осҡондары сәсеп ултырған прокурорға төрттөрөп. – Кантон күләмендә законлылыҡтың камил, даими тормошҡа ашырылыуын кем контроль аҫтында тоторға тейешлеген дә әйтербеҙ.

Самохин бюро ағзаларын ҡарап сыҡты ла һүҙен дауам итте:

– Бына ошо үрҙә әйтелгәндерҙе иҫәпкә алып, сәйәси хата юлға баҫҡаны өсөн коммунист Игебаев Абдрахман Әбделғәлим улына, иҫәп карточкаһына теркәп, ҡаты шелтә иғлан итергә тәҡдим бар. Билдәле, Нәмәс волкомы ҡабул иткән ҡарарҙы ғәмәлдән сығарырға кәрәк. Бынан тыш, бөгөнгө көндә ГПУ-ның юғары курстарында уҡып ятҡан Брагинский ҙа язаһыҙ ҡала алмай. Игебаевҡа ҡарата былдай законһыҙлыҡ – уның ҡулы аҫтындағы хеҙмәткәрҙәрҙең енәйәтле аҙымы, улар ҙа язаға тарттырылырға тейеш. Бөгөнгө көнгә уларҙан бер кесе командир Кувшинов ҡына тороп ҡалған. Ләкин ул, башҡалар кеүек, Игебаевҡа ҡул күтәрмәгән. Шулай ҙа йәш коммунист Кувшиновты фирҡә язаһына тарттырмау дөрөҫ булмаҫ, уға ла шелтә бирергә кәрәк. Киләсәктә уға, үҙ иптәштәре судһыҙниһеҙ кеше тыҡмағанда, ҡул ҡаушырып, битараф тормаҫҡа һабаҡ булыр. Әйткәндәй, ошо мәсьәләгә бәйле тағы бер әтнәкә сығып тора, – тине лә Иван Афиногенович Иван-Кувалаттан унлап кеше имза ҡуйған волком инструкторы Семенов өҫтөнән яҙылған ялыуҙы ҡулына алып, бюро ағзаларына күрһәтте.

– Унда ҡул ҡуйғандарҙың берәйһе бында ултыралыр, бәлки. Әгәр булһалар, аңлатма бирһендәр! – Филипп Афанасьевич һүҙгә ҡыҫылды.

– Әлбиттә, ул иптәштәр бюро ултырышына саҡырылған. – Самохин бер нисә кеше бөршәйеп ултырған мөйөшкә эйәк атты. – Ул ялыуҙың йөкмәткеһен, беренсенән, бюро ағзалары белергә тейеш. Икенсенән, Семеновтың үҙен тыңлау мотлаҡ, сөнки бында һүҙ уның тураһында бара.

Самохин ҡысҡырып Семенов өҫтөнән яҙылған ялыуҙы уҡып ишеттерҙе. Шунан күҙҙәре шешмәкләнеп ҡыҙарған, өҫтөнә гимнастерка, галифе салбар кейгән тулы битле Семеновты баҫтырҙылар. Бюро ағзалары күпме генә һорауҙар биреп ҡыҫтамаһындар, кишер кеүек ҡыҙарған, әлдән-әле усы менән бите буйлап аҡҡан тирен һөртөп торған инструктор үҙен аҡлау өсөн ауыҙынан бер һүҙ ҙә һығып сығара алманы. Һорауҙарға ла йүнле яуап бирмәне.

– Сталин иптәштең Себергә ҡайтыу йомғаҡтары хаҡында «Правда» һәм «Известия» гәзиттәрендә баҫылып сыҡҡан мәҡәләһен уҡынығыҙмы? – тип һораны прокурор.

– Уҡырға өлгөрмәнем әле, – тип яуапланы ҡурҡҡан Семенов.

– Күренеп тора шул. Бына шул мәҡәләлә командировкаға сыҡҡан власть вәкилдәренең кулак йорттарына фатирға төшөп, шуларҙың аш-һыуын ашап-эсеп, аҙаҡ үҙҙәренең принципиаль ҡараштарына хыянат итеүе хаҡында яҙылған.

– Һин, прокурор иптәш, бәләкәй генә хата ебәрҙең. Ул ҙур мәҡәләлә күберәк партия вәкилдәре хаҡында түгел, ә унарлаған прокурор, суд хеҙмәткәрҙәренең кулактар елкәһендә тороуы, ә һуңынан улар менән килешеп йәшәүҙәре тураһында яҙылған, – тип төҙәтте Самохин.

– Себерҙә булғандыр ҙа, бәлки. Иншалла, ундай факттар беҙҙең кантонда прокуратура һәм суд вәкилдәре яғынан түгел, ә партия кантком комитеты инструкторы тарафынан ебәрелгән. Быньң өсөн кантком етәкселәре лә яуаплы түгелме? – тине прокурор, Самохиндың үҙен эләктереп. – Шулай булғас, атта ла, тәртәлә лә бар. Беҙгә, бөтә етәксе органдарға ла, бергәләп эшләргә кәрәк. Ундай бысраҡ тап барыбыҙҙың да салғыйына йәбешкән.

– Һеҙҙең иҫкәртеү менән килешмәү мөмкин түгел. – Иван Афиногенович ризалығын белдерҙе. – Шул фекергә ярашлы, Семеновты бөгөн үк кантком аппаратынан ҡыуырға кәрәк. Әйҙә, артабан да Иван-Кувалат кулактарының тәрилкәһен ялаһын.

– Дөрөҫ, ғәҙел була, – тиеште бюро ағзалары.

– Кем дә кем ошо ҡарарҙы ҡабул итә икән, ҡулығыҙҙы күтәрегеҙ. Барыһы ла риза. Кантком бюроһына индерелгән мәсьәлә тамам. Ултырышты ябыҡ тип иғлан итәбеҙ, – тип һүҙен тамамланы ла Самохин, аяғүрә баҫып, бюро ағзаларының ишеккә йүнәлгәнен күҙәтеп торҙо.

Өс көндән һуң Нәмәс волкомы кантком ҡабул иткән ҡарарҙың күсермәһен алды. Аяғына шипалтай дауахана ҡатаһы, өҫтөнә буй-буй төшкән йәшел куртка, шул уҡ төҫтәге салбар кейгән, маңлайының ҡап уртаһынан ҡуйы ҡаштары араһына тиклем хәҙер инде күгәреп уңалған яралы, Совет власы өсөн барған ҡаты бәрелештәрҙә алған йәрәхәтенә өҫтәп арҡаһына юлаҡ-юлаҡ ҡамсы эҙҙәре алған, ләкин әле лә ихтыяры һынмаған Абдрахманға кантком бюроһы ҡарарын уҡып ишеттерҙеләр.

*(Дауамы бар.)*



Айгөл АЙЫТҠОЛОВА

## Һинһеҙ йәшәгәнмен

*Күпме ғүмер уҙған һинһеҙ йәшәп,*
*Йәшлек инде, ана, йыраҡта...*
*Һинһеҙ атҡан күпме алһыу таңдар,*
*Һинһеҙ икән нисек йыр аҡҡан?..*

*Бөрөләнгән һинһеҙ умырзая,*
*Һинһеҙ яуған көмөш ямғырҙар...*
*Сит-яттарға нисек йырҙар арнап*
*Йәшнәгәнмен йәшлек-яҙҙарҙа...*

*Күпме ғүмер һинһеҙ йәшәгәнмен,*
*Һинһеҙ үткән юлдар-йылдарым...*
*Ҡул һуҙымы хәҙер беҙҙең ара –*
*Яҡынайтыр микән йырҙарым...*

***

*Ләүкеп һүнер бер саҡ*
*Һин ҡабыҙған усаҡ.*
*Көл-күмергә ҡалыр күңелем...*
*Тәндең йәнһеҙ үкһеп,*
*Йәндең тәнһеҙ үкһеп*
*Йәшәгәнен бармы күргәнең?..*
*Ҡоро туҙҙыр йәнем,*
*Яндыр! Ҡабыҙ, йәле?!*
*Ялҡындарың алһын алҡымдан!*

*Айгөл Айытҡолова (1981) Йылайыр районының Юлдыбай ауылынан. Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Әлеге мәлдә Күгәрсен районы телевидениеһында баш мөхәррир булып эшләй.*

*...Ҡыҫыр күмер баҙлай –*
*Өмөт итмә наҙға...*
*Һуңғы усаҡ һүнде һулҡылдап...*
*Илап...*

***

*Ҡыҙыл, һары япраҡайҙар*
*Юлдарыма түшәлә.*
*Гүйә, тәңкәләрҙән торған*
*Оло бер тау ишелә.*

*Һуҡмаҡтағы эҙҙәрҙе лә*
*Шул тәңкәләр ҡапланы.*
*Хыял селпәрәмә килде,*
*Өмөттәрем ҡалманы...*

*Биҙәкле алтын балаҫҡа*
*Аяҡ баҫам һаҡ ҡына...*
*Яуапһыҙ ҡалған һөйөүем –*
*Өҙөлгән япраҡ ҡына...*

***

*Һине уйлап, янып-көйөп*
*Үтә лә китә көнөм.*
*Төштәремдә бер күрһәм дә,*
*Йәмләнеп китә өнөм.*

*Һарыларға һабышамын,*
*Уйҙарымдан китмәйһең.*
*Наҙлап-һөйөп яратырға,*
*Һағышымды таратырға,*
*Исмаһам, бер килмәйһең.*

*Талпыныуым, осоноуым –*
*Яҙҙарым еткән икән.*
*Һине көтөп, көтөк булып*
*Көндәрем үткән икән.*

*Йөрәгемдең имсеһе һин,*
*Димсеһе һин күңелдең,*
*Ҡараштарың иретте лә,*
*Хистәремдән түгелдем.*

*Әй, шашына, тиле йөрәк,*
*Һағышым үткән икән.*
*Күҙҙәремә бер тултырып*
*Ҡарауың еткән икән.*



**Алмас ШАММАСОВ**

## *Быуаттар «аһ»ы*

«Хушығыҙ, дуҫтарым!»
А.С.Пушкиндың үлер алдынан
эш бүлмәһендәге китаптарына
әйткән һуңғы һүҙҙәре

*Пушкин ағай, мин бөгөн һеҙҙә ҡунаҡта булдым.*
*Бына, ниһайәт, төштө юлым*
*Һеҙ йәшәгән, һеҙ йән биргән йортҡа:*
*Әйтерһең дә, моңло гөлбаҡсаға ҡундым,*
*Мин – бер ҡошо башҡортомдоң.*

*Бүлмәләрҙән бүлмәләргә атлап,*
*Һеҙҙең шиғри сүрәләрҙе бер ҡабатлап,*
*Пушкин ағай, рухығыҙҙы мин эҙләнем*
*Ошо яҡты, оло бүлмәләрҙән,*
*Биҙәүестәр, башҡа затлы нәмәләрҙән,*
*Тик тапманым унда,*
*Тик тапманым.*

*Алтын-көмөш ялтырауыҡтар,*
*Түрәләр табынған байлыҡтар*
*Һаҡламаған һеҙҙең ҡул йылыһын,*
*Һаҡламаған һеҙҙең күҙ нурҙарын.*
*Зиннәтле йыһаздар түйында*
*Ишетмәнем шағир йырҙарын.*

*Тик, сеү, йәнем, тояһыңмы?*
*Ишек асылыр ҙа, унан*
*Яраланған шағир һулышын,*

*Алмас Шаммасов (1987) Өфө ҡалаһында тыуған. БДУ тамамлай. «Ватандаш» журналы редакцияһында эшләне. Әлеге ваҡыта БР Президенты хакимиәте референты булып эшләй, шулай ук БДУ-ла укыта. Бер шиғри китап авторы.*

*Олпат йөрәгенең киң тибешен*
*Йылдар аша һуҙылған сылбырҙарҙан*
*Ишетәһеңме?*
*Был – Пушкиндың эш бүлмәһе.*
*Был – Пушкиндың һуңғы бүлмәһе.*
*Күңелкәйем китте тулышып.*

*Ҡыйын, Пушкин ағай, ҡарайым да*
*Китаптарығыҙ тыуған өҫтәлгә,*
*Китаптарығыҙ тулы кәштәләргә,*
*Эх, эшләргә лә бит һеҙгә эшләргә!*
*Күнел дауаларын сәсеп кешеләргә.*

*Ҡыйын, Пушкин ағай, ашыҡтығыҙ һеҙ ник?*
*Ник ҡапландығыҙ, Матросовтай,*
*Ҡара быуатығыҙ пуляһына?*
*Йөрәк һыҡтай, әрнеп һыҡтай.*
*Бейек имәндәр һына?!*
*Ник һына?!*

*Һуңғы һүҙҙәрегеҙ, аһ, Пушкин ағай,*
*Заманығыҙ зары түгелме?*
*«Хушығыҙ, дуҫтарым!» – кешеләргә түгел,*
*Китаптарға әйткән рәхмәтегеҙ*
*Шул быуаттың «аһ»ы түгелме?!*

*Пушкин ағай, бөгөн дә бит, ана,*
*Батшалар ҡоторған заманда,*
*Байлыҡҡа табынған әҙәмгә,*
*Намыҫты көсләгән, үлтергән*
*Ҡәбәхәт, хәшәрәт йәндәргә*
*Дуҫ тиеп әйтергә буламы?*

*Азат һүҙ ҡыуылған заманда,*
*Туғандар бер-берен һатҡанда,*
*Рәсәй йоҡоға батҡанда,*
*Иҫерешеп ятҡанда,*
*Ысын дуҫты табыу еңелме?*

*«Хушығыҙ, дуҫтарым!» – был һүҙҙәр*
*Һеҙ йәшәгән ҡара дәүергә,*
*Беҙ йәшәгән ҡара дәүергә*

*Үлемесле хөкөм.*
*Пушкин ағай, һеҙ бик кәрәк бөгөн.*
*Айырыуса бөгөн.*

*Уяныrмы Рәсәй?*
*Уяныrмы кешелек?*
*Пушкин, бәхет йондоҙо ҡабыныrмы?*
*Ысын дуҫтар тик китаптар түгел,*
*Ә кешеләр ысын дуҫ булыrмы?*
*Шул көн тыуыrмы?*

*Пушкин ағай, һеҙҙең дуҫтарығыҙ менән*
*Булмағеҙҙә серләшкәйнем шулай.*
*Күҙ йәштәрем тамып ҡалды,*
*Кисерегеҙ, зинһар, шағир ағай.*
*Һеҙҙең өсөн,*
*Тыуған илем өсөн*
*Йөрәк илай.*
*Һыҡтап-һыҡтап илай.*

## Тик йәй булһа күңелдә...

*Яҡты миҙгел, аҡ йәшендәй,*
*Ҡосҡанда Ерҙең тәнен,*
*Йәйге балаҫ табынының*
*Тойғанда татлы тәмен,*

*Йәйҙең бешкән ирендәре*
*Үпкәндә наҙлап-наҙлап,*
*Ер эскәндә тирем тәмен*
*Янғанда ҡояш баҙлап,*

*Хеҙмәт фәрештәһе гиҙеп*
*Йөрөгәндә ҡырҙарым,*
*Саф шишмәлә хәл-көс йыйып,*
*Көр осҡанда йырҙарым,*

*Тиҙ(е)рәк һыпыртҡанда, ҡурҡып,*
*Төн ҡоршауы ҡояштан,*
*Күктә янған ал усаҡта*
*Ҡыҙғанда әҫе баштан,*

*Беҙ шатбыҙмы йәй йәменә,*
*Беҙ – аҡ ҡышлы күңелдәр?*

*Аңларбыҙмы, бик йыш йәндә*
*Үҙгәргәндә миҙгелдәр?*

*Ҡояш апай, юҡ, кәрәкмәй,*
*Унан ҡасып йыш ҡына,*
*Һалҡын алабыҙ аҡсаға –*
*Беҙгә кәрәк ҡыш ҡына.*

*Йәйҙе ҡышҡа бағышлайбыҙ:*
*Ҡышҡа – йәйҙең ҡөҙрәте.*
*Йәйен сана әҙерләйбеҙ,*
*Ҡышын булыр, тип, рәтле.*

*Беҙ һыуыҡҡа табынабыҙ –*
*Йәй һуң бит ят түгел дә.*
*Йәйҙең тәмен тойоу мөмкин,*
*Тик йәй булһа күңелдә...*
*Йәй йыр булып түгелһә...*

## *Тыуған көндәге уйланыуҙар*

*Бына бер йыл осто тағы*
*Минең ғүмер юлымда.*
*Кисә –ун һигеҙҙә,*
*Бөгөн –*
*Ун туғыҙым ҡулымда.*

*Кисә – артта,*
*Бөгөн – алда:*
*Атларға ла атларға.*
*Әйҙә, тормош,*
*Мине алда,*
*Тик һалма хаталарға.*

*Ун туғыҙҙың мин ҡатында,*
*Ишек ҡағам:*
*«Асығыҙ!»*
*Мин бер йылға бында керәм:*
*«Дошмандарым, ҡасығыҙ!»*

*Мин бер йылға төпләнәмен*
*Ун туғыҙҙың ҡатында.*
*Азат бөркөт –*

*Даръя ҡосам;*
*Юҡ бала,*
*Юҡ ҡатын да.*

*Азат,*
*Әммә түгел яңғыҙ,*
*Йәнем һөйөүһеҙ түгел.*
*Һулымаған был көрәшкә*
*Мөхәббәт сәсә күңел.*

*Мин азат,*
*Мин бит Кешемен,*
*Яҙмышҡа буйһонмаған.*
*Азат талаптарҙан, диндән,*
*Барыһы булғас ялған.*

*Мин Изгелек һуғышсыһы,*
*Хөкөмгә мин тарттырам.*
*Яуызлыҡтың һәр әсәһен*
*Ҡан күленә батырам.*

*Яуыздарҙың ҡара ҡанын*
*Һәр ерҙә йыуып сығам.*
*Яуыздарҙың яһил уйын*
*Һәр бер йөрәктән һығам.*

*Ун туғыҙҙа…*
*Минең ҡулда*
*Бар ғаләм – йәшлек уты.*
*Бүләм һәр саҡ кәмһетелгән*
*Кешегә йәшем һутын.*

*Мин һуғышсы.*
*Мин әҙермен*
*Ҡанлы-данлы алышҡа.*
*Ҡырам һеҙҙе, дошмандарым,*
*Ҡасһағыҙ ҙа алыҫҡа.*



## Олеся ӘХМӘТРӘХИМОВА

### Йомро-йомро йомғағым...

*Йомғаҡ тураһында һөйләй нәнәйем,
Тағы ҡабатлатам,
Имеш, белмәйем.*

*Тамам төшөнгәс йомғаҡтың бар юлын,
Һандыҡҡа үрелде
Минең уң ҡулым.*

*Иң сағыуын һайлап алдым
Йомғаҡтың.
Тик тау һуҡмағында бик тиҙ
Юғалттым.*

*Күпме ептәр тәгәрәтте
Шуҡ ҡыҙсыҡ?..
Көтә инем өмөтләнеп
Ҙур тылсым.*

*Һиҙеп йомғаҡ юғалыуҙың
Сәбәбен,
Нәнәйем әйтте һүҙҙәрҙең
Кәрәген:*

*"Тәгәрәткән йомғаҡтарың
Табылыр.
Бер саҡ мөғжизә тигәнең
Ҡабыныр.*

*Тик сере бар, аҡыллы бул,
Үҫкәнем!
Үҙең ниндәй – шундай булыр
Көткәнең.*

*Олеся Әхмәтрәхимова (1988) – Дәүләкән районы Мәкәш ауылы ҡыҙы. БДУ-ны тамамлай. "Дим" әҙәби берекмәһе ағзаһы. "Илһам шишмәләре-2011" лауреаты.*

*Йылмайһаң, башҡалар һиңә*
*Ҡыуаныр.*
*Һыуыҡ йөрәктә лә оскон*
*Уяныр!..”*

*Ошо һүҙҙәрҙе ҡабатлап*
*Атлайым.*
*Сағыу йомғаҡтарҙы табам*
*Көн һайын.*

***

*Ашығып йыйыштырам өйҙө,*
*Ҡабалан ҡуям сәйен.*
*Тәҙрә ҡапҡасы шығырҙай,*
*Мин, имеш, ишетмәйем.*

*Ҡыуанып өркөтмәйем, тим,*
*Ундағы эйәләрҙе.*
*Үҙем дә әле шикләнәм:*
*Ысынлап килгәндәрме?..*

*Вайымһыҙланып ҡыланыу*
*Сәмләндерҙеме әллә?*
*Берәү керҙе, икенсеһе,*
*Тағы ла, йәнә, йәнә...*

*Шат ҡояш юллай тәҙрәгә*
*Сатҡы артынан сатҡы.*
*Шөкөр, тием, миңә бөгөн*
*Йырҙар әйләнеп ҡайтты.*

## Һеҙҙең менән

*Көтмәгәндә ҡайһы берҙә*
*Хәүефтәр быуып ала.*
*Атай-әсәй әйтә: “Ҡурҡма,*
*Беҙ бит яныңда, балам!”*

*Шул һүҙҙәрҙән ҡанатланып,*
*Яңы үрҙәргә осам.*
*Яҡындарым ышанысын*
*Аҡлар өсөн тырышам.*

*Һәр саҡ наҙлай, йылы бирә*
*Нур һипкән күҙҙәрегеҙ.*
*Һеҙ – тормоштоң таянысы,*
*Ышаныс-терәгебеҙ.*

*Урап үтһен дауыл, буран,*
*Яҡын килмәһен бәлә.*

*Бер нәмәнән ҡаушамағыҙ,*
*Мин бит һеҙҙең эргәлә.*

## *Әҙәбиәт иле*

*Мине арбаған донъя ла*
*Тормаған тик ал төҫтән.*
*Түбәгә үрләгән һайын,*
*Тәгәрәй таштар өҫтән.*

*Йүнәлтелмәһә лә миңә,*
*Шауҡымдары ҡағыла.*
*Кирегә китәйем микән?*
*Шиккә батам тағы ла.*

*Күтәрелеп барам күккә,*
*Тағы ынтылыш алға.*
*Үрмәләйем әҙәбиәт*
*Дәүләте тигән тауға.*

***

*“Был бит фән!*
*Артыҡ бында*
*Хоҙайға ышаныуҙар,*

*Бисмиллалы һүҙҙәрең!” –*
*Тинеләр йөҙгә бәреп.*

*Шаңҡытты бындай тәнҡит!*
*“Баш тарт динДән*
*Йәки кит!”*

*...Тик уйға төштөм үҙем:*
*Кәрәкме динһеҙ ғилем?!.*

## *Ялған*

*Башҡаларға ҡушылам да*
*Үҙ-үҙемде алдайым.*
*Терһәк тешләрҙәй саҡтарҙа*
*Аҡланам, табып яйын.*

*Ни өсөн һуң хистәремде*
*Ауыҙлыҡлай алмайым?..*
*Бер үк тырмаға абынам,*
*Әйләнеп баҫҡан һайын.*

*Ялған ептәрен тағатам,*
*Йомғағын һүҙып-һүҙып.*
*Ҡала алырмынмы икән,*
*Йә, Хоҙай, үҙем булып?!.*

## Сәскә һайлағанда

*Иң-иң сағыу сәскәләрҙе*
*Эҙләй ҡыҙҙар яланда.*
*Табыштарҙы күрһәтергә*
*Әхирәтем бар янда.*

*О! Мин таптым хыял иткән,*
*Күптән эҙләгән гөлдө.*
*Алтын тажлы! Эй, һөйөнәм,*
*Иптәш ҡыҙ ятып көлдө.*

*“Ул сәскәнең һабаҡтары*
*Ҡалай зауыҡһыҙ, ҡара!”*
*Эйе шул, тим, киҫәтергә*
*Әхирәтем бар ярар...*

*Икенсе оҡшатҡан гөлдө*
*Ул әйтте: “Еҫе хушһыҙ.”*
*Булды өсөнсө, дүртенсе...*
*“Һөйләмә, – тиеп, – бушты!”–*

*Әйтергә уйламаным да,*
*Һиҙмәнем сере барын.*
*Белмәнем гөлдәрҙе аҙаҡ*
*Үҙе килеп йыйғанын.*

## Үҙаллылыҡ

*Көн дә яңы күренештәр –*
*Өлгөрөп булмай күнеп.*
*Хайран ҡалам,*
*Йәнә ниҙер*
*Аптырата күренеп.*

*Дауыл ҡоторған диңгеҙҙә*
*Елкәнем сыҙар микән?*
*Айныманым бер ҡурҡыуҙан,*
*Тертләйем яңы шиктән.*

*Һынауҙар, яла яғыуҙар,*
*Абыныу, өнһөҙ ҡалыу...*
*Ай-һай, тынғыһыҙ ҙа икән*
*Үҙаллы кеше булыу!*

## ҠАТАЙ БАШҠОРТТАРЫ ФОЛЬКЛОРЫ

Ҡатайҙар – ҙур башҡорт ырыуҙарының береһе. Был этнонимдың барлыҡҡа килеүе тураһында берҙәм генә ҡараш юҡ. Күпселек тикшеренеүселәр уларҙың тамырҙарының ҡара-ҡитайҙарға йәки кидандарға барып тоташыуын раҫлай. Тарихсы-этнограф Рим Йәнғужин билдәләүенсә, “Тарихи-этнографик әҙәбиәттә ҡатайҙарҙың ҡара-ҡитайҙарҙан йәки кидандарҙан сығыуын раҫлаған фекер йөрөй. Ә бына кидандарҙың үҙҙәренең ҡайҙан килеп сығыуы хаҡында фекер төрлөсә. Шулай ҙа тикшеренеүселәрҙең күбеһе уларҙы монгол сығышлы тип иҫәпләй... Һуңғы йылдарҙа ҡара-ҡитайҙарҙың төркиҙән сығыуы хаҡында фекер нығый бара”[1].

Ҡатай этнонимы тарихи әҙәбиәттә йыш осрай. Уның ҡытай, ктай, хтай, хытай варианттары ла бар. Башҡорттарҙан тыш, был исем ҡаҙаҡтарҙа, ҡарағалпаҡтарҙа, ҡырғыҙҙарҙа, үзбәктәрҙә, нуғайҙарҙа һәм ғағауздарҙа осрай. Ҡара-ҡатай этнонимына килгәндә, беҙҙән тыш, ул ҡырғыҙҙарҙа ғына бар[2].

Алты ырыуҙан торған ҡатай ҡәбиләһе киң территорияла таралған. Күпселек өлөшө таулы-урманлы төбәктәрҙә йәшәй. Улар – ҡоҙғон-ҡатай, иҙел-ҡатай һәм инйәр-ҡатайҙар. Был ҡәбиләләрҙең ошо төбәктә төпләнеүен Р. Йәнғужин XIV быуатҡа ҡарай тип билдәләй. “XIV быуаттың икенсе яртыһында ҡатайҙарҙың төньяҡҡа һәм көнсығышҡа күпләп күсенеүе башлана. Уларҙың ҡайһы бер өлөшө Ағиҙелдең урта ағымына һәм Инйәрҙең түбәнге өлөшөнә – таулы-урманлы ергә килеп ултыра. Һуңынан ҡатайҙар, табындарҙың ҡыҫымы арҡаһында, Инйәрҙең урта һәм үрге ағымына күсенә. Ағиҙелдең башына барып сыға”[3]. Ошо географик атамалар артабан ырыуҙар исемендә лә сағылыш таба. Мәҫәлән, Инйәр йылғаһы буйында йәшәүселәр – инйәр-ҡатай, ә Ағиҙел буйындағылар – иҙел-ҡатайҙар. Бөгөнгө көндә иҙел-ҡатайҙар Үрге Сермән, Урта Сермән, Ҡушыҡ, Аҙнағол, Мәхмүт, Үткәл, Үҙән баш, Хөсәйен, Рысыҡай һәм Арша ауылдарында төпләнеп йәшәй.

Халыҡ хәтерендә лә ҡатайҙарға ҡарата төрлө мәғлүмәт билдәле. Мәҫәлән, информатор Әсғәт Хәйернуров белдереүенсә, башҡорттар, ҡатай ырыуы вәкилдәре, был урындарҙа борондан уҡ йәшәгән. “Улар бер ҡасан да борон күсеп килмәгәндәр. Ошо гүзәл Уралыбыҙҙа Урал бөркөтө, айыуы, мышы-боланы, бал ҡорто, Ағиҙеле, Инйәре, Рәзе һәм Ямантауы (Йәмәлекәй) булғандай – ҡатай, тау ҡатай ырыуҙары ошо ерҙә булғандар...”[4].

Әсғәт Хәйернуров – хәҙерге осорҙоң оҫта, үҙенсәлекле ҡурайсыларының береһе. Уның бай репертуарын, нигеҙҙә, ошо төбәктә сыҡҡан көйҙәр тәшкил итә: “Боронғо ҡатайҙар”, “Ағиҙел”, “Ләңке ташы”, “Ҡүбә таш”, “Ҡағы ташы”, “Ҡурташ”, “Артылыш”, “Боронғо Урал”, “Ямантау”, “Ҡыраҡа” һ.б. “Ҡурай минең тормош иптәшем”, – тигән һүҙҙәр уның өсөн тәрән мәғәнәгә эйә. Ҡурай уйнау серҙәренә ул олатаһы Хәйернурҙан өйрәнә. Әсғәт Вәғәп улы ҡатайҙар хаҡында олатаһының нығытып әйткән бер фекерен дә хәтерләй: “Ҡатай башҡорттары бер ҡасан да Рус дәүләтенә буйһоноп йәшәмәй, улар ирекле ырыу булған”.

Әсғәт Хәйернуровтың ҡатай ырыуының төйәк иткән был урындарҙа борондан уҡ йәшәүе тураһында фекере бер ни тиклем кимәлдә ысынбарлыҡҡа тап килә, тип тә әйтергә мөмкин. Сөнки башҡорт халҡының этногенезын өйрәнеүгә ҙур өлөш индергән ғалим, академик С.И. Руденко үҙенең “Башкиры. Физический тип башкир” һәм “Башкиры: Историко-этнографические очерки” хеҙмәттәрендә[5] башҡорттарҙы тәбиғәт (ландшафт) шарттары менән бәйләп, өс өлөшкә бүлеп ҡарарға тәҡдим итә. Беренсеһенә ул Урал аръяғы, көнсығыш башҡорттарын индерә (ҡатайҙар, табын, үҫәргән, түңгәүер, бөрйән). Икенсе төркөмдө төньяҡ-көнбайышта йәшәүселәр тәшкил итә (танып, ғәйнә, бүләр). Өсөнсөһөнә ул үҙәк һәм көньяҡ-көнбайыш башҡорттарын индерә (юрматы, мең, ҡыпсаҡ). Таулы өлкәне С.И. Руденко айырым билдәләп үтә. Уның фекеренсә, тау башҡорттары ошо ерлектең иң боронғо халҡы булыуы мөмкин. Ғалим уларҙың савроматтарҙың нәҫеле булыу ихтималлығын да күрһәтә[6].

Хәҙерге заман административ бүленешкә ярашлы, был ерҙәр Белорет районы территорияһына ҡарай. Мәҫәлән, 8-се ревизия материалдары буйынса, хәҙерге Белорет районы территорияһында 25 ҡатай ауылы теркәлгән. Бөгөнгө көндә уларҙың һаны 50-гә барып етә. Кантон идаралығы дәүерендә ул ауылдар VII кантондың 27-се, 28-се, 29-сы һәм 30-сы йорттарына ҡараған. Шулай уҡ волостың 17 ауылында мәсет һәм мәҙрәсәләр ҙә теркәлгән.

XIX быуаттың 60-сы йылдарында, йәғни кантонлыҡ системаһы бөтөрөлөүҙән алдараҡ, башҡорттар административ-территориаль бүленеш буйынса 13 кантонға бүленгән була. Ҡатайҙар йәшәгән VII кантон Ырымбур губернаһының Верхнеуральск өйәҙенә ҡараған. Үҙ нәүбәтендә, ул 30 волосҡа бүленгән булған. Был осорҙа халыҡ һаны 54 147 кеше тип теркәлгән[7].

Көнсығыш ҡатайҙарға килгәндә, улар ҙа өс ырыуҙан тора: оло ҡатай, ялан ҡатай, бала ҡатай. Рим Йәнғужин яҙыуынса, “XIX быуат башында бала һәм оло ҡатайҙар Өпәй (Уфалей) һыртының көнсығыш итәктәрендә ҙур ғына ерҙе биләп ултырған. Улар Тинес һәм Ҡарабулаҡ йылғаларының үрге ағымында ерләнгән”[8]. Этнография фәнендә билдәле ҡараштар, шулай уҡ бөгөнгө административ бүленеш буйынса был ерҙәр Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ һәм Арғаяш райондарына, ә бер өлөшө Башҡортостандың Балаҡатай районына инә. Ялан-ҡатайҙар иһә тағы ла көнсығышҡараҡ урынлашҡандар. Был ерҙәр бөгөнгө көндә Ҡурған өлкәһенең Сафакүл һәм Әлмән райондарына ҡарай. Был фекер билдәле этнограф Р.Ғ. Кузеев хеҙмәттәрендә лә яҡтыртыла.

Тарихсы П.И. Рычков үҙенең “История Оренбургская” (“Разделение башкирского народа по их родам”) тигән хеҙмәтендә башҡорт ырыуҙарының таралыу ареалын күрһәтеп китә[9]. Ул ҡатайҙарҙың ике даруғаға бүленеүен билдәләй: Ноғай даруғаһындағы Ҡатай волосына иҙел-ҡатай, ҡошоҡ-ҡатай, инйәр-ҡатай, ҡоҙғон-ҡатайҙар ҡараһа, Себер даруғаһына балар-ҡатай, баллы-ҡатайҙарҙы индерә. Был волосҡа ул шулай уҡ тағы ла 8 аймаҡты ла өҫтәй. Ҡатай волосында ул 300 урам (двор) бар, тип билдәләй.

Шулай итеп, ҡатайҙар бик ҙур территорияла таралып урынлашҡан. Тәбиғәт үҙенсәлеге, ер-һыу торошо яғынан да был биләмәләр төрлө: Белорет яҡтары тау-урманлы булһа, Силәбе яғы ялан-урманлы, ә Ҡурған өлкәләре, Тубыл йылғаһы ҡушылдығы булған Уй йылғаһының төньяғында зәңгәр күлдәр араһы... Үҙ сиратында, был үҙенсәлектәр барыһы ла теге йәки был кимәлдә халыҡ ижады өлгөләрендә сағылыш таба һәм күп йырҙарҙың ижад ителеү мөхитенә асыҡлыҡ индерергә мөмкинлек бирә.

Географик айырмалыҡтар, һыу-һауа шарттары халыҡ ижадында ла сағылыш таба. Ул ерлекте, урынды аныҡлаусы образ ғына түгел, ә фольклорлашҡан ысынбарлыҡ рәүешен ала. Әйтәйек, легенда-риүәйәттәрҙә, йырҙарҙа һәм йола фольклорында башҡорт халыҡ ижадының классик репертуарына хас булған типологик

оҡшашлыҡтар менән бер рәттән, Урал һәм Урал аръяғы ҡатайҙарының фольклорын сағылдырған сифаттар ҙа күҙәтелә. Репертуар үҙенсәлектәре, жанрҙарҙың идея-тематикаһы, образдар системаһы һәм һүрәтләү саралары ерле ижади күрһәткес була ала. Мәҫәлән, репертуар айырмалыҡтарына килгәндә, фәҡәт ҡатай ырыуы ижадына ғына хас булған ошо йырҙарҙы атап була: "Боронғо ҡатайҙар", "Ҡатай Байығы", "Ләңке ташы", "Күбә таш", "Ҡағы ташы", "Ҡурташ", "Артылыш", "Боронғо Урал", "Ямантау", "Ҡыраҡа" һәм башҡа көйҙәр, легенда-риүәйәттәр, "Йәмәлекәй тауы" һ.б. Был йырҙарҙа локаль айырмалыҡтар айырыуса асыҡ сағылыш таба. Мәҫәлән, кеше үҙенең уй-кисерештәрен асҡанда, нигеҙҙә, уны үҙен уратып алған тәбиғәт күренештәре менән сағыштыра. Тау-урман зонаһы кешеһе өсөн эске уй-кисерештәрҙе сағылдырыу тау-ҡаяларҙан башҡа мөмкин булмағандай, ялан яҡтары өсөн икһеҙ-сикһеҙ яландар һәм ҡылғанлы далалар – күңел донъяһын асырға булышлыҡ итә.

Алда әйтеп үтеүебеҙсә, ҡатайҙар төбәк иткән ерҙәр географик йәһәттән бер төрлө генә түгел. Инйәр-ҡатай, иҙел-ҡатай, ҡоҙғон-ҡатай, еҙем-ҡатайҙар хәҙерге Белорет районының тау-ташлы һәм урман-ҡаялы ерҙәрен төбәк иткән. Ялан-ҡатайҙар киң территорияла таралып ултырып, дала ерҙәрендә көн күрә: хәҙерге Башҡортостандың Балаҡатай һәм Ҡыйғы районадары, Силәбе, Ҡурған өлкәләре... Был тәбиғәт шарттары, географик урын, халыҡтың матди мәҙәниәте менән бер рәттән, ауыҙ-тел ижадында, шул иҫәптән йырҙарҙа ла, сағылыш тапҡан.

Был мәҡәләлә Ҡатай башҡорттарының ер-һыу атамаларына бәйле йырҙарын ҡарап үтеүҙе маҡсат итеп ҡуйҙыҡ. Халҡыбыҙҙа йыр һәм уның барлыҡҡа килеү тарихы айырылғыһыҙ булғанлыҡтан, улар йәнәшә ҡараласаҡ.

Һүҙҙе урман-тау зонаһы ҡатайҙарының ижады үҙенсәлектәрен асыҡлауҙан башлау дөрөҫөрәк булыр. Сөнки ошо төбәктән сыҡҡан күп йырҙар ғилми һәм әҙәби-музыкаль кимәлдә бер ни тиклем әйләнешкә индерелһә лә, иғтибарҙан төшөп ҡалғандары ла күп кенә. Улар ҙа идея-тематика, йөкмәтке һәм форма йәһәтенән бик бай. Бынан тыш, фольклор томлыҡтарына ингәндәренә лә әле бөтөн, системалы рәүештә анализ яһалмаған.

Хәҙерге Белорет районы тәбиғәте, тау-йылғалары, ҡаҙылма байлыҡтары менән айырылып тора. Күп мул һыулы йылғалар ошо тарафтарҙан баш ала: Инйәр, Йүрүҙән, Нөгөш һ.б. Көньяҡ Уралдағы иң бейек тауҙар ҙа ошо төбәктә: Ямантау, Нәре, Ирәмәл, Машаҡ, Бишитәк, Ҡыраҡа, Рәз, Кирәл... Бынан тыш, районда 85 процент самаһы майҙанын урмандар биләй. Фәрит Камаев, Белорет районының Сермән ауылында тыуған композитор Заһир Исмәғилев ижадына бәйле, был төбәк тураһында түбәндәгеләрҙе яҙа: "Күккә ашҡан күкһел тауҙар теҙмәләре, уралып-уралып ятҡан Урал һырттары. Был яҡта уларҙы Ҡыраҡатау тиҙәр. Ләкин башың күтәреп ҡараһаң, кәпәсең төшөрлөк бейек был һырттарҙа һерәйеп торған шәрә ҡаяларҙы күрмәҫһең, улар һомғол ҡарағайҙар менән ҡапланған. Иң бейек ҡаяларҙың иң бейек ҡыйыҡтарында ла шундай ныҡ һәм сибәр ағастар – ҡарағайҙар, ҡарағастар үҫә. Бына ни өсөн ошо тауҙар илен йәшеллек һәм хозурлыҡ донъяһы тип атағы килә. Ә ғорур ҡаяларҙан аҫта, тулҡындарын ҡаға-ҡаға, һыуһылыу Ағиҙел ашҡынып аға. Уны юлына арҡыры төшкән таш кәртәләр ҙә туҡтата алмай. Ул, бөтә ерҙән үтер терегөмөш һымаҡ, юлын дауам итә, йәншишмәләр шикелле, тәбиғәткә, тирә-яғындағы урман-тауҙарға йән һәм йәм бөркә. Был яҡтарҙағы һоҡланғыс гүзәллек, бәлки, Ағиҙелдең шифа-ҡөҙрәтенән киләлер"[10]. Шуға күрә лә тауҙарға, йылғаларға, урман-ҡырҙарға арналған йырҙар һәм көйҙәр быуындан-быуынға күсә килеп, беҙҙең көндәргәсә еткән. Ошо төбәктә таралған йырҙар араһында улар күпселекте тәшкил итә.

Урал аръяғы ерҙәрендә дала һәм күлдәр күберәк. Шуға күрә ялан ҡатай, бала ҡатайҙарҙың йыр фольклорында ҡылғанлы ялан, сал далалар, ҡамышлы күлдәр

темаһы өҫтөнлөк итә. Кеше кисерештәре лә йырҙа ошо уҡ күренештәр аша образлы һынланыш ала.

Көньяҡ Уралды һәм иҙел-ҡатай, инйәр-ҡатай, ҡоҙғон-ҡатай ерҙәрен Ямантауҙан башҡа күҙ алдына ла килтереү мөмкин түгел. Ул географик объект – тау ғына түгел, ә халыҡтың тормош-көнкүреше һәм донъяға ҡарашы менән айырылғыһыҙ бәйле.

Ямантау – Көньяҡ Уралдағы иң бейек тау. Уның тураһында халыҡ араһында төрлө-төрлө мифтар таралған. Ямантау башҡорттарҙың борондан уҡ табыныу урыны ла булған. Рус ғалимдары тарафынан яҙылған тарихи сығанаҡтарҙа Ямантау исеме XVIII быуаттан күренә башлай[11].

Башҡорт халыҡ ижадында Ямантауға бәйле бик күп фольклор үрнәктәре: йыр, легенда, риүәйәттәр табырға мөмкин. Йөкмәткеһе, идея-тематикаһы һәм таралыу ареалы йәһәтенән ҡарап, уларҙы ике төркөмгә бүлергә була. Уларҙың беренсеһе мифологик ҡараштар менән бәйле һәм башҡорт классик эпосына ингән. “Урал батыр” эпосында, Ямантау Урал батыр тарафынан тураҡланған дейеүҙәрҙең кәүҙәләренән хасил булған, тип бәйән ителә.

*Урал унан үлмәгән,*
*Һушынан да таймаған,*
*Булатын алған да,*
*Әзрәҡәне сапҡан да –*
*Ҡылыс диңгеҙгә сумған,*
*Ер һелкенгәндәй булған:*
*Әзрәҡә һушһыҙ йығылған,*
*Имәнес ҙур кәүҙәһе*
*Һыуҙы урталай бүлгән,*
*Халыҡҡа менеп торорға,*
*Йәйерәп хәл йыйырға*
*Ҙур бер яман тау булған*[12].

Ямантауға бәйле булған йырҙарҙың һәм йыр-риүәйәттәрҙең икенсе төркөмөнә беҙ ошо төбәктә генә таралған һәм локаль характерлы булғандарын индерә алабыҙ. Мәҫәлән, хәҙерге ваҡытта сәхнәләрҙән йыш ишетелгән йырҙар менән бер рәттән (мәҫәлән, “Йәмәлекәй тауы”), һирәк осрағандары ла ошо төркөмгә ҡарай. Шулай уҡ айырым йыр-куплеттар ҙа осрай. Алда әйтеп китеүебеҙсә, XX быуат башында Мстислав Ҡулаев Ямантау тураһында етмешләп йырҙы ҡағыҙға теркәй.

Башҡорт халыҡ ижадында, башҡа жанрҙарға ҡарағанда, Ямантауға бәйле йырҙарҙың сағыштырмаса күберәк булыуы күҙгә ташлана. Улар күпселек осраҡта Белорет ерлегендә тыуған. Мәҫәлән: “Ямантау”, “Йәмәлекәй”, “Йәмәлекәй тауы” һ.б.

Ямантауға бәйле йырҙар бер нисә вариантта булһа ла, уларҙың күпселегенең барлыҡҡа килеү тарихы оҡшаш. Мәҫәлән, ҡурайсы Сәлимгәрәй Ғәлиастановтан яҙып алынған вариантта түбәндәгеләр бәйән ителә. “Борон-борондан башҡорттар урыҫ батшалығына буйһоноп, байтаҡ йылдар үткәс, беҙҙең олатайҙарҙан урыҫ помещиктары, генералдары осһоҙ хаҡҡа ер һатып ала башлағандар. Олатайҙар күп уйлап тормай, ерҙе осһоҙға ғына биргәндәр. Шулай бер ваҡыт Мәскәү яғынан бер помещик килә һәм ҡатайҙарға ҡара сөгөндән ҡойолған оҙон сәйнүктәр тараттыра. Ҡатай түрәләрен, байҙарҙы шарап менән һыйлап ултыра, Ямантауҙы ҡарап ултыра, ти. Ул саҡта ул ер Тамъян-Ҡатай кантонының Ҡатай волосына ингән, хәҙер Белорет районына ҡарай. Эсеп, ҡыҙып алғас, ҡатай түрәләре, аҡһаҡалдары ер һатыу ҡағыҙына тамғаларын да баҫалар. Шул саҡта бер егет килеп сыға ла ҡарттарға:

– Нишләп һеҙ, олатайҙар, беҙҙең ата-бабаларҙан ҡалған ерҙе һатаһығыҙ? Үҙегеҙҙең балаларығыҙҙы йөрөр ерҙән, эсер һыуҙан, һоҡланыр сәхрә Ямантауҙан мәхрүм итәһегеҙ, – тип әйтә.

– Йәш башың менән ололарға арҡыры төшәһең, – тип, егеттең һүҙенә ҡолаҡ та һалмағандар.

Яҡлаусы таба алмаған егет тауҙарға киткән, күккә олғашып, болоттарға терейеп торған Ямантауға алыҫтан ғына ҡарап торған. Егет тырмаша-тырмаша тауға үрмәләгән. Менеп еткәс, әсәһенән айырылған сабый һымаҡ, үкһеп-үкһеп илаған һәм ошо йырҙы сығарып йырлаған”[13].

Йыр традицион дүрт юллыҡтарҙан тора. Беренсе строфала Ямантауҙың кейек-януар көн иткән иркен, изге ер картинаһы һүрәтләнә. Был изге урын төшөнсәһе әүлиәләр ерләнгән ер тип атала. Халыҡта, һәр ерҙе-тупраҡты батыр һөйәге һаҡлай, көс бирә, ә әүлиә рухы изгелеген һаҡлай, тигәндәр. Шуға ла ер – иң изге аманат. Ә уны һатыу – оло яманат билгеһе. Изгелекте һәм тыуған ер ғәзизлеген аңлатыу һәм уның ҡәҙерен таныу өсөн йырҙа әүлиә образы урын ала.

*Яман ъына тауҙың көн битендә*
*Болан менән мышы төйәккәйе.*
*Яман ъына тауҙы һатып әрәм*
*Булды әүлиәләр һөйәккәйе.*

Йырсы үҙ тыңлаусыларына, Ямантауҙы юғалтыу халыҡты, милләтте көсһөҙләндереүгә тиң була, тигән фекерен еткерергә ынтыла. Батырҙар, изгеләр, әүлиәләр һөйәген һаҡлау, хатта, яуҙа үлһә лә, алып ҡайтып күмеү – бөтә төрки халыҡтары араһында таралған йола булған. Тыуған ер китеүгә бәйле тәрән ҡайғы, әсенеү мотивы “әүлиә ере” китеү тигән фекер аша нығыраҡ көсәйә генә. Шулай уҡ “матди ғына түгел, рухи таяныстан айырылыу” тигәнгә лә ишаралыр был юлдар.

Йырҙың һуңғы строфаһы ла ошо идея менән ҡаймалана. Был осраҡта Ямантауҙың башҡорт өсөн мөһим, изге урын булыуы унда ерләнгән батырҙар ҡәбере барлығы менән дә аңлатыла.

*Яман ъына тауҙың үңерендә –*
*Бөтә хайуандарҙың төйәге.*
*Ямантауҙы һатып әрәм иттек,*
*Ятып ҡала батырҙар һөйәге.*

Әүлиә һәм батыр төшөнсәһе, бер ҡарағанда, ике мәғәнә бирә. Ләкин был осраҡта йыр контексында улар бер-береһен көсәйтеүсе сараны үтәй: халыҡ өсөн изге урын, изге ер – улар ятҡан урын. Үҙ сиратында, алдағы юлдарҙы бер ни кимәлдә мосолман традицияларының шауҡымы менән дә аңлатырға мөмкиндер. Мәҫәлән, бөгөнгө көндәргә тиклем изгеләр (әүлиәләр) ерләнгән урынға зыярат ҡылыу йолаһы һаҡланып килеп еткән. “Ислам” энциклопедик һүҙлегендә был йола ошолай аңлатыла: “Зийара – “посещение” – паломничество к могилам пророков, “святых” (аулия), шиитских имамов. ... Практика зийара – сравнительно поздняя в исламе. Она сложилась в связи с появлением и развитием мусульманского культа “святых”. Этот культ, противоречащий первоначальному исламу, возник под влиянием местных религиозных верований. Отсюда проистекает две основные особенности зийара: а) преемственность мест поклонения и характера ритуалов доисламских культов...; б) большое разнообразие обрядов зийара, распростаненных в странах ислама”[14].

Изгеләр ерләнгән урынға зыярат ҡылыу йолаһы башҡорттар араһында ла киң таралыу алған була. Мәҫәлән, хәҙерге Шишмә ҡасабаһы эргәһендәге Хөсәйенбәк кәшәнәһенә, XX быуат баштарында Мөжәүир әүлиә ҡәберенә (Баймаҡ районы),

Нарыҫтауға (Миәкә районы) барыу, һ.б. Башҡортостан территорияһында йөҙәрләгән әүлиәләр ҡәберлеге бар. Был тема А.Б. Юнысованың “Ислам в Башкортостане” хеҙмәтендә ярайһы тулы сағылыш таба.

Ямантауҙы һатыу – тауҙы, ерҙе генә һатыу түгел, ә иреклектән, азатлыҡтан баш тартыу, ҡоллоҡҡа ҡалыу менән бер. Шуға күрә лә был ер юғалтыуға бәйле әсе фажиғә мотивы йырҙың икенсе һәм өсөнсө строфаларында ике тапҡыр ҡабатлана.

*Яман ъына тауъа барып булмай,*
*Итәккәйе тулы ҡарауыл.*

Ил менән бергә ер менән хушлашыу кеүек ҡот осҡос картина күҙ алдына баҫа: кире ҡайтарып булмаҫ, ят ҡулына киткән изге аманаттан мәңге айырылыуға билге булып, ҡарауыл тора. Был дәһшәтле образ – үткән менән бөгөнгөнөң сиге ул.

*Яман ъына тауҙы һатам тигәс,*
*Йыйылышып килде бар ауыл.*

Йырҙың өсөнсө строфаһында был ҡайғы мәғәнәүи яғынан көсәйә.

*Ер алам тип килгән, һай, генерал,*
*Йыйылып-йыйылып килгән күп ауыл.*
*Ямантауъа инде барып булмай,*
*Түңәрәге кардон-ҡарауыл.*

Ауыл һәм ҡарауыл – ике сик, ике идеология, ике ят көстө күрһәтеп тора. Был осраҡта Ямантау үҙәк вазифаһын башҡара. Әммә уға ике яҡтың мөнәсәбәте ҡапма-ҡаршы. Ошо ҡаршылыҡ хатта йырҙың рифмаһында ла сағылыш таба: йыйылып килгән *күп ауыл* – түңәрәге *кардон-ҡарауыл*. “Йыйылып-йыйылып” һүҙе илап-илап тигәнде лә, бергә-бергә тигәнде лә, уйлап-уйлап тигәнде лә хәтерләтә кеүек. Күп ауылдың йыйылып килеүе халыҡтың бәлә килгәс кенә берҙәмлектә булғанына үкенесте лә сағылдыра. Әммә тыныс халыҡ (ауыл халҡы) һәм ҡоралды кардон… Был көстәрҙең ҡапма-ҡаршы һәм тиң булмауы тыңлаусыға асыҡ.

Рус халыҡ йырҙарын өйрәнеүгә ҙур өлөш индергән Ф.М. Селивановтың түбәндәге фекерҙәре ҡыҙыҡлы: “Отмеченные для сюжета и системы персонажей особенности наблюдаются и в изображении пространства в исторической песне. Создается полная иллюзия знакомства повествователей с местом действия, а проживание исполнителей в местности, связанной с воспеваемым событием, ставило их в “близкое” отношение к случившемуся. Пути движения действующих лиц представляют собой не отрезки между точками на земле, а продолжающие в одну или обе стороны линии”[15]. Башҡорт халыҡ йырҙарында ла урынарауыҡ кеше хисе аша асыла.

“Ямантау” йыры структур яҡтан алты строфанан тороп, барыһы ла бер үк төрлө рифмалаша – икенсе һәм дүртенсе юлдары ауаздаш. Схемаһы – абвб.

Алда килтерелгән легендаға бәйле, йырҙың икенсе варианты ла бар – “Йәмәлекәй тауы”. Ул, алдағы йырҙан айырмалы рәүештә, конкрет фактик мәғлүмәттән, ерҙе күпме хаҡҡа һатыуҙы әйтеүҙән башланып китә:

*Йәмәлекәй тауҙы һатҡан, тиҙәр,*
*Ун ике мең ҡаъыҙ аҡсаъа…*

Күреүебеҙсә, был осраҡта йырҙа халыҡтың эмоциональ кисерештәре генә ятмай. Контекстан сығып, исемдәре әйтелмәгән осраҡта ла был ерҙәрҙе һатыуҙан кемдең һәм күпме файҙа күреүен тойомларға мөмкин. Мәҫәлән, тарихи факттарға нигеҙләнеп, тыуған яҡты өйрәнеүсе Р. Шәйбәков был турала

түбәндәгеләрҙе яҙа: “1794 йылдың 19 майында старшина Рахманғол Аҡкөсөков бөтәһе 1270 кеше исеменән статский советник алпауыт Левашовҡа Инйәр буйындағы аҫаба ерҙәренең бер өлөшөн мәңгелеккә (мираҫҡа ҡалдырыу хоҡуғы менән) 18 мең һумға һата”[16].

Ямантауҙы һатыу халыҡ араһында ҙур ризаһыҙлыҡ һәм протест тыуҙыра. Халыҡ зары һәм ҡаршылығы инйәр һәм иҙел ҡатайҙар араһында ғына түгел, губерна, Рәсәй кимәлендә тарала, киң билдәлелек һәм ауаздашлыҡ ала. Йырҙа әйтелгәнсә:

*Йәмәлекәй тауҙы һатҡандан һуң,*
*Ишетелгән, тиҙәр, батшаға.*

Был юлдарҙың да фактик, документаль нигеҙе бар. Мәҫәлән, 1806 йылда поход старшинаһы Юламан Таймасов һәм Монасипов землемер Венчанскийҙың И. Демидов менән берлектә Инйәр заводы урынын дөрөҫ межаламауы тураһында жалоба бирә. Ошоларға өҫтәп, 1809 йылда шул уҡ Юламан Таймасов 860 ҡатай исеменән тау инженеры Мануйлов тарафынан улар ерендәге 34 рудникты алдаштырып үлсәп сығыуы тураһында ла хат менән мөрәжәғәт итә. Шулай итеп, йыр тарихи факттарҙы сағылдыра.

Халыҡ йырҙарына, ғәҙәттә, бер үк оҙон көйгә бер нисә вариантта поэтик текст ижад ителеүе билдәле. Артабан ул бер ни кимәлдә яҙма әҙәбиәттә лә сағылыш таба. Был күренештең тәьҫирен XX быуаттың 20-се йылдарынаса күҙәтергә мөмкин. Мәҫәлән, “Уйыл”, “Эскадрон”, “Азамат” һ.б. йыр көйҙәренә һалынған күп поэтик текстарҙы осрата алабыҙ. “... Күп кенә шиғырҙар халыҡтың мәғлүм бер йыр стиленә һәм көйөнә яраҡлаштырылып, йыр итеп тәҡдим ителделәр. Мәжит Ғафури, Шәйехзада Бабич, Сәйфи Ҡудаш, Ғариф Ғүмәр, Ғәли Рафиҡов һәм ҡайһы бер йәш авторҙарҙың көйө атап әйтелгән йәки әйтелмәгән айырым шиғырҙары “Салауат”, “Эскадрон”, ”Ашҡаҙар”, “Уйыл” һ.б. көйҙәргә йырлана торған булған. “Инҡилап шиғырҙары” хитапнамәһенә ингән бер нисә шиғырҙы фәләнсә көйгә йырларға йәки Ғ. Матросовтың “Башҡорт ҡыҙыл урҙаларына бүләк” шиғырын “ҡыҙыл ғәскәрҙәребеҙ өсөн хор менән йырларға муафиҡ әҫәр” тип тәҡдим итеүҙәре был поэтик сараның ул заманда шаҡтай киң таралғанлығын күрһәтә”[17]. Аталған ер-һыу исемдәре аша йырҙарҙа образ конкретлаша, һәр саҡ үҙәктә тора. Һүҙ ярҙамында ғына әйтеп бирә алмаған уй-фекерҙәр моң аша тыңлаусыға төплөрәк еткерелә. Нигеҙҙә был тыуған ер-һыу, уны һаҡлау һәм яҡлау мотивтары менән тоташа. Ошо рәүешле тыңлаусының төпкөл үҙаңына (подсознание) көслө йоғонто яһала. Быны беҙ бер ни кимәлдә суфыйсылыҡ ижады менән дә бәйләй алабыҙ.

Алда ҡарап үтелгән ике йыр – “Ямантау” һәм “Йәмәлекәй тауы”, исеменән үк күренеп тороуынса, бер тема менән бәйле. Уларҙа башҡорт халҡының тормош-көнкүрешендә генә түгел, яҙмышында булып уҙған трагик ваҡиғалар ҙа, ер һатыу, ерҙән айырылыу хәлдәре лә асыҡ сағылыш таба. Әммә быны тикшерелгән йырға ғына ҡарата үҙенсәлек тип атап булмай. Сөнки булып уҙған ваҡиғаларҙы реалистик рәүештә һүрәтләү – күпселек башҡорт халыҡ йырҙары өсөн хас күренеш. Быны үҙенең “Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы” исемле фундаменталь хеҙмәтендә Әхнәф Харисов та билдәләп уҙа: “Тарихилыҡ төшөнсәһен киң мәғәнәлә алғанда, ул тарихи йырҙар төркөмөндәге йырҙар өсөн генә хас сифат түгел. Тарихилыҡ теге йәки был дәрәжәлә йырҙарҙың бөтәһендә лә бар. … Сөнки йыр, йөкмәткеһенең характеры яғынан ниндәй генә төркөмгә ҡарамаһын, билдәле бер заман емеше ул. Шуға күрә йырҙа үҙенән-үҙе шул замандың социаль-сәйәси һәм мәҙәни-көнкүреш үҙенсәлектәре сағылған, унда кешенең үҙе йәшәгән ижтимағи тормошҡа булған мөнәсәбәте, ҡарашы бирелгән,

кешенең шул осор өсөн характерлы кисереше, уйы һәм хыялы һалынған. Шул яҡтан ҡарағанда, халыҡ хәтерендә һаҡланыу һәм быуындан-быуынға күсеү хоҡуғына эйә булған йырҙарҙың бөтәһе лә – тарихи. Һәм был хәлгә беҙгә йырҙарҙы башҡорт халҡының поэтиклаштырылған тарихы һәм көнкүреше тип атарға мөмкинселек бирә”[18].

Кирәй Мәргән үҙенең “Башҡорт халыҡ ижады” исемле хеҙмәтендә, “Йәмәлекәй тауы” йырын “Башҡорт ере”, “Шарлы урман”, “Сәҙе буйы” һ.б. менән бер рәттән, тарихи йырҙар төркөмөнөң Башҡортостанды колонизациялау дәүеренә тура килгән йырҙар төркөмсәһенә индерә[19].

Был ике йыр башҡарыу йәһәтенән киң диапазонлыларға ҡарай. Йыр поэтикаһында, бигерәк тә “Ямантау” йырында, халыҡтың милли характеры һәм рухы асыҡ кәүҙәләнеш ала.

Структур поэтика йәһәтенән улар авв төрөнә инә. Лад төрө буйынса иһә икеһе лә мажор пентатоникаһына ҡарай. Йырҙар секстоль, триоль һәм квинтоль кеүек ҡатмарлы ритмдарҙан тора. Ошо ритмдар һәм өн-ауаз интонациялары иһә фажиғә һәм ауыр хис-тойғо үҙгәрештәрен көйҙә асыҡ сағылдыралар.

Ике йырҙа ла һуҙынҡы тауыштар көйҙөң үҙәк линияһын тәшкил итә. Күп осраҡта улар көйҙөң ҙур интервалын тоташтыралар һәм уның үҙәк идея линияһын нығытыу, берләштереү вазифаһын да башҡаралар. Көйҙөң ҙур интервалдары ла зар, һағыш, фажиғә күренешен биреү өсөн алынған.

Йырҙарҙың ҡушымтаһы ике тапҡыр ҡабатлана. Ул йырҙың төп өлөшөнә ҡарағанда контрастлыраҡ килә. Ҡушымта, белеүебеҙсә, йырҙың төҙөлөшөн байыта, төрлөләндерә, әйтелгән мәғәнәнең яңғырашын көсәйтә, уға яңы нескәлек һәм нәфислек үҙенсәлектәрен индерә. Шуға күрә ул башҡорт халыҡ йырҙарында йыш осрай.

Шулай итеп, “Йәмәлекәй”, “Йәмәлекәй тауы”, “Ямантау” йырҙарында һүрәтләнгән ваҡиғалар, конкрет бер ерлек менән бәйле булһа ла, дөйөм халыҡ яҙмышындағы ер һатыу менән бәйле булған трагедияны асыҡ сағылдыра.

**Елмерҙәк** – Көньяҡ Уралдағы иң оҙон тау һырттарының береһе. “Еғәҙе һәм Еҙем йылғалары ҡушылған урындан алып Инйәр йылғаһына тиклем меридиан буйынса 70 км-ға, Белорет районы ерендә 1 км-ға һуҙылған. Иң бейек урыны 909 м. Киңлеге – 4-9 км”[20], – тигән мәғлүмәт бирелә “Башҡортостан” энциклопедияһында. Тау халыҡтың тормош-көнкүрешендә лә, шулай уҡ төрлө йоле һәм һынамыштарында ҙур урын алған. Мәҫәлән, әлеге көндәргә тиклем халыҡ араһында “Елмерҙәк шаулай, көн боҙолор” ише һынамыштар йәшәй.

1971 йылда Белорет районы Сәфәрғол ауылында яҙып алынған йыр ҙа ошо “Елмерҙәк” топонимы менән бәйле.

“Елмерҙәк” йыры – үҙ тыуған яғы менән хушлашыусы, уны тағы бер күрергә өмөтө бик аҙ булған кешенең күңел кисерештәре. Уның, хатта үлер алдынан ғына булһа ла, тыуған төйәгенә ҡайтҡыһы килә. Бының өсөн ул нәҙер әйтә: иҫән-һау ҡайтһа, ҡорбан саласаҡ.

*Аҡһыл ғына томан эстәрендә*
*Ҡалды минең тыуған төйәгем.*
*Аҡ ҡорбандар салып түйлар инем,*
*Елмерҙәккә ҡайтһа һөйәгем.*

Нәҙер әйтеп, ҡорбан килтереү мотивы илгә ҡайтыу теләген көсәйтеүсе сара булып тора. Лирик герой теләгенең ни тиклем юғары һәм саф, изге икәнлеге йөкләгән мәғәнәһе, көсө аша күрһәтелә.

Лирик герой үҙенең тыуған яғы менән айырылышыуҙы ла бик образлы һүрәтләй. Юғалыу, айырылыу томан образы аша символик рәүешле сағыла:

*Аҡһыл ғына томан эстәрендә*
*Ҡалды минең тыуған төйәгем.*

Бында тыуған яҡтың алыҫта булыуы, хатта мираж кеүек кенә һынланыуы үҙенсәлекле. Ә мираж – күҙгә күренеп тә реаль тотоп, тойоп булмаған тәбиғәт күренеше. Шулай уҡ аҡһыл томандар – Белорет төбәге климаты өсөн хас күренеш. Йәғни, йырҙа тәбиғәт үҙенсәлектәре, торошо тура сағылыш тапҡан, тип тә әйтергә була. Ошондай уҡ тәбиғәт күренешенең йөкмәткеле образ булыуын башҡорт халыҡ йыры “Томан”да ла осратабыҙ.

“Елмерҙәк – Көньяк Уралдағы тау һырты. Егәҙе һәм Еҙем йылғалары ҡушылған урындан алып Инйәр йылғаһына тиклем … 70 километрға … һуҙылған”, – тигән аңлатма бирелә был тау һырты тураһында[21]. Йырҙа ошо географик атама (тау һырты) аша тыуған яҡ образы тағы ла конкретлаштырыла.

Еҙем йылғаһы буйҙарын һәм Елмерҙәктең мөһабәт күк һырттарын төштәрендә генә күреү лирик герой күңеленең моң-зар һәм һағыныу менән тулыланыуын сағылдыра:

*Күңелдәрем минең моң-зар илай,*
*Тыуған ғына яҡты юҡһынып.*
*Төштәремдә күрәм Еҙемемде,*
*Елмерҙәктең мөһабәт күк һыртын.*

Был йырҙа төш мотивы – һағыныу хисен көсәйтә. Ошондай уҡ мотивты беҙ Белорет районының Ҡаҙыш ауылында йәшәгән Зәйтүнә Сафиуллинанан яҙып алынған “Төш” йырында ла осратабыҙ. Әммә унда төш – дуҫтар килеүен иҫкәртә. Был хаҡта беҙ артабанғы бүлектә ентекләберәк туҡталырбыҙ.

Кеше өсөн тыуған ерҙәренән айырылыу, уны юғалтыу – иң ҙур һынауҙарҙың береһе. Башҡорт халҡының ер-һыу культы борон-борондан килә һәм йырҙарында ла киң сағылыш таба. Тыуған төйәкте бер ни ҙә алмаштыра алмай, һағышын баҫа алмай. Үлеп, һөйәге тыуған еренә ҡайтҡан хәлдә лә шуға риза ул, сөнки шундай ҡәҙерле тыуған Ил һәм Ер-һыу. Үҙ ерендә, тыуған тупрағында ерләнеү хыялы – тыуған илгә һөйөүҙе сағылдырған иң көслө поэтик образдарҙың береһе, күрәһең:

*Тыуған ғына ергә ниҙәр етә,*
*Иң ғәзизе – тыуған төйәгем.*
*Таштарына тарих яҙыр инем,*
*Илкәйемә ҡайтһа һөйәгем.*

Борон-борондан яуҙа һәләк булған батырҙарын алып ҡайтып, тыуған ерендә ерләү йолаһы һаҡланған. Сөнки, ышаныуҙар буйынса, батыр һөйәктәре лә тыуған ерҙе һаҡлай. “Йәмәлекәй тауы” йырындағы кеүек, батырҙар һәм әүлиәләр ерләнгән ер изге ергә әйләнә.

Ташҡа яҙыу ғәҙәти күренеш кенә түгел, ә үҙең тураһында иҫтәлек, йәдкәр ҡалдырыуҙың бер ысулы ул. “Эскадрон” йырында ла ул мотив ҡабатлана:

*Йырҙар яҙҙым Урал ҡаяһына,*
*Иҫтәлектәр булып ҡалһын тип;*
*Яуҙа йөрөп иҫән ҡайта алмаһам,*
*Урал тауы иҫкә алһын тип.*

“Урал тауы иҫкә алһын тип” тигән һүҙҙәрҙе үҙен тыуған иленең бер айырылғыһыҙ өлөшө итеп тойған кеше генә яҙа ала. Тимәк, ташҡа яҙыу, уға тамға һалыу киләсәк быуындарға үҙең тураһында иҫтәлек, мәғлүмәт ҡалдырыу изге йола рәүеше, быуындар бәйләнешенә бер аманат булып ҡабул ителә. Йыр яҙыу иһә – тыуған илгә һөйөүҙең бер билгеһе ул.

Быға оҡшаш традицияларҙы беҙ 1889 йылда рус ғалимы Н.М. Ядринцев тарафынан Орхон һәм Енисей йылғалары буйындағы ҡая таштарҙан яҙып алынған руник яҙмаларҙа ла осратабыҙ. Ҡ.Әхмәров яҙыуынса, Болғар дәүләтенә кергән айырым башҡорт ҡәбиләләре лә ғәрәп алфавиты индерелгәнгә тиклем бер нисә быуат буйына руник яҙыу менән файҙаланғандар[22].

Ошоға оҡшаш күренеште беҙ төрки-мосолман халыҡтарында таралған ҡәбер таштарындағы яҙмалар менән дә сағыштыра алабыҙ (эпитафия). Тик был осраҡта ташҡа кешенең исем-шәрифе һәм йәшәү йылдары уйып яҙылған. Булғар эпитафик ҡомартҡыларында ла яҡты донъя һәм туғандар менән мәңгегә айырылышыуҙың ауырлығын һүрәтләгән шиғри таш яҙмаларҙы ла осратырға мөмкин. Улар күп яҡтан Орхон-Енисей таш яҙмалары менән оҡшаш һәм боронғо традицияның үҙенсәлекле дауамы булып тороуы башҡорт ғалимдары Ғ. Б. Хөсәйенов[23], Р. М. Йосопов[24], шулай уҡ татар ғалимы Г.В. Йосопов хеҙмәттәрендә лә асыла[25].

Орхон таш яҙмалары араһынан Күлтәгин, Тонйуҡуҡ һәм Билге ҡағандар иҫтәлегенә ҡуйылған ташъяҙмалар Төрки ҡағанатының ике быуатлыҡ тарихын художестволы сағылдыра. Уларҙа теге йәки был осорҙа булып үткән реаль хәл-ваҡиғалар, хәрби походтар, тормош-көнкүреш һәм тәбиғәт күренештәре һүрәтләнә. Шул уҡ ваҡытта был күренештәр ябай хроника булараҡ түгел, ә поэтик әҙәби әҫәр булараҡ ҡабул ителә. Йыш ҡына таштарҙағы яҙмалар ҡаған (ил башлығы) исеменән килә. Мәҫәлән,

*Буну көрү билиң*
*Бәнгү таш тоҡытдым*
*/Быны күреп белең*
*Мәңге таш төҙәттем/.*

Ошо юҫыҡтан ҡарағанда, башҡорт халыҡ йырҙарында йыш ҡабатланған ташҡа яҙыу күренеше төрки халыҡтар араһында боронғо осорҙарҙан бирле килгән тотороҡло йола булараҡ ҡабул ителә. Башҡорт халыҡ йырҙарында ла йырсы үҙ исемен генә яҙып ҡалмай, ә "тарих яҙа Урал ташына".

Композицион яҡтан йыр өс куплетлы һәм бер төрлө рифмалашып килә – абвб. Ләкин шул уҡ ваҡытта беренсе строфалағы рифмалашыусы юлдар "тыуған төйәгем – ҡайтһа һөйәгем" өсөнсө строфала ла ҡабатлана. Йәғни ошо рәүешле йыр композицион яҡтан тулыһынса ҡаймаланып ҡуйыла.

Бынан тыш, еҙем-ҡатайҙар араһында ла тағы ошо исемле бер йыр осрай – "Елмерҙәк". Еҙем-ҡатайҙар иһә бөгөнгө көндә Белорет районының Хоҙайбирҙе, Ботай, Егәҙе, Туҡан, Тара, Ерматау ауылдарында йәшәй. Был яҡта бик күп йыр һәм көйҙәр таралған, улар араһынан "Елмерҙәк", "Ботай", "Хафиза", "Ҡара бәрәс тиреһе", "Еҙем", "Алатау" айырыуса популяр һанала.

Исеме һәм идея-тематика йәһәтенән ике йыр бер-береһенә оҡшаш булһа ла, улар араһында айырма сағыштырмаса ҙур. Беренсенән, бында лирик геройҙың йәшәгән урыны алдағы йырҙағы кеүек конкретлаштырылмай. Икенсенән, инйәр-ҡатайҙар йырының лирик геройы тыуған ере менән мәңгелеккә хушлашыуы һәм уны ҡабаттан күрергә өмөтө бик аҙ булғанлығы күҙгә ташлана. Был осраҡта герой алыҫ юлға сыҡҡан һәм уның сәфәренән кире иҫән-һау әйләнеп ҡайтырға өмөтө ҙур. Тыуған яғынан мәңгелеккә айырылыу уйы уны артыҡ борсомай. Сәфәр оҙаҡ булһа ла, бары ваҡытлыса ғына. Йырҙа заринтизарлыҡ хистәре артыҡ сағылмай.

*Елмерҙәккәй тауҙың көн битендә*
*Елберҙәйҙер ҡайын елдәрҙә.*
*Ир-егеткәй ситтә йөрөһә лә,*
*Уйҡайҙары тыуған иләндә.*

Тыуған ил хыялы ситтә йөрөгән егет өсөн рухи терәк булыуы күрһәтелә был куплетта. Был идея йырҙың артабанғы куплеттарында үҙенсәлекле сюжет булып үҫешә.

Борон сәфәргә ат менән сығыр булғандар. Юлдың бөтә ауырлыҡтарын да улар бергә кисергән. Башҡорт халыҡ йыры “Азамат”та йырланғанса:

*Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй*
*Ир-егеткәй менән ат башы.*

Лирик геройҙың алыҫ сәфәргә сығыуын дәлилләүсе фекер түбәндәге куплеттың бер детале аша сағылыш таба. Боронғолар фекеренсә, айғыр малы яҡын юлға ҡулланылған. Яу өсөн ул уңай булып, алыҫ ара өсөн артыҡ бармаған. Шуға ла ҡара айғыр Елмерҙәк тауының көн битендә тибен тибеп ҡалыуы осраҡлы түгел, ә этносемантик йөкмәткеле мотив:

*Елмерҙәккәй тауҙың көн битендә*
*Тибен генә тибә ҡара айғыр.*
*Елмерҙәккәй тауы артта ҡалды,*
*Менгән атым боролоп ҡарайҙыр.*

Тимәк, лирик геройҙың менгән аты бейә малы булып сыға, ә ҡара айғыр тороп ҡала. Бынан тыш, менгән аттың боролоп ҡарауы, йәғни ат һағышы йырсы һағышын да аңлатыусы өҫтәлмә образ булараҡ ҡулланыла.

Лирик геройҙың күңеле айырылышыуҙан моңһоу, әммә унда трагик ноталар күренмәй. Киләсәккә ҡарашы өмөтлө уның:

*Күтәрмә лә ишек, күн ишек,*
*Йүгереп барып типмәй асылмай.*
*Елмерҙәккәй тауы алыҫ ҡалды,*
*Бер йырламай күңел баҫылмай.*

Был строфалағы тематик йәнәшәлек мотивы ҡыҙыҡлы. *Асылмай – баҫылмай* кеүек кире ҡылымдарҙың рифмалашып килеүе яҙмыштан уҙып булмай, тигән фекерҙе аныҡлай. Ә йыр йырлау күңел ярһыуын баҫа.

Йырҙың эске мәғәнәһен аңлау милли психология, милли холоҡ төшөнсәләрен байҡау өсөн дә бай мәғлүмәт булып тора.

“Елмерҙәк”кә бәйле исемһеҙ дүрт юллыҡ йырҙа ла тыуған ил һәм тыуған ер темаһы үҙәккә ҡуйыла. Йырсы тыуған илдең кеше өсөн баһаһын шул тиклем юғарылыҡта һүрәтләй – тыуған илде ташлап ситкә китеүе хатта яҡты донъя менән хушлашыуҙан да ауыр.

*Елмерҙәк тә аша, ай, төшкәс тә*
*Күренеп ята Еҙем кисеүе.*
*Йән биреүкәйҙәрҙән ауыр икән*
*Тыуған илде ташлап китеүе*[26].

Йырҙың һуңғы ике юлының йөкмәткеһенән сығып, лирик геройҙың тыуған илен ҡабаттан күреүгә бөтөнләй өмөтө булмауын тойорға була.

Шулай итеп, “Елмерҙәк” йыры инйәр һәм еҙем ҡатайҙары араһында таралған булһа ла, “Ямантау”, “Йәмәләкәй тауы” йырҙары кеүек, бер географик урын менән бәйле. Шулай ҙа тыуған ерҙән айырылыу мотивы йырҙарҙа ике төрлө сағылыш таба.

Башҡорт халыҡ йырҙары араһында **ҡатын-ҡыҙҙарға арналғандары** ла байтаҡ. Ошо төркөм араһындағы күпселеге уларҙың ауыр йәки фажиғәле яҙмышы менән бәйле. Бындай йырҙарға миҫал итеп беҙ “Сәлимәкәй”, “Зөлхизә”, “Ғилмияза” һ.б килтерә алабыҙ.

Алда аталған йырҙар халыҡ араһында сағыштырмаса киң билдәле. Улар башҡорт халыҡ ижады томлыҡтарына ингән, радио-телевидение аша һәм сәхнәләрҙән йыш башҡарыла. Шул уҡ ваҡытта айырым төбәктәрҙә генә һаҡланған һәм йырланған йырҙар ҙа бар. Мәҫәлән, инйәр, иҙел, ҡоҙғон ҡатайҙар араһында “Зөлхизә”, “Кәмилә” һ.б. йырҙар осрай. Уларҙың барлыҡҡа килеүе лә трагик хәлваҡиғалар менән бәйле.

Белорет районы Ҡаҙыш ауылы янындағы тау **Зөлхизә тауы** тип атала. Ошо топонимға бәйле халыҡ араһында йыр-бәйет йәшәй. Ул йыр һәм йырҙың легендаһы беҙҙең тарафтан 1997 йылда Кәзифа Әбүталипова (1908 йылғы) һәм Зәйтүнә Сафиуллинанан (1939 йылғы) яҙып алынды.

Башҡорт халыҡ ижады өлгөләре араһында ике жанр традицияларына яҡын булған әҫәрҙәр осрай. Мәҫәлән, Р. Сөләймәнов йыр-бәйет, йыр-мөнәжәт тигән терминдарҙы ҡуллана[27]. “Зөлхизә” әҫәре жанр тәбиғәте йәһәтенән бәйеткә яҡын, ләкин был төбәк халҡы уны йыр булараҡ ҡабул итә. Ошоларҙан сығып, беҙ уны йыр-бәйет тип алырға булдыҡ.

Ҡаҙыш – иң бәләкәй ҡоҙғон-ҡатай ауылы. Ул Ҡаҙыш йылғаһы буйында урынлашҡан. Был ауылда халыҡ ижады традицияларын һаҡлаусы һәм пропагандалаусы кешеләр ҙә бар. Мәҫәлән, Ибраһим Сафиуллин (1904 йылда тыуған) һәм Ҡадир Әхмәтйәнов (1916 йылғы) тигән ҡурайсылар 1969 йылда Башҡорт АССР-ының 50 йыллығы айҡанлы Ленинград ҡалаһында уҙғарылған республика мәҙәниәте көндәрендә ҡатнашҡан 50 ҡурайсы араһында була.

Әҫәрҙең барлыҡҡа килеү тарихы түбәндәгесә. Ҡаҙыш ауылында элек Зөлхизә исемле һылыу бер ҡыҙ булған. Ул йәй еткән һайын ошо тау башына менеп уйнар була. Ул заманда йыш ҡына урман-тауҙар араһында һөргөндән, төрмәләрҙән йәки хужаларынан ҡасҡан кешеләр йәшеренеп йөрөгән. Йәйҙең йәмле бер көнөндә тау башында уйнаған ваҡытта ҡасҡындар килеп сығып, уны урлап алып ҡасалар. Ғәйеп булған ҡыҙҙы йәлләп, ауыл халҡы ошо “Зөлхизә” исемле йырбәйетте сығара.

Йыр-бәйеттең беренсе строфаһы, үҙенсәлекле экспозиция булараҡ, тыңлаусыны артабанғы шомло хәл-ваҡиғаларға әҙерләй. Ҡыҙ яҙмышының фажиғәле тамамланыуына строфаның һуңғы ике юлы ишара яһай. Был – ташта үҙ исемен ҡалдырыуы:

*Зөлхизә бер матур ҡыҙ,*
*Тау башында уйнаған.*
*Уйнағанда ташҡа баҫып,*
*Үҙ исемен ҡалдырған.*

Йәш ҡыҙ баланың ташҡа баҫып уйнағанда унда нисек итеп үҙ исемен ҡалдырыуы – яҙыпмы, әллә ташҡа ҡалған аяҡ эҙеме – асыҡ әйтелмәй. Бында әкиәт йәки дини риүәйәт мотивының үҙенсәлекле художество алымы ла, алда ентеклерәк ҡаралған ташҡа яҙыу, йәдкәр ҡалдырыу мотивының бер сағылышы булыуы ла ихтимал.

Әгәр ҙә ташта аяҡ эҙе мотивы булһа, был осраҡта йыр-бәйеттә дини, ислам риүәйәте мотивының тәьҫире тип уйларға мөмкин. Мәҫәлән, Ибраһим пәйғәмбәр менән бәйле сюжеттарҙың береһендә ташта ҡалған эҙ мотивы билдәле. Был сюжеттар, үҙ сиратында, Мәккәгә хаж ҡылыу традициялары аша киң билдәле. Ҡәғбәлә ишеккә ҡаршы үҙ исеме “мәҡәм Ибраһим” тигән урын бар. Ул турала

“Ислам” энциклопедик һүҙлегендә: “сооружение, содержащее камень, на котором, якобы стоял Ибрахим, когда восстанавливал аль-Кагбу. На нем видны следы человеческих ног”[28].

Ташҡа баҫып үҙ исемен ҡалдырыуҙы иҫтәлек-йәдкәр еткереү мотивы булараҡ ҡабул итһәк, был осраҡта йырсының уны аяҡ эҙе итеп һынландырыуының сәбәбе аңлашылалыр. Зөлхизә – йәш ҡыҙ, уның уҡый-яҙа белмәүе лә мөмкин. Был осраҡта йәш ҡыҙ тураһында иҫтәлек киләсәк быуындарға таштағы яҙыу аша түгел, ә ул йөрөгән эҙҙәр буйынса ҡаласаҡ.

Йырҙың икенсе строфаһында ерле атама – ауыл янынан ағып ятҡан Ҡаҙыш йылғаһының исеме әйтелә:

*Ҡаҙыш буйын буйланым,*
*Һауаһын да һуланым.*

Йырҙа бәйет мотивы ла асыҡ тоҫмаллана. Мәҫәлән, Зөлхизә исеме, беренсе исемдән һөйләү, 7–7 ритмы һ.б.

Ошо уҡ районның Бирҙеғол ауылында яҙып алынған “Кәмилә” йыры ла алдағы әҫәр менән ауаздаш. Ул да ҡаҫҡындар тарафынан һәләк ителгән ҡыҙ бала тураһында.

“Кәмилә” йырының легендаһы түбәндәгесә: “Беҙҙең Бирҙеғол ауылында Исмәғил исемле бер байҙың Кәмилә исемле һылыу ҡыҙы була торғайны. Миңә ул саҡта ете-һигеҙ йәш тирәһе ине. Ауылдың бөтә егеттәренең Кәмиләгә күҙе төшөр ине. Күп егеттәр яусы ебәреп ҡараны, тик Кәмилә береһенә лә риза булманы.

Борон башҡорттарҙа, йола буйынса, ҡыҙҙан ризалыҡ һорамай торғайнылар. Ә Кәмиләнең атаһы ҡыҙын шул тиклем яратҡан, үҙенән ризалығын белешкән. Яҙ етеү менән беҙҙең ауыл халҡы Һарыбайтал буйына йәйләүгә күсә. Йәйләүҙә ваҡыт тиҙ үтә, кистәрен йәштәр ат сабыштыра, йырлай, көрәшә, егеттәр ҡурай тарта торғайнылар. Тик Кәмилә генә бер үҙе өйҙә моңһоу ултырыр ине.

Көртмәле, еләк, әберсә (ҡурай еләге) бешкән ваҡыт, әбейҙәр емешкә йөрөй, ир-аттар ҡышҡа бесән әҙерләй. Йәйҙең бер матур көнөндә Баҙый исемле әбей Кәмиләне көртмәлегә алып бара. Юлда ул Кәмиләгә һүҙ ҡуша: “Бына, ҡыҙым, мин ҡартайҙым, тиҙҙән үлер сағым да етә. Мин белгән көртмәле урындарҙы бер кем дә белмәй. Һиңә күрһәтеп ҡалайым тип алып барам”, – ти.

Барып еткән урында ысынлап та емеш шул тиклем күп була. Һауыт-һаба ла тиҙ тула. Шул ваҡытта Баҙый ҡарсыҡ: “Хәҙер киләм”, – ти ҙә юғала. Шулай Кәмилә бер үҙе ҡараңғы урман эсендә ҡала, тауыш биреп тә ҡарай, Баҙый әбей яуап бирмәй. Ҡыҙ кире ҡайтырға юлды белмәй.

Шул ваҡыт ат тауыштары ишетелә, һәм янына бер һыбайлы килеп етә. Ат өҫтөндә һаҡаллы ҡаҫҡын ултыра. Кәмиләне үҙенә алып ҡайта. Ағас араһында ултырған Баҙый әбей уны күргәс, ауыл яғына ашыға. Элек бер килгәндә шул ҡаҫҡын Баҙыйҙы тотоп: “Бер һылыу ғына ҡыҙ алып килмәһәң, үлтерәм”, – тигән булған, ти.

Кәмиләне бар йәйләү халҡы урманда эҙләй. Баҙый менән киткәнен береһе лә белмәй. Кәмиләне онота башлайҙар. Көҙ етә, халыҡ ҡышлауға күсә. Ҡар яуа, һуғым һуйлар, бер-береһен ҡунаҡҡа саҡырышалар. Бер көндә Исмәғил ҡарттың урамына бер ат килеп инә, бер кеше ат өҫтөнән шыуып килеп төшә. Эт өрөп ебәрә, ат кешнәй башлай. Исмәғил ҡарт сыҡһа, Кәмилә ерҙә ята, ябыҡҡан, сәсенә сал төшә башлаған, күҙе эскә батҡан. Исмәғил ҡарт өйөнә алып инә, тик Кәмилә бер нәмә лә әйтә алмай. Иртәгәһенә генә барыһын да һөйләп бирә.

Исмәғил ҡарт, иртәнге намаҙҙы уҡыу менән, Баҙыйҙы саҡыртып ала. Әбей уҡына-уҡына өйгә килеп инә, ҡарт ҡамсы менән уны һыҙырып ебәрә. Бер-ике көндән Баҙый әбей һыҙланып үлә.

Оҙаҡ ваҡыт үтмәй, Кәмилә тағы юғала. Һунарсылар әйтеүенсә, Кәмилә таң менән Кесе Инйәр буйының бер ташына барып ултырған, һағышлы йырҙар йырлаған.

Шулай итеп, Бирҙеғол халҡы "Кәмилә" тигән йыр сығарған"[29].

Тәүге куплет сюжет-композицион яҡтан экспозиция ролен башҡара. Бында артабан һүҙ барасаҡ ваҡиғаларға дөйөм фон бирелә, ҡайҙа (Һарыбайтал буйы) һәм ҡасан (тирмәләре туғайҙа йәйелгән–йәйләү мәле) уның булыуы тураһында әйтелә. Йәғни үҙенә күрә бер башлам формаһы алына.

*Һарыбайтал буйы, ай, йәмле,*
*Тирмәләре туъайҙа йәйелгән.*

Йыр куплетының артабанғы юлдары был ваҡиғала ҡатнашасаҡ геройҙар һәм ваҡиғалар менән таныштыра:

*Баҙый Исмәъил байҙың ҡыҙын,*
*Кәмиләне, ҡасҡынъа ҡорбан иткән.*

Икенсе строфала халыҡтың йәш ҡыҙҙы харап иткән Баҙый ҡарсыҡҡа ләғнәте, рәнйеше асыҡ сағыла. Йәш һылыуҙың яҙмышына әсенеү мотивы урын ала.

*Кесе Инйәркәй буйы, ай, әрәмә,*
*Әрәмәһеҙ юҡтыр йәме лә.*
*Яуыз ҡарсыҡ Баҙый этлегенән*
*Әрәм булды бахыр Кәмилә.*

Йырҙың барлыҡҡа килеү тарихы тулыһынса тиерлек поэтик текстың үҙендә сағылыш ала. Ваҡиғалар булған урын (Кесе Инйәр, Һарыбайтал буйы, йәйләү мәле), ҡатнашҡан кешеләр (Баҙый, Исмәғил бай, Кәмилә).

"Кәмилә" – ике куплетлы йыр. Алда тикшерелгән күпселек поэтик текстар кеүек, бер төрлө рифмалашҡан: икенсе һәм дүртенсе юлдары ауаздаш.

Йырҙарҙан күренеүенсә, һәр регионда ҡасҡындарға ҡарата мөнәсәбәт бер төрлө түгел. Мәҫәлән, тау-урман зонаһы башҡорттары фольклорындағы айырым үрнәктәрҙә ("Зөлхизә", "Кәмилә") улар тыныс халыҡты ыҙалатыусы кешеләр булараҡ та кәүҙәләнеш таба.

Шул уҡ ваҡытта Белорет төбәгендә таралған "Ҡурташ" һ.б. йырҙарҙа улар иҙеүсе ҡатлам вәкилдәренә ҡаршы көрәш алып барыусы, ярлы халыҡты яҡлаусы, хатта ҡурсалаусы батырҙар рәүешендә күҙ алдына баҫа. Силәбе яҡтары (ялан-ҡатайҙар) фольклорында ла улар йыш ҡына ыңғай персонаж, герой сифатында сығыш яһайҙар. Мәҫәлән, "Вайсилов" һ.б. йырҙар.

**Ҡасҡындар тураһында йырҙар** тарихи йырҙарҙың бер өлөшөнә ҡарай. Кирәй Мәргән билдәләп үтеүенсә, "Был төркөмсәгә ингән йырҙарҙың тарихи нигеҙе колонизацияға ҡаршы көрәшкә барып тоташа. Уларҙа социаль тигеҙһеҙлеккә, колониаль иҙеүгә ҡаршы көрәш мотивтары тулы һәм күп яҡлы сағыла"[30].

Был төркөмсәгә ингән йырҙарҙың нигеҙендә XVIII–XIX быуаттарҙа ижтимағи тәртиптәргә ҡаршы сыҡҡандары өсөн хөкөмгә тарттырылып, һөргөнгә ебәрелгән һәм унан ҡасып ҡайтып йәшеренеп йәшәгән, шул уҡ ваҡытта хатта көрәш алып барған шәхес образы тора. Башҡорт халыҡ классик ижадынан быңдай йырҙарға ғалимдар (Кирәй Мәргән, Әхнәф Харисов, Салауат Галин һ.б.) "Ғәзебәк Насир", "Бейеш", "Сәйкә батыр" һ.б. индерә.

Йырҙарҙан күренеүенсә, ҡасҡын, нигеҙҙә, енәйәтсе түгел, хатта киреһенсә, намыҫлы кеше. Уны донъя әҙәбиәтендә данланған Робин Гуд рәтенә ҡуйырлыҡ. Йырҙарҙа ул ил намыҫы өсөн яңғыҙ күтәрелгән батыр булараҡ кәүҙәләнеш ала.

Ҡасҡындар тураһындағы тарихи йырҙар төрөнә хәҙерге Белорет районы яҡтарында таралған "Камал ҡасҡын" йыры ла инә. Информатор Мөхитдинов Зәйнулла Мөхитдин улы һөйләүенә ҡарағанда, ул хәҙерге Белорет районы

Ҡоҙашман ауылынан. Йыр геройының йәшәү ваҡыты тураһында ла яҡынса мәғлүмәт бар: Бүгәсәү менән Салауат яуҙары – 1773 – 1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышынан һуңғы осор.

Йырҙың легендаһы түбәндәгесә: "Бынан ике йөҙ йылдар элек Иҙел башы яҡтарында Камал исемле бик батыр егет булған. Ул Бүгәс менән Салауат яуҙарында ҡатнашып йөрөгән. Егетте тотоп алып, аяҡ-ҡулын бығаулағандар ҙа баструкка оҙатҡандар. Шулай ҙа Камал баструктың мөрйәһенән сығып ҡасҡан. Бик оҙаҡ ил гиҙеп йөрөй торғас, тыуған ауылына ҡайтып еткән.

Бығауҙарын аяҡ-ҡулынан бысып алғандар. Тик ауылда оҙаҡ торорға ярамағанлыҡтан, Камал урманға ҡасып, юлбаҫар булып йәшәргә мәжбүр булған.

Камал ярлы-ябаға, етем-еҫерҙәргә тырнаҡ осон да тейҙермәй, тик бай-түрәләрҙе, купец-сауҙагәрҙәрҙе генә талап йөрөр икән. Шуға күрә лә ябай халыҡ уны батша һалдаттарына тотоп бирмәҫкә була.

Бер саҡ шулай Йыһанша тигән бай, Камал артынан ҡыуа килә торғас, уның аяғын яралай. Яралы көйөнсә лә Камал унан ҡасып ҡотола. Кеше аяғы баҫмаған ике тау эсендәге бер мәмерйәлә ул үҙенә төйәк ҡороп йәшәй башлай. Кәләш йәрәшеп,  уны ла шул тау ҡыуышына алып китә. Был тау итәгеН әле лә Камал ҡултығы тип атап йөрөтәләр"[31].

"Камал ҡасҡын" йырында легендала бәйән ителгән айырым мәғлүмәттәр сағылыш таба. Тыуған яҡтың тәбиғәте данлана, "Ҡурташ" йырындағы кеүек, ышыҡ-таянfestival булыуы әйтелә.

Ялан-ҡатайҙар араһында таралған "Арғужа" йыры ла ҡасҡындар тураһындағы йырҙар төрөнә ҡарай. Ул, "Шәрәфетдин Вәйсилов йыры" һәм башҡа айырым исемһеҙ йырҙар менән бер рәттән, Шәрәфетдин Вәйсилов тураһындағы йырҙар циклын тәшкил итә.

Йырҙағы ваҡиғалар Арғужа күле буйында бара. Был географик урын йырҙар циклы үҙәгенән буйынан-буйы үтә. Арғаяш башҡорттарының йыр фольклорын тикшереүсе Н.М. Сиражитдинова был хаҡта түбәндәгеләрҙе яҙа: " Этим (названием места действия – **Р. А**) подчеркивается мысль о том, что это единственное место, где мог спрятаться Шарафетдин от преследователей, символизирующее родную землю, место, где герой может уединиться со своими мыслями, где его никто не предаст. Почему нужна такая конкретика? Видимо, потому, чтобы подчеркнуть, что Шарафетдин – конкретное лицо, действовал не где-нибудь в абстрактной стороне, а именно возле озера Аргужа"[32].

Был йыр тураһында беренсе булып Ғ.Вилданов яҙып сыға. Был хаҡта мәғлүмәт "Башҡорт халыҡ ижады" томына ла ингән.

Шәрәфетдин Вәйсилов тураһындағы йырҙар циклының береһендә ошондай юлдар бар:

*Ишегемде асып мин ҡараһам,*
*Ҡамсат ҡына бүркем сөйҙә юҡ.*
*Вәйсил мулла улы Шәрәфетдин*
*Төрмәләрҙә ята, өйҙә юҡ.*

Йырҙа телгә алынған ҡамсат бүрек һәм уның өйҙә булмауы ике символик мәғәнә алып килә. Беренсенән, ҡамсат бүрек – батырҙы, ир-уҙаманды символлаштырыусы билдә, баш кейеме. Өйҙә был баш кейеменең булмауы ир, хужа кешенең булмауын сағылдыра. Икенсенән, өй образы – йәмғиәтте йәки халыҡты ла дөйөмләштереп килеүе ихтимал. Был осраҡта иһә батыр, ҡурсалаусы беҙҙең арабыҙҙан китте, халыҡ яҡлаусыһыҙ ҡалды, тигән мәғәнәне лә тойомларға мөмкин. Сөнки Шәрәфетдинде бөтөн ил яратҡан була, уның төрмәгә китеүе халыҡ өсөн ҙур фажиғә булып тора.

Кейем юҡлығын күрһәтеүсе юлдар аша ир-уҙамандың да юҡлығын аңларға

мөмкин. Был – башҡорт халыҡ йырҙарында киң ҡулланылған алым. Ошоға оҡшаш художество детален беҙ шулай уҡ был төбәктә таралған “Ғүмәров”, “Шаһибәрәк”, “Сәйкә батыр”, “Сәйфелмөлөк” һ.б. йырҙарҙа ла табабыҙ.

Дамир Вәлиевтың “Арғаяш башҡорттарының ауыҙ-тел ижады ҡомартҡылары” исемле хеҙмәтендә килтерелгән “Арғужа” йырының беренсе куплеты алдағыһынан айырылып тора.

*Арғужаҡай буйы, ай, һары тал,*
*Юнып ҡына алған уҡ кеүек.*
*Уйлағанда уйҙар, ай, юҡ кеүек,*
*Эскенәйем яна ут кеүек*[33].

Икенсе куплетта иһә Шәрәфетдиндың моңһоу уйҙарға, һағыштарға төшөү сәбәбе асыҡланып кителә – уны тыуған еренән айырылыу уйҙары борсой:

*Арғужа буйлап йөрөгәндә,*
*Ятып ҡалды ҡайыш дилбегәм.*
*Дилбегәм дә өсөн ҡайғырмайым,*
*Ятып ҡалды тыуған илгенәм.*

Куплетының икенсе һәм дүртенсе юлдарында килгән *дилбегәм* һәм *илгенәм* һүҙҙәре рифмалашыу өсөн генә килмәй йырҙа. Уларҙың икеһен бер үк мәғәнә яҡынайта: юғалыу, айырылыу. Һәм ул фекер предмет юғалыуы аша дөйөмләшә.

Дилбегә – башҡорттоң тормошонда, көнкүрешендә билдәле урын алған әйбер. Ул арҡандан да, сүс, ҡыл йәки ҡайыштан да булыуы мөмкин. Йылҡысылыҡ термины булыу менән бер рәттән, боронғо замандарҙан алып ул оҙонлоҡ үлсәү берәмеге лә. Арауыҡты билдәләгәндә, “көн үтәһен ай үткән, арҡан буйы ер киткән” тиелә әкиәттә. Һыуҙың тәрәнлеген үлсәгәндә, “дилбегә буйы тәрәнлеге” тип билдәләнә. Арауыҡ, ваҡыт, тәрәнлек категориялары башҡорт тормош-көнкүрешендә таныш, көн дә күренеп торған предмет аша бирелеүе үҙенә күрә традицион алым булып тора. Дилбегә ат малы менән бәйле, ә ул башҡорт өсөн батырлыҡты ла, иреклекте лә символлаштырып килә, йәғни көндәлек ғәҙәти тормошта кәрәкле нәмәне кәүҙәләндерә. Дилбегәне юғалтыу – тыуған ерҙе юғалтыуға бер ырым-ишара, шомло хәбәрҙе әшкәртә. Икенсенән, йүгән-дилбегәһеҙ ат – хужаһыҙлыҡты, үҙ иркенә ҡалдырылыуҙы ла аңлатыуы мөмкин – был инде лирик геройҙың сараһыҙ хәлен иҫкәртә. Мәғәнәүи символика һәм идея-тематик символика – халыҡ йырҙарында бик сағыу һәм таралған поэтик алым. Уның тамырҙары башҡорттоң донъяны бер бөтөн итеп һәм абстракт ҡабул итеүенә ҡайтып ҡала.

*Ҡайғырмайым* һүҙе аша иһә, киреһенсә, ныҡ һағышланыу, бойоғоу хисе кәүҙәләнә. Сөнки *ил* менән *дилбегә* тигән осраҡта *“ҡайғырмайым”* һүҙе дилбегәгә ҡағыла, ә беренсеһен йәки ил ҡайғыһын еткерергә, хатта әйтеп бирер хәле юҡ. “Ҡаршы ҡуйыу” мотивы “ил һағыныу” мотивын тағы ла көсәйтеп ебәрә.

Ташҡа тамға һалыу, ташҡа яҙыу ҡалдырыу мотивы – башҡорт халыҡ йырҙарында йыш осраған художестволы күренеш. Уның ҡулланылышын беҙ башҡа йырҙарҙа ла күҙәтәбеҙ. Мәҫәлән, “Арғужа” йырында был художество алым үкенес, хәтер ҡалдырыу хистәрен еткерә.

*Арғужа ла буйлап йөрөгәндә,*
*Исемемде яҙҙым ташына.*
*Аға ла эне һүҙен тыңламайса,*
*Еттем, буғай, ғәзиз башыма…*

Геройҙың һағышы, уйы арауыҡты, урынды тултырған һәм түбәндәгесә килә: дилбегә юғала, ташҡа исем яҙыла, “атайым да тиер уҡ” һ.б. ошондай конкрет образ һәм һындар аша тәрән эске кисерештәр асыла. Тынғы тапмаған,

ҡайғырған кешенең хисен нисек кенә хис һүҙҙәре менән тасуирлама – асылмай. Ә тышҡы күренештәр аша бирә белеү, тасуирлау, тышҡы тәбиғәт сифаттары, тормош хәлдәре лә, предмет булмышы аша кеше донъяһын күрһәтеү, психологик портретты тыуҙырыу, кәүҙәләндереү мөмкинлеге тыуа. Был – башҡорт йырҙарының бик сағыу сифаты.

Ташҡа яҙыу, тамға һалыу – киләсәк быуындарға үҙең тураһында иҫтәлек, мәғлүмәт, шул дәүер һүҙҙәре менән әйткәндә, йәдкәр ҡалдырыу сараһы ла. Ләкин строфалағы ике рифмалашыусы һүҙҙе – *яҙҙым ташына – ғәзиз башыма* бергә ҡуйып һәм йыр контексынан сығып ҡарағанда, улар бөтөнләй икенсе мәғәнә ала. Лирик герой үҙенең эшмәкәрлегенә, кеше, туған һүҙен дә тыңламай бәләгә тарыуына үкенгән һәм тиҙҙән үҙ үлемен тойған кеүек. Сөнки борон вафат булған кешенең ҡәберенә таш ҡуйып, уның исемен йәки Ҡөрьән аяттарын яҙғандар. Ул ҡәберҙең баш осона ҡуйылған. Таш билгеһе мәйеттең башы ҡайһы яҡҡа ятҡан икәненә ишара яһай. Ике рифмалашҡан һүҙҙә ошо мәғәнәне лә тойомларға була.

Ташҡа яҙыу, тамға һалыу башҡорт мәҙәниәтендә таш культына нигеҙләнә. Артабан ташҡа яҙыу – үҙе тылсым көсөнә эйә була. Башҡорттоң был йолаһы Орхон-Енисей таш яҙмалары – ташта тарих, эпитафия яҙыу менән, шулай уҡ ислам дине традициялары менән ауаздаш.

“Арғужа” йырында лирик геройҙың күңел ғазаптары, кисерештәре куплеттан куплетҡа үҫеш рәүешендә бирелә. Беренсе строфала уның үҙ яҙмышын уйлап эстәре бошһа – *Эскенәйем яна ут кеүек,* икенсеһендә инде тыуып-үҫкән ерҙәренән айырылыу мотивы ята – *Ятып ҡалды тыуған илгенәм*. Өсөнсө куплетында иһә күңелһеҙ һығымта яһала: йәшәү һәм үлем мәсьәләләре лә килеп баҫа – *Еттем, буғай, ғәзиз башыма…*

Әҙәбиәт ғилеме күҙлегенән сығып ҡарағанда, бындай һүрәтләү сараһы градация тип атала. “Мәғәнәнең көсәйә йәки кәмей барыуына нигеҙләнгән үҙенсәлекле фекерҙәр баҫҡысы… Градация – фекер һәм тойғоларҙы үҫештә күҙ алдына баҫтырыу өсөн ҡулланылған иң уңайлы стилистик фигураларҙың береһе”, – тип аңлатма бирә был хаҡта К. Әхмәтйәнов[34]. Фольклор ғилеменән ҡарағанда, мотивтың мәғәнәүи үҫеше тиеп атарға булыр ине.

“Арғужа” йыры Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғәли Хәмзин тарафынан профессиональ башҡарылды. Шуныһы ла иғтибарға лайыҡ: Ғәли Хәмзин үҙе тыумышы менән Белорет районы Ҡоҙғон-Әхмәр ауылынан, йәғни ҡоҙғон-ҡатай ырыуынан ине.

Ҡоҙғон-Әхмәр ауылы Кесе һәм Оло Кирәл тауҙары буйында урынлашҡан. Ғилми эш барышында беҙгә Хәмзиндар ғаиләһе менән яҡындан танышырға тура килде. Улар йыр-моңға бай ғаилә: Ғәли Хәмзиндың атаһы Ғәббәс бабай оҫта бейеүсе, Сәмсиямал әбей моңло итеп йырлай – ул “Ғилмияза” йырын үҙенсәлекле йырлап күрһәтте. Ғәли Хәмзин да бала саҡтан уҡ йырларға яратҡан. Бигерәк тә боронғо халыҡ йырҙарын оҫта башҡарған. Уның репертуарында, “Арғужа”нан тыш, “Урал”, “Хәйрүләкәй”, “Илсе Ғайса”, “Ильяс”, “Сибай” кеүек йырҙар бар ине.

Йырҙар араһында ҡобайырҙар ҙа йөрөй. Был ике жанр үҙенсәлектәрен үҙендә туплаған музыкаль әҫәрҙәр араһынан “Суҡан батыр” йыр-ҡобайырын да күрһәтергә була. Был йыр-ҡобайыр хәҙерге Силәбе өлкәһе Арғаяш районы ерлегендә таралыу алған. Структур-поэтик яҡтан анализлап ҡарағанда, “Суҡан батыр”ҙың ғәҙәти йыр түгеллеген күрергә мөмкин. Беренсенән, ул марш формаһында башҡарыла. Д. Вәлиев, бындай көйҙәргә эпос әҫәрҙәрен башҡарғандар, тип билдәләп үтә[35]. Килтерелгән фекергә шуны ла өҫтәп китергә мөмкин: марш формаһында, ғәҙәттә, хәрби йырҙар, марш йырҙары ла башҡарыла.

Йырҙың тарихи үҙенсәлегенә килгәндә, быныһы Д. Вәлиев тарафынан “Арғаяш башҡорттарының ауыҙ-тел ижады ҡомартҡылары” мәҡәләһендә төплө дәлилләп

күрһәтелеп үтелә. “Суҡан батыр”, дөрөҫөн әйткәндә, тулы күләмдә һаҡланмаған ҡобайыр. Был ҡобайырҙы һөйләүсе Сәфәрғәле Солтанбәков (1905–1985) Ҡужа (Левашовка) ауылында тыуып үҫкән. Бала сағынан һуҡыр булыуына ҡарамаҫтан, тырышлығы һәм ныҡышмалылығы арҡаһында мәшһүр ҡурайсы-сәсән булып таныла”[36].

“Суҡан батыр” йыр-ҡобайырында һүрәтләнгән күренештәр XVI–XVII быуаттарҙағы ваҡиғаларға бәйле. Был дәүерҙә Урал аръяғы башҡорттары (бигерәк тә хәҙерге Силәбе, Ҡурған өлкәһендә йәшәгәндәре) йыш ҡына Себер ханлығының уларҙы буйһондороу өсөн яһаған һөжүмдәренә дусар булғандар.

Ошо осорҙа бер мәлдә уларға көнсығыштан ҙур яу килгән. Был яуға ҡаршы көрәште Суҡан исемле бер батыр ойоштора. Ҡаты яуҙан һуң башҡорттар дошмандарын еңеп сығалар, әммә һуғыш яланында күптәр һәләк була. “Боронғо йола буйынса, һәләк булғандарҙы кейемдәре һәм ҡоралдары менән бергә ҡәбергә күмгәндәр. Ошондай ҡәберҙәрҙе “шаһиттар зыяраты” тип атар булғандар. Был зыярат хәҙер ҙә бар, ул Ҡужа (Левашовка) ауылынан алыҫ түгел”[37].

Дамир Вәлиев хеҙмәтендә килтерелгән мәғлүмәттәрҙән сығып һүҙ йөрөткәндә, “Суҡан батыр” йыр-ҡобайырының ике строфалы булыуын күрәбеҙ.

*Тирәм, тирәм тир икән, ти,*
*Суҡан батыр ир икән.*
*Маңлайына уҡ тейһә, ти,*
*Тирем сыға, тир икән.*

Ентекләберәк ҡарағанда, бындай гиперболик һүрәтләү алымдарының “Салауат батыр” ҡобайыры менән ауаздаш булыуын күрәбеҙ.

Икенсе куплет та алдағыһы менән ауаздаш. Был оҡшашлыҡ форма, һүрәтләү һәм образлылыҡ юҫығында күҙгә ташлана:

*Тирәм, тирәм тир икән, ти,*
*Суҡан батыр ир икән.*
*Тубығына туп тейһә, ти,*
*Тубылғы ағас, тир икән.*

Рифмалашыу йәһәтенән ҡарағанда ла, “Суҡан батыр” йыр-ҡобайыры ҡыҙыҡлы. Беренсенән, өндәр ауазлығы, өн оҡшашлығы халыҡ йырында иң тотороҡло поэтик ҡанун (бында ти-ти-ту-ту). Ә ул һәр әҫәрҙә тиерлек сағылыш таба. Ким Әхмәтйәнов аңлатыуынса, “Аһәңлелек – әҙәби ижадтың даими закондарының береһе. Халыҡ ижадының иң боронғо жанрҙарынан һаналған мәҡәл һәм ҡобайырҙарҙа уҡ бер үк өндәрҙе мөмкин тиклем йышыраҡ аралаштырырға тырышыу күренеше көслө булған”[38]. Был осраҡта юғарылағы миҫалда аһәңлелек тыуҙырыу күренешенең ассонанс төрөн күҙәтәбеҙ – сөнки “ассонанс – бер төрлө һуҙынҡы өндәрҙең йыш ҡабатланып килеүе”[39] (ҡобайырҙа: и-и-и; у-у-у).

Икенсенән, йыр-ҡобайырының ике строфаның да тәүге ике юлдары ҡабатланып килә:

*Тирәм, тирәм тир икән, ти,*
*Суҡан батыр ир икән.*

Шулай уҡ йыр-ҡобайырҙың дүртенсе юлдары ла бер-береһе менән ауаздаш килә:

Тирем сыға, *тир икән* – Тубылғы ағас, *тир икән*.

Герой беҙҙең алдыбыҙға әкиәт геройы ҡиәфәтендә килеп баҫа. Ул хатта маңлайына тейгән уҡты ла тоймай, тир тип, иғтибар итмәй. Йәғни был осраҡта беҙ гипербола ҡулланылыуын күҙәтәбеҙ. Был алым – эпик геройҙарҙы һүрәтләүҙәге традицион күренеш.

Алда әйтеп кителгәнсә, “Суҡан батыр” әҫәрендә күпселек ҡобайырҙар өсөн хас булған типологик һыҙаттарҙы күрәбеҙ. Ҡобайырҙарҙа йыш ҡына батырҙар бер үк алымдар аша һүрәтләнә. Мәҫәлән, “Салауат батыр” ҡобайырында халыҡтың батырлыҡ һәм ҡеүәт идеалы түбәндәгесә сағылыш тапҡан:

*Салауат батыр ир ине,*
*Менгән аты кир ине.*
*Яурынына уҡ тейһә,*
*Себен тешләй, тир ине.*
*Күкрәгенән ҡан сыҡһа,*
*Тирем сыға, тир ине, ай,*
*Тирем сыға, тир ине*[40].

“Суҡан батыр” йыр-ҡобайыры бөгөнгө көндә икенсе һулышта йәшәй. Йыш ҡына уны концерттарҙа Мәүлетбай Ғәйнетдинов башҡарҙы. Башҡорт дәүләт филормонияһы артистары тарафынан шулай уҡ “Суҡан батыр” исемле бейеү ҙә ижад ителгән. Шулай итеп, фольклор әҫәре йәшәүен дауам итә.

Арғаяш яҡтарында таралған “Киҙәгәс” йыры ла башҡорт халыҡ йырҙары араһында үҙенең төҙөлөшө йәһәтенән үҙенсәлекле урын алып тора. Йырҙың һүҙҙәре – “Башҡорт халыҡ ижады”[41] томдарында, ә нотаға һалынған көйө беренсе тапҡыр “Фольклор народов РСФСР”[42] йыйынтығында донъя күрә.

Киҙәгәс күле – Силәбе өлкәһенең Арғаяш районындағы күл. Йыш ҡына уны Тирәгәс тип атап йөрөтәләр[43].

“Башҡорт халыҡ ижады”ның “Йырҙар” томына ингән “Киҙәгәскүл” һәм Дамир Вәлиев яҙып алған вариант бер-береһенән ныҡ айырыла. Был айырмалылыҡ күләм буйынса ла асыҡ күренә – томлыҡта йыр ике куплетлыҡ.

*Киҙәгәс тә күлдең, ай, буйында*
*Күп командаларға дәл булдым.*
*Йән-юлдашым минең малолетка,*
*Тотолорға шунда маң булдым.*

*Киҙәгәс тә күлдең, ай, туғайы*
*Ат менеп үк сабырға уңайлы.*
*Ун ике лә йылға хөкөм булып,*
*Ун ике йыл ярты тулайы*[44].

Дамир Вәлиев тарафынан теркәлгәнендә йыр өс строфалы һәм йөкмәтке йәһәтенән дә айырылып тора.

Дамир Вәлиев, информатор Сәфәрғәле Солтанбәков һөйләгән легендаға таянып, “Киҙәгәс” йырын Салауат Юлаев менән бергә батшалыҡҡа ҡаршы көрәшеп, карателдәргә әсирлеккә төшкән башҡорт ирҙәре сығарған, тип билдәләй[45].

“Киҙәгәс” йыры 3 строфалы һәм уларҙың һәр береһе бишәр юлдан тора. Башҡорт халыҡ ижадында был – һирәк осрай торған күренеш. Быны К. Әхмәтйәнов билдәләүенсә, “Биш юллыҡ строфа – башҡорт халыҡ ижадында ла, яҙма поэзияла ла һирәк осрай”[46]. Өс строфаһы бер үк төрлө рифмалаша – икенсе һәм бишенсе юлдары ауаздаш. Схематик яҡтан – абвгб.

*Киҙәгәс тә күлдең, ай, буйында*
*Күп командаларға дәл булдым.*
*Үләнде күлдең буйында,*
*Ай-һай ҙа, беҙҙең ғәзиз баштар*
*Тотолорға шунда ла маң булдым.*

Күренеүенсә, йырҙа һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың билдәле ерлек менән бәйләнеүе күренә – Киҙәгәс күле.

Йырҙа ялан-ҡатай башҡорттарының диалект үҙенсәлектәре лә сағылыш таба. Мәҫәлән, бөгөнгө әҙәби телдә “дәл булдым” тигән һүҙбәйләнеш юҡ. Ул *тап булдым, осраным* мәғәнәһендә ҡулланыла.

Йырҙың «*Ай-һай ҙа, беҙҙең ъәзиз баштар*» юлы дөйөм строфаға инмәй, айырым йөкмәткеле. Ул үҙе бер хисте йәки фекерҙе белдерә. Был ҡатлам – ул боронғо алым. Сер, хәбәр әйтеү йә иһә дуҫ булмаған кешенең фекерен тарҡатыр өсөн ҡулланылған ул. Ҡайтарып һалыу алымы шулай уҡ Дим һәм Өршәк буйы башҡорттары йырҙарында йыш ҡулланылыуы хаҡында үрҙә билдәләп үткәйнек инде.

Йырҙың икенсе строфаһында лирик геройҙың көрәштәштәре тураһында ла бер ни тиклем мәғлүмәт биреп кителә: “Дуҫ-ишкәйем минең малолетка”. Күпселек башҡорт халыҡ йырҙарынан айырмалы рәүештә, бында рус һүҙҙәре лә ҡулланыла. Был деталь буйынса лирик геройҙың көрәштәштәре араһында рус халҡы вәкилдәренең булыуын да тойомлай алабыҙ. Шулай уҡ ул баш күтәреүселәр ғәскәрендә ифрат йәш егеттәр күп булыуын, төрлө милләт кешеләренең ҡатнашыуын һәм йәлләү тойғоһон да белдерә.

*Ҡамсы һабы бик нәҙек,*
*Ун икеләрҙән дә үрелгән.*
*Дуҫ-ишкәйем минең малолетка,*
*Ай-һай ҙа, беҙҙең ъәзиз баштар,*
*Күп нужаларҙы күрелгән.*

Был алым (*Ай-һай ҙа, беҙҙең ъәзиз баштар* юлы) – төп фекерҙе әйтер алдынан тыңлаусы иғтибарын йәлеп итер өсөн ҡулланылған сара. Йырҙың *дуҫ-ишкәйем минең малолетка* юлы ла айырым ҡалып булып тора. Ул хисте көсәйтә, һиҫкәндерә, уйлата. Дөйөм көй һәм һүҙгә ятып бармай, әммә махсус мөрәжәғәт ролен үтәй. Өсөнсө строфалағы *Ай-һай ҙа, беҙҙең ъәзиз баштар* юлы ошондай ҡалып булып тора.

Өсөнсө строфа иһә тағы бер үҙенсәлеге менән иғтибарҙы йәлеп итә. Йырҙа бер ни кимәлдә Крәҫтиәндәр һуғышынан һуң тарихи Башҡортостандағы хәлваҡиғаларҙы, уның башҡорт халҡы өсөн ниндәй ауырлыҡтар алып килгәне сағылыш таба: “Һирәк-һирәк ҡалған аҙ ауыл”.

*Ристан килә жәйәүҙәп,*
*Алдан да арттан ҡарауыл.*
*Беҙҙең генә илде һораһаъыҙ,*
*Ай-һай ҙа, беҙҙең ъәзиз баштар,*
*Һирәк-һирәк ҡалъан аҙ ауыл.*

*Ристан* тигән һүҙ руссанан башҡортсалап әйтелгән *арестант* һүҙе. *Жәйәүҙәп* иһә төньяҡ-көнсығыш башҡорттары диалектында *йәйәүләп* мәғәнәһендә.

Шулай итеп, “Киҙәгәс” йыры башҡорт халҡының тормошонда булып үткән хәл-ваҡиғаларҙы айырым образдар миҫалында ғына асып бирмәй, шул осорға дөйөм фон да бирә. “Шулай ҙа, ҡайһы бер башҡа халыҡтар фольклоры менән сағыштырғанда, башҡорт йыры халыҡ тормошонда шаҡтай үҙенсәлекле хеҙмәт үтәне. Хеҙмәтсәндәрҙең ун һигеҙенсе – ун туғыҙынсы быуаттарҙағы тормошон, был осорҙағы ижтимағи мөнәсәбәттәрҙе ул башҡа бөтә жанрҙарға ҡарағанда ла тулыраҡ сағылдыра, дәүерҙең тарихи-поэтик картинаһын тыуҙырҙы”, – тигән юлдар “Киҙәгәс” йырына ла тап килеп тора[47]. Ким Әхмәтйәновтың “тулыраҡ” һүҙен беҙ образлыраҡ, дөйөмләштереберәк тип тә әйтер инек. Сөнки йырҙың үҙ стиле, ҡобайырҙың үҙ стиле бар. Йыр – башҡа жанрҙарға ҡарағанда һығылмалыраҡ, активыраҡ һәм ижади тормошон оҙаҡ һаҡлаған жанр.

**Рәнис АЛТЫНБАЕВ.**

## ҺЫЛТАНМАЛАР:

[1] *Янғужин Р. Башҡорт ырыуҙары. — Өфө, 1998. —77-се б.*
[2] *Шунда уҡ. 78-се б.*
[3] *Янғужин Р. Башҡорт ырыуҙары. — Өфө, 1998. —78-се б.*
[4] *Хәйернуров Ә. Рәнис Алтынбаевҡа хат. Диссертанттың шәхси архивынан.*
[5] *Руденко С.И. Башкиры. Физический тип башкир // ЗРГО. Т.43. Вып.1. — Петрбург, 1916. — 330 с.; Башкиры: Историко-этнографические очерки. — М.; Л.: Изд-во АН СССР, 1955.— 392 с.*
[6] *Руденко С.И. Башкиры: Историко-этнографические очерки. — М.; Л.: Изд-во АН СССР, 1955.*
[7] *Мәһәҙиев Д. Кантондар // Ағиҙел. 2001. — №3. — 164-се б.*
[8] *Янғужин Р. Башҡорт ырыуҙары. — Өфө, 1998. — 79-сы б.*
[9] *Рычков П.И. История Оренбургская (1730 —1750). — Оренбург, 1896.*
[10] *Камаев Ф. Ижад ҡаяһына артылып // Исмәғилев З. Йәнгүзәлем. — Өфө, 1987. — 5-се б.*
[11] *Хисамитдинова Ф.Г. Географические названия Башкортостана. —Уфа: Изд-во БашГУ, 1992. — 103 с.*
[12] *«Урал батыр» // Башҡорт халыҡ ижады. Т.3. Эпостар. — Өфө, 1998. — 100-се б.*
[13] *Ғәлиастанов Сәлимгәрәй Ғәлиастан улынан (1906—1985) ҡыҙы Ғәлиастанова Ләфифә тарафынан яҙып алынған.*
[14] *Ислам. Энциклопедический словарь. — М., 1991. — С. 77.*
[15] *Селиванов Ф.М. О специфике исторической песни // Специфика фольклорных жанров. — М.: Наука, 1973. — С. 62.*
[16] *Шәйбәков Р. Ямантау тарихынан бер сәхифә // Ватандаш. 2005. — № 10. — 62-се б.*
[17] *Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Т.3. Совет осоро әҙәбиәте. — Өфө, 1991. — 40-сы б.*
[18] *Харисов Ә. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. Ун һигеҙенсе-ун туғыҙынсы быуаттар. — Өфө, 1965. — 112—113-се бб.*
[19] *Кирәй Мәргән. Башҡорт халыҡ ижады. — Өфө, 1981. — 124-се б.*
[20] *Башҡортостан. Энциклопедия. — Өфө, 1997. — 280-се б.*
[21] *Башҡортостан. Энциклопедия. — Өфө, 1997. — 280-се б.*
[22] *Әхмәров Ҡ.З. Башҡорт яҙыуы тарихынан. Өфө, 1972. — 29-30-се б.*
[23] *Башҡорт әҙәбиәте тарихы. I том. — Өфө: Китап. 1990. — 32-78-се б.*
[24] *Юсупов Р.М. Краниология башкир. — М., 1988; Уныҡы: Краниология башкир-гайнинцев //Башкиры-гайнинцы Пермского края. — Уфа, 2008. С.—297 — 315.*
[25] *Юсупов Г.В. Введение в булгаро-татарскую эпиграфику. — М.; Л.: Наука, 1960.*
[26] *Башҡорт халыҡ ижады. Йырҙар. — Өфө, 1977. — 41-се б.*
[27] *Сулейманов Р.С. Башкирское народное музыкальное искусство. Т. 11. Ч. 1. Музыкальный фольклор северо-западных башкир. — Уфа: Гилем, 2006. — 144 стр.*
[28] *Ислам. Энциклопедический словарь. — М., 1991. — С.123.*
[29] *1996 йылда Белорет районының Бирҙеғол ауылында йәшәүсе Йомағилова Мәймүнә Сәитгәрәй ҡыҙынан (1925—1997) Р. Алтынбаев тарафынан яҙып алына.*
[30] *Кирәй Мәргән. Башҡорт халыҡ ижады.— Өфө, 1981. — 127-се б.*
[31] *1993 йылда Белорет районының Ҡоҙашман ауылында Мөхитдинов Зәйнулла Мөхитдин улынан (1915 йылғы) Р.Алтынбаев тарафынан яҙып алынған.*
[32] *Сиражитдинова Н.М. // Ядкяр. — 2006 .— №1 . — С.24.*
[33] *Вәлиев Д. Арғаяш башҡорттарының ауыҙ-тел ижады ҡомартҡылары // Ватандаш. —№5. —141-се б.*
[34] *Әхмәтйәнов К. Әҙәбиәт теорияһы. — Өфө, 2004. —186-сы б.*
[35] *Вәлиев Д. Арғаяш башҡорттарының ауыҙ-тел ижады ҡомартҡылары // Ватандаш. —№5. —143-се б.*
[36] *Шунда уҡ. —143-сө б.*
[37] *Вәлиев Д. Арғаяш башҡорттарының ауыҙ-тел ижады ҡомартҡылары // Ватандаш. — № 5. — 143-се б.*
[38] *Әхмәтйәнов К. Әҙәбиәт теорияһы. — Өфө, 2004. — 205-се б.*
[39] *Шунда уҡ. 207-се б.*
[40] *Вәлиев Д. Арғаяш башҡорттарының ауыҙ-тел ижады ҡомартҡылары // Ватандаш. — № 5. — 143-се б.*
[41] *Башҡорт халыҡ ижады. — Өфө, 1974. — 70-се б.*
[42] *Фольклор народов РСФСР. — Уфа, 1980.*
[43] *Башҡорт халыҡ ижады. — Өфө, 1974. — 325-се б.*
[44] *1962 йылда Силәбе өлкәһе Ҡонашаҡ районының Һары ауылында 63 йәшлек Хәйбулла Фәйзуллиндан (1900 йылғы) Кирәй Мәргән тарафынан яҙып алынған // Башҡорт халыҡ ижады. — Өфө, 1974. —70-се б.*
[45] *Вәлиев Д. Арғаяш башҡорттарының ауыҙ-тел ижады ҡомартҡылары // Ватандаш. — №5.*
[46] *Әхмәтйәнов К. Әҙәбиәт теорияһы. — Өфө, 2004. — 236-сы б.*
[47] *Әхмәтйәнов К. Әҙәбиәт теорияһы. — Өфө, 2004. — 63-се б.*



*2012 – Рәсәйҙә тарих йылы*

**Әкрәм**
**БЕЙЕШ**

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ СЫҒЫШЫ

Башҡорт халҡының сығышын, тәү башлап ойошҡан дәүерен аҙмы-күпме асыҡларлыҡ тарихи мәғлүмәттәргә беҙҙә әлегә тиклем тейешле иғтибар булмаӊы. Шуға күрә, үткән быуаттарҙа төҙөлгән шәжәрә һәм тарихи материалдарҙағы кеүек үк, әле лә ғалимдар башҡорт халҡының йәки башҡорт ырыуҙарының сығышы хаҡында яҙғанда күберәк иркле фараздарға урын бирә. Был йәһәттән башҡорт ырыуҙарын тотош тикшереп, оло хеҙмәт яҙған Р.Ғ. Кузеев бигерәк ҙур ҡыйыулыҡ күрһәтә. Уның «Происхождение башкирского народа» (Мәскәү, 1974 й.) тигән китабы фән донъяһына ла, йәмәғәтселеккә лә яҡшы билдәле. Тикшергән мәсьәләһенең киңлеге, йыйылған мәғлүмәттәренең байлығы менән был хеҙмәт һәр кемде ғәжәпкә ҡалдыра. Ләкин авторҙың шул бай мәғлүмәтте алдан билдәләгән үҙ ҡарашына яраҡлаштырып, шуны раҫлар өсөн файҙаланыуы, үҙ ҡарашына тура килмәгәндәрен «йүнәтеп» китеүе ҙур үкенес тойғоһо уята.

Р. Ғ. Кузеевтың ҡарашы буйынса, тәүге мең йыллыҡ урталарында үҫәргән, түңгәүер, бөрйән ырыуҙары Ашин ҡәбиләһенең бүре башлы байрағы аҫтында урынынан ҡупҡан көслө төрки ҡәбиләләр менән бергә Үҙәк Азиянан Урта Азияға килгән, шунан аҙаҡ – Һырдарья, Арал диңгеҙе буйына күсенеп, IX быуатта – Төньяҡ Кавказға, X быуатта Бөгөлмә ҡалҡыулығына килеп, XIV – XV быуаттарҙан ғына яйлап-яйлап Көньяҡ Уралда урынлаша, Урал арьяғына сыға башлаған. Баш бүре хаҡындағы башҡорт риүәйәтен Р.Ғ. Кузеев оло бер тарихи мәғлүмәт кимәленә күтәрә һәм шуның менән башҡорт ырыуҙарының Ашин етәкселегендәге төрөктәр ағымы менән бергә килеүен иҫбатларға уйлай. Йәнәһе, риүәйәттә шул Ашин байрағындағы бүре күҙҙә тотолған. Әммә башҡорттар Ашинды ла, уның байрағын да иҫләмәй. Башҡорттарҙа үҙ ырыуын төрлө пәйғәмбәрҙән, хатта Сынғыҙ хандан килтереп сығарған шәжәрәләр бар, ә Ашинға бәйле бер шәжәрә лә билдәле түгел. Шуға күрә әлеге риүәйәтте башҡа төрлө аңлатыу дөрөҫөрәк булыуы ихтимал. Һис шикһеҙ, төрки телле ҡәбиләләр, «төрөк» тигән дөйөм атама менән йөрөмәһә лә, Ашин дәүере әллә нисәмә мең йыл элек барлыҡҡа килгән һәм борон замандан уҡ уларҙа бүре культы булған. Башҡорт риүәйәттәрендә ана шул бүре культы, йәғни бүре ҡиәфәтендәге Алла хаҡында, шул Алланың уларҙы Уралға алып килеүе хаҡында һүҙ бара булһа кәрәк.

Башҡорттарға билдәһеҙ Ашиндың эҙе, ғалимдар фекеренсә, бөгөнгө көнгә тиклем ҡаҙаҡтарҙа һаҡланып ҡалған. Улар үҙҙәренең алшын ҡәбиләһен туранан-тура шуға алып барып бәйләй. Былдай фекергә уларҙың нигеҙе лә бар, сөнки хәҙерге ҡаҙаҡ ҡәбиләләре юғарыла әйтелгән Оло күсештә ҡатнашып, Төрки ҡағанатының ҙур өлөшөн тәшкил иткән. VIII быуатта Төрки ҡағанаты тарҡалғас, алшын ҡәбиләһе хәҙерге Волга йылғаһының көнбайышындағы далаларға күсеп, ҡоман йәки урыҫса «половцы» тигән исем аҫтында йөрөүгә билдәле. XIII быуат аҙағында ҡоман телендә «Кодекс Куманикус» тигән һүҙлек төҙөп ҡалдырылған. Был ҡомартҡы ҡоман теленең хәҙерге ҡаҙаҡ теленә тотош тиерлек тап килеп торғанын күрһәтә. Тимәк, теге йәки был халыҡ, ҡәбиләнең сығышын асыҡлағанда тел факторы ҙур әһәмәткә эйә була ала. Үкенескә ҡаршы, Р.Ғ. Кузеев шул мәсьәләне бөтөнләй иҫәпкә алмай.

Ҡаҙаҡ ҡәбиләләренең теле шул замандағы төп үҙенсәлектәрен һаҡлап ҡалған кеүек, башҡорт ҡәбиләләренең теле лә ҙур үҙгәреш кисермәгәндер, тип уйларға кәрәк. Әгәр башҡорттар Ашин ҡәбиләһе етәкселегендәге Оло күсештә ҡатнашып, шундағы төрки ҡәбиләләр менән ныҡ аралашҡан булһа, башҡорт теле лә башҡаларҙыҡына яҡын булыр, хәҙерге төрки телдәрҙән үҙенә генә хас һыҙаттары менән айырылып тормаҫ ине. Ошонан сығып, башҡорт телен беҙ, бик борондан айырым тел ареалында ғәмәлләшкән, айырым үҫеш юлы үткән, тип әйтә алабыҙ. Ж.Ғ. Кейекбаев, лексик статистика ысулын ҡулланып, башҡорт теле боронғо төрки телдән 4000 йыл элек айырылған, тигән һығымта яһай[1]. Айырым тел ареалында үҫкәнен күҙ уңында тотмайынса, башҡорт теленең күп үҙенсәлеген, мәҫәлән, уның өндәр системаһын аңлатыу һис тә мөмкин булмаҫ ине. Теле айырылған булғас, әлбиттә, шул телдә һөйләшкән башҡорттар ҙа Төрки ҡағанаты ойошҡан дәүерҙән күп быуаттар элек төрки телле халыҡтар донъяһынан айырымланған булып сыға.

Тел үҙенсәлектәренән сығып фекер йөрөткәндә, башҡорт ҡәбиләләре, ғөмүмән, ниндәйҙер ҙур яу йәки күмәк халыҡ менән буталышып килгән булырға тейеш түгел. Шуға күрә уларҙы II быуатта Үҙәк Азиянан хәҙерге Ҡаҙағстан далаларына килтереп, IV быуатта көнбайышҡа табан ҡуҙғалған һундар яуы менән бәйләргә лә тейешле нигеҙ юҡ. Башҡорттағы меңле ҡәбиләһенең ҡайһы бер ырыуҙары үҙҙәрен һундан сыҡҡан тип һанай икән, был, киреһенсә, башҡорттоң шул замандан элек үк ошо яҡта йәшәгәнен, һун ырыуҙарының уға һуңынан килеп ҡушылғанын ғына күрһәтә. Күрәһең, башҡорт ҡәбиләләре үҙҙәренең тәүге төйәгендә, йәғни ҡайҙалыр Байкал күленең көнбайышында булған саҡта уҡ бер берләшмәгә ойошоп, яҡут һәм бүрәттәр менән бер тирәлә йәшәгән. Был фекерҙе, башҡорт телендәге кеүек, яҡут менән бүрәт телендә лә боронғо «с» өнөнөң «һ» өнөнә күскәнлеге дөрөҫләй. Ундай бер үк төрлө күсеш күрше телдәрҙең үҙара тәьҫирләшеүе һөҙөмтәһендә генә ғәмәлгә килә ала. Бында «бөрйән» менән «бүрәт» атамаларын сағыштырып, хатта, шул дәүерҙә улар бер ҡәбиләләр берләшмәһенә инмәгәнме икән, тип тә фаразларға мөмкин. Уның өҫөн монгол телендәге – д, манжур телендәге – та күплек ялғауы – н өнөнә бөткән һүҙҙәргә ҡушылғанды һуңғы өндөң төшөп ҡалыуын иҫкә алырға кәрәк. Мәҫәлән, монголда гишүүн – «ағза», гишүүд – «ағзалар», морин – «ат», морд – «аттар»; манжурҙа ахунь – «ағай», ахута – «ағайҙар», саргань – «ҡатын», саргата – «ҡатындар». Ошо ҡағиҙә буйынса халыҡ һәм ҡәбиләләрҙең ҡатар йөрөй торған атамалары ла барлыҡҡа килгән: сойон – сойот, кидан – кидат һ.б. Шуның һымаҡ, тәүге дәүерҙә бер

ҡәбиләләр берләшмәһенең бүрйән – бүрйәт тигән ҡатар атама менән йөрөп, һуңынан айырылып киткән булыуы ихтимал. В.И. Даль үткән быуатта башҡорттарҙан улар менән бүрәт араһында ниндәйҙер туғанлыҡ булғанын ишетеүе хаҡында яҙа[2]. Шундай уҡ хәтирә һуңғы ваҡытҡа ҡәҙәр бүрәттәрҙә лә һаҡланып килгән. Хәҙерге бөрйәндәрҙең – төрки, ә бүрәттәрҙең монгол телле булыуына килгәндә, уны ике төрлө аңлатып була: бөрйәндәр менән бер үк ҡәбиләләр берләшмәһенә инһәләр ҙә, бүрәттәр борондан монгол телле булған, йәки улар, Дунай болғарҙары славянлашҡан кеүек, көслө монгол йоғонтоһонда һуңынан монголлашҡан, әммә үҙ атамаһын, теленең төп фонетик үҙенсәлеген һаҡлап ҡалған. Ә бөрйәндәр был йоғонтоға эләкмәҫ элек үк ул яҡтарҙан китеп өлгөргән. Был, әлбиттә, – фараз, шулай ҙа уның нигеҙе юҡ түгел.

Антропологтар, боронғо баш һөйәктәрен тикшереп, боронғо эраның III – II мең йыллыҡтарында уҡ Көньяҡ Урал тирәһендә монгол йөҙлө ҡәбиләләр булғанын билдәләй. Улар, шул дәүерҙәрҙән килгән монголоидтарҙы урындағы европеоидтар йотоп барған, тигән фекергә килә. Тик барыбер был факт Себер халыҡтарының көнбайышҡа күсеү юлдарын бик борондан белгәнлеген күрһәтә. Боронғо эраның VIII быуаттарынан көнсығыш ҡәбиләләренең хәҙерге Урал – Волга буйҙарына күсеүе йышая, һәм был ҡәбиләләр урындағы халыҡтарға ныҡ тәьҫир итеп, һис шикһеҙ, савромат (боронғо эраның VII – VI быуаттарынан), һуңғараҡ сармат (боронғо эраның IV быуатынан) мәҙәниәтен барлыҡҡа килтереүҙә ҡатнаша. Археологтар савромат, бигерәк тә сармат ҡомарҡыларының Себер ҡомарҡыларына оҡшаш булғанлығын, был ике халыҡтың этник йәһәттән бер төрлө булмағанлығын, төрлө ҡәбиләнән сыҡҡанлығын раҫлай. Шуның менән бергә, археологтар, ышаныслы нигеҙҙәре булмаһа ла, савромат һәм сармат культураларын йөрөткән ҡәбиләләрҙең бөтәһе лә иран телле булған, тип иҫәпләй. Был фекергә С.И. Руденко ғына ҡушылмай, һәм ул, иң һуң тигәндә боронғо эраның VIII – VII быуаттарында Башҡортостан менән Сулман буйы халҡының күпселеге боронғо башҡорт телендә һөйләшкән булыуы ихтимал, тип фараз итә[3]. С.И. Руденконың был фекере, әлбиттә, археологтарҙыҡына ҡарағанда күпкә нигеҙлерәк, сөнки шул дәүерҙә Себер яҡтарынан монгол йөҙлө ҡәбиләләрҙең килгәнен белә тороп, шуларҙың бөтәһен дә иран телле ҡәбиләләр иҫәбенә индереү һис тә башҡа һыйырлыҡ түгел. Шуға ҡарамаҫтан, был урында, боронғо эраның VIII – VII быуаттарынан килә башлаған төрки телле ҡәбиләләрҙең бөтәһе лә боронғо башҡорт телендә һөйләшкән, тип әйтер өсөн дә ышанnetwork дәлил юҡ, сөнки Себерҙән килгән ҡәбиләләрҙең барыһы ла башҡорт сығышлы булһа ғына, шулай тип әйтергә мөмкин. Ә улар араһында, һис шикһеҙ, башҡа төрки ҡәбиләләр ҙә мотлаҡ булғандыр. Шулар иҫәбенә теле буйынса бөгөнгө фәнгә билдәле халыҡтарҙан боронғо болғар (хәҙерге сыуаш) ҡәбиләләрен индереү хәҡиҡәткә тап килә. Тел мәғлүмәттәре болғар ҡәбиләләренең боронғо төрки халыҡтар донъяһынан башҡортҡа ҡарағанда элегерәк айырылып, үҙ аллы үҫеш юлы алғанын, ә шуға ҡәҙәр бүрәттәр менән түгел, ә монголдар менән ныҡлы аралашып йәшәүен күрһәтә. Шулай булғас, боронғо эраның VIII – VII быуаттарында Урал – Волга буйына килгән төрки халыҡтарҙың күп өлөшө болғар ҡәбиләләренән торған, тип фараз итергә мөмкин.

Археологтар боронғо эраның IV быуаттарынан ҡалған ҡорғандарҙа монгол йөҙлө баш һөйәктәренең тағы артып китеүен билдәләп, был хәлде Урал буйҙарына яңы этник төркөмдәрҙең килеүе менән аңлата. Был төркөмдәрҙе

боронғо башҡорт ҡәбиләләренән торған, йәғни башҡорт ҡәбиләләре Урал буйҙарына боронғо эраның V – IV быуаттары тирәһендә күскән, тип беҙ артыҡ шикләнмәй әйтә алабыҙ. Яҡуттарҙың Лена йылғаһы буйлап төньяҡҡа күсеүе лә сама менән шул дәүергә тура килә. Күрәһең, бер тирәлә аралашып йәшәгән ерҙән, ни сәбәптәндер, яҡуттар – төньяҡҡа, башҡорттар көнбайышҡа күсеп киткән, ә бүрәттәр үҙ урынында тороп ҡалған. Ғ.Х. Оморҙаҡов боронғо Страбон, Птоломей, Рим шағиры Публий Овидий Назондың ике эра сигендә Көньяҡ Уралда йәшәгән «бастарн» халҡын телгә алыуы хаҡында яҙа[4]. Был «бастарн»дар башҡорт ҡәбиләләре булғандыр, тип фаразларға нигеҙ бар, сөнки әҙ генә булһа ла шуға оҡшатырлыҡ атама менән йөрөгән башҡа бер халыҡ та тарихта билдәле түгел, ә баяғыса, һуңғы – «т» һәм – «н» өндәренең сиратлашыуын иҫәпкә алғанда, бик борон башҡорн – башҡорт тигән ҡатар атама, тип шикләнмәй әйтергә мөмкин. Әгәр, ысынлап та, шулай булһа, башҡорттарҙың Көньяҡ Уралға яңы эранан алда уҡ килеп, танылып өлгөргәнен был мәғлүмәт тә дөрөҫләй.

Урал буйына күскән башҡорт ҡәбиләләре шунда уҡ урындағы халыҡ менән яҡын мөнәсәбәткә инеп, сармат мәҙәниәтенең формалашыуына ҙур йоғонто яһаған. Себерҙән сыҡҡан күсмә ҡәбиләләрҙең был йоғонтоһон археологтар ҙа кире ҡаҡмай. Культураһына йоғонто яһау менән бергә, башҡорт ҡәбиләләре, С.И. Руденко менән А. П. Смирнов фекеренсә, сармат ҡәбиләләренең бер өлөшөн үҙ эсенә алған, тимәк, шул заманда уҡ улар башҡа ҡәүемдәрҙе башҡортлаштырырлыҡ ҡеүәткә эйә булған. Әгәр башҡорт ҡәбиләләре, Р.Ғ. Кузеев һәм башҡа ҡайһы бер тарихсылар фекеренсә, Урал буйына бик һуңлап килгән булһа, сарматтар менән осрашып, ҡатнашып өлгөрмәҫ һәм башҡорттан – сарматҡа, сарматтан башҡортҡа бер сифат та йоғолмаҫ ине. Сөнки иран телле сарматтар ике эра араһында тотош тиерлек Волга һәм Дон (Тын) аръяғындағы далаларға күсенеп, Көньяҡ Урал менән бәйләнешен тамам өҙгән. Башҡа сарматтар менән бергә боронғо болғар ҡәбиләләре лә Волга аръяғына, Аҙау (Азов) яҡтарына күскән булһа кәрәк, шуға күрә уларҙың хәҙерге тарихҡа билдәле артабанғы яҙмышы шул яҡтан башланып китә. Был күсештән һуң Көньяҡ Урал далаларында халыҡ бик аҙайып, унда башҡорт ҡәбиләләренән башҡа бер халыҡ та ҡалмай, күрәһең. Шул замандан был ерҙәр башҡорттоң үҙ төйәгенә, мәңгелек гәзиз еренә әүерелә.

Ошо урында бер аҙ артҡа сигенеп, Көньяҡ Уралдағы башҡорт-болғар мөнәсәбәттәре тураһында ла әйтеп китеү урынлы булыр. Башҡорт ҡәбиләләре бында төпләнгәс, башҡа сармат ҡәбиләләренән бигерәк, үҙҙәренән алда килгән төрки телле болғарҙар менән яҡын мөнәсәбәткә инә, һәм шул аралашыу нигеҙендә яңы бер төрки телдәр ареалы барлыҡҡа килә. Был ареалда үҙ-ара тәьҫирләшкән ике телдең дә дөйөм төрки артикуляцияһы йомшарып, һуҙынҡылар системаһы ҙур үҙгәрешкә килә: боронғо «а» өнө «а» өнөнә, «е» өнө «и» өнөнә, «и» өнө «е» өнөнә, «о» өнө «у» өнөнә, «ө» өнө «ү» өнөнә, «у» өнө «о» өнөнә, «ү» өнө «ө» өнөнә күсә. Бындай ҙур фонетик үҙгәреш барлыҡҡа килһен өсөн халыҡтың тулы ассимиляцияһына ҡарағанда бик күпкә артыҡ ваҡыт талап ителгәнен иҫәпкә алғанда, башҡорт менән болғар ҡәбиләләре айырылышҡанға тиклем Көньяҡ Уралда бер быуат ҡына түгел, бер нисә быуат буйы ныҡ аралашып йәшәгән булып сыға. Шуның өсөн, башҡорт ҡәбиләләре Урал буйына боронғо эраның V – IV быуаттарында уҡ килгән, тип тағы ышаныслыраҡ әйтергә мөмкин.

Яңы эра башындағы ҡомартҡылар археологтар тарафынан бик насар өйрәнелгән, шуға күрә ул дәүерҙәге ваҡиғалар хәҙерге тарих фәненә ҡараңғы. Күрәһең, башҡорттар Урал буйҙарында үҙҙәре генә ҡалғас, малсылыҡ һәм кәрәгенсә игенселек менән шөғөлләнеп, иркәле тормошта йәшәп алып киткән. Әлбиттә, улар тирә-яҡ мөхиттән кәртәләнеп ятмаған, күрше халыҡтар менән аралашҡан булырға тейеш. Археологтар сарматтарҙың Уралда саҡта бик ҙур хәрби әүҙемлек күрһәткәнен, тирә-яҡҡа һөжүм яһап торғанлығын билдәләп китә. Шундай уҡ хәрәкәт, һис һүҙһеҙ, башҡорт ҡәбиләләрендә лә хас булған, улар ҙа төрлө яҡҡа һөжүм яһап, барымтаға барып, ҡайнап йәшәгән, тип уйларға кәрәк. Сөнки ҡәбиләләр берләшмәһе дәүерендә барымталар, хәрби хәрәкәттәр һәр халыҡтың йәшәү рәүеше булып торған.

Әүҙем тормош алып барған башҡорт ҡәбиләләре, әлбиттә, ике быуаттан артыҡ үҙенең көньяғындағы далаларҙы гиҙгән һун ҡәбиләләре менән бәйләнеш тотмай булмағандыр. Ләкин башҡорттар улар менән аралашмаған, үҙ ерен улар иркенә ҡуймаған, үҙ иле менән үҙ телен, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев әйтешләй, «Азиянан Европаға туҡтауһыҙ ташҡын кеүек ағылған һәм үткән ерҙәрендәге бөтә нәмәне емереп, юҡҡа сығарған халыҡтарҙан ҡурсалап, һаҡлап торған»[5]. Бының өсөн башҡорт ҡәбиләләре көслө, берҙәм булырға тейеш булған. Ул берҙәмлекте Үҙәк Азияла, Байҡал буйында йәшәгән саҡта уҡ «башҡорт» тигән уртаҡ исем менән бер хәрби берекмәгә ойошоп алыуҙары һәм шуны тарҡатмай ныҡ тотоуҙары менән генә аңлатып була. Ошо берҙәм башҡорт ҡәбиләләре араһынан бөрйәндәр генә тәүге дәүерҙә үҙенә башҡараҡ бер урын алып торған. Күрәһең, улар башта бүрәттәр менән бер ҡәбиләләр берләшмәһендә булып, Урал яғына күскәндә генә башҡорт берләшмәһенә ҡушылған да, һәр төрлө ҙур эштә бөтә башҡорт менән бер төптән торһа ла, ҡайһы ваҡыт үҙ алдына ла эш иткән, күпмелер кимәлдә үҙаллылығын һаҡлаған. Шуға күрә ғәрәптәрҙән ҡалған иң тәүге яҙма мәғлүмәттәрҙә бөтә ҡәбиләләр дөйөм «башҡорт» исеме менән атап йөрөтөлһә, бөрйәндәр үҙенә башҡа ла телгә алынған. Мәҫәлән, Хишам Ибн-әл-Калби (VIII б.) Йәфет тоҡомона ингән халыҡтарҙы күрһәткәндә, фарсы, юнан (грек) халыҡтарына тиң ҡуйып, бөрйәндәрҙе лә атап үтә: Әбү-әл-Фида (XIII б.) бөрйәндәрҙе «ҙур халыҡ, хатта бер нисә яусыл халыҡтан тора» тигән, Әл-Мәсуди (X б.) бөрйәндәрҙең батшаһы булғанын яҙып, А. Б. Булатовтың әйтеүенсә, ғәрәп сығанаҡтары Волганың түбәнендә Бөрйән тигән ҡала булғанын күрһәтә[6]. Ошонан сығып, бөрйәндәрҙең VIII – IX быуаттарға тиклем көслө ҡәбилә булыуы, хатта Башҡорт дәүләте ҡоролғанға тиклем үҙенә башҡа ханлыҡ тотоп тороуы хаҡында фекер йөрөтөргә мөмкин.

Р.Г. Кузеевтың китабында боронғо башҡорттар менән бөрйәндәр тураһындағы ғәрәп мәғлүмәттәрен тотош тиерлек иҫәпкә алып, үҙенә кәрәгенсә аңлатма бирелгән. Ләкин ана шул үҙенә кәрәгенсә генә аңлатҡаны өсөн беҙгә уларҙың иң мөһимдәрен ҡабат күҙҙән үткәреп сығырға тура килә. Тарихсы килтергән мәғлүмәттәрҙең тарихи яҡтан иң тәүгеһе итеп Ибн-әл-Асирҙың (XII б.) яҙмаһын алырға мөмкин. Унда Төрки ҡағанатының VI быуатта яу менән Иранға барғанында бөрйәндәрҙең дә ҡатнашыуы хаҡында хәбәр ителә. Ошонан сығып, Р.Г. Кузеев, бөрйәндәр әүәлдән Һырдаръя буйында йәшәһә йәки, дөрөҫөрәге, VI быуатта башҡа төрки халыҡтар менән бергә шунда килһә генә, Төрки ҡағанатының яуында ҡатнаша алыр ине, тип һығымта яһай, йәғни мәғлүмәтте үҙенең алдан билдәләгән ҡарашын дөрөҫләр өсөн файҙалана[7]. Беҙгә ҡалһа, шул

уҡ мәғлүмәтте бөтөнләй икенсе төрлө аңлатыр инек: Төрки ҡағанаты этник яҡтан бер төрлө булмаған, уның эсенә әллә нисәмә төрки ырыу һәм ҡәбилә ингән. Шулай булһа ла, ғәрәп авторы яуҙа ҡатнашҡан ҡәбиләләрҙең бер дәүләт берләшмәһенә ингәндәрен берәм-берәм атап сығыуҙы кәрәк тапмаған, ә ҡағанат эсенә инмәй, шул яуҙа ҡатнашҡан бөрйәндәрҙе айырым алып күрһәткән. Бөрйәндәрҙең Төрки ҡағанаты менән төрлө бәйләнеш тотоуы, сәйәси мөнәсәбәттә булыуы шик уятмай, ләкин мөнәсәбәттә булғанына һәм VII – VIII быуаттарҙан Урта Азияла төрки халыҡтарҙың ныҡлы урын алғанына ғына таянып, бөрйәндәр ҙә шунда булған, Төрки ҡағанаты тарҡалғандан һуң, VIII быуатта ла улар Бохара яғында ғүмер иткән, тип әйтергә һис бер нигеҙ юҡ. Шул фекерен нигеҙләр өсөн ҙур тырышлыҡ һалып, Р.F. Кузеев Әл-Баҡувиҙың (XV б.), «баджа иле... төрки халыҡ», улар «йөҙөм, хөрмә, ҡара емеш күп үҫкән ерҙә» йәшәй тигән һүҙҙәрен ала ла, берҙән, әллә ниндәй «баджа» атамаһын, үҙ белдегенсә хәрефтәр өҫтәп, «бурджан»ға әйләндерә; икенсенән, Әл-Баҡувиҙың яҙмаһында бөрйәндәрҙең Урта Азияла йәшәгән ваҡыты сағылған, тип мәғлүмәтте XV быуаттан үҙенә кәрәк заманға күсерә.

Р.F. Кузеев Бохара тарафында «Башҡорт тауы» тигән тау барлығын үҙ ҡарашына оло дәлил итеп килтерә. Улайға китһә, Ейәнсура районындағы «Ҡалмаҡ ҡарауылы», Туймазы районындағы «Төркмән тауы» тигән тауҙарҙың исемен дә, ҡасандыр шунда ҡалмаҡтар менән төркмәндәр йәшәгәнен күрһәтә, тип аңлатырға тура килер ине. Ындай атамалар билдәле бер халыҡ биләгән ергә генә түгел, ниндәйҙер ваҡиғаға бәйле урындарға ла ҡушыла. Бохара яғында, ысынлап та, «Башҡорт тауы» бар икән, уның исеме баяғы яуҙа ҡатнашҡан бөрйән башҡорттарынан ҡалған йәки башҡа бер ваҡиғаға бәйләнгән булыуы ихтимал. Ошо «Башҡорт тауы»н ышаныслы дәлил кимәленә күтәреү менән бергә, Р.F. Кузеев Әл-Бирунийҙың (XI б.): «Төрлө төркиҙәр йәшәгән етенсе климат (иҡлим) бүлкәте Башҡорт тауҙарынан, бәжәнәк яҡтарынан, Сувар һәм Болғар ҡалаларынан үтә»,– тигән мәғлүмәтендәге «Башҡорт тауҙары»н тарихсылар Урал тауҙарына һанағанда, бер үҙе ҡаршы килеп, Һырдаръяның урта ағымынан көнсығышҡа табан күсереп ултырта[8]. Климатик бүлкәттәрҙең географик параллель һыҙығы буйлап үткәнен һәр кем белә, ләкин ундай һыҙыҡ Р.F. Кузеевтың ҡарашына тап килмәй, шуға күрә ул уны үҙенә яраҡлаштырып, Һырдарья аръяғынан Болғар ҡалаһына табан ҡып-ҡыя итеп һыҙып ҡуя. Хатта шул уҡ ғәрәптәрҙән Әл-Баҡувиҙың: «(Етенсе климат) көнсығыштан башлана, ундағы урман һәм тауҙарҙа ҡырағайға оҡшаш төрки кешеләр йәшәй», – тигән һүҙе лә Р.F. Кузеевты уйландырмай, Һырдаръяның урта ағымынан көнсығышҡа табан уның күҙенә урмандар, тауҙар күренә. Климатик бүлкәт ҡәләм менән һыҙылған һыҙыҡ түгел, ул географик параллель буйынан киң һыҙат булып үтә. Шулай булғас, Әл-Бируни күрһәткән етенсе климат һыҙатында, Р.F. Кузеев уйлағанса, Урал тауы менән Болғар ҡалаһының араһына бәжәнәк ерҙәре килеп ҡыҫылмаған, ә көньяҡ сиге бәжәнәк ерҙәренең бер аҙ өлөшөн, төньяҡ сиге Сувар һәм Болғар ҡалаларын эсенә алған һыуыҡ климат бүлкәте урынлашҡан. Бәжәнәктәрҙең төп ере Яйыҡ – Эмба (Жим) араһы, юғарылағы Әл-Баҡуви әйтеүенсә, алтынсы климаттың төньяғында булған[9]. Был факт Һырдарья буйҙарының етенсе климатҡа инмәгәнен раҫлап, Р.F. Кузеевтың фекерҙәрен тотош юҡҡа сығара.

IX быуатта боронғо башҡорттарҙың Һырдарья менән Арал йылғалары буйында йәшәгәнен туранан-тура күрһәткән мәғлүмәттәр бар, тип Р.F. Кузеев

Әл-Мәсүдигә һылтана, йәнәһе, ул «баджнак», «баджа», «баджгард» һәм «наукерде» ҡәбиләләренең 830 – 844 йылдарҙа Гүргәнч (Каспий) диңгеҙе буйында гуздар (уғыҙҙар) һ.б. менән һуғышып еңелгәс, көнбайышҡа китеүе хаҡында әйткән[10]. Бында, беренсенән, «баджа» тигән ҡәбиләне бөрйән менән тиңләштереү, үрҙә әйтелгәнсә, бик ныҡ шикле; икенсенән, башҡорттар шул һуғышта ҡатнашҡан булһа ла, шунда йәшәгән, тип раҫлап булмай. Улар үҙҙәре йәшәгән ерҙәге ҡәбиләләр менән түгел, ә ситтән яу менән барып һуғышҡан булырға тейеш; өсөнсөнән, һуғышта еңелгәс, уларҙың көнбайышҡа, Төньяҡ Кавказға күсеүе тураһында бер мәғлүмәт тә юҡ. Шуның өсөн Әл-Мәсүдиҙең яҙғанын, Арал буйына яу менән барып уғыҙҙар һ.б. менән һуғышҡандар ҙа, еңелгәс, кире сигенгәндәр, тип аңларға кәрәк. Башҡорттарҙың уғыҙҙар менән бер урында йәшәмәгәнен Әл-Идрисиҙең: «...Ҙур тау гуздар илен башҡорт иленән айырып тора; ул тау Мургар тип атала», – тигән һүҙҙәре лә асыҡ күрһәтә[11]. Әл-Идриси әйткән тау, әлбиттә, Моғажар тауы булырға тейеш, сөнки ул тирәлә шуға оҡшаш атамалы бүтән тау юҡ. Шулай булһа, уғыҙҙар иле Моғажар тауының көнсығышында, Арал диңгеҙе яғында, ә башҡорт иле уның көнбайышында, Яйыҡ буйында, булып сыға. Әл-Идриси был фекерен X быуаттағы мәғлүмәттән алған, һәм уның яҙғанын шул уҡ X быуатта сәйәхәт иткән Ибн Фаҙлан яҙмалары ла дөрөҫләй. Ибн Фаҙлан төркөмө уғыҙҙар иленән сығып, Моғажар тауынан аҡҡан Саған йылғаһына еткәс кенә башҡорттарҙан ҡурҡа башлаған[12]. А П. Ковалевский был хаҡта: «Ана, ҡалай алыҫ, көньяҡҡа ҡәҙәр башҡорт сапҡындары барып еткән», – тип әйтеп китә[13]. Башҡорттар, күрәһең, Сағанға хәтлем булмаһа ла, унан төньяҡтараҡ аҡҡан Жим йылғаһына тиклем биләмәне үҙ ере иҫәпләгән. Шуға күрә улар Иван IV - нән алған грамотаға: «...Айрыурыҡ тамағынан, Жим һыуынан – үҫәргән менән ҡыпсаҡ, тамъян менән бөрйәндекелер. Йәнә унан сәхрә тарафына – түбәнге сиге Һарайсыҡтан үҙәндең ағыш һыуы менән... үрге яғы Дүрткүлгәсә бөрйән менән үҫәргәндең аҫаба ерҙәрелер», – тип яҙылған[14]. Ул заманда айырым халыҡ һәм ханлыҡтарҙың ере ныҡлы сик һыҙығы, сик һағы менән бикләнмәгән. Хатта VIII – XIX быуаттарҙа ла башҡорт ҡәбиләләре биләгән йәки һатҡан ерҙәрҙең сиге фәлән йылға бөгөлөнән яңғыҙ ҡарағайға... тип кенә билдәләнгәнен иҫкә алғанда, IX – X быуаттарҙағы сиктең сама менән йөрөтөлгәненә ғәжәп итеп булмай. Шулай булғас, Каспий диңгеҙе менән Яйыҡ араһындағы ҡапҡанан бер-бер артлы оло яуҙар үтеп, халыҡтар ағылып торһа ла, башҡорттар барыбер был яҡтарҙың төп хужаһы булып ҡала килгән. Ибн Фаҙлан Саған йылғаһында уҡ башҡорттан ҡурҡа башлағандарын яҙһа ла, башҡорт еренең көньяҡ сиген асыҡлап күрһәтмәгән, тик Ҡондоҙса йылғаһын сыҡҡас, башҡорт тигән төрки халыҡ иленә, Сиремшән йылғаһын сыҡҡас, Саҡлаб иленә килгәнен генә теркәгән[15]. А.П. Ковалевский Ибн Фаҙландың башҡорт менән уғыҙҙар иле хаҡында әйткәненә шик белдерә һәм, уның яҙыуы буйынса, уғыҙҙар Синк тауы менән Саған йылғаһы араһындағы, башҡорттар Ҡондоҙса менән Сиремшән йылғалары араһындағы тар ғына ерҙәрҙә йәшәгән булып сыға. Ғәмәлдә иһә был халыҡтар бик күпкә киң ерҙе биләп, Ибн Фаҙлан бында үҙенең үткән юлын һәм кискән һыуҙарын күрһәтеүҙе генә күҙҙә тотҡан, уны сәйәхәттең башҡа хәлдәре менән бәйләп тормаған, тип бик урынлы фекер белдерә[16]. Тимәк, Саған йылғаһы буйын ҡалтыратҡан башҡорттар Р.Ғ. Кузеев уйлаған Һырдаръя һәм Арал яғында булмаған, ә Жимдән Сиремшәнгә ҡәҙәр йәйелеп ятҡан иркен ерҙәрҙе биләгән була.

Башҡорттарҙың ул дәүерҙә билгән ерҙәрен теүәлерәк асыҡлау өсөн, X быуаттан IX быуатҡа ҡайтып, ғәрәп сәйәхәтсеһе Сәләм Тәржемәндең Арал буйындағы үрҙә телгә алынған һуғыш мәленә тап килгән сәйәхәтенә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Р.Ғ. Кузеев Ибн Фаҙлан яҙмаларын бер ҙә иҫәпкә алмаһа ла, Сәләм Тәржемәндең хеҙмәтенә иғтибар биргән. Ләкин шул киң билдәле мәғлүмәтте, Хазар ханлығының баш ҡалаһы Итилдән 27 көнлөк юл үткәс кенә ул Сәләм Арал диңгеҙенең төньяҡ-көнбайышындағы башҡорт иленә барып сыҡҡан, тип аңлатҡан[17]. Ә боронғо сығанаҡтарҙы яҡшы өйрәнгән А.Б. Булатов, Сәләм мәғлүмәте буйынса, Волганың һул ярынан 27 көнлөк юл үтеп, һаҫыҡ ерҙәргә барып еткәнгә ҡәҙәр башҡорт тоҡомоноң ере булған, тип ике тапҡыр сығыш яһаны[18]. Был урында, әлбиттә, аҫтыртын маҡсаты булмаған А.Б. Булатовҡа ышанырға тура килә. Ысынлап та, Сәләмде урындағы кешеләр оҙатып йөрөгән икән, оло Яйыҡты кистереп, һуғыш барған урындарҙан йөрөтөп, хәүефкә тарытмаҫ өсөн, төньяҡтаныраҡ, Яйыҡтың бөгөлөп аҡҡан, тыныс ерҙән алып киткән һәм 1000 саҡрым тирәһе юл үткәнгә ҡәҙәр шул ерҙәр тотош башҡорттоҡо булған булырға тейеш. Көнсығышҡа табан юл алған Сәләм Тәржемәндең 1000 саҡрым үткәндән һуң түгел, ә Хазар ханлығынан сыҡҡас та башҡорт еренә аяҡ баҫҡанын, башҡорттарҙың Хазар ханлығына төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыштан күрше булғанын Яҡут Әл-Хамауиҙың VII быуаттағы мәғлүмәтенән алынған «Бөрйән – хазарҙар яғындағы ил» тигән һүҙе лә раҫлай. Шулай уҡ VIII – IX быуаттарҙан ҡалған бер мәғлүмәттә: «Бөрйән иле төньяҡҡа табан шул хәтле үтеп ингән ки, унда төн оҙонлоғо 4 сәғәткә тиклем ҡыҫҡара; улар өҙлөкһөҙ рум, саклаб, хазар һәм төрөктәр менән һуғыша», – тип әйтелгән. Бында, берҙән, бөрйәндәрҙең даими йәшәгән ере һәм климатик бүлкәте асыҡ билдәләнгән, сөнки беҙҙә, ғәрәптәргә бик алыҫ төньяҡ булып күренгән ерҙәрҙә, ысынлап та, йәйҙең иң оҙон көндәрендә ҡараңғы төшкәндән таң атҡанға тиклем 4 сәғәт самаһы ваҡыт үтә; икенсенән, бөрйәндәрҙең бик яусыл булғаны, алыҫ ерҙәргә барып, төрлө халыҡ, шул иҫәптән төрөктәр, менән һуғышып йөрөгәне күрһәтелгән. Шуның өсөн бөрйәндең һәм, ғөмүмән, башҡорттоң яу менән барған һәр еренә бөтә халыҡты күсереп, башҡорттарҙың тарихи юлын шул ерҙәрҙән үткәреү хәҡиҡәтте боҙоуға килтерә. Күп быуатлыҡ ҡатмарлы тарих юлында башҡорттарҙың башҡа халыҡтарға ҡушылып киткән йәки бүленеп ҡалған төркөмдәре лә булғандыр, ләкин айырылған төркөмдәр, айырым ваҡиғалар хаҡындағы мәғлүмәттәр араһында буталып, тотош халыҡтың тарихын боҙоп күрһәтергә ярамай.

Шулай итеп, Р.Ғ. Кузеевтың IX быуат урталарына тиклем үк, йәғни 830 – 844 йылдарҙағы һуғыштан һуң, Төньяҡ Кавказға «оҙатҡан» башҡорттары, бөтә булған мәғлүмәт күрһәтеүенсә, бер ҡайҙа ла китмәй, әүәлдән билгән үҙ ерендә йәшәп ятҡан. Шул мәғлүмәттәрҙе инҡар итеп, Р.Ғ. Кузеев, X быуат башына ҡәҙәр, йәнәһе, Кавказ яҡтарынан урап килгәнгәсә, Көньяҡ Уралда башҡорттар телгә алынмай, тип бара[19]. Ул башҡорттарҙың Төньяҡ Кавказда булғанын раҫларлыҡ бер дәлил дә килтерә алмай һәм, таянырлыҡ мәғлүмәте булмағас, башҡорт араһында ата-бабаһының Ҡаф тауы яғынан килгәнен, Ҡара диңгеҙ буйында ҡәрҙәш ырыуҙары булғанын һөйләгән бик күп риүәйәт бар, ти ҙә юрматы менән ҡыпсаҡ ырыуҙарының шәжәрәһенә һылтана. Ә ул шәжәрәләрҙең тәүгеһендә «боронғо аталарыбыҙ Ҡобандан килгән ине» тип шунда китеп бөткән нуғайҙар тураһында, икенсеһендә Ҡобанға киткән ҡыпсаҡтарҙың кире ҡайтыуы хаҡында ғына һүҙ бара[20]. Шуны башҡорт менән бөрйәнгә бәйләп, Р.Ғ. Кузеев күрәләтә ялғанлау юлына баҫа[21].

Тарихсының фекеренсә, башҡорттоң боронғо бөрйән, үҫәргән, түңгәүер ырыуҙары X быуат башында, болғарҙарға эйәреп, Төньяҡ Кавказдан Волганың урта ағымына килгән дә шул ыңғайы алыҫ төньяҡҡа үтеп киткән, шунан ҡапыл боролоп, башҡа ырыуҙар менән бергә Бөгөлмә ҡалҡыулығында тупланған һәм XIII быуатҡа тиклем шунда торған[22]. Был фекерен дә ул һис бер факт менән дәлилләмәй, тик берҙән-бер таяныс итеп С. Мирасовтың мәҡәләһен ала[23]. С. Мирасов мәҡәләһендә килтерелгән риүәйәттә, бөрйәндәрҙең тыуған иле «Ик», Кинәл, Дим буйҙары булған, тип һәм тағы бер юғалған шәжәрәлә баяғы өс ырыуҙың Ҡармасан, Сәрмәсән йылғалары буйынан сыҡҡанлығын әйткән, йәнәһе. Бының «юғалған шәжәрә»һен, әлбиттә, ысынға алып булмай, ә риүәйәттә әйтелгәненә килгәндә, Р.F. Кузеев урыҫ телендәге мәҡәләлә «Ик» тип аталған йылғаны Ыҡ тип уйлап ныҡ хаталанған. Урыҫтарҙың Ыҡ, Ыйыҡ, Эйек йылғаларын «Ик» тип бер төрлө яҙғаны һәр кемгә билдәле. С. Мирасов мәҡәләһендә шуларҙың Ыҡ тигәне түгел, ә Эйек тигәне хаҡында һүҙ бара, һәм шуның өсөн ул хәҡиҡәтте сағылдыра. Сөнки, ысынлап та, башҡорт иленең көньяҡ-көнбайышында, шул иҫәптән Эйек буйында, борон-борондан бөрйәндәр йәшәгән.

Бөрйәндәрҙең башҡа башҡорт ырыуҙары менән берләшеп, оло Башҡорт дәүләте ҡороуҙа ҡатнашып китеүе IX – X быуатҡа тура килеүе ихтимал. Һәр хәлдә XI быуат аҙағына Башҡорт дәүләте ойошоп бөткән булһа кәрәк. Шунһыҙ ул дәүләт тейешенсә нығып, көсәйеп өлгөрмәҫ, 1236 йылға тиклемге татар-монгол яуҙарын бер-бер артлы кире ҡаҡсытып тора алмаҫ ине. Башҡорттар Бөгөлмә ҡалҡыулығында түгел, ә үҙҙәренең көньяҡтағы дәүләт сигендә татар-монгол менән ҡара-ҡаршы килеп, еңеп торған. Был инде тарихи урыҫ йылъяҙмаларынан да яҡшы билдәле. Мәҫәлән, Лаврентий йылъяҙмаһындағы 1229 йылға ҡараған бүлектә: «...сторожеве болгарскый прибогоше, бьена от татар близ реки, ей же имя ЯИК», – тиелгән[24]. Болғарҙар был яуҙан ҡасһа ла, башҡорт сиреүе татарҙарҙы еңеп, сигенергә мәжбүр иткән.

1236 йыл башҡорт халҡына һәм уның дәүләтенә ҡот осҡос фажиғә алып килгән. Ул йылы көҙ башҡорттар менән болғарҙар татар-монголдарға ҡаршы 40 төмәнлек (бер төмәндә – 10 мең яугир) сиреү сығарып ҡуйған. Татарҙар был бәрелештә хәрби хәйлә ҡулланыу арҡаһында ғына еңеүгә өлгәшкән: «Батый менән Буралдай төндә Яйыҡ аша сығып, һуғышҡа ташланған... Буралдай бөтә сиреүе менән бер юлы һөжүм иткән. Улар башҡорт батшаһы Киләр сатырына йомолоп, ҡылыс менән бауҙарын сапҡылап өҙгән. Сатыр ҡолағас, уларҙың (башҡорттарҙың) сиреүе ҡаушап ҡалған һәм ҡаса башлаған»[25]. Татар-монгол яуы башҡорт сиреүен ҡыйратып, илгә ябырылып ингән. Башҡорттар еренһыуын, намыҫын тапатмаҫ өсөн тағы бер нисә йыл йән аямай һуғышҡан һәм һәр ваҡыт дошман тарафынан нығыраҡ ҡырылған. Ошо аяуһыҙ, ҡанлы йылдарҙа дошманға күкрәк ҡуйып алғы һыҙыҡта торған бөрйәндәр үҙ еренән – Урал ҡуйынына, Урал аръяғына, үҫәргән, түңгәүер, тамъян ырыуҙары йәшәгән яҡҡа күсергә мәжбүр булған. Бер дәүләттә булып, дошманға ҡаршы бер сафта тороп һуғышҡан башҡорт ырыуҙары бөрйәндәрҙе үҙ араһына һыйҙырған. Ләкин, әлбиттә, ул саҡта бөрйәндәр боронғо еренән тотош китеп бөтмәгән. Уларҙың бер аҙы Үҙән, Сәҙе, Яйыҡ йылғалары буйында тороп ҡалған, Яйыҡ аръяғына сығып киткәндәре лә булған. Донъяны боларҡан ҡәһәрле татар яуы халыҡты таратып бөткән, Башҡорт дәүләтен емергән.

Шулай булһа ла, иң көслө яуҙар баҫылып, әҙ генә баш-күҙ алғас, ҡаты татар

иҙгенлегенә ҡарамаҫтан, халыҡтың берҙәмлеген, ҡыйраған дәүләтселеген күпмелер кимәлдә тергеҙер өсөн үҫәргән, түңгәүер, бөрйән, тамъян, ҡыпсаҡ ырыуҙарының азаматтары хәҙерге Йылайыр яғындағы Имәнтау башына йыйынға йыйылып, Етерыу (Ете ырыу) берләшмәһе төҙөргә ҡарар иткән. Улар берләшмәнең ныҡлығына билге булһын өсөн имән бағана ултыртып, ете ырыуҙың тамғаһын уйып ҡуйған һәм, бөтә Етерыуҙа ерҙе ырыуҙарға бүлмәй, уртаҡ биләргә, тигән тәртип индергән. Етерыуҙа ер йәки мал мәсьәләһе генә түгел, иң элек сәйәси мәсьәләләр хәл ителә торған булған. Уның йыйындары дәүләт ҡоро хеҙмәтен үтәгән. Шуның өсөн татар ханлыҡтары ҡыйратылып, башҡорт иленә лә хәүеф килә башлағас, Рус дәүләте менән килешеү мәсьәләһен дә Етерыу хәл иткән һәм үҙ эсенә ингән һәр ырыуҙан вәкил билдәләп, рус батшаһына вәкәләт ебәргән.

**Баҫырға Ләлә БЕЙЕШЕВА әҙерләне.**

## ҺЫЛТАНМАЛАР:


[1] *Киекбаев Дж. Г. Введение в урало-алтайское языкознание. Өфө, 1972 й., 23-сө бит.*
[2] *Башкирия в русской литературе. I том, Өфө, 1961 й., 212-се бит.*
[3] *Руденко С.И. Башкиры. М–Л, 1935 й., 351-се бит.*
[4] *Умурзаков Г.Х. Древние башкиры. Өфө, 1991 й., 7-8-се биттәр.*
[5] *Өмөтбаев М. Йәдкәр. Өфө, 1984 й., 196-сы бит.*
[6] *Научная сессия по этногенезу башкир. Өфө, 1969 й., 45-се бит.*
[7] *Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа. М., 1974 й., 140-141-се биттәр.*
[8] *Кузеев Р. Г. Аталъан хеҙмәт, 133-134-се биттәр.*
[9] *Шунда уҡ, 146-сы бит.*
[10] *Шунда уҡ, 134-135-се биттәр.*
[11] *Шунда уҡ, 135-се бит.*
[12] *Ковалевский А.П. Книга Ахмеда ибн-Фадлана. Харьков, 1956 й., 130-сы бит.*
[13] *Шунда уҡ, 27-се бит.*
[14] *Башкирское шежере. Өфө, 1960 й., 77-се бит.*
[15] *Ковалевский А. П. Аталъан хеҙмәт, 130-131-се биттәр.*
[16] *Шунда уҡ, 27-се бит.*
[17] *Кузеев Р. Г. Аталъан хеҙмәт, 136-сы бит.*
[18] *Научная сессия по этногенезу башкир. Өфө, 1969 й., 46-сы бит; Археология и этнография Башкирии. IV том, Өфө, 324-се бит.*
[19] *Кузеев Р.Г. Аталъан хеҙмәт, 154-се бит.*
[20] *Башкирской шежере. 28-29-сы, 106-сы биттәр.*
[21] *Кузеев Р.Г. Аталъан хеҙмәт, 135-се бит.*
[22] *Кузеев Р.Г. Аталъан хеҙмәт, 134-се бит.*
[23] *Мирасов С. Историческое прошлое башкир. – Краеведческий сборник. V том, 3-4 (1923 – 1930 й., Өфө, 1930 й.)*
[24] *Полное собрание русских летописей. 1897 й.*
[25] *Рашид-ад-Дин. Сборник летописей. II том, 1960 й., 37-се бит.*

## БЕЙЕҮ АЛИҺӘҺЕ РӘШИҘӘ



Рәшиҙә Туйсина – Башҡортостандың халыҡ, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы, Салауат Юлаев исемендәге республика дәүләт премияһы лауреаты. Ул 1968 йылда Йәштәр һәм студенттарҙың София ҡалаһында үткән IX Бөтә донъя фестивалендә еңеү яулай – 128 илдән килгән йәш таланттар араһынан алтын миҙалға лайыҡ була.

Рәшиҙә Туйсина бөгөн дә сәхнәнән төшмәй, бейеүе менән тулҡынландыра һәм һоҡландыра. Уның бейеүҙәрендәге һәр ым-ишарала башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының иплелеге, нәзәкәтлелеге, тик башҡорт ҡыҙҙарына ғына хас булмышы сағыла. Халҡыбыҙҙың асылын тәрән аңлап, үҙе тойғандарын бейеү сәнғәте аша еткерә белә Рәшиҙә Ғилметдин ҡыҙы, ә бит хореография-ла был еңелдән түгел. Сағыштырмаса шартлы алымдарға ҡоролған бейеү хәрәкәттәре – үҙе бер донъя. Уның үҙ ҡанундары, үҙ нескәлектәре бар. Нисек кенә булмаһын, хореографияла һәләткә ышаныу, уға ҡарата эскерһеҙ теләк төп урында ҡала. Бейеү сәнғәтендә урталыҡҡа урын юҡ: һәләт йә бар, йә юҡ.

Был йәһәттән Рәшиҙә Туйсина – бәхетле бейеүсе. Республикала ғына түгел, Рәсәй һәм сит ил тамашасыларына яҡшы таныш артисткаға илебеҙҙең төрлө мөйөштәренән әле лә хаттар яуа. Бейеүсегә, ғәҙәттә, үҙе бейеп киткәндән һуң, бейеүгә ғашиҡ ҡыҙҙар, егеттәр яҙа. Бейеү алиһәһенең тормошо, ижады хаҡында һөйләр алдынан ошо хаттарға ла күҙ һалайыҡ.

*«Һаумыһығыҙ, Рәшиҙә апай! Һеҙгә Бөрйән районынан яҙалар. Һеҙҙең бейеүҙәрегеҙгә ғашиҡмын. Әйтегеҙ әле, нисек һеҙҙең кеүек бейеүсе булырға?»*

*«Һеҙгә Күгәрсендән яҙалар. Рәшиҙә апай, зинһар өсөн, аңлатығыҙ әле: нисек итеп бейеүсе булырға? Минең дә һеҙҙең кеүек талантлы бейеүсе булғым килә».*

*«Хөрмәтле Рәшиҙә апай! Бейеү серҙәрен өйрәтегеҙ әле! Һеҙ нисек итеп шул тиклем дә матур итеп бейей алаһығыҙ ул? Кемдән өйрәндегеҙ? Кем өйрәтте? Бейеүсе булыу өсөн ҡайҙа уҡырға кәрәк? Ҡайһы ҡалала уҡырға барырға кәрәк? Түҙемһеҙләнеп яуап көтәбеҙ».*

Ә бына был хатты Рәшиҙә Туйсинаның яҡташтары – ҡасандыр үҙе тормош биографияһын башлап ебәргән Баймаҡ ҡалаһының 1-се һанлы урта мәктәбенән яҙғандар. *«Ҡәҙерле Рәшиҙә апай! Мәктәпкә 60 йыл тулыу уңайы менән беҙҙә уҡып һәм эшләп киткән шәхестәрҙең мөйөшөн булдырырға теләйбеҙ. Шул уңай менән һеҙҙән үҙегеҙ эшләгән йылдар хаҡында мәғлүмәттәр һәм фотоғыҙҙы ебәреүегеҙҙе үтенәбеҙ. Юбилей кисәһенә лә саҡырабыҙ, түҙемһеҙләнеп көтәбеҙ.*

*«Һеҙҙең концерттарҙы һағынып көтөп алабыҙ – шуны онотмағыҙ, Рәшиҙә апай! Беҙ һеҙҙе бик-бик яратабыҙ һәм хөрмәт итәбеҙ. Эшегеҙҙә ижади уңыштар, һаулыҡ теләйбеҙ!»*

*«Ҡәҙерлеләребеҙ беҙҙең, Рәшиҙә апай һәм Әнүәр ағай! Һеҙҙең йөҙөгөҙҙә беҙ башҡорт халҡының йөҙөн, уның киң күңеллелеген, ябайлығын, ғорурлығын, гүзәллеген күрәбеҙ. Күңел йылыһы, моңдарығыҙ, бейеүҙәрегеҙ өсөн мең-мең рәхмәттәр яуһын үҙегеҙгә!»*

Ошо юлдарҙы уҡыйым да тәрән уйға сумам: кем һуң һин, Рәшиҙә Туйсина? Рәшиҙә Туйсинаның халыҡ алдына сығыу менән уның әйҙәүсеһенә, арбаусыһына әүерелеүен күп тапҡырҙар күрҙем. Бейеүсенең камил, нәфис хәрәкәттәре, күҙҙәренән тамған яҡты нурҙарға солғанып, сихырланғандай булаһың, унан күҙ яҙлыҡтырмай, тын да алмайынса бейеүсе менән бергә ҡанатланаһың, илһамланаһың. Уның бейеүен бер күрһәң, ул башҡа бер ваҡытта ла онотолмай. Артистка менән осрашыуҙы тағы ла ҙур түҙемһеҙлек менән көтә башлайһың, йыйып әйткәндә, Рәшиҙә Туйсинаның илаһи таланты, бейеү сәнғәте оҫталығы барыбыҙҙы ла әсир итә.

Рәшиҙә Туйсина үҙенә килгән хаттарға яуап формаһында республика матбуғатында мәҡәләләр менән дә сығыш яһағаны бар. Ләкин оло талант эйәһенең ижад лабораторияһына күҙ һалыу, бейеүсенең ижадына ғәҙел баһа биреү, тормошо һәм ижады хаҡында тулыраҡ һөйләү өсөн, Рәшиҙә Туйсинаны бейеүсе итеп тыуҙырған Баймаҡ тарафтарына юлланыу кәрәктер. Артистканың бала сағына ла күҙ һалайыҡ, ни тиһәң дә, барыһына ла нигеҙ бала саҡта һалына.

Рәшиҙә Туйсина Баймаҡ районының Сыңғыҙ ауылында 1942 йылдың 10 майында донъяға килә. «Еңеү көнөндә тыуған ҡыҙға ниндәй исем һайларға икән?» – тип баҙап ҡала бәләкәстең әсәһе. Бәлки, уның исеме лә ошо көнгә ауаздаш булырға тейештер? Бик оҙаҡ һайлай әсә, күп исемдәрҙең мәғәнәһен тикшерә. Үҙ ғүмерендә күпте күргән, күпте кисергән Мәрхәбә апай ҡыҙында үҙендә булған бөтә ыңғай сифаттарҙы күргеһе килә – ҡыҙы ныҡышмал, сабыр, ихлас, ябай, рухи яҡтан ныҡ, егәрле булһын! Һәм «Рәшиҙә»лә туҡтала, был исем бит ғәрәпсәнән «тура юлдан барыусы» тигән мәғәнәне бирә. Ул заманда сабыйҙар кендек инәләре ҡулында тыуа торғайны. Ауылдың хөрмәтле кендек инәһе Хәбиямал әбей, Рәшиҙәнең әсәһе һөйләүе буйынса, сабыйға:

*Тауҙан тауға йөрөп сейә йыйҙ,*
*Өйҙән өйгә йөрөп сәй эс,*
– тип һамаҡлаған, имеш.

Ә Рәшиҙә бәләкәйҙән кендек инәһенең теләген тормошҡа ашыра башлаған: ололар менән бер рәттән Ирәндек тауҙарында ярышып сейә йыйған, тауҙан тауға йөрөп арып бөтһә лә, ҡыҙыҡай буш биҙрә менән ҡайтмаған.

Тағы ла шуныһы ҡыҙыҡлы: Мәрхәбә апай ҡыҙын юлда таба. Бәлки, шуғамылыр, Рәшиҙәнең бар тормошо юлда үтә. Артистка үҙе хаҡында: «Гастролдәргә сыҡҡанда башҡалар көлөшөп-уйнап барһа, мин гел күңелемдән генә бейеүҙәремде барлап, уйланып бара торғайным. Һәр хәрәкәтемде күңелдән генә ҡабатлап барам, яңылышмаһам, кеше көлдөрмәһәм ярар ине, тип теләйем. Шулай үҙемде үҙем көйләп барам», – тип һөйләй.

Балаларын уҡытыу маҡсатында, Мәрхәбә апай Баймаҡҡа күсеп килеп, эшкә урынлаша. Рәшиҙәһе лә 1-се урта мәктәптә пионервожатый булып эшләй башлай.

Бер аҙҙан Рәшиҙәнең тормошонда көтөлмәгән ваҡиға була: Өфөлә белем камиллаштырыу семинарында булғанында, Башҡорт халыҡ бейеүҙәре ансамбленең етәксеһе Фәйзи Ғәскәров бейеүселәр йыя икән, тигән хәбәр тарала. Рәшиҙәнең күңеле талпына, ул үҙенең көсөн һынап ҡарарға теләй. Еңеп сығыуына ышанып етмәгән ҡыҙҙың ансамблгә эләгеүе ул ваҡытта, ысынлап та, мөғжизәгә тиң.

Филармонияға барып һынау тоторға яҙылғандан һуң, Рәшиҙә Баймаҡҡа ҡайта. Ләкин «Нисек был турала әйтермен, мине Өфөгә ебәрерҙәрме икән?» тип борсола. Тулҡынланып хат көтә. Ләкин саҡырыу ҡағыҙы килмәй. Аптырағас, ҡыҙ үҙе сығып китә. Өҫтөнә пальто, башына мамыҡ шәл ураған ауыл ҡыҙы Өфөгә мең бәлә менән килеп етә. Самолет Баймаҡтан Стәрлетамаҡҡа килеп төшкәс, Рәшиҙәнең тулҡынланыуы, борсолоуы тағы ла арта төшә. Өфөгә килеп төшкәс кенә һуңлағанын аңлай ҡыҙ, шулай ҙа комиссия ағзалары уны бейетеп ҡарай һәм биш йөҙләп кеше араһынан һайлап алалар. Ансамблгә йәмғеһе егерме биш егет һәм ҡыҙ эләгә. Ошо һынауҙа Рәшиҙә билдәле бейеүсе Рәүилә Хажиева менән осраша. Ул, мин атаҡлы бейеүсе әле, тип тормай, Рәшиҙәнең кеме бар, ҡайҙа йәшәй, ниндәй һөнәре бар – барыһын да һораша ла, ҡыҙ «барыр урыным юҡ» тигәс, үҙендә торорға алып ҡайта. Бына шулай Рәшиҙә Туйсина ансамблдең солисткаһы булып китә.

Ыҙалары күп булһа ла, юлы уңа Рәшиҙәнең. Өс ай әҙерлек үткәндән һуң, ун ете йәшлек бейеүсе ансамблдең тәжрибәле бейеүселәре рәтендә эшләй башлай. Бер мәл ансамбль етәксеһе Фәйзи Ғәскәров Рәшиҙәне саҡырып ала ла: «Хәҙер һин «Заһиҙә»не бейейһең», – ти. Рәшиҙә аптырап ҡала: «Нисек инде мин бейейем?» – «Бына шулай, хәҙер һин бейейһең. Әҙерлән!»

Рәшиҙә ҡурҡа-ҡурҡа сыға тәүге «Заһиҙә»гә. Уның тик үҙенсә генә балҡыткан Заһиҙәһе артынан башта зал бер аҙ шымып тора ла көслө

алҡыштарға күмелә. Шул сәғәттән башлап Рәшиҙәгә уңыш артынан уңыш йылмая: артабан ул «Бишбармаҡ», «Бүләк», «Көйәнтә» бейеүҙәрен башҡара. Күмәк бейеүҙәрҙә айырыуса «Зарифа»ны яратып бейей. Мәскәүҙә, Кремлдәр һарайында, сығыш яһау айырыуса күңелендә онотолмаҫлыҡ булып уйылып ҡала. Ысынлап та, «Зарифа»ны ҡарағандар был бейеүҙең иҫ киткес шаян, йәшлек дәрте, сафлыҡ бөркөлөп торған тамаша икәнлеген хәтерләйҙәр.

Рәшиҙә Туйсинаның махсус бейеү серҙәренә өйрәнмәгәнлеген әйтеп киткәйнек инде, бейеү оҫталығына артистканың тәбиғи һәләте һәм иҫ киткес тырышлығы ярҙам итә. Бейеүсе үҙ өҫтөндә ныҡышмал эшләй. Бер ваҡытта ла башҡаларҙан кәм бейегеһе килмәй уның: ниҙәр генә эшләһә лә, ҡайҙа ғына йөрөһә лә, ул ауыҙ эсенән генә көйөн көйләп, бейеүҙәрен ҡабатлап йөрөргә ярата. Был ғәҙәте һуңынан бейеүгә ғашиҡ улы Хәлилгә лә күсә. Ошондай мәлдәрендә малай әсәһенә һоҡланып ҡарап тора-тора ла үҙе лә ҡушылып бейеп китә.

Хәлил Ишбирҙин да әсәһе юлын һайлай. Данлыҡлы бейеүсе хореография тигән ауыр сәнғәт юлын үҙ итә: 1980 йылда Башҡорт дәүләт филармонияһы эргәһендәге студияны тамамлағас, Башҡорт дәүләт бейеү ансамблендә эшләй башлай. 1991 йылда Стәрлетамаҡ ҡалаһында Бейеү театры аса. 1992 йылда ситтә тороп Мәскәүҙә ГИТИС-тың балетмейстер-режиссерҙар әҙерләү бүлеген тамамлай. Тап ошо театрҙа Хәлил Ишбирҙин үҙенең иҫ киткес талантлы хореограф икәнлеген иҫбатлай ҙа инде: ул башҡорт фольклорына нигеҙләнгән «Ҡыҙ урлау», «Ҡара тауыҡ», «Арҡайым», «Аулаҡ», «Күбәләк», «Казактар», «Инсебикә», «Бөрйән», «Порт-Артур», «Дала сыңы» исемле бейеүҙәр һала. Хәлилдең тормош иптәше Римма ла бейеүгә ғашиҡ заттан. Йыйып әйткәндә, талантлы, бейеүгә маһир рухлы ғаилә башҡорт милли бейеү сәнғәтенә Башҡортостандың дүрт атҡаҙанған бейеүсеһен бирә!

Рәшиҙә Туйсина ғәскәровсылар менән бергә, Рәсәй ҡалаларынан тыш, Ер шарының егерменән ашыу илендә уңышлы сығыш яһай. Коллектив ҡайҙа ғына булмаһын, уларҙы көслө алҡыштарға күмеп оҙаталар. Башҡорт бейеүселәренең уңыштары сит ил йәмәғәтселеге тарафынан маҡтап телгә алынһа, Рәсәй халыҡтарының милли ҡаҙанышы булып ҡабул ителә. Ансамбль артистары Вена, София фестивалдәренән алтын һәм көмөш миҙалдар алып ҡайта.

1967 йылда Башҡорт дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамблен Африка алҡышлай. Артабан коллектив Германия Демократик Республикаһында үткәрелгән Халыҡ-ара фестивалдә ҡатнаша һәм «Атҡаҙанған сәнғәт коллективы» тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ була. Ансамбль Вьетнамда ла сығыш яһай, Вьетнам Демократик Республикаһының етәксеһе Хо Ши Мин менән осраша. Был илдә башҡорт бейеүселәрен иҫ киткес йылы ҡаршылайҙар. Ансамбль Вьетнамда 1-се дәрәжә Хеҙмәт Даны ордены менән бүләкләнә.

Бейеү коллективы 1959 йылда Һиндостанда ла сығыш яһай. Йырмоң яратыусы индустар башҡорт бейеүселәре тураһында Делиҙа

нәшер ителгән гәзиттәрҙең береһендә: «Рәсәй Башҡортостанынан килгән егерме биш егет һәм ҡыҙ сәғәт ярым буйына, дөрөҫөн генә әйткәндә, халыҡты сихырлай», – тип яҙып сыға.

Фәйзи Ғәскәров исемендәге ансамбль 1967 йылда Бөтә Союз һәм 1978 йылда Бөтә Рәсәй конкурстарында маҡтала, күп тапҡырҙар Башҡорт АССР-ы Юғары Советының Маҡтау грамоталарына лайыҡ була.

Ансамблдең уңыштары, башҡорт бейеүе хаҡында әңгәмәләшкәндә Рәшиҙә Туйсина үҙе эшләгән коллектив хаҡында ошондай фекер әйтте: «Фәйзи Ғәскәров ойошторған данлыҡлы бейеү ансамбле буш урында тыумаған, рухи байлығы юғары кимәлдә булған, тарихҡа, халыҡ ижадына һаҡсыл ҡараған илдә генә тыуырға мөмкин. Беҙҙең ансамбль – формаһы яғынан интернациональ бейеү коллективы».

Әңгәмәне дауам итеп, ул былай тип тә өҫтәй: «Заманында Фәйзи Ғәскәров ауылдар буйлап йөрөп һәләтле бейеүселәр тапҡан, уларға үҫеү өсөн шарттар тыуҙырған. Хәҙер ҙә шул тәжрибәне онотмаһаҡ ине!»

Башҡорт бейеүе – ул фольклор менән бәйле, фольклорҙы аңларға, тоя белергә кәрәк. Сөнки фольклор халыҡ тормошо тураһында һөйләй, тип иҫәпләй Рәшиҙә Ғилметдин ҡыҙы, ә халыҡ бейеүе – халыҡҡа ҡайтырға тейеш.

Бейеүсенең тәбиғәт бүләк иткән әлеге төп һәләте лә – тап ана шул халыҡ тормошо менән бәйле ваҡиғаларҙы ым-хәрәкәткә күсерә белеү, шуларҙы сәнғәт телендә тамашасыға еткереү. Әгәр бейеүсе алдашмай икән, уның халыҡ тарафынан йылы ҡабул ителгән бейеүе лә онотолмай. Ул хатта халыҡлашып китеп, милләтебеҙҙең мәртәбәһен арттырырға ярҙам итә. Миҫалға «Заһиҙә»не алғанда ғына ла, был бейеүҙә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының быуындан быуынға килгән сағыу сифаттары сағыла. Бейеүҙә бер ниндәй ҙә артыҡ һәм кәрәкмәгән хәрәкәттәр юҡ, барыһы ла урынлы, барыһы ла килешле һәм тәбиғи.

«Сәхнә еңел-елпе бейеүҙәр урыны түгел, – тип йөпләй һүҙемде Рәшиҙә Ғилметдин ҡыҙы. – Был яҡтан айырыуса Ишмулла ағай Дилмөхәмәтов иғтибарлы булды».

Рәшиҙә Туйсинаның ниндәй генә бейеүен алма, бейеүсе һүрәтләгән образдарҙа үткәнебеҙ, бөгөнгөбөҙ һәм киләсәгебеҙ сағыла төҫлө, бына ошо өс ваҡыт яҙмышы тупланған мәңгелек образдарҙа ысын башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының асылы сағыла ла инде. Рәшиҙә Ғилметдин ҡыҙы башҡарған бейеүҙәрҙә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының баҫалҡылығы, нәфислеге, сабырлығы, аҡылы һәм тәрбиәлелеге – барыһы ла кәүҙәләнеш таба.

Бейеүсе бейей-бейей оҫтара, бейеүсенең артислыҡ һәләте лә шулай үҫә бара – ул үҙе ижад иткән һәр образға үҙ биҙәген өҫтәй, күңелен һала.

Бейеү – ул мөғжизә, сихри донъя! Бейеүсе кеше сәнғәткә үлеп ғашиҡ булған шәхес булырға, халҡының йыр-моңон, тарихын белергә, ғөрөф-ғәҙәтен, телен, мәҙәниәтен ихтирам итергә, нәфис әҙәбиәтте, спортты яратырға, тәрбиәле, күҙәтеүсән булырға тейеш. Сөнки

бейеүҙә халыҡтың ҡыйыулығы, шаянлығы, күңел байлығы, уй-кисерештәре, көнкүреше, характеры сағыла. Артист ана шул хистойғоларҙы тамашасыға бейеү телендә еткергәндә генә теләгенә ирешә.

– Мин бейеүҙә халҡымдың үткән тормошон, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын күрәм һәм тоям, шуларҙы сағылдырырға тырышам – сәхнәгә сыҡҡанда тап шулар күҙ алдымда тора, – ти Рәшиҙә Туйсина, – ләкин ҡайһы берҙә йәштәр артист хеҙмәтен сәхнәлә матур костюмда сығыш яһау, төрлө илдәр күреү, тип кенә күҙ алдына килтерә. Был – хата фекер. Артист – ул иң бәхетле, ләкин ауыр яҙмышлы кеше. Тик күп тырышлыҡ һалып эшләгәндә генә яулана бәхет, бына ошо кәңәштәрҙе онотмаһындар ине үҙҙәрен бейеүсе һөнәренә арнарға теләүселәр.

Бейеүсенең бейеүе, башҡарыусының холоҡ-фиғеленә, кейеменә тиклем тап килергә тейеш, тип иҫәпләй Рәшиҙә Туйсина. Ул тиҫтәләрсә сит илдәрҙә бейегәндә шуға иғтибар иткән: бейеү теле төрлө ҡатлам кешеләренә лә берҙәй аңлашыла. Бейеү өсөн аңлатыу кәрәкмәй.

Артистка яҙмышынан риза, рәхмәтле, маҡсатына ирешкән, бер туҡтауһыҙ эҙләнеү һөҙөмтәһендә бейеү нескәлектәренә төшөнгән, ләкин, шуға ҡарамаҫтан, әле лә камиллашыу өҫтөндә эҙләнеүен дауам итә. Тапҡандарын уҡыусылары менән бүлешә. Уның тик педагогик стажы ғына ла егерме йылдан ашыу. Бөгөн ул Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика музыка гимназияһы уҡыусыларын бейеү серҙәренә өйрәтә. Уҡыусыларын бейеү алиһәһе: «Сәхнә – бейеүсе өсөн изге урын. Бейеүсе уны ташлай алмай. Сәхнә – ғәжәйеп бер гүзәл урын, бер үк ваҡытта ул ысынбарлыҡ та, диуаналар донъяһы һәм хыялыйҙар иле лә...» – тип өйрәтә икән, тимәк, дөрөҫ тәрбиәләй.

1975 йылда Швецияла ваҡытта бер гәзиттә: «Матур көйгә, матур кейенеп, матур ҡыҙ бейене. Уның сығышын ҡарағанда, үҙеңде үткән быуатҡа ҡайтҡандай тояһың. Күркәм ғөрөф-ғәҙәттәрҙең бөгөнгө көнгәсә юғалмай килеп етеүе бик ғәжәп. Шул Уралға барып, был ғәжәп сәнғәт һаҡланып ҡалған мөхитте күрһәң ине», – тип яҙып сығалар.

Был оло баһа Рәшиҙә өсөн генә түгел, ә тотош башҡорт милләте, Башҡортостан өсөн дә оло мәртәбә. Бөгөн телен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын онотоп барған башҡорттар өсөн Рәшиҙә Туйсинаның «Заһиҙә»һе бик-бик кәрәк. Был бейеүе менән ул: «Һин батырһың, һин матурһың, халҡым!» – тип әйтергә теләй икән, «Заһиҙә»ләр, «Зарифа»ларҙың күберәк тыуыуын теләргә генә ҡала, ә бейеүсе булырға хыялланыусылар һығымтаны үҙҙәре яһар...

**Миләүшә ҠОЛМӨХӘМӘТОВА.**

**Иҫтә ҡалырлыҡ кисә**

Билдәле шағир һәм тәржемәсе Әсхәл Әхмәт-Хужаның юбилей тантанаһына йыйылыусыларҙың бөтәһен дә хатта ҙур тамаша залы ла һыйҙыра алманы. Ижад кисәһенә юбилярҙың ҡәләмдәш дуҫтары, туғандары һәм, әлбиттә, шиғриәтен һөйөүселәр килде.

Юбилярҙы район хакимиәте башлығы Р. Һ. Сыңғыҙов тәбрикләне. Рим Һатыбал улы ҡотлау телмәрендә Әсхәл Әхмәт-Хужаның ижади ҡаҙаныштарын ғына түгел, уның әүҙем йәмәғәт эшмәкәре булараҡ өлгәшкән уңыштары хаҡында ла һөйләне. Район башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитеты рәйесе сифатында һәр ауыл биләмәһендә ҡоролтайҙар асыу, тарихи шәхестәрҙең исемен мәңгеләштереү буйынса шағир күп эштәр башҡарған.

Район башлығы милләтте туплауҙа, башҡорт телен, мәҙәниәтен, рухиәтен һаҡлау һәм үҫтереү өлкәһендә күрһәткән әүҙем һәм һөҙөмтәле хеҙмәттәре өсөн Әсхәл Әхмәт-Хужаның Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының «Ал да нур сәс халҡыңа!» миҙалы менән бүләкләнеүе хаҡында белдереп, юбилярҙың күкрәгенә миҙал таҡты. Бынан тыш, юбиляр башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүгә индергән хеҙмәттәре, даими ижади эҙләнеүҙәре, республиканың ижтимағи-сәйәси һәм рухи-мәҙәни тормошонда әүҙем ҡатнашыуы өсөн һәм 70 йәше айҡанлы мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең Рәсәй Федерацияһы профсоюзы Үҙәк Комитеты Президиумының Почет грамотаһына лайыҡ булды. Әбйәлил башлығы Р. Һ. Сыңғыҙов әҙәбиәткә «һыбай килеп ингән» әҙипкә йүгән тапшырып, дөлдөл менән бүләкләне, артабан да ижадының ярһыу рухта дауам итеүен теләп, ҡотлау адресы тапшырҙы.

Бөрйән районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Рәшит Монасипов ошо район башлығы Динир Әхмәтйәновтың ҡотлау һүҙҙәрен уҡып ишеттереп, бөрйәндәрҙең ялҡынлы сәләмен еткерҙе.

Юбилярҙы «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире Әмир Әминев ҡотланы. Ул Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе һәм «Башҡортостан» республика гәзите мөхәррире исеменән дә бүләктәр тапшырҙы.

Заманында Әсхәл Әхмәт-Хужа менән Башҡорт дәүләт педагогия институтында (хәҙер Аҡмулла исемендәге педагогия университеты) бергә эшләгән филология фәндәре докторы, күренекле тәнҡитсе, әҙәбиәт белгесе, профессор Рәйеф Әмиров шағирҙы ҡайнар ҡотланы, фәһемле һәм ҡыҙыҡлы хәтирәләре менән уртаҡлашты.

Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Хисамитдинова Әсхәл Әхмәт-Хужаның Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында башҡорт филологияһы факультетына нигеҙ һалыусыларҙың береһе булыуын билдәләп үтте.

Таһир Кусимов исемендәге гимназия уҡыусылары шағир әҫәрҙәренән әҙәби-музыкаль композиция менән сығыш яһаны.

Әсхәл Әхмәт-Хужа, билдәле булыуынса, үҙ ижадында өс йүнәлештә эшләй: ололар өсөн, кескәйҙәр өсөн шиғырҙар яҙа һәм бүтән телдәрҙән башҡортсаға тәржемәләр яһай. Уның ижадында дүртенсе амплуа ла бар икән: күп кенә шиғырҙарына республиканың данлыҡлы композиторҙары һәм һәүәҫкәр көйсөләре алтмыштан ашыу йыр яҙған. Шағирҙың Асҡар типографияһында «Ҡыҙыл

менән Ҡырҡты буйҙары» исемле ноталарға һалынған йырҙар китабы донъя күрҙе. Башҡортостан Композиторҙар союзы рәйесе Айрат Ғайсин менән композитор Салауат Сәлмәнов Союздың ҡотлау адресын тапшырып, шиғырҙары үҙенән-үҙе йырлап торған шағирҙан яңы ижад емештәрен көтәсәктәрен белдерҙе.

Әсхәл Әхмәт-Хужаны шулай уҡ йәшлек ҡәләмдәше Земфира Муллағәлиева, Учалынан яҙыусы Шәүлиә Зөлҡәрнәева ҡотланы.

Райондың «Йәйғор» әҙәби берекмәһенән Иҙрис Ноғоманов, Айһылыу Йәғәфәрова, Зөһрә Усманова, Флүрә Низамова, Айһылыу Хәсәнова, Рәсимә Яхина һәм Гөлсөм Хисмәтованың сығыштары ла бик йылы булды: «Остазыбыҙ, уҡытыусыбыҙ, кәңәшсебеҙ», – тип ололанылар улар юбилярҙы, һутлы тел һәм утлы ҡәләм менән тыуған төйәген шағирҙың артабан да данлауын теләнеләр.

Район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесенең урынбаҫары Иштимер Ғүмәров: «Башҡорт халҡы киләсәк хаҡына хәл иткес минуттарҙа сәсәндәргә, шағирҙарға мөрәжәғәт иткән, беҙ, әбйәлилдәр, бәхетлебеҙ, аҡыллы һүҙ-кәңәш юллап һәр саҡ Әсхәл ағайға килә алабыҙ», – тине.

Был көндә юбилярҙы тәбриклəргә теләүселәр күп булды. Район хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика бүлеге начальнигы Линиза Сәғәҙиева төрлө тарафтарҙан килгән ҡотлау телеграммаларын уҡып ишеттерҙе. Шағирҙы ауыл белəмәләре башлыҡтары, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, китапханасылар исеменән район үҙәк китапханаһы директоры Гөлсөм Хәкимова, район мәғариф бүлегенең профком рәйесе Айҙар Хәкимов, үҙәк дауахана хакимиәте һәм профсоюзынан Рәйлә Өмөтбаева, «Абзелил» һәм «Осҡон» район гәзиттәре редакцияларынан Рәмилә Истанбаева, халыҡты социаль хеҙмәтләндереү үҙәге директоры Азамат Абдуллин, туғандары һәм дуҫтары ҡотланы, иҫтәлекле бүләктәр тапшырҙы. Әсхәл Әхмәт-Хужаның ғүмер юлдашы Лүзә Сәхип ҡыҙы һәм улы Азамат, ейәне Арыҫлан да иң матур теләктәрен еткерҙе.

### “Урал батыр” йәнə яңғыраны

Быйыл 14-се тапҡыр уҙғарылған “Урал батыр” эпосын башҡарыусыларҙың республика конкурсы Сибай ҡалаһы эргәһендәге «Юлдаш» ял һәм һауыҡтырыу лагерында үтте. Республиканың барлыҡ ҡала һәм райондарынан был бәйгелә 61 команда һәм 300-ҙән ашыу уҡыусы ҡатнашты. Конкурстың төп маҡсаты – киләсәк быуында сәсәнлек мәктәбен үҫтереү, халыҡ ижады өлгөләрен һаҡлау, уҡыусыларҙың фекерләү ҡеүәһен һәм импровизаторлыҡ һәләтен камиллаштырыу, эпосҡа ҡарата һөйөү һәм ғорурлыҡ хисе уятыу ине. Уҡыусыларҙың һөйләү оҫталығын үҫтереү маҡсатында, танылған фольклорсы Әхмәт Сөләймәнов менән билдәле сәсәниә Асия Ғәйнуллина оҫталыҡ дәресе күрһәтте. Эпосты яттан һөйләү буйынса Гран-при Күмертау ҡалаһының политехник лицей-интернаты уҡыусыһы Инсаф Йәмиловҡа бирелде. Беренсе урынды Баймаҡ районынан Гөлнара Ҡаҙарбаева, Ислам Төхфәтуллин (Ишембай), Ынйы Абдуллина (Салауат), Әлиә Ибраһимова (Сибай) яуланы. Бәйге ике йәш төркөмөндә – 5–7-се һәм 8–11-се кластар араһында барҙы. Дөйөм командалар араһындағы күрһәткес буйынса сибайҙар – беренсе, Учалы һәм Ишембай – икенсе, әбйәлилдәр, әлшәйҙәр һәм бөрйәндәр өсөнсө урынды яуланы. Викторина һөҙөмтәләре буйынса Бөрйән районының Әбделмәмбәт мәктәбе уҡыусыһы Нурзилә Усмановаға тиңдәшеүсе табылманы. “Урал батыр” эпосын сәхнәләштереү буйынса өсөнсө урынды Федоровка менән Мәсетле райондары, Стәрлетамаҡ ҡалаһы командалары алһа, икенсе урынға – Бөрйән менән Баймаҡ райондары, беренсегә Сибай ҡалаһы командаһы лайыҡ булды. Таныштырыу буйынса беренселекте – сибайҙар, икенсе урынды – Әбйәлил менән Учалы райондары, өсөнсөнө Әлшәй районы, Ишембай ҡалаһының кадет мәктәбе һәм З. Вәлиди исемендәге мәктәп-интернаты уҡыусылары командаһы бүлеште.

### Динис Бүләковтың хыялы тормошҡа ашты!

Төркиәлә төрөк телендә ике китапта Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Динис Бүләковтың «Ғүмер бер генә», «Килмешәк» романдары

Гази университетының уҡытыусыһы, филология фәндәре докторы Нигяр Ҡалҡан тарафынан тәржемәләнеп баҫылып сыҡты. Нигяр ханымдың диссертацияһы ла башҡорт прозаһын тикшереүгә арналған. Китаптар Халыҡ-ара төрки мәҙәниәте ойошмаһы (ТЮРКСОЙ) һәм Анҡара ҡалаһының Этимесгут районы хакимиәте булышлығында Евразия Яҙыусылар берлегенең «Бенгю» нәшриәтендә баҫылған.

Йыйынтыҡтар ТЮРСОЙ-ҙың генераль секретары Дюсен Касеинов менән Этимесгут районы хакимиәте башлығы Әнүәр Демирелдең баш һүҙе менән асыла. Артабан яҙыусының биографияһы, ижады һәм романдары үҙенсәлектәре хаҡында мәҡәлә урынлаштырыла.

ТЮРКСОЙ киләсәктә Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы менән берлектә был китаптарҙың исем туйын үткәрергә йыйына.

***

Көйөргәҙе районының Зәк-Ишмәт ауылында атаҡлы мәғрифәтсе шағир Шәмсетдин Зәкиҙең тыуыуына 190 йыл тулыуға арналған шәжәрә байрамы үткәрелде. Унда Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, шағир Риф Тойғонов, филология фәндәре докторы, БДУ профессоры Зәйтүнә Шәрипова, «Ағиҙел» журналының баш мөхәррир урынбаҫары, шағир Рәмил Йәнбәк ҡатнашты һәм сығыш яһаны.

Ҡунаҡтарҙы ауылға ингән ерҙә һыбайлылар ҡаршыланы. Урам тулып халыҡ көтөп тора ине. Ғәли хәҙрәт Ишмөхәмәтов Ҡөрьән уҡығандан һуң, ошо ваҡиға айҡанлы салынған ҡорбан ашынан ауыҙ итергә саҡырҙылар.

Артабан байрамда ҡатнашыусылар урамдар буйлап китте. Һәр ара урамға өҫтәлдәр ҡуйған, улары аш-һыуҙан һығылып тора. Зәк-Ишмәт кешеләре боронғо йолаларҙы ныҡ һаҡлай. Мәҫәлән, улар бер урында – һары шәкәр, икенсе урында – һағыҙ, өсөнсө ерҙә ҡорот ҡайнатыу ысулдарын күрһәтте. Тантананың төп өлөшө мәктәп ихатаһында үтте. Уны ҡотлау һүҙе менән Көйөргәҙе район Советы секретары Әхәт Исламғолов асты. Өфөнән килгән әҙиптәр, шулай уҡ урындағы яҙыусылар Закир Әҡбәров, Кинйәғәли Абдуллин, Нәсимә Йосопова, рәссам Флүр Исмәғилев сығыш яһаны. Композитор Йәүҙәт Усманов яҙған йырҙар яңғыраны. Шәмсетдин Зәкиҙең бүләсәләре Линора Измаил ҡыҙы Морозова (Ырымбур) менән Люциә Шакир ҡыҙы Антоновнаның (Ҡазан) килеүе байрамға йәм өҫтөнә йәм өҫтәне.

***

Ш.Зәкиҙең юбилейы данлыҡлы һәм боронғо Стәрлебаш мәҙрәсәһе эргәһендә төҙөлгән Стәрлебаш мәсетендә лә киң билдәләнде: бында суфый шағир XIX быуат уртаһында хәҙерге Көйөргәҙе районы Иҙәк-Ишмәт ауылынан йөҙләгән шәкерте менән күсеп килә һәм дәрестәр бирә.

Дини һәм әҙәби байрамда район хакимиәте, үҙәкләштерелгән китапхана, М.Мәхмүтов исемендәге тыуған яҡты өйрәнеү музейы хеҙмәткәрҙәре, уҡытыусылар, мәсет вәкилдәре, уҡыусы балалар ҡатнашлығында Ш.Зәкиҙең яҙмышын сағылдырған композиция күрһәтелде. Тамашасыларға тарихи хәтирәләр, моңло мөнәжәттәр айырыуса оҡшаны. Йыйылған халыҡ Өфө ҡунаҡтары – шағирәләр Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина менән Дилә хажиә Булгакованың сығыштарын да йотлоғоп тыңланы. Башҡорт дәүләт университеты профессоры Зәйтүнә Шәрипова иһә Ш.Зәки шиғырҙарын фарсы, башҡорт һәм рус телдәрендә уҡып ишеттерҙе.

* * *

Зәйнәб Биишева исемендәге “Китап” нәшриәте “Автограф көнө”н үткәреүҙе матур бер йолаға әйләндерҙе. Сираттағы сараға балалар өсөн сыҡҡан китаптарҙың авторҙары йыйылды. Ярты йыл эсендә генә нәшриәттә бәләкәстәргә тәғәйенләнгән 20 китап донъя күреүе лә был байрамдың үтеүенә бер сәбәп булып тора. “Китап” нәшриәтенең махсус магазинында үткән “Автограф көнө”ндә был юлы алты автор китап һөйөүселәр алдында сығыш яһаны.